# Ағиҙел

**Өфө, октябрь 2009**

**10 (1039)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Зилә Йәнбәкова *(корректор)*,
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә алынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.10. 2009. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 100 экз. Һатыуҙа хаҡы иреклe. Заказ № 2.0125.09.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2009 (10, 1039)

# БЫЛ ҺАНДА:

*Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл*


«Һөйҙөм, һөйөлдөм. Моғайын, бәхеттең олғашыуы ошолор...». .......5
**Сыңғыҙ Айытматов, Михаил Алексеев, Давид Кугультинов, Иосиф Кобзон, Ренат Харистың** халыҡ шағиры *хаҡында әйткән фекерҙәре ...*
**Мостай Кәрим.** Үҙемә өгөт. Ш и ғ ы р ҙ а р. .....................................7
**Мостай Кәрим.** Көндәлектәр. *Дауамы.* .........................................11

ШИҒРИӘТ

**Рауил Бикбаев.** Хазина. П о э м а. ..................................................40
**Фәрит Суфияров.** Яҙмыш ҡулындамын. Ш и ғ ы р ҙ а р. ..............55

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Камил Зиганшин.** Дөйәнән төшә – «Тойота»ға менә бәҙәүи. Аргентина – күңелдәрҙе арбар ил. С ә й ә х ә т н а м ә. *Дауамы.* ......58
**Заһит Мурсиев.** Ҡыпсаҡ ораны. Х и к ә й ә т. .................................75

«АҒИҘЕЛ» КОНКУРСЫ

**Морат Солтанов.** Төнгө элегия. Ш и ғ ы р ҙ а р. .............................79
**Гөлдәр Күзбәкова.** Һин – татлы ғазабым. Ш и ғ ы р ҙ а р. ...............81

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Гөлйемеш Мәмбәтова.** Туҡ буйы – тыуған яғым *(Сөләймән Муллабаевтың тыуыуына 85 йыл).* .............................83
**Ҡәҙим Аралбай.** Шағир урамы *(Самат Ғәбиҙуллиндың тыуыуына 70 йыл).* .........................................................................86
**Самат Ғәбиҙуллин.** Кешеләрем! Ш и ғ ы р ҙ а р. .............................89
**Әхмәр Үтәбай.** Ауылдашым *(Рәйес Түләктең тыуыуына 50 йыл)* ......................................................................91
**Земфира Таһирова.** Ҡабатланмаҫ ижад донъяһы. .......................100
**Рәйес Түләк.** Миҙгелдәр. Ш и ғ ы р ҙ а р. ......................................105

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Ғәли Ибраһимов.** Кинйә. Т а р и х и р о м а н. III китап. Бүгәсәү батша һанаты. Дауамы. ...................................................111

ПУБЛИЦИСТИКА

**Әхмәт-Гәрәй Йәнғәлин.** Һуңғы башҡорт ханы йәки Аҡай – Ҡараһаҡал яуына яңы ҡараш. *Аҙағы.* ........................................164

МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨҺӨ

**Фәнис Янышев.** Әҙәбиәткә һәйкәл. ............................................182

СӘНҒӘТ

**Түләк Ғирфанов.** Халыҡ рәссамы. ..............................................186

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

*90 лет со дня рождения Мустая Карима*

"Любил и был любим. Наверное, это счастье..."
**Чингиз Айтматов, Михаил Алексеев, Давид Кугультинов, Иосиф Кобзон, Ренат Харис** о народном поэте.
**Мустай Карим.** Наставление самому себе *(стихи)*.
**Мустай Карим.** Дневники. *Продолжение*.

ПОЭЗИЯ

**Р. Бикбаев.** Сокровище *(поэма)*, **Ф. Суфияров** *(стихи)*.

ПРОЗА

**К.Зиганшин.** Бедуины: с верблюдов на "Тойоты". Завораживающая страна – Аргентина *(записки путешественника). Продолжение.*
**З.Мурсиев.** Боевой клич кипчака. Сказание.

КОНКУРС "АГИДЕЛИ"

**М.Султанов, Г.Кузбекова** *(стихи)*.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Г.Мамбетова.** На земле предков *(85 лет со дня рождения Сулеймана Муллабаева)*.
**Кадим Аралбай.** Улица поэта *(70 лет со дня рождения Самата Габидуллина)*.
**Самат Габидуллин** *(стихи)*.
**Ахмер Утябай**. Мой односельчанин; **З.Тагирова.** Неповторимый его творческий мир *(50 лет со дня рождения Раиса Туляка)*.
**Раис Туляк** *(стихи)*.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Г.Ибрагимов.** Кинзя. Послы Пугачева *(исторический роман. III книга)*. *Продолжение.*

ПУБЛИЦИСТИКА

**Ахмет-Гарей Янгалин.** Последний башкирский хан или новый взгляд на восстание Акай–Карасакала.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтер – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

# Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл

## «Һөйҙөм, һөйөлдөм. Моғайын, бәхеттең олғашыуы ошолор»

*...Уйландым да әлеге уйға килдем: баҡһаң, миндә бәхеттең ҙур запасы тупланған икән, шуның менән ошо көнгәсә йәшәп ятам.*

*Ижадым оҙаҡ-оҙаҡ йылдар миңә бәхет йыйҙы, мин яңы тыуған һәр юл-һөйләм өсөн ҡыуандым. Ярты йөҙ йылдан ашыу ваҡыт һуҙымында баҫылып сыҡҡан китаптарым, үҙ мәлендә ундарса, хатта ки йөҙҙәрсә театрҙа барған пьесаларым бәхетем ҡаҙнаһын гелән ишәйтте. Быныһы – бер. 1945 йылдың Еңеү бәхете. Ул миңә ғүмерлеккә бирелде, һәм мин уны тоймаған бер генә көнөм дә юҡ. Тағы ла... Һөйҙөм, һөйөлдөм. Моғайын, бәхеттең олғашыуы ошолор.*

*Яңы йыл менән ҡотлап, кешеләр миңә яңы бәхет теләй. Уныһы минең өсөн булмаясаҡ. Мин үҙемдең иҫке, тоғро, һыналған бәхетем менән ҡәнәғәтмен. Ул мине һәр саҡ йылыта. Мин уны һаҡлайым, ҡарт һалдат миҙалдар тағылған гимнастеркаһын һаҡлаған кеүек...*

**Мостай Кәримдең ҡуйын кенәгәһенә теркәлгән яҙмаларҙан.**

## *Әҙип хаҡында әйтелгән фекерҙәр*

**Сыңғыҙ АЙЫТМАТОВ,**
**Ҡырғыҙстандың халыҡ яҙыусыһы:**

Мин ғүмерем буйы был кешене хөрмәтләнем. Ул миңә яҡын дуҫ ҡына ла, дәүеребеҙҙең әҙәби майҙанында мәшһүр ҡәләмдәш кенә лә түгел ине. Ул бөйөк шәхес ине, XX быуат гуманизмының сағылышы булды. Ул башҡорт халҡы исеменән, поэзия һәм мәҙәниәт исеменән һүҙ әйтергә лайыҡлы булды.

Мостай Кәрим башҡорт халҡының балҡыу сағылышы булып ҡала.

**Михаил АЛЕКСЕЕВ,**
**академик:**

Шәхсән осрашыуыбыҙға ҡәҙәр әле беҙҙең юлдар, фронт юлдары, бер йүнәлештә, йәнәшерәк артыла. Тәүҙә Украина, аҙаҡ Румыния, Болгария, Югославия буйынса; мин һуғышты Венгрияла тамамланым, ул – Австрияла, Линц ярҙарында.

Әҙәбиәттә һәр кемебеҙ үҙ һуҡмағынан китте – мәгәр бер үк маҡсатҡа ынтылып. Илле йыл беҙ әҙәбиәттә йәнәш йәшәнек, Рәсәй даны хаҡына китаптар яҙҙыҡ, берберебеҙҙең уңыштарына ҡыуандыҡ. Минең башҡорт халҡына һөйөүем үҙенсәлекле, сөнки бер саҡ башҡорт Мостай тос һүҙе менән беҙҙе, миллионлаған төрлө кешене, бергә уҡмаштырҙы, бер генә юлға һыйған тойғоларыбыҙҙы урғылтты: “Рус түгелмен, ләкин – российянмын!”

Осрашҡан саҡта ул миңә: “Миша!”– тип, мин иһә: “Мостай!”– тип өндәшә инем, шунан икебеҙ бер туғандай ҡосаҡлаша торғайныҡ.

**Давид КУГУЛЬТИНОВ,**
**Ҡалмыҡстандың халыҡ шағиры:**

Мостай Кәрим – арҙаҡлы шағир, яҙыусы, уның менән аралашҡанда үҙеңде йомарт ағай кеҫәһен әкиәти тәм-том менән тултырған малай һымаҡ хис итәһең. Ул тынысландыра ала, ул инандыра ла ала һәм, ниһайәт, илһам ҡанаттары менән бүләкләргә лә ҡулынан килә.

**Иосиф КОБЗОН,**
**СССР-ҙың халыҡ артисы:**

Алыҫ Японияла “милли хазина” тигән төшөнсә йәшәй, “халыҡ”, атҡаҙанған” кеүек исемдәр юҡ. Мостай халыҡ байлығы ине, шулай булып ҡаласаҡ та.

Күп милләтле Рәсәй поэзияһында дүрт юғарылыҡ бар ине, улар хаҡында Ярослав Смеляков былай тип яҙҙы:

*Пришли в литературный край*
*Все четверо – Кайсын с Расулом,*
*Давид и сдержанный Мустай.*

Дүртеһе лә ғәжәйеп талантлы, араларында Мостай иһә – ысынлап та иң аҡыллыһы һәм тотанаҡлыһы.

**Ренат ХАРИС,**
**Татарстандың халыҡ шағиры:**

Бик тә интеллигентлы проза, тәрән фәлсәфәле драматургия, күп ҡырлы, бәғзе саҡта ҡылыстай үткер, мәгәр гелән ихлас публицистика, ахырҙа бөтәһенән дә юғары – нурлы поэзия. Унда һәр һүҙе кешенең асылында Кешене яҡлай, һәр юлы ғәҙелһеҙлек, ялған, шәхесте кәмһетеү менән көрәшә.

Ул үҙе – гармониялы, мәңге тере ижад донъяһы, унда күп быуындар өсөн изгелек яралыу дауам итә.

**Мостай
КӘРИМ**

## Үҙемә өгөт

*Бәлтерәмә, рухым, бөгөлмә, бил.*
*Кисә дауыл ине, ә бөгөн һил…*

*Кисә дымлы ине керпектәрем,–*
*Кипмәҫ һымаҡ йәшем бөрсөктәре.*

*Керпектәрем кипте. Бөгөн, ана,*
*Үлән ҡыяғында ысыҡ яна.*

*Ярым-ярты көнөм булыр бөтөн,*
*Етем ҡалдырмаһа бер Өмөтөм.*

*Көсөм артыр, тағы Иҙел кисһәм,*
*Һыйынайым тиһәм,*
*Башҡортостан атлы илем исҙән.*

***

*Йөрәгем минең тоташҡан*
*Йөрәгең сымдарына,*
*Ялҡын менән яуап бирәм*
*Осҡондай ымдарыңа.*

*Бары булды. Туңдырҙың да,*
*Дөрләттең дә көйрәттең.*
*Ялған ауаз ғына бирмә,*
*Шартлатырһың йөрәкте.*

## Йылмайыу тараталар

*Оран килде: “Тау башында*
*Шаҡ ҡатҡыс тамашалар!–*

*Унда көлөү өләшәләр,*
*Йылмайыу тараталар…”*

*Көлөү түгел, йылмайған юҡ,*
*Ҡороп бара көс-дарман.*
*Ни булһа ла эләгер тип,*
*Тауға саптым йән-фарман.*

*Саҡ-саҡ-саҡ килеп өлгөрҙөм,*
*Бөтөп барғанда бүлеү.*
*Өлөшөмә тороп ҡалған*
*Бер йылмайыу, бер көлөү.*

*Уларҙы, сәскә шикелле,*
*Йылтыр ҡағыҙға төрөп,*
*Минең ҡулыма тотторҙо*
*Ҡыҙыл фәс кейгән төрөк.*

*Шундай танһыҡ табышыма*
*Илереп үк ҡыуандым.*
*Ҡыуаныс күпкә барманы.*
*Уяндым…*

***

*Һыҡтамағыҙ, етер, башҡорт шағирҙары!*
*Һеҙ бит – илдең майҙан тотор шаһ-ирҙәре.*
*Һеҙ илағас, бүтәндәргә нимә ҡала?*
*Һеҙгә эйәреп, бәләһеҙ ҙә бәлә һала.*

*Шағирәләр! Сеңләмәгеҙ инде, зинһар!*
*Өҫтәмәгеҙ был донъяға йәнә аһ-зар.*
*Күк сазының һеҙ бит – изге, саф ҡылдары,*
*Яҙғы таңдың моң һибеүсе былбылдары.*

***

*Таланттарға донъя тар түгел ул,*
*Улар татыу – күркәм тамаша.*
*Киң донъяға һыя алмайынса*
*Талантһыҙҙар ғына талаша.*

## ***Һорауҙар***

*Күктәрҙән өҙлөкһөҙ*
*Һорауҙар яуалар;*
*Ер йөҙөн көйҙөрөп,*
*Һорауҙар яналар.*

*Алда ла, артта ла*
*Гел һорау, гел һорау;*

*Һорауҙар эсендә,*
*Тик ҡатып, мин торам.*

*Таралды зиһенем,*
*Тағылды ауазым,*
*Һорауҙар бирмәгеҙ,*
*Юҡ минең яуабым.*
*Юҡ!..*

## Төш

*Кис ине, йәшенле кис ине,*
*Күңелдә болғансыҡ хис ине.*

*Яңғыҙым ҡараңғы бүлмәлә*
*Көттөм мин үҙеңде был мәлдә.*

*Тик ямғыр шаҡыны тәҙрәне,*
*Күктәрҙә саҡтылар сәсрәне.*

*Төн һаман ҡуйыра, ҡарала,*
*Күңелдә шикләнеү ярала.*

*Һәм ҡапыл ел асты ишекте,*
*Кемдеңдер килеүен ишеттем.*

*Эйе, был һин инең, гүзәлем,*
*Мин һинең тыныңды һиҙәмен.*

*Йәшендәр йәшнәгән араны,*
*Хәйләкәр йылмайып ҡараның.*

*Тағы ут, ҡулыңды шәйләнем,*
*Ҡулыңда сәскәләр бәйләме.*

*Һин аттың, мин көттөм, “гөл” тинем,*
*Гөл түгел, был минең Илгизем.*

*Ул – бала. Йоҡола төн менән,*
*Ә көндө ҡаршылар кем менән?..*

*Йәшендәр күпме ут сәсмәһен,*
*Төн йотто баланың әсәһен.*

*Таңғаса тыныслыҡ белмәнем,*
*Ләкин һин башҡаса килмәнең.*

## Раузаға

*Ҡан ҡайғырып торам һеҙҙең өсөн,*
*Рауза, Булат,– Ерем менән Күгем.*
*Ни тип кенә йыуатайым һеҙҙе?*
*Кисәгенән яманыраҡ бөгөн.*

*Мин тейешмен бары һеҙҙең өсөн*
*Йөкмәргә был яҙмыштарҙың йөгөн –*
*Убылмаһын өсөн ошо Ерем,*
*Ҡоламаһын өсөн ошо Күгем.*

***

*Урмандарҙа ышыҡ табырмын, тип*
*Күңелемдә өмөт яралды.*
*Ҡарурманға ҡояш төшмәй икән,*
*Шырлыҡтарҙың эсе ҡараңғы.*
*Далаларға сыҡһам, далалар тар,*
*Миңә икән анау тау кәрәк.*
*Ҡартлығыма, гүйә, үс иткәндәй,*
*Йәндәремә икән дау кәрәк,*
*Дау ғына ла түгел, яу кәрәк.*

## Көйөргәҙегә йыр

*Көйөргәҙем, көйөм күптән әҙер,*
*Тик һүҙҙәрем килмәй зарыҡтырҙы.*
*Төндә айың, көндөҙ йәйғорҙарың*
*Йөрәгемдә минең янып торҙо.*

*Юшатырҙың һыуын дарман өсөн*
*Бер уртланым алып ҡуш усыма.*
*Һүҙҙәр килде шул саҡ тел осома,*
*Гүйә, йәнем йәнә ҡош осора.*

*Тауҙарыңа бағам, ҡырҙарыңа:*
*– Һаумы, – тимен, – хозур Көйөргәҙе!*
*Томанда ла, ҡышҡы буранда ла*
*Күңелеңдә һинең көн үҙәге.*

*Сиктәреңә килеп аяҡ баҫҡас,*
*Шуны белдем әле бында ғына:*
*Ҡояш үҙе һинең ҡапҡа аша*
*Нур сәсергә сыға Көн яғына.*

*Көйөргәҙе иле! Көйөргәҙем!*
*Гел балҡыһын шулай көн үҙәгең.*

**Мостай**
**КӘРИМ**

# КӨНДӘЛЕКТӘР*

**1996 йыл**

**3.I.96.**

*Телевизорҙа инде нисәнсе ҡат Жванецкийҙы "классик" тип атайҙар. Хәҙер бөйөк рус әҙәбиәтенең классиктары – телевизор аша Мәскәү раҫлауынса – Жванецкий, Арканов һ.б. икән. Был яңылыҡты ла белеп ҡыуандыҡ. Бөйөктәрҙән-бөйөк артист Г. Хазанов икәнен уның 50 йәшенә арналған кисәне телевизорҙа күргәс, үҙебеҙҙең быҙаса наҙан икәнебеҙҙе төшөнөп ояндыҡ. Ул кисәнең һуңғы бүлегенә бөйөк сәнғәт хеҙмәтсеһе, матурлыҡ һәм аҡыл ҡоло Хазанов, салбар кеҫәһенә ҡулын тәрән тығып, бот араһын һәрмәй-һәрмәй килеп сыҡты. Матурлыҡҡа һәм әҙәпкә һыуһаған публика эсе ҡатып көлә. Публика эсендә юғары вазифалы хөкүмәт ағзалары Сосковец, Шумейко һәм башҡалар йырыҡ ауыҙҙарын яба алмай рәхәт сигәләр. Ниндәй көндәргә төштөк тә ниндәй хәлдәргә ҡалдыҡ.*

*Ҡайҙа булды ысын-ысындан да бөйөк рус сәнғәте, рус әҙәбиәте, рус музыкаһы, рус театры? Ҡайҙа булды Россиялағы бүтән халыҡтарҙың иң юғары ҡаҙаныштары? Улар бар бит. Тик күрһәтмәйҙәр, белдермәйҙәр, өндәшмәйҙәр генә. Шулай итеп, юҡҡа сығаралар.*

*Ой-бай! Әгәр Жванецкий рус әҙәбиәтенең классигы икән, ул саҡта һәр бер ишәк үҙен аҡбуҙат тип танытырға, һәр дөйә, үркәсе менән маһайып, үҙен конек-горбунок тип әйтергә хаҡлы.*

**12.I.96. Переделкино.**

*Муса менән бында килеп еттек. Аэропортта беҙҙе Поспред кешеләре ҡаршыланы. Поспредствоға алып барҙылар, унда бик матур ҡунаҡ итеп, бында килтерҙеләр. Көн аяҙ, һалҡынса.*

**17.I.96.**

*"Российская провинция" журналынан шылтыраттылар. "Башҡортостан, который во мне" тигән мәҡәләне ярatҡандар. Рәхмәт әйттеләр.*

---

** Дауамы. Башы журналдың 2006 йылғы 10 -11-се, 2007 йылғы 10-сы, 2008 йылғы 10-сы һандарында сыҡты. Матбуғатҡа балалары* ***Илгиз КӘРИМОВ*** *менән* ***Әлфиә КӘРИМОВА*** *әҙерләне.*

***

*Беҙ, ғәҙәттә, “дуҫ һатты” тип әрнейбеҙ. Дуҫтар ғына һата ла инде ул. Дошман иһә ата ғына. Дуҫ һатыр, дошман атыр. Ошо ике арала йәшәйбеҙ инде.*

**5.II.96.**

*Нисектер мафия тураһында һүҙ сыҡты.*
*Шундай таҡмаҡ яҙып ҡуйҙым:*

*Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң*
*Исемдәре Мафия.*
*Мафияның алдарында*
*Президенттар баш эйә.*

**7.II.96. Переделкино.**

*Бөгөн төшөмдә әруахтар күрҙем. Өс-дүрт төр, имеш. Мин әйтәм: “Һөйләшегеҙ әле”,– тим. Өндәшмәйҙәр. Күрәһең, улар бер-береһенә күренмәйҙәр. Шуның өсөн һөйләшмәйҙәр.*

***

*Карфагенда Молох храмы (ҡара храм) төҙөгәндәр. Уны яуыз аллалар шәрәфенә бағышлағандар. Йәнәһе, яуыз аллаларҙың күңелен табып, уларҙы яман эштәр ҡылыуҙан тыйырға теләгәндәр. Ярамһаҡланып ҡына тыйырһың яуыҙды яуызлыҡ ҡылыуҙан.*

***

*Ни өсөн ҡытайҙар үҙҙәренең бөйөклөгөн һаҡлай? Уларҙа тарихҡа ихтирам көслө. Мин Ҡытайҙа булғанымда, мине Бөйөк Ҡытай диуарына алып барҙылар. Халыҡ—мәхшәр. Күбеһенсә йәштәр. Бында тарихи ҡомартҡы ҡарар өсөн генә килмәйҙәр. Бөйөк диуарҙың бөгөн дә рухи, тарихи таяныс икәнен раҫлар өсөн киләләр. Бөгөнгөнөң таянысы һәм һаҡсыһы. Ошондай ҡоролманы төҙөгән халыҡ, тимәк, үҙен үлемһеҙ һиҙә. Әгәр был диуарҙы бер нисә йөҙ йыл төҙөргә сыҙамлыҡтары еткән икән, мотлаҡ улар мәңгелек тураһында, үлемһеҙлек тураһында уйлағандар.*

**10.II.96.**

*Әмирхан Еники абзый Хәйҙәр Бегичевтың автомобиль катастрофаһына эләгеүе тураһында әйтте. Хәҙер хәле арыулана икән. Кис буйы уның йырҙарын уйнаттыҡ. Иртән үҙенә хат яҙҙым. Ошо бәйетте лә ебәрҙем.*

**Хәйҙәр Бегичевҡа**

*Дуҫтар менән табын ҡороп*
*Мәскәү тарафтарында,*
*Таңдар атҡансы тирбәлдек*
*Моңоң ҡанаттарында.*

*Ярһыттың да, йыуаттың да*
*Күңелдәрҙе һин, йырсы.*
*Бер ҡараһаң – доғасы һин,*
*Бер ҡараһаң – сихырсы.*

*Йонсоу сағында көндәрҙең,*
*Хөрт сағында хәлдәрҙең,*

*Һулышымды иркенәйтә*
*Бер ауазы Хәйҙәрҙең.*

*Тағы шуны өҫтәп ҡуям —*
*Һүҙем түгел зерәгә —*
*Үҙе генә бер мөғжизә*
*Тап килеүе Зөһрәгә.*

***

*Гении в своей судьбе возвышаются над своей бедой, даже над горем, они бывают над ними, а заурядные — под ними. К примеру, Хасан Туфан стал выше своей человеческой судьбы.*

**29.II.96.**

*Теперь каждый губернатор чувствует себя чуть ли не американским Президентом, который вмешивается в ход мировых событий. Эта мысль пришла ко мне после передачи “Герой дня”, в качестве которого выступил Президент Ингушетии Руслан Аушев. Он собирается подать под суд министра обороны за продвижение Российской армии по России, в данном случае через Ингушетию. Выступает в военной форме, амбиция, поза... Ведь он не более, чем глава Белорецкого района. Дразнит он льва. Такие вызывают агрессивность центра. Дела нам с центром надобно ладить терпеливо, разумно.*

**1.III.96.**

*Ауыр холоҡло бер танышым бар. Ул миңә былай ти: “Һин бик күп яҡшы кешеләрҙе, яҡын нәмәләрҙе, ҡыуаныслы хәлдәрҙе йыш хәтерләйһең. Минең ғүмеремдә насарлыҡ күп осраны, алама кешеләр, тормош михнәттәре күп булды. Яҡшы кешеләр бик иҫемдә лә юҡ”. Мин ул кешенең тормошон, биографияһын ап-арыу ғына беләм. Бүтәндәрҙән нык артыҡ яманлыҡ та, йәбер ҙә күрмәне.*

*Хикмәт шундалыр: уның хәтер һандығы гел яман хәлдәрҙе, үпкәләрҙе, йәберҙәрҙе генә йыйған. Шуға күрә яҡшы иҫтәлектәргә, рәхимле, рәхмәтле хәлдәргә урын бик аҙ ҡалған. Әҙәм хәтеренең мөмкинселектәре сикле. Берәүҙәр унда изге нәмәләргә урынды мул бирә лә, яуыздарына өлөш аҙ ҡала. Икенселәр киреһенсә эшләй. Нығытып уйлаһаң, һәр кемдең ғүмерендә һағынып һөйләрлек әйберҙәр күп. Әңгәмәләшкәндә кешеләргә шуларҙы һөйләргә, хатта биҙәберәк һөйләргә кәрәк. Үҙеңә лә яҡшы, тыңлаусыларға ла рәхәт.*

**17. IV.96.**

*Әүәл ауылда бала көйһөҙләнһә йәки аҙып китһә: “Боларма. Ана, бүкәй килә... Бүкәй алып китер үҙеңде”,— тип ҡурҡыталар ине. Хәҙер Ельцин халыҡты: “Ана, коммунистар килә. Коммунистар аҫыр үҙеңде”,— тип өркөтә. Бала күңелле халыҡтың, Россияның бер ҡатлы граждандарының ҡурҡыуы ла бар.*

*...Беҙҙә налоговая инспекцияға Букаевты етәксе итеп ҡуйҙылар. Бында исмаһам: “Ана, Букаев килә. Букаев кәрәгеңде бирер”,— тип ҡурҡытырға ла булыр налогтан ҡасып йөрөгән эшҡыуарҙарҙы.*

***

*Ирҙәрҙең ҡылығы — тиҙ иҫергәндә, ҡатындарҙыҡы оҙаҡ сирләгәндә нык асыла.*

***

*“Йәриә” тигән төшөнсә бар. Ул ҡол ҡатын тигәнде лә, һөйәркә тигәнде лә аңлата.*

*Мин булдым, ти, падишаһ,*
*Һин булдың, ти, йәриәм.*
*Һинең алда — мин ғәрип,*
*Һинең алда баш эйәм.*

**26.V.96.**

*Русские говорят: “С милым и в шалаше рай”. Этот рай быстро может стать не таковым. Жизнь вносит свои поправки незамедлительно. Словом долгий “рай в шалаше” довольно сомнителен. Но все-таки женская душа его принимает. Страшно другое: жизнь с нелюбимым в хоромах, во дворцах может стать адом.”С немилым и в хоромах ад”,— заплачет она.*

**27.V.96.**

*Хаким теле алдашмаҫ,*
*Палач ҡулы шаярмаҫ.*

**29.V.96.**

*Йомош менән килгән кешеләр, бер-бер ярҙам һорап, миңә былай тиҙәр: “Һинең бер һүҙең етә бит”. Бәлки, ҡайһы ваҡыт етәлер ҙә. Ләкин бәғзе берәүгә йөҙ һыуы түгеп, бер һүҙ, үтенес менән бер һүҙ әйтеү үтә ҡыйын. Бер кире яуап алыу — бер уҡ тейгән ише була. Дөрөҫ, етәкселәр араһында шундайҙар ҙа осрай. “Был мәсьәлә ҡыйын. Шулай ҙа, Мостай ағай, һинең һүҙеңде йыҡҡансы, менгән атым йығылып ауһын”,— ти ундайҙар. Етәкселәрҙең төрлөһө бар. Әлеге ат образына ишара яһағаны ла минең үтенесемдең бик үк законлы булмауын аңлата.*

**16. VIII.96.**

*Сколько твердят: “Надежда умирает последней”. А ведь мы ухитряемся продолжать жить и после смерти надежды нашей.*

**28. VIII.96.**

*Диалог:*

*— Һин дөрөҫтө һөйлә. Дөрөҫтө әйт!*

*— Ниңә?*

*— Дөрөҫлөк өсөн.*

*— Ниңә кәрәк ул дөрөҫлөк?*

*— Аңламайым һине.*

*— Ә мин аңлайым. Дөрөҫлөк — ул ҡоролған мылтыҡ. Атып үлтерергә генә тора. Ә беҙ, асылда, дөрөҫлөк эҙләмәйбеҙ, ә унан нисек итеп дөрөҫөрәк ҡасыу юлын эҙләйбеҙ.*

*— Аңламайым.*

*— Уныһы һинең хәстәр.*

**16. XI.96.**

*Ошондай йола бар. Ҡарсыҡтар әжәл көткәндә: “Фәлән-фәлән ҡорҙаштарым һөйәгемә инһен”,— тип васыят ҡалдыра. “Һөйәккә инеү” мәрхүмәнең мәйетен йыуып әҙерләүҙе аңлата. Был эште “йыйыштырыу” ҙа тиҙәр.*

*Минең “ижади һөйәгем”ә, йәғни ҡалған мираҫыма ошондайыраҡ замандаштарым инһен ине: Муса Ғәли, Рауил Бикбаев, Факиһа Туғыҙбаева, Ғайса Хөсәйенов, Тамара Ғәниева, Гөлфиә Юнысова, Йомабикә Ильясова, Рәшит*

*Солтангәрәев, Ирек Кинйәбулатов, Гөлнур Яҡупова, Тимерғәле Килмөхәмәтов.*

*“Һөйәккә инеү” изге эш иҫәпләнә. Әҙәби мираҫҡа, яҙыусының ҡалған ижадына ҡарата ла шулайҙыр, тип уйлайым. Изге теләктән мәхрүм ҡулдар уға ҡағылырға тейеш түгел.*

**18.XI.96.**

*Бик оҙаҡ йылдар күҙәтеүҙән һуң шуны асыҡланым: рәхмәтһеҙ кеше, йәғни рәхмәт әйтә белмәгән кеше игелек күрмәй барыбер. Игелек күргән сағында ла ул шөкөр итә белмәүе арҡаһында ризаһыҙлыҡ күрһәтә, үҙенә ҡағылған һәр нәмәнең гел тиҫкәре яғын уйлай. Мәҫәлән, йөҙ һумлыҡ файҙа күргәндә лә, быға тиклем биш һумлыҡ зыян күргәнен онотмай, шуның өсөн зар илай. Икенсе берәү йөҙ һумлыҡ зыян күргәндә: “Һи-и, ниңә бошонорға? Анау көндө генә 10 һум файҙа алғайным бит...”– ти. Мин икенселәр иҫәбендәмен. Шөкөр, әлегәсә бөлөп ҡалманым.*

**19.XI.96.**

*Икенсе көн сирләп ятам. Температурам 38-гә етте. Эскеләп сирләү ҙә ҡыйын ине, былай сирләү ҙә алама. Ә сирләргә кәрәк әҙәм балаһына. Донъяның ҡәҙерен белеү өсөн кәрәк был эш. Иң хәйерлеһе, моғайын, ике сир менән алмаштилмәш сирләүҙер.*

*Шаярыуын шаярҙым да, сирем оҙаҡҡараҡ һуҙылды, ә иртәгә Мәскәүгә китергә кәрәк. Тәүәккәлләргә тура килә инде. Иң насары — күңел төшөнкөлөгө, нәҡ анау йырҙағы шикелле.*

*Күтәрелмәй күңелдәрем*
*Томанлы көндәр кеүек...*

*Шулай ҙа китергә булдым. Мәскәүҙә шәбәйермен, тип уйлайым. Әле хәтеремә килеп төштө. Миңә 6-7 йәштәр булғандыр. Әллә ҡыҙамыҡ сығарам инде, байтаҡ сирләп яттым. Бер көндө атайым Шишмәгә барырға йыйына. Мине кейендерергә ҡушты.*

*— Сирләй бит әле,— тине Оло инәйем,— өҙлөгөүе бар.*

*— Өҙлөкмәҫ, юлда терелер генә. Кеше юлда ауырымай ул,— тине атайым.*

*Кискә әйләнеп ҡайтыуға тамам һауыҡтым. Шишмә станцияһында атайым, паровоз кранын асып, һыу алды. Шуға шаҡ ҡаттым. Бығаса ер тетрәтеп уҙып киткән паровозды ғына күргән бар ине.*

**24.XI.96.**

*Береһен дә тыңламаным, тиҫкәреләнеп юлға сығам. Хәрәкәттә — бәрәкәт. Хәрәкәт итергә кәрәк. Юғиһә, өс нәмәгә килеп төртөлдөм: дарыу, ҡан баҫымын үлсәй торған аппарат, градусник. Атайым һүҙенә таянам: юлда терелермен әле.*

**9.XII.96.**

*Мәскәүҙә 12 көн сирләп, өйгә ҡайттым. Ете йәшлек бала юлда терелһә лә, 77 йәшлек ҡарт һауыҡманы. Тороуым Илгиздәрҙә булды. Нәзифә өйҙә юҡ, Чехословакияла ине. Илгиз Динара Ғаяновнаға шылтыратты. Ул дарыуҙар килтерҙе. Бөгөн оҙаҡ көттөргән ҡар яуҙы. Донъя яҡтырып киткәндәй булды.*

**10.XII.96.**

*Урта Азияның хандары (Төркмәнстан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан) үҙ халыҡтарын, әйтерһең, юрамал фәҡирлеккә, бөлгөнлөккә килтерҙеләр. Көнсығышта шундай хәл әүәл-әүәлдән килә: халыҡ хәйерсе булған һайын,*

*хандың власы көсәйә. Ас халыҡ тиҙерәк һәм нығыраҡ буйһона Көнсығышта. Көнбайышта ас халыҡ баш күтәрә, революция яһай. Көнсығыш хандары үҙ халыҡтарын яҡшы белә. Баштары эшләй уларҙың.*

**14. XII.96.**

*Минең йәшлегемдә, бигерәк тә атайымдар заманында бик һирәк була торған эске мәжлестәрендә кешеләрҙең бик күбеһе (ҡатындар бигерәк тә), эсергә теләһә лә, ҡыҫтатып-ҡыҫтатып ҡына уртлай торғайны. Бик-бик һирәктәре генә туҫтағын (бал эсәләр бит) түңкәрер ине. Ҡыҫтап һыйлау — бер ритуал. Әммә үтәү мотлаҡ түгел. Шунлыҡтан мәс булып бармайҙар. Туҫтаҡ түңәрәк буйлап йөрөй — ҡулдан-ҡулға күсеп. Каса йөрөтөүсе йырлап та бирә:*

*Айҡап ебәр, сайҡап ебәр*
*Казактарҙың ҡамсыһын.*
*Алдарыңда йырлап торам,*
*Эс ҡалдырмай тамсыһын.*

*Теге барыбер ауыҙ итеп кенә ала, аяҡсы ла ныҡышмай. Иң мөһиме — ритуал һаҡлана. Хәҙер табынға эләкһәк, һәммәбеҙ ҙә тиерлек йәһәтерәк иҫерергә тырышабыҙ. Ритуал-фәләндең әҫәре лә ҡалманы.*

**16.XII.96.**

*Күршеләге Зарифаның былтыр ире вафат булды. Бөгөн Рауза менән ихатаға сыҡҡас, шул һөйләп торҙо:*

*— Бер-бер ғәйеп эшләһә, ваҡытһыҙ төшөрөңкөрәп ҡайтһа йәки оҡшамаған һүҙ ысҡындырһа, ғәфү һорайһы урынға: “Ярай инде, Зарифа”,— тиер ине. Йән бирер алдынан, ҡулымды ҡыҫып тотто ла: “Ярай инде, Зарифа...”— тине, китеп тә барҙы. “Ғәфү ит инде, мин һине ташлап китәм...”— тине, ахырыһы.*

**18.XII.96.**

*Рауза менән өйләнешкәндә (1941 йылдың апреле) өҫтөбөҙҙә бер ҡат кейем. Кеше өҫтөндә торабыҙ. Бер пар сынаяғыбыҙ ҙа юҡ. Эсебеҙ тулы бәхет ине.*

**21.XII.96.**

*Китап нәшриәтендә Хәби Мамлиев директор булып эшләгән осор ине. 1947 йылды ул мине аслыҡ-ялланғаслыҡтан ҡотҡарыу өсөн туранан-тура енәйәткә барҙы. Эш былай. 1947 йылдың декабрендә аҡса реформаһы булды. Ҡулдағы аҡсаны ғына унға бер иҫәбенә түләнеләр. Шуға тиклем кемдеңдер ҡайҙандыр аҡса алаһы булһа, ул иҫәпкә инмәне, янды. Мин “Шиғырҙар һәм поэмалар” тигән китабыма күптән договор төҙөгәйнем. Нәшриәт бөтә сумманы түләргә тейеш булһа ла, бирә алманы. Аҡса юҡ ине, буғай. Ҡыҫҡаһы, мин бөтөнләй бөлөп ҡалдым. Үҙем туберкулез менән ҡаты ауырыйым. II группа инвалидымын. Пенсиям 550 һум.*

*Бына Мамлиев алдында ултырам. Үҙем быуылып йүтәлләйем дә ҡулъяулыҡҡа ҡан төкөрәм. Директор башын эйеп ултыра. Мин кәйефен ҡырҙым, ахыры. Юҡ. Ул башын күтәрҙе. Ике күҙе тулы хәсрәт. Минең хәсрәт уға күскән. Өҫтәлдә торған звонокка баҫты был. Секретары Елизавета Прейс йүгереп инде.*

*— Лиза,— тине.— Мостай Кәримдең договорын табып килтер әле. — Лиза договорҙы килтерҙе. Хәби ағай алды ла шул договорҙы башта буйға, унан арҡырыға йыртып кире бирҙе.— Мә, ташла. Был автор менән, иртәгәге көн*

*датаһын ҡуйып, яңы документтар эшләгеҙ. Иҫкеләренең эҙе ҡалмаһын.*

*Мин быны Мамлиев өсөн подсудный эш икәнен аңлап, ҡурҡып киттем:*

*— Бүтән төрлө эшләп булмаймы? Былай бит әле...*

*— Булмай,— тип ҡырт киҫте ул.*

*Был "енәйәт" асылмай ҡалды. Мамлиев миңә яҡын кеше лә түгел, үҙен быға са ни бары ике-өс тапҡыр ғына күрҙем. Былай сентименталь затҡа ла оҡшамаған. Әле уйлап, хайрандар ҡалам. Сирле, ғәрип фронтовикты бөтөнләй аяҡтан йыҡмаҫ өсөн әҙәм үҙе өҫтөнә дәүләт алдында ниндәй гонаһҡа барған. Бөгөнгө "әхлаҡ тәртиптәре" тураһында уйлаһаң, ул хәлдәр уйылып китерлек. Бөгөнгө берәй түрә лә шундай эште ҡылыр ине, бәлки, әммә ярты гонорарҙы үҙенә талап итер ине. Кәм тигәндә...*

*Минең ғүмеремдә осраған тәүәккәл, фиҙакәр кешеләрҙең береһе булған икән Хәби Мамлиев.*

**23.XII.96.**

*Ябай ғына бер күҙәтеү: йырлаған мәлдәрендә йәмһеҙҙәр матурая, илағанда матурҙар йәмһеҙәйә.*

*Намыҫты, абстракт төшөнсә, тиҙәр. Юҡ, ул — конкрет төшөнсә. Уның нигеҙе тәбиғәттә. Ә тәбиғәт — иң намыҫлы нәмә. Ә намыҫлы кеше — ошо тәбиғәттең бер өлөшө. Намыҫһыҙлыҡ — ғәйре тәбиғи күренеш.*

**24.XII.96.**

*1985 йылға тиклем беҙҙең илебеҙ Европаның үгәй атаһы ине. Яратмаһа ла, Европа унан ҡурҡып, ҡан ҡалтырап тора ине. Хәҙер ул Европаның, донъяның оло йәштәге йүнһеҙ үгәй улына әйләнде. Теләһә кем ҡаҡҡылай, теләһә кем типкеләй уны. Яза юҡ.*

***

*Мәрхүм Нәжибәк Хафизов кеше менән хушлашҡанда, ярым шаярып: "Ғаиләңә сәләм!"— тиер ине. Берәүгә шулай тигәс, теге: "Минең ғаиләм юҡ бит, ағай",— тигән, Нәжибәк төҙәтмә индергән: "Улайһа, күршеңдәге ғаиләгә сәләм!"*

**27.XII.96.**

*1955–1959 йылдарҙа Ҡалтасы яғынан мин РСФСР Юғары Советына депутат булдым. Бер ҡышты һайлаусылар менән осрашырға барҙым. Көндәр ыҙғыр һыуыҡ ине. Колхозда осрашыу уҙғас, минең менән бергә йөрөгән райком вәкиле бер йортҡа тамаҡ туйҙырырға алып инде. Алдан һөйләшелгәндер, күрәһең, хужа бик ихлас ҡаршыланы. Табынға быуы сығып торған тулы табаҡ ит килде. Хужа ҡыҫтамай, баҫып тик тора. Беҙ ҙә ҡалъяға үрелмәйбеҙ. Мари татарса бик һәйбәт һөйләшә:*

*— Ҡунаҡлар, ғәйеп итмәсәгеҙ инде... Бынауында саҡ ҡына бер нәмәкәй бар ине. Аш алдылыҡ ҡына... Үзебеҙ булашмайбыз. Анау көндө куда сыйлап киткәйне, шул тура ла тура. Сезнең ризыкка язған, күрәсең, ғәйеп итмәсәгез...— Ул үрелеп кенә шаршау эсенән еҙ ҡомған алды.— Күн дә бик салкын.*

*Әлбиттә, беҙ мари өйөндә әҙәм ҡағылмаған, "тура ла тура" биргән нәмәкәйҙән баш тартманыҡ. Көндәр ҙә һыуыҡ ине, һыуыҡ булмаһа ла, артыҡ ҡыҫтатмаҫ инек. Ашап-эсеп алғас, хужабыҙ мине маҡтап оҙатты:*

*— Депутатыбыҙ үзебеҙ кебек простой икән, мари күмешкәсен яратып эчте,— тине.*

*Мариҙар тураһында һүҙ сыҡҡас, Рафиҡов ағайҙың мәрәкәләрен дә яҙып китәйем әле. Ул оҙаҡ йылдар был яҡтарҙа район башҡарма комитетының*

*рәйесе булып эшләне. Ике метр буйға, ике ҡолас арҡырыға ине был баһадир. Ул һөйләшергә ярата. Уның әңгәмәләренән ошолар хәтеремдә ҡалды:*

*— Мишкәлә эшләгән сағым. 1938 йыл ине, буғай. Бер мари ауылында хәлле генә колхоз бар. Исемен әйтмәйем. Был колхоз хөкүмәт заданиеһын тултырҙы ла бер кило ла артыҡ иген бирмәй. Ә район тултыра алмай яфалана. Колхоздың председателенә өҫтәмә иген сығарыуын һорап бер әйтәм, ике әйтәм. Был ыжламай ҙа: "Бүтән юҡ",— тип тик тора. Бер көндө трантасҡа ултырып был колхозға килдем. Председателде ултырттым да урманға киттем. Бер ҙур имән төбөндә туҡтаныҡ. Бесән аҫтында ятҡан элмәкле арҡанды алдым да тегенең муйынына кейҙерҙем, икенсе осон ҡалын ботаҡ аша ырғытып, түбән тарттым. Теге тәүҙә нимә эшләгәнемде аңламай торҙо. Арҡанды нығыраҡ тарта башланым. Өндәшмәй. Тағы нығыраҡ тарттым. "Бирәһеңме?"— тим. Председатель баш сайҡай. Йәнә тарта бирҙем. Был ризалашып баш ҡаҡты. Ысҡындырҙым да ҡайтарып ебәрҙем. Һүҙендә торҙо. Өҫтәмә игенде сығарҙы, үҙҙәренә лә мул ҡалды.*

*Иртәгә Октябрь байрамы тигәндә был миңә килгән.*

*— Бөгөн кис, Рәпиков ағай, ут алыуға миңә ҡунаҡҡа рәхим итә күр инде,— ти. Уйға ҡалдым. Бында бер төрлө ҡара уй юҡмы икән, тим. Бармаһаң, ҡурҡаҡҡа сығарыр. Тәғәйенләнгән ваҡытта барҙым. Өҫтәл тулы һый, бер сирек көмөшкә тора, стакандар теҙелгән. Өҫтәл артында дүрт таҙа ир тәмәке тартып ултыра. Ҡатын-ҡыҙ күренмәй. Минең шигем тағы ла арта төштө. Хужа стакандарға тултырып самогон ҡойҙо. Беренсе булып стаканды үҙе алды:*

*— Туғандар, — тип мөрәжәғәт итте теге дүртәүгә.— Был стаканды мин Рәпиков ағай хөрмәтенә, уның һаулығына күтәрәм, һеҙ ҙә шулай итегеҙ. Ул быйыл мине үлемдән ҡотҡарҙы. Был турала ул белә лә мин беләм. Бүтән әҙәм белмәй ҙә, белмәҫ тә...*

*Бик һәйбәт һыйланы. Үлемдән ҡотолған кеше йомарт була ул.*

*... Быныһы 1939 йылда булды. Бер колхоздың тары баҫыуы аша уҙып барам. Тары бик һәйбәт үҫеп килә, тик яман сүп баҫҡан. Был баҫыуҙың бригадирын беләм. Сибек кенә, теремек кенә мари. Ауылға барып быны эҙләп таптым да, трантасҡа ултыртып, баҫыуға килтерҙем. Ерҙең уртараҡ еренә алып индем.*

*— Нимә был?— тим.*

*— Тары ере.*

*— Тары түгел, сүп бит!— Тегене ныҡ ҡына төртөп ебәрҙем. — Әгәр аҙна эсендә тап-таҙа итеп утатмаһаң, ошонда килтереп үҙеңде үлтергәнсе туҡмайым,— тип йоҙроҡ күрһәттем.*

*Утатты. Тарыһы ҡоторop уңды. Алдағы йылға быны Мәскәүгә Ауыл хужалығы күргәҙмәһенә ебәрҙек. Ҡыҙыҡһынған төрлө кеше бынан: "Ниндәй ысул менән үҫтерҙегеҙ был тиклем мул уңышты?"— тип һорайҙар икән. "Рәпиков ысулы менән",— ти икән был. Хатта бер ғалим бик оҙаҡ уйланып торғас: "Ә-ә, иҫемә төштө. Был ысул әле бик яңы. Әммә уның перспективаһы ифрат ҙур",— тигән үҙенең юлдаштарына.*

**1.I.97.**

*Тыныс ҡына Яңы йылға килеп индек. Сәғәт берҙә Тимербулат шылтыратты. Байрамды Рауза, Әлфиә, Олег, мин, һеңлем Салисә ҡаршыланыҡ. Гел яҡшы нәмәләрҙе иҫкә төшөрҙөк. Ҡыҙым минең — хазина. Аҡылы ла, йөрәге лә, эшһөйәр ҡулдары ла, намыҫы иң юғары заттан. Олег та бик һәйбәт кеше булып сыҡты, кеше булып ойошто. (Бәлки, минең дә йоғонтом барҙыр.)*

**5.I.97.**

*1939 йылда аҡһаҡ Насибуллинға бер костюм һаттым. Ул эштән сыҡҡан фәҡир студент ине. Тарих кабинетында лаборант булып эшләй башлағас, ҡотая төштө. Костюмдың ярты хаҡын шунда уҡ бирҙе.*

*— Насибуллин, ҡалғанын түләр инең,— тим, бер осрағас.*

*— Күрәһең бит инде, Мостай, ауыҙымды асһам, үпкәм күренеп тора.— Ул ҙур итеп ауыҙын асты, арыҡ ине бите, бәләкәс кенә булып ҡалды.*

*Тәненә ит ҡунмаһа ла, бурысын ваҡлап-ваҡлап түләп бөтөрҙө.*

**23.I.97. Переделкино.**

*Быйыл юҡҡа килеүемде ныҡ аңланым. Тәндең дә, йәндең дә ҡанаты төшөнкө. Йәш менән иҫәпләшмәй ярамай икән. Муса минән дә былай яфалана. Ул хатта төнөн йоҡлай алмай. Аптырағас, уның күңелен күтәрәйем тип таҡмаҡ та яҙып ҡараным.*

*Ғүмер үтә, дәрт бөтә, тип*
*Уфтанма, Муса Ғәли.*
*Ҡыҙ-ҡырҡынды шырыҡ-шырыҡ*
*Шырҡылдатырһың әле.*
*Муса әйтә: "Көт, ишәгем,*
*Һиңә нуҡта ишәмен,*
*Шул эшемде башҡарғас та,*
*Ер кендеген тишәмен".*

***

*Сәскәләрҙе һөйөр ел бит һин,*
*Күбәләктәр ҡуныр гөл бит һин.*
*Күңелдәрҙе арбап, Муса Ғәли,*
*Һайрар ғына ҡоштай гел бит һин.*
*Һайрап ебәрһәң дә бер тапҡыр,*
*Йөрәк әрнеүҙәрен туҡтатыр.*

*Бында Раил Байбулатов бар. Бик итәғәтле, ярҙамсыл кеше. Ихлас күңелле, хәйләһеҙ, әммә үҙенсә хәйләкәрлеге бар.*

***

*Илгиз миңә әйтә: "Әткәй, үҙеңде һаҡла, йөрәгеңде ҡыҙған",— ти. "Ҡурҡма, улым, мин үлгәс тә йөрәгем өс көн тибеп ятыр әле".*

**24.I.97.**

*Үҙ ғүмерҙәрендә кешеләр бер-береһенә күп нәмәне әйтергә өлгөрмәй ҡалалар. Йә тартыналар, йә шарттары тура килмәй. Шуларҙың иң үкенеслеһе — әйтелмәгән рәхмәт менән әйтелмәгән мөхәббәт.*

***

*Сирләп ятам. Илгиз мине ҡарай. 3 көн ҡырынмағанмын.*

*— Улым,— тим,— миңә ҡырынырға әҙерлә әле. Үлеп-нитеп китһәм, былай килешмәҫ... Әҙәм алдында оят.*

***

*Урамда Мусаның тунына ҡарап иҫем киткәндән һуң:*

*Истамбулға барып, тундар алдым.*
*Алған тунҡайҙарым ҡамалы.*
*Алған тунҡайҙарым ҡамалы ла,*
*Хәл-әхеүәлкәйҙәрем самалы.*

***

*Минән йыш ҡына һорайҙар:*
*– Ижад процесы нисек була? Нисек  һиҙәһең  үҙеңде?*
*– Ижад процесы – донъяңды онотоу ул. Бер нәмә лә һиҙеп булмай.*

**11.II.97.**

*Күккә баҡһам, хыял мине*
*Ярһыу атҡа мендерә.*
*Ергә баҫһам, кәрем китеп,*
*Таҡырҙа йөгөндөрә.*

***

*Табанымды яланылар көсөктәр,*
*Сабыуымды сәйнәнеләр хөсөттәр.*

**12.II.97.**

*Мейес сығарыусы Шәфиҡ бик шаян ҡарт ине. Ул Вәлетдин менән Гөлсирә өйөндә  мейес сығарған. Гөлсирә әрпеш – күп һөйләр, аҙ ҡыймылдар ҡатын. Оҫтаны ашатыуының рәте булмаған. Тегенең хәтере ҡалып, быларҙан, мәсхәрәләп, көлмәк була. Эше тамамланғас, һорай икән:*

*– Вәлетдин, һинең өс метр самаһы тимер таяғың бармы?*
*– Юҡ шул. Ниңә ул?*
*– Бик кәрәк. Уны тапмаһаң, мейесең  ҡайтарасаҡ.*
*Вәлетдин бөтә урамды бер итеп һорашып, шундай тимерҙе таба.*
*– Шулай ҙа, ағай, быны нимә эшләтәһең?– ти Вәлетдин.*
*– Бына хәҙер ҡыйыҡҡа мен дә ошо таяҡты мөрйәгә тыҡ.*
*– Ниңә, ағай?*
*– Таяҡ буйлап төтөн тура сығасаҡ. Мейесең  һәйбәт тартасаҡ.*
*– Иллә башлы ла икәнһең, ағай! –  тип Вәлетдин шаҡ ҡата.*

**17.II.97.**

*Әлфиә беҙгә килә,*
*Берҙә түгел, икелә.*
*Ике тулды, өс булды,*
*Әлфиә килә-килә.*

*Әлфиә бик ашыҡҡан –*
*Беҙ ҡотолдоҡ аслыҡтан.*
*Һимеҙ һурпа һемерәм,*
*Һарыҡ бото кимерәм.*

*Ҡаптым төрлө салатын,*
*Гүйә, үҫте ҡанатым.*
*Йота яҙҙым телемде,*
*Шулай булғас, бел инде –*
*Ниндәй оҫта Әлфиә.*
*Уға һәр кем баш эйә.*

*Әлфиә, әсәһе сирләгәндән бирле, беҙгә көн дә аш бешереп, нәҡ сәғәт икегә килтереп еткерә. Улар урам аша ғына тора. Бөгөн һуңланы. Шуға күрә бәйет сығарҙым.*

**17.II.97.**

*Төнгө йоҡоларым ҡасты минең.*
*Күҙ йомарлыҡ хәл юҡ. Уй бирмәй.*
*Йөрәк серҙәремде һөйләр инем,*
*Йөрәк сиркәйҙәрем буй бирмәй.*

**20.II.97.**

*Министрҙар Советында Хәләф Ишморатовтың Ләлә исемле бик мөләйем, бик алсаҡ секретары бар. Кисә Хәләфтең килгәнен көтөп ултырғанда Ләләгә мәҙхиә (ода) яҙып бирҙем.*

*Пар ат егеп, елдерҙем мин*
*Ләләләргә,*
*Осраманым яфаларға,*
*Бәләләргә.*
*Яҙмыш-тәҡдир ни ҡылһа ла,*
*Хоҙайымдан.*
*Ә уйымда Ләлә генә*
*Һәр дайымда.*
*Килеп еттем Ләләләргә*
*Пар ат егеп,*
*Шулай булғас, мин түгелме*
*Сая егет?!*

**3.III.97.**

*Әүәл замандарҙа башҡорттоң башлыҡтары аш күтәргән, батырҙары таш күтәргән, ялпылары баш күтәргән. Аш күтәргәндәр ашһыҙ ҡалмаған, таш күтәргәндәрҙе таш баҫмаған, баш күтәргәндәр генә башһыҙ ҡалғандар. Хәҙер нисектер, белмәйем.*

**4.III.97.**

*Урам аша Әлфиәгә*
*Күперҙәр ҡорор инем.*
*Шул күперҙән арлы-бирле*
*Йөрөр ҙә торор инем.*

*Әлфиәләр тарафына*
*Ағып китте аҡ болот,*
*Үҙем йөҙөп сығыр инем*
*Аҡ болот ҡына булып.*

*Әлфиә беҙгә килә,*
*Ел булып елә-елә.*
*Ҡосаҡ тулы күстәнәс,*
*Үҙе шундайын көләс.*

**1.IV.97.**

*Шатлыҡ, бәхет көткән көндәремдә*
*Дусар булдым ҡай саҡ хәсрәт, ғәмгә.*
*Йәннәт ишектәрен асам тим дә,*
*Килеп төртөләмен йәһәннәмгә.*

**2.IV.97.**

*Әлфиәлә гелән ике эш ҡайғыһы:*
*Береһе уның — яңы фарфор теш ҡайғыһы.*
*Икенсеһе — ялҡау, йүнһеҙ студентты*
*Инглизса ләпелдәтер тел ҡайғыһы.*
*Ышанабыҙ, бынан ары Әлфиәнең*
*Һис ҡасан да теше туҙмаҫ, теле талмаҫ.*
*Инглиздарҙың хатта, тимен, былбылы ла*
*Әлфиәләй инглизса һайрай алмаҫ.*

***

*Өйҙә юҡ ыҙғыш, орош,*
*Әлфиә бешерә бор(о)щ.*
*Йырлай-йырлай "Тәфтиләү"ҙе,*
*Әлфиә бешерә тефтелиҙы.*
*Көс булһын, тип, көрәшкә,*
*Әлфиә ҡыҙҙыра пирәшкә.*

***

*Көрәштән тынырға иртәрәк.*
*Көрәшер өсөн бит кәр кәрәк.*
*Инде ҡышҡа ҡарай юл ярам,*
*Ҡарлы юлды ярмай юҡ сарам.*

**17.IV.97.**

*Беҙҙең наҙан ғына киленебеҙ Рәүфә бар. Уның ире — Раузаның ҡустыһы Фуат. Рәүфә ғүмер буйы еп иләү фабрикаһында эшләне. Ғәҙелдәрҙән-ғәҙел. Бөтәһенә лә ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә тырыша. Шунан һорайым:"Беҙҙең нәҫел Ғ. ниндәй кеше ине?" "Атаһының ҡәберен белмәй, кемлеген үҙең шунан аңлап бел",— ти. Ниндәй тоғро хөкөм.*
*Фуат беҙҙең — завод эшсеһе. Үҙе ифрат нескә күңелле зат. Музыка ярата, бигерәк тә классик музыка менән мауыға. Уның пластинкалары бихисап. Ваҡыты булһа, патефонда ҙур симфониялар уйната. Милли рухлы Рәүфәне симфониялар, ораториялар еләтеп тә ҡуя икән. Бер көндө был: "Гел шул Пихтауин да Пихтауин... Нисек туймайһың?! Ҡуй әле, исмаһам, үҙебеҙҙең "Таштуғай"ҙы!"— ти икән.*

**23.IV.97.**

*Был донъяның хөкөмдәре ҡаты —*
*Бер илатһа, ҡабат йыуатмай.*
*Бөкрөләрҙе ҡәбер төҙәтһә лә,*
*Шаҙраларҙы һис ни шымартмай.*

**3.V.97.**

*Һуңғы көндәрҙә генә телевизорҙа шундай әңгәмә булды. Дөрөҫөрәге, алып барыусы бик оло эшҡыуар (американ ине, буғай) менән әңгәмәләште. Һүҙ сауҙа һәм хеҙмәтләндереү сфераһы хаҡында барҙы.*
*Алып барыусы:*
*— Сауҙа эше ғәҙел, намыҫлы була аламы?*
*Яуап:*
*— Мотлаҡ булырға тейеш. Башҡаса ярамай.*
*— Тәү капитал туплау (первоначальное накопление) һәр саҡ вәхшиҙәрсә эшләнгән. Беҙҙә лә хәҙер шул хәл. Кеннедиҙың атаһы яман юл менән, хатта*

*контрабанда менән капитал туплаған, тиҙәр. Ана ниндәй улдар үҫтергән. Яуап:*
*— Эйе, үҫтергән. Шул уҡ ваҡытта уға ҡарғыш төшкән. Яҙмыш яҙаһы килгән.*
*— Нисек?*
*— Өс улының икеһен үлтерҙеләр. Өсөнсөһө лә аллә ҡайҙа китмәгән. Ә бер улының улы тауҙа саңғы шыуғанда һәләк булған. Был — донъялыҡта уҡ яза килеү. Ғәҙелһеҙлек, алдау, талау өсөн яза — ҡотолғоһоҙ. Үҙе ҡотолоп ҡалһа, тоҡомо яуап бирәсәк,— бына шулай тине бер бай абзый.*

**11.V.97.**

*Поэт чем нужнее народу, тем нежелательнее правительству. Даже самый мудрый правитель тайно или явно соперничает с Поэтом, чем-то завидует ему. Он ревнует, когда народ оказывает ему свою любовь. Даже самого великого поэта он признает пятым или десятым после себя. Это я знаю по истории и по своим наблюдениям за многие годы.*

**19–25.V.97.**

*Мәскәүҙә Башҡортостан көндәре уҙҙы. Республикабыҙ йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килмәне. Һәр ерҙә, һәр эштә юғары кимәл күрһәтелде. Рауил Бикбаевҡа һоҡланып йөрөнөм. Фекере лә, һүҙе лә мәғәнәле. Ойоштороу эштәре лә яҡшы башҡарылды.*

*Башҡортостан көндәрендә Мәскәү буйлап бөтә ергә лә сапманым. Үҙем теләгән ергә үҙ яйым менән йөрөнөм. 20 майҙа манежда Өфө ҡалаһы хужа булды. Иҫ киткес күргәҙмә ҡараныҡ. Үҙеңде таныр өсөн ситкә барып күренеү кәрәк икән. Шунда уҡ Ямалетдинов табын ҡорҙо. Шәп табын. Мәскәүҙә йәшәүсе яҡташтар ҙа байтаҡ ине табында: З. Н. Нуриев, Динәра Байтерякова, Илгиз менән Нәзифә Кәримовтар, генералдар, ғалимдар. Минән дә тост әйттерҙеләр. “Эта выставка показала не только товарный вид Уфы, но и содержание жизни Башкортостана”,— тигән булдым. 21-дә Миннацта осрашыу булды. Бәләкәй генә һүҙ ҙә әйттем. (Әйткәнемде Өфө гәзиттәре баҫып сығарҙы.) Шиғыр уҡыным. Министр Михайлов минең сығышымды хуплап, мине бөйөктәр рәтенә индерҙе.*

*ЦДЛ-да әҙәби кисә булды (22.V), үҙебеҙҙекеләрҙән тыш, Сергей Михалков, Рәсүл Ғамзатов, Валентин Распутин, Владимир Костров, Елена Николаевская, Яков Козловский ҡатнашты.*

**1.VI. 97.**

*У меня совсем мало времени, меньше, чем у Президента. Ему принадлежит, на него работает время, множество людей: помощников, подчиненных, производственников и др., а на меня не работает ничье время, напротив, мое время отнимают посетители, просители, кто нуждается в моей помощи. Берут у меня время даром.*

**31.VI. 97.**

*Әлфиә менән Олег Америкаға Тимербулаттың университет бөтөрөүенә төбәп барғайнылар. Кис ҡайтып төштөләр. Булат тегендә ҡалған. Унда эшләп тә, белемен дауам итеп тә йәшәргә уйлай икән (магистратурала). Хәйерлегә булһын инде. Үҙ юлын үҙе һайлаһын. Ләкин унда бөтөнләйгә ҡалырға теләге лә, ниәте лә юҡ. Быныһы миңә бик оҡшай. Күңелем теләгәнсә.*

**20.VII.97.**

*Ниндәйҙер бер яман, яуыз закономерность. 20—30-сы йылдарҙа иң ҡурҡыныс дәһриҙәр (һуғышсан аллаһыҙҙар) мулла балалары ине. Хәҙер кисә генә ата*

*коммунист булып йөрөгәндәр хажға баралар, мәсет юлын тапайҙар, мулла булырға ла хыялланалар.*

***

*Хәлил Барлыбаевҡа объективка (характеристика):*

*Хәлил — яҡшылыҡҡа дәлил.*
*Аты Хәлил. Эше хәләл.*
*Ырыу заты — Барлы-Бай.*
*Күҙҙәрендә ғаҡыл нуры,*
*Һүҙҙәрендә баллы май.*
*... Дөрөҫмө был — ай-һай?!*

**11.VIII.97. Дача.**

*Ромен Ролландың “Иҫтәлектәр”ен йәнә ҡулға алдым. Уны уҙған йылда уҡып сыҡҡайным. Ул нәҡ 78 йыл йәшәгән. Мин уның йәшен ҡыуып еттем. Бәлки, уҙып та китермен. Әммә был мине артыҡ ҡыуандырмай. Минең ижади ғүмерем шул тиклем шыйыҡ. Ҡыҙғаныс. 19-20 йәшендә өлгөрөп еткән Роллан таутау бөйөк китаптар ижад иткән. Мин яҙғанды бергә ҡушып ҡараһаң, уларҙы бар итеү өсөн 78 йыл буйы йәшәү зарур булмаған икән. Бының өсөн 35—40 йыл ғүмер етер ине. Бында минең ғәйебем ҙур. Шул уҡ ваҡытта мине әйҙәп торорлоҡ ижади, рухи, интеллектуаль мөхит тә етерлек булмаған. Егерме йәшемә тиклем мин ни күрҙем? Нимә менән мауыҡтым, ниндәй маҡсаттар ҡуйҙым алдыма? Үҙ мөхитемдәге ниндәй бөйөктәргә үрелеп ҡараным да донъяның ниндәй бөйөк шәхестәре менән мауыҡтым?*

*17-гә еткәнсе ҡумыҙ менән гармундан башҡа музыка ҡоралы күрмәнем. Киләштә ҡурайҙы бер әбей генә уйнай ине. Ромен 21 йәшендә француздың бөйөк композиторы Сен-Сансҡа шаҡ ҡатырлыҡ хат яҙа (13.IV.1887). Сәнғәт, сәйәсәт, гуманистик принциптар тураһында, сәнғәттең (музыканың) интернациональ йөкмәткеһе хаҡында тәрән фекер йөрөтә. Хаттың сәбәбе шул: Сен-Санс Вагнерҙың “Лоэнгрин” операһын Парижда ҡуйҙырыуға ҡаршы сығыусылар яғында. Ҡаршы сығыуҙың сәбәбе: Вагнер — немец.*

*Ошо уҡ 1887 йылда ул Лев Толстой менән хат алыша, йәштән үк Ибсен менән таныша. Бына кемдәрҙән һабаҡ ала. Виктор Гюго ла иҫән әле. Уны күрә. Үҙе бер рухи байлыҡ. Ҙур музыканттар, артистар, рәссамдар менән аралаша. “Комеди француз” театрының үҫмер саҡтан уҡ эсен-тышын белә. Ә мин 20 йәшемдә тәү тапҡыр опера тыңланым. Эсем бошто, тәмен дә, йәмен дә тапманым. Сөнки наҙанмын. Һуңыраҡ Сәләх Кулибай менән балет ҡараныҡ. Оҙаҡ бейеүҙәре мине ялҡытты. Сәләх, ярым шаярып: “Нимә аңланың?”— тине. “Нимәһен аңлап тораһың. Төрлөсә ҡыланып бейенеләр инде...”— Яуабым шул булды. Кулибай, мине ирештереп булыр, былай төшөндөрҙө: “Балерина аяғын алға һуҙһа, “яратам” тигәнде аңлата, артҡа ташлаһа, “яратмайым” ти”. Сәләх мине, моғайын, шаяртҡандыр. Әммә быға үҙе лә ышанмаһымы икән?*

*Рабфакта уҡығанда студенттар бейеү түңәрәгенә йөрөп, бейергә (танцевать итергә) өйрәнде. Мин йөрөмәнем. Кейемем фәҡир, ғорурлығым бай ине. Йөрөргә ояллым.*

*Быныһы — Роллан хаҡында әйтәм — аңлашыла. Бына Туҡай феномены айырыуса серле. Туҡай тураһында һүҙ сыҡҡас, бер саҡ минең өйөмдә Ғәзим Шафиҡов уның поэзияһына ҡарата самалы ғына баһа әйтте. Мин уға үҙемдең ҡарашымды былай тип белдерҙем: “Туҡай поэзияһын уның бар булмышынан айырып ҡарарға ярамай. Тарих буйынса уны көтөп алған татар халҡы уны шағир итеп кенә түгел, Туҡай итеп ҡабул ҡылған, әлегәсә шулай инана”.*

**20.IX.97.**

*Аҡсаға мохтаж дуҫың һинән һорамаһа ла, үҙең белеп биреү кәрәк. Кәңәшкә мохтаж кешегә һорамағанда кәңәш биреү кәрәкмәй. Һорамай биргән кәңәште күп әҙәм ҡабул итмәй, киреһенсә, хәтере ҡала. Йәнәһе, ул үҙе бөтәһен дә белә. Бигерәк тә ҙур түрәләргә был оҡшамай. Хәҙер берәүгә лә аҡыл бирергә атлығып бармайым.*

**21.IX.97.**

*Салисә хәтерләй. Ул әле тормошҡа сыҡмағайны. Сәләх Кулибай бер көн беҙгә килде. Шаярып Салисәгә әйтә:*

*— Ниңә кейәүгә сыҡмайһың, һылыуым?*

*— Кейәүе юҡ бит. Бәлки, һеҙ берәрһенә димләрһегеҙ, Сәләх ағай?*

*— Ҡуй, һылыуым, мин димләгән кейәүҙең йүне булмаҫ ул,— ти Кулибай.*

**3.X.97.**

*Посредственность всегда тайно питает ненависть к таланту, хотя, как правило, при людях она выражает восхищение им. А в жизни вообще иные высокопоставленные особы не терпят тех, кто их превосходят по уму, хотя они сами не глупцы, ибо видят ум у других.*

**5.X.97.**

*Мөхәббәт арҡаһында ҡоштар ыҙғыша, йәнлектәр һәм йыртҡыстар ҡан туҙыша, әммә үлтерешмәй. Еңелгән ир заты, еңелеүен танып, юлдан китә, еңеүсене эҙәрләп үс алмай. Ә кеше иһә еңеүсене юҡ итеүгә барып етә. Йыртҡыстан да былай. Мөхәббәт арҡаһында ғына түгел, байлыҡ, шөһрәт, дәрәжә, карьера өсөн кешеләр бер-береһенең боғаҙын сәйнәй. Ҡот осҡос нәмә бит был.*

**15.X.97.**

*Нимә эшләптер ошо аҙнала Ромен Ролландың “Иҫтәлектәр”ен, Федор Шаляпиндың “Ғүмер тураһында повесть” китабын, Зәки Вәлидиҙең “Хәтирәләр”ен ҡараштырғылап ултырҙым. Әгәр бынан утыҙ-ҡырҡ йылдар әүәл был китаптарҙы тырышып өйрәнгән булһам, шул уҡ ваҡытта ошо бөйөк шәхестәрҙең эшләгән эштәренең күләмен һәм эстәлеген күҙ алдына килтерә алһам, үтә ҡиммәтле һабаҡтар үҙләштерер инем. Хәҙер үҙ-үҙемә битәр генә ишетәм. Извлек бы урок, теперь извлекаю укор. Укор за то, насколько тощ и хил итог моих усилий, моего труда. Обидно!*

*Биш көндән һуң миңә 78 тула.*

**30.X.97.**

*У меня посмертной славы не будет. Я не был ни изгоем, ни пасынком своего времени. Поэтому не ждет меня ореол ни мученика, ни героя. Обиженные своим временем или якобы обиженные обрастают потом мифом. У меня “весь гардероб со мной”. Мифа потом не будет. Единственное желание мое: чтобы вчитывались в мои книги, в мои строки. Пока меня даже умные критики читали довольно бегло, подчиняя меня своим творческим концепциям. Я счастлив тем, что в Советском Союзе многомиллионный читатель хорошо принимал меня. Об этом говорят многочисленные читательские письма. Пришло однажды такое письмо (оно, наверное, хранится в моем архиве), которое потрясло меня. Писала женщина из Дальнего Востока. Примерно такой текст: “У меня в жизни сложилась такая ситуация, что я окончательно решила уйти из жизни. Утром пришла “Роман-газета”. Я ее выписываю.*

*Начала перелистывать вашу повесть “Долгое-долгое детство”. Понемногу увлеклась. “Ладно, говорю, завтра уйду". Завтра тоже не ушла. Дочитала. И решила остаться на этом свете”. Она не говорила о причине своего первоначального столь ужасного решения. Я ответил ей. Но переписка не состоялась.*

**3.I.98.**

*Иртән иртүк ЖКО-ға шылтыратам. Трубканы, күрәһең, йыйыштырыусы ҡатын алды. Әле туғыҙ тулмағайны.*

*— Кем шылтырата? Начальство юҡ әле.*

*— Мостай Кәрим шылтырата.*

*— Кем?*

*— Мостай Кәрим.*

*— Белмәйем.*

*— Ә һеҙ инженерҙың кем икәнен беләһегеҙме?*

*— Беләм. Беҙҙә главныйы ла бар.*

*— Улайһа аңларһығыҙ. Мин Яҙыусылар союзында главный инженер булып эшләйем.*

*— Баш ваттырып тормайынса ғына, тәүҙә үк шулай тиһәгеҙсе.*

**7.I.98.**

*Беҙ йәш саҡта һәр хөрт шағир үҙенсә насар яҙа ине. Мәҫәлән, Зиннәт Ҡотип йәки Мөбәр Тимский. Хәҙер йәш шағирҙарҙың байтағы һәйбәт яҙа, ләкин бер һәйбәте икенсе һәйбәттән айырылмай.*

**24.I.98.**

*Бер кеше миңә килеп инде. Йәнәһе, унда хәйлә, тапҡырлыҡ һәләк күп.*

*— Ағай,— ти,— кәңәш, аҡыл бирегеҙ.*

*— Ниндәй кәңәш?*

*— Һеҙҙән аҡса һорап торорға кәңәш итмәҫһегеҙме икән?*

*— Кисерегеҙ, быға минең аҡылым етмәй.*

*Шулай ҙа 50 һумды алып китте.*

**25.I.98.**

*На днях по телевидению какой-то умник обвинил Добролюбова, Чернышевского в том, что они положили начало крушению царизма, империи. Они, на мой взгляд, как и Радищев, были мальчиками, которые кричали: “Король-то голый!” Не нужно обвинять мальчиков за наготу королей. Этих кричащих мальчиков в истории было великое множество, когда короли вконец обносились.*

**26.I.98.**

*Народ России верит двум вещам: сплетням о высшей власти и обещаниям, лживым посулам той же власти. Без веры не живем!*

**30.I.98.**

*Рустарҙың шундай һүҙе бар: баш төҙәтеүҙе “клин клином вышибают” тиҙәр. Дөрөҫ түгел был. Иҫке шынаны сығарам тип, яңы шына ҡағаһың. Баҡһаң, иҫкеһе лә тороп ҡала, яңыһы ла ҡыҫыла.*

**30.I.98.**

*Минән әңгәмә алырға “Башҡортостан”дан Тамара Искәндәрова килде. Ул һәйбәт шағирә.*

***О Тамаре***

(Поэма)

*Искәндәри Тамара,*
*Не обижай комара!*

Конец поэмы

*Создал сей шедевр во второй день после Рамазана 1998 г.*
*Гомер XXI века Мустай Карим.*

**1.II.98.**

*Сначала люди создают богов, приносят ему жертвы, потом обыватели приносят богов себе в жертву. Так всегда.*

**16.II.98.**

*Беҙ кисерештәрҙән, күңел тетрәнеүҙәрҙән һаҡланырға тырышабыҙ, ғүмеребеҙҙе ҡурсалайбыҙ, йәнәһе. Ә бит сәләмәт ағастарҙың япраҡтары дауылдарға ла бирешмәйҙәр, хатта ныҡыналар. Ул япраҡтарҙы ҡорттар ғына һәләк итә ала. Әҙәмде кисерештәр түгел, үкенестәр ҡаҡшата.*

**4.III.98.**

*Эй, ағалар ғәмһеҙ ҡар һыуҙары,*
*Эй, ҡыуана сабый йылғасыҡтар,*
*Әйтерһең дә, улар ғүмерлеккә,*
*Хатта мәңгелеккә юлға сыҡҡан.*
*Мин дә шулай баҫтым һуҡмағыма,*
*Юлдың осо юҡ, тип, имештер ҙә...*
*Юл башланған икән, аҙағы бар,*
*Кәрәк шуның менән килешергә.*

**17.III.98.**

*Я пришел к не очень скромной мысли: моя жизнь принадлежит не только мне, но и моим детям, друзьям, моим читателям. Смерть моя тоже отчасти будет принадлежать им. Поэтому очень хочется, чтобы моя смерть была достойной, да бы не унижала их.*

**22.III.98.**

*В 1449 году англичане (Сливер Кромвель) обезглавили своего "божественного" короля Карла I. Он из "священного" превратился в обычного мертвеца. Спустя 469 лет россияне предали смерти "кровавого" Николая II. Теперь же из когда-то "кровавого" мертвеца хотят сделать святого. Так и сделают. Вот таковы причуды истории.*

***

*В 1714 году у англичан вышло затруднение с избранием короля. Они пригласили на престол немца, назвали Георгом I, тот не знал ни слова по-английски, так и не научился, не хотел. По этому поводу Джавахарлал Неру в своей книге "Взляд на всемирную историю" воскликнул: "Английский король не знал английского языка!" Сын Георга I Георг II тоже еле понимал по-английски. Выражаясь современным лексиконом, "владел языком со словарем". Этим королям не было дела до народа, да и народу до них. Это было в средние века. И теперь претендуют на престол, то бишь на президентское кресло в Башкортостане глухонемые в части знания языка, культуры, психологического уклада народа, коренного народа республики.*

***

*О Бабуре. Он любил вино. Однажды на войне стала дилемма. Отступать или идти на явную гибель. Положение было критическое. Он предпочел встретить смерть, чем бежать. В этот отчаянный час решил бросить пить и разбил все свои винные кубки. Трезвым выиграл бой. Больше никогда не пил. Иной слабак в такой ситуации искал бы в вине опору, утешение и надежду. Конечно, погиб бы...*

***

*В 1777 году во Франции было 1 миллион 100 тысяч нищих. Вот где почва и истоки Великой Французской революции. Современные богачи России плодят нищих, обирая народ и государство. Одумайтесь, господа! Нет ничего сильнее и беспощаднее нищих.*

***

*Кстати, репрессии в СССР продолжались более 35 лет, во Франции репрессии такого же масштаба первоначально вместились в четыре года (1799 – 1893 гг.)*

**28.III.98.**

*Назарҙың да 80 йәшлек юбилейына барырға йыйынам, ихлас барам, бергә уҙҙырған йылдар, татыу, дуҫ йәшәгән йылдар хаҡына (улар тап 50) барам. Яманһыу, үкенесле, әлбиттә. Ҡанатланып, осоп барыр инем бит, әүәлгесә булһа.*

***

*Телефон кенәгәһенә яҙып ташлаған экспромт.*

**Мөхәббәтемә**

*Болоттарға урармын да*
*Томандарға төрөрмөн,*
*Ҡояш булып яндырыр ҙа*
*Елдәр булып өрөрмөн.*

**6.IV.98.**

*После ухода гения современники сокрушаются: “Проглядели гения...” А гений ничего не “проглядывал”, делал свое дело и ушел, не подозревая, что он гений.*

***

*Томас Манн. Книга “Европа на пороге II тысячелетия (стр. 135). “С тех пор, как я занялся художественным творчеством, я ощущал и был уверен, что меня связывает с моим народом счастливое понимание его чаяний, его духовных традиций. По своей природе я гораздо более склонен быть представителем, выразителем дум, нежели мучеником, нести людям немного возвышенной радости, а не питать ненависть и разжигать борьбу”.*

*Как импонирует мне это суждение. Такое мог бы сказать только Пушкин, а не Лермонтов, не Достоевский, тем более не Солженицын.*

**16.IV.98.**

*Иҫең дә китерлек, ҡотоң да осорлоҡ хәл. Русса әйткәндә, навождение, мистика: бөгөн 1988 йылдың ноябрь айында Ҡытайҙа яҙған көндәлектәрҙе, бүтән материалдарҙы ҡарап ултырҙым. Улар “Ҡытай” тигән папкаға тупланғайны. Гао Ман (“Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”тың тәржемәсеһе) менән Тай Циньдың (“Прометей”ҙың тәржемәсеһе) хаттарын яңынан уҡып сыҡтым. Эшем бөткәс тә, телевизорҙы тоҡандырҙым. “Время” дауам итә икән. Ҡапыл*

*экранда Гао Ман пәйҙә булды. Туғыҙ йыл ярымдан һуң тәү күрҙем. Сәстәре генә ағара төшкән. Уның исемен экранда яҙып күрһәттеләр.*

*Әллә ниндәй тылсымлы нәмә булды был. Шомланып ҡалдым.*

**30.IV.98.**

*Донъя туҙҙы. Уны тиҙ үк*
*Һипләү кәрәк,*
*Ҡото китте, ибе бөттө,*
*Ипләү кәрәк.*
*Ремонт менән шөғөлләнмәй*
*Үҙе Алла.*
*Ипләү-һипләү бәндәләргә*
*Тороп ҡала.*

**1.V.98.**

*Байрамды урланылар. Ана, урамда Нефтселәр һарайы алдында оркестр дәртле көй уйнай. Ә эстә байрам юҡ. Һурып алдылар уны.*

***

*Әҙәмдәр тараҡҡан яуызлыҡ, зар, көнсөллөк, хәсрәт, ялғанлыҡ донъяны завод торбаларынан сыҡҡан һарғылт-йәшел төтөндән нығыраҡ ағыулай. Танауға төтөн еҫе килеп бәрелгәндәй, рухҡа ана шул яман уй-тойғоларҙың шауҡымы бәреп инә.*

***

*Это было прекрасно: жить, когда ты живешь.*
Пабло Неруда.

*“Тере булһаң, йәшәү шундай гүзәл”.*
*Шулай тигән шағир, әжәл көтөп.*
*Ниндәй гүзәл үлән, шәфәҡ, төтөн,*
*Бала илауҙары моңдай гүзәл.*

*Ауыл ғаҡыл эйәһенең әйткәне:*

*Ашаһаң, туҡ булаһың,*
*Ашамаһаң, ҡыуыҡ булаһың.*
*Байыһаң, хуп булаһың,*
*Ә бөлһәң, юҡ булаһың...*

*Йәнәһе, бик тапҡыр әйтте...*

**31.V.98.**

*Заман йырҙары тураһында уйланам. Ә күңелемдә “Бейеш”, “Сәлимәкәй”, “Буранбай”, “Ҡолой кантон”, “Һандуғас”, “Түрәкәй”, “Сибай”, “Таштуғай”, “Ашҡаҙар” һ.б., һ.б. Татар, рус йырҙары ҡолағымда яңғырай. “Тәфтиләү”, “Уйыл”, “Ҡара урман”, “Степь да степь кругом”, “Есть на Волге утес”, “Славное море — священный Байкал”. Был йырҙарҙың һыны, кәүҙәләнеше, еҫе, төҫө, хайран ҡалырлыҡ моңо бар. Һәр береһенең асылында тәрән драматизм ята. Бөтәһе лә күҙ алдына килеп баҫа.*

*Хәҙерге йырҙарҙың күпселеген тыңлау — төбө тишек бокалдан шарап эсеү шикелле. Шарапты һоҫоп алаһың, ауыҙыңа еткәнсе түгелеп бөтә. Әлеге йырҙар ҙа күңелгә еткәнсе һауала шартлап, юҡ була.*

*Ундай йырҙарҙың ике генә һүҙе бар:*

*Беренсеһе — яратам, яратам, яратам, яра, яр...*
*Икенсеһе — әсәйемде һағынам, һағынам, һағынам, һағын... һағ... һа...*

*Кешеләрҙе бер-береһе менән яҡынайта, ойоштора торған йырҙар бөтөп бара. Әгәр майҙанда йәш-елкенсәк, табында ҡунаҡтар бер-береһенә ҡушылып йырлай икән, улар ихтыярҙан тыш бер-береһенә теләктәшлек, яҡынлыҡ күрһәтә. Йәғни уларҙың күңелдәрен моң берләштерә.*

***

*Беҙ, кешеләр, зарланырға шул тиклем өйрәнеп алдыҡ — йыш ҡына бал ялай-ялай илайбыҙ. Шишмә һабантуйында күрше ауылдан бер ҡоҙағыйҙы осраттым. Тегенән хәл һорашам:*

*— Тормоштар — көнкүрмештәр нисек, ҡоҙағый?*

*— Һөйләмә инде, ҡоҙа, шәптән түгел. Ике ай пенсия биргәндәре юҡ.*

*— Ошо арала үҙеңә ҡунаҡҡа барып сығырға ниәтләп тора инем. Кире дүнермен, ахырыһы, былай булғас...*

*— Улай итә күрмә, ҡоҙаҡайым. Кил! Ҡурам тулы мал-тыуарым, ҡош-ҡортом бар. Иншалла. Һине һыйларлыҡ һыйым табылыр.*

*— Үҙең зарланып торғас ни...*

*— Минең зарҙы һин тыңлама. Яңылыш ысҡындырҙым. Ғәҙәткә инеп бара шул, ҡәһәрең. Иртәгә килһәң, бөгөн ҡайтып тәкә һуйҙырам...*

*Бара алманым. Ҡоҙағыйҙың тәкәһе иҫән ҡалды.*

**2.X.98.**

*Самая великая трагическая ошибка человека в том, что он придумал машину, сильнее, бесконечно раз сильнее его самого, и сам стал его винтиком. Перед ней он уже бессильный. Он не в состоянии ею управлять.*

**17.X.98.**

*Поэзия — это как балет. К ней поздно приходить нельзя, просто невозможно. Поэзия — это удел молодости, даже юности. Только с той разницей: пришедший в поэзию в юности, там может остаться надолго. В балете — нет.*

**8.XI.98.**

*Тимербулату назидание.*

*Обиженных не обижай, униженных не унижай, повинившихся не обвиняй. На старости лет испытаешь божью благодать (сауап), утешение и спокойствие совести (выждан тынислығы).*

**18.I.99.**

*Бөтә донъябыҙҙы ҡуптарып, яңы фатирға күсергә йыйынабыҙ. Рауза сирләү сәбәпле, Әлфиә менән бергә ҡушылырға мәжбүрбеҙ. Рәхмәт Мортаза Ғөбәйҙулловичҡа. Ул беҙҙе иркен һәм уңайлы урынлаштырырға Усмановҡа әмер бирҙе. “Квартираһын һәйбәт итеп, еренә еткереп эшләгеҙ”,— тине. Быныһы былтыр булды.*

*Был квартирала 40 йыл торҙоҡ. Имен йәшәнек. Өйөбөҙҙөң ҡото булды. Күп ҡунаҡтар күрҙек, күңел байыҡтырҙыҡ.*

*Әле йыйынғанда элекке яҙмалар килеп сыға. Бына 1969 йылдың майында дуҫым, яҡташым Миңнулла Гәрәев менән Александра Андреевнаның көмөш туйында әйткән һүҙем килеп сыҡты.*

**Миңнулла менән Шураға**

*Көмөш булһа ла туйығыҙ,*
*Үҙегеҙ алтын беҙгә.*
*Бер һоҡланып, бер шатланып*
*Ҡарайбыҙ йөҙөгөҙгә.*
*Гөлшураһы кәләш кеүек,*

*Миңнулла егет кенә.*
*Моғайын, былар бер-береһен*
*Йоҡлата һөйөп кенә,*
*Уята үбеп кенә.*

*Килер көндәрегеҙ килһен*
*Йылмайып-көлөп кенә,*
*Оҙаҡ йәшәү бәхетенең*
*Ҡәҙерен белеп кенә,*
*Йәшәгеҙ көлөп кенә...*

***

*Тағы бер яҙма.*

*Мне некогда возвращаться и обсуждать прошлые ошибки, дай бог, справляться с текущими.*

***

*— Инәй, Рәсәй ҙурмы ул?— тинем.*

*— Дүрт тарафтағы күҙ күреме ер — ана шул Рәсәй инде.*

**19.I.99.**

*Булат менән икәүләп Мәскәүҙә ЦКБ-ла Рәсүлдең хәлен барып белдек. Бик ауыр тойғолар менән ҡайттыҡ. Ғорур ҡарағош саҡ-саҡ атлай. Беҙ килгәнгә бик ҡыуанды. Булатҡа яңы сыҡҡан китабын бүләк итте. Беҙҙе лифтҡа тиклем оҙата килде. Беҙ уны палатаһына саҡлы кире оҙаттыҡ, үҙен генә ебәрергә ҡурҡтыҡ. Башы әйләнә. Ваҡыт, замана бәләләре, сирҙәр кешене ниндәй хәлгә төшөрә. Ҡулдары ҡалтырай. Шулай ҙа өҫтәлендә аҡ ҡағыҙ, яҙылған шиғри юлдар ята. Тыныс хушлаштыҡ, әйтерһең, алда оҙон-оҙон ғүмер бар.*

**20. I.99.**

*Элекке көндө Патимат шылтыратты. Рәсүл өсөн беҙҙең Рим Әхмәдов эшләгән дарыуҙарҙы һораны. Рим, уға рәхмәт, бер тәүлек эсендә өлгөртөп килтерҙе. Поезд менән ебәрҙем. Проводницаның исеме Әлфиә. Был уңай менән әүәлге күңелһеҙ хәл иҫемә килеп төштө. 1985 йылда ошо уҡ больницала ятҡан Ҡайсын Кулиевты дауалаған врач бер көндө миңә шылтыратты: “Кулиевтың ҡымыҙ эскеһе килә”,— тине. Февраль ине. Шафрандан ысын (натуральный) ҡымыҙ килтертеп, самолетта ебәрттем. Уны Ҡайсындың улы Эльдар ҡаршы алды. Бер аҙҙан үҙем Мәскәүгә барҙым. Тағы ла ҡымыҙ килтерҙем. Үҙен күрҙем. Үтә ҡыуанды. Ул ҡымыҙҙың инде тәнгә файҙаһы булмағандыр. Был инде күңел эше, йән теләүе ине. Рәсүлгә Рим дарыуҙары файҙа итер, тип ышанам. Ике дуҫым да Башҡортостан тупрағында үҫкән үләндәрҙән сихәт көткән.*

**22.II.99.**

*Килде-киттеле донъяға*
*Килдем дә китеп барам.*
*Бәндәмен. Шәт, буталғандыр*
*Хәләле менән харам.*
*Йәнем һәләк йомарт булды,*
*Аҡылым ғына — һаран.*

**10.III.99.**

*Эсем бошоп ҡаршыланым иртәне. Рауза ла алға бармай, Әлфиә лә сирләп тора, үҙем дә шәптән түгелмен. Бер Олег ҡына йүгерә. Шәп кеше булып сыҡты ул. Малайлыҡ дыуамаллығы бөтөнләй кәмене. Рухы беҙгә ныҡ бәйләнде.*

*Донъябыҙҙың тотҡаһы, әлбиттә, — Әлфиә. Шуға күрә уның хаҡында гел борсолоп торам. Эштән һуңлап ҡайтһа ла хәүефләнә башлайым. Ҡартайғас шулай икән кеше: гел борсолоп йәшәлә. Тормош ағышына тәьҫир итә алмағас, борсолоуҙан башҡа сара ҡала алмай.*

**18. III.99.**

*Раузаның апаһы Һәҙиә апай бик уңған, аҡыллы кеше ине. Тик теле үтә әсе булды. Эше, аҡылы менән төҙәткәнде ул әсе теле менән боҙа ине. Ә беҙҙең ауылда күршебеҙ әрпеш Гөлсирә булдыҡһыҙ эше менән боҙғанды уның татлы теле төҙәтә ине. Һәҙиә апай гел отторошло, Гөлсирә гел отошло булып ҡала ине.*

*Гөлсирә сейле-бешле бәлеште лә теле менән бешереп, Вәлетдинде һыйлай. Теге маҡтап бөтә алмай ҡатынының һыйын.*

**21.III.99.**

*Мой дом был почти проходным двором, любой человек без моего приглашения мог перешагнуть мой порог. А в душу мою я не пускал всякого желающего. Она — не проходной двор.*

**4.IV.99.**

*Миңә яҡшы мөнәсәбәттә булған, хатта мине яратҡан бәғзе яҙыусылар, шағирҙар, шағирәләр миңә һөйәркәгә ҡараған шикелле ҡарайҙар. Аулаҡта яратыуҙарын һөйләп ҡыуандыралар, кеше алдында һөйләгәндә, яҙған мәҡәләләрҙә минең исемде телгә алырға шөрләйҙәр. Ошо көндәрҙә генә бер дуҫ шағирҙың әңгәмәһе булды. Ана шундайыраҡ... Ирҙәр бит кеше алдында һөйәркәһенең исемен телдән ысҡындырмай. Бисәһенә барып етеүе ихтимал был хәбәрҙең.*

**25.V.99.**

***Үҙемә ҡобайыр***

*Унда уйын уйнаным,*
*Ун биштә көс һынаным,*
*Утыҙҙа уй уйланым,*
*Ҡырҡымда мин ҡырҡылдым,*
*Иллемдә икеләндем,*
*Алтмышымда алҡындым,*
*Етмешемдә елкендем,*
*Һикһәндә бер һелкендем,*
*Туҡһан тулмай туңҡайҙым.*
*Ни күрҙем дә ни белдем,—*
*Таң атты ла кис килде.*
*... Осто ҡунды бер турғай —*
*Уҙған ғүмер шул, буғай.*

**16.VI.99.**

*Шундай йыр бар:*

*Һандуғастар ояла,*
*Оялары быяла.*
*Һандуғас балаһы кеүек,*
*Шат йәшәйек донъяла.*

*Һандуғас — моңло ҡош. Шуға күрә, ул шат түгелдер, тимен. Моңло заттар шат булмайҙар.*

**21.VI.99.**

*Будапештта (1944-тең аҙағы) ҡаты һуғыштар бара ине. Мищенко тигән майорҙың самоходный артиллерия полкында булдым. Шунда башҡорт егете менән осраштым. Ул штабта телефонист ине. Башҡортса һөйләшеп рәхәтләндек. Мин уның тураһында иҫтәлектәремдә яҙып киткәйнем. Күптән түгел шундай телеграмма килеп төштө: "Целенный. Хайбуллинский район. Поздравляю с праздником. Вспомним штаб Мищенко. Аманбаев Хурмат". Күрәһең, ул "Ағиҙел" (№2, 1999) журналын уҡығандыр.*

**23.VI.99.**

*Был көндәрҙә Рауза бик яфалана. Арҡа һөйәге үлтереп һыҙлай. Ятһа — тора алмай, торһа — ята алмай ыҙалана. Нимәләр генә эшләһәк тә, файҙаһы теймәй. Ул хәҙер бөтөнләй бала хәлендә. Көйһөҙләнеп тә ҡуя. Мине эргәһенән ебәрмәҫкә тырыша. Мин саҡ ҡына юғалып торһам: "Ҡайҙа ул?"— тип һорай икән. Кәйефе арыу, тәне һыҙламаған бер мәлдә миңә әйтә һалды: "Мин бит һиңә яңынан ғашиҡ булдым. Һинең ниндәй кеше икәнлегеңде әле генә нығытып белдем. Һин минең өсөн тәңре икәнһең. Йәш саҡта ығы-зығы күп булды. Берберебеҙҙе тамам һынарға форсат теймәне. Нисек йәшәүебеҙҙе, кемебеҙ кем икәнде тикшереп торманыҡ". Шулай ти.*

*Балаларым бәләкәй саҡта сирләп китһәләр, нык борсола инем. Әммә уларҙың һауығыуына өмөт булғас, сыҙай инем. Хәҙер Раузаға ҡарата ундай өмөт бик самалы.*

**25.VI.99.**

*Вдруг пришла такая мысль, вернее, пришло желание дать совет молодым девушкам: не выходите замуж из жалости, надеясь, что со временем жалость эта превратится в любовь. Быть тому не дано. Это — любовь в лучшем случае превратится в жалость, в худшем — в ненависть, в случае разочарования. Но жалость никогда любовью не станет. (Дездемона полюбила Отелло за страдания, а не из жалости.) Не подбирайте, девушки, женихов так, как подбирают добрые люди брошенных котят. Подбирать брошенных котят и щенят — дело святое. Я сужу негуманно, жестоко. А почему ради ничтожества должна принесена в жертву другая благородная жизнь? Я знаю одну прекрасную, умную, благородную женщину, которая три или четыре раза подбирала этих "слепых котят", конечно, расставалась с ними. Те навсегда оставались котятами, не став хоть приличными котами.*

*Подбирайте предмет любви своей, восхищаясь им. Если придет, не дай Бог, разочарование, тогда хоть есть за что переживать, есть о чем каяться. Ибо перед разочарованием было очарование.*

*На эту тему хотелось бы побеседовать с молодежью по телевидению. Но кто же из молодых людей будет сидеть у телевизора и слушать меня? Это — только один из аспектов. Тема эта неисчерпаемая.*

**27.VI.99.**

*Меня часто спрашивают: "Какие убеждения руководили лично вами в молодости и какие руководят сейчас?" Честно говоря, я никогда не думал о моих убеждениях. Вернее, я, пожалуй, жил не по убеждениям, а старался жить по совести.*

**29.VI.99.**

*Ҡаланың баш архитекторы урынбаҫары Урал Ураҡсин мине үҙҙәренә саҡырып, Өфөнөң алда ҡаралған төҙөлөш пландары, схемалары менән таныштырҙы. Илдә ҡыйынлыҡ, нимәгә тотонһаң да эш аҡсаға, дөрөҫөрәге, аҡсаһыҙ-*

*лыкка барып төртөлә. Ә Урал бөтәһе тураһында ла шундай мауығып, рухланып, инанып һөйләй, әйтерһең, бөтәһе лә тап ул һөйләгәнсә, бына тигән буласак. Уның ышаныуы миңә лә күсте, мине лә әсир итте. Төҙөүселәр, моғайын, иң фантазер, иң оптимист халыктыр. Мин иң арҙаклы төҙөүселәрҙән Леонид Балабан, Ғилман Әсәдуллин менән дуҫлыкта йәшәнем. Әйтәйек, уларға: "Иртәгә кискә ер тетрәйәсәк",— тиһәләр, тегеләрҙән шундай яуапты ишетер инек: "Улайһа, иртәгә төшкә тиклем бынау объектты мотлак төҙөп бөтөрөргә һәм тапшырырға кәрәк. Юғиһә, һуңлап калыуыбыҙ ихтимал..."*

*Беҙҙең Урал да, моғайын, шулай тип әйтер ине...*

**30.VI.99.**

*Был турала әүәлерәк яҙған булһам, һуңынан һыҙып ташлармын. Яҙғанымды хәтерләмәйем дә кеүек. Анык кына әйтә алмайым.*

*Моғайын, 5-6 йәштәр тирәһендә булғанмындыр. Миңә толстовка һәм кеҫәле салбар тектерҙеләр. Лев Толстой кейә торған күлдәкте шулай атағандар икән ул сакта. Мине кейендерҙеләр. Оло инәйем хатта бер такмак та әйтеп бирҙе:*

*Ай, улы ла, вай, улы,*
*Кеҫәләре кайыулы,*
*Кеҫәһенә кулын тығып,*
*Һыҙғыралыр бай улы.*

*Уны мин шунда ук отоп алдым. Урамға сығып, капка төбөнә баҫтым. Кеҫәгә кулымды тыктым. Фи-у-фи-у, һыҙғырған булдым. Берәү ҙә быны күрмәне лә, ишетмәне лә. Кабатлап та карайым: "Ай, улы ла, вай, улы..." Ишетеүсе юк. Хәтерем нык калды. Бәләкәй сакта мин шәп һыҙғыра инем. Ярай әле, ғүмер буйы һыҙғырып йәшәмәгәнмен.*

*... Аптырағас, яңы кейемемде котлатырға Кәйүп ағайҙарға киттем. Улар, исмаһам, баллап сәй эсерәләр.*

***

*Шул осорҙарҙа булғандыр быныһы ла. Ниндәйҙер байрам ине. Оло инәйемде күрше Әскәп әбейҙәр сәйгә сакырҙы. Улар фәкир торалар. Һыйыр-һарык заты юк. Ике кәзәләре һәм тауыктары ғына бар. Оло инәйем кунак-һыйҙан мине калдырмай, үҙе менән йөрөтә. Әскәп әбейҙәрҙәге бөтә һый — тышы май менән сак кына йылтыраткан кыҫтыбый ине. Унан һуң беҙҙе юғары оста накыҫ кына донъя көткән Нурлығайән Ғәйшәһе алып китте. Быларҙа ла әлеге кыҫтыбый булып сыкты. Быны күргәс, мин әйтә һалғанмын: "Был ни хикмәт? Бөтә ярлы кешеләр ҙә байрамда тары кыҫтыбыйы ғына бешерә икән..." Быны мин онотор ҙа инем. Онотторманылар. Күрше-күлән байтак йылдар буйы: "Был ни хикмәт? Ярлы кешеләр байрамда кыҫтыбый ғына бешерә икән..."— тип ирмәкләп һөйләй торғайны.*

**10.VII.99.**

*Рустың "Не в службу, а в дружбу" тигән әйтемен "Хеҙмәт күрһәтеп түгел, хөрмәт күрһәтеп эшләйем" тип булыр ине.*

**12.VII.99. Дача.**

*Бөгөн мунсанан һуң, бүтәндәргә фаш итеп тормай, арыҫлан тоторлок самаһы ғына хәмерҙән ауыҙ иттем. Әле икенсе катта үҙ бүлмәмдә ултырам. Кояш байып килә. Донъя һап-һары. Һары төҫ ул — барлык төҫтәрҙең төҫө, йәғни унда бөтә төҫтәр ҙә бар. Унда бөтә миҙгелдәр бар. Юкка һары төҫтө көҙгә генә япһаралар... Ә түбәндәге — беренсе каттағы бер катлылар мине, эш бүлмәһендә ҙур эштәр, тәрән фекерҙәр менән мауығып ултыра, тип*

*үйлайҙарҙыр, моғайын. Ә мин Киләш тарафтарына ҡарап, рухланып ултырам. Донъя шундай ябай: ҡаршымда ҡайындар һилдә ойоп ултыра, үләндәр өҫтөндә ҡояштың һуңғы нурҙары йымылдай. Мин билдәле шағир ҙа, донъя күргән, күпте кисергән фекер эйәһе лә түгел. Мин үҙ кәйефемә үҙем риза булған "ҡыҙмаса баш"мын. "Ҡыҙмаса баш" булыу ошо мәлдә ярайһы ғына дәрәжә икән. Минең был дәрәжәмде түбәнәйтеп ҡараһындар әле...*

*Ниндәй күркәм әкиәт донъяһына килеп индем әле мин, хатта бынан сығып китеүе лә аяныс буласаҡ. Мунсаға тиклем бер шиғыр яҙырға маташып ҡараным. Бары тәүге строфаһы килеп сыҡты.*

*Ошбыу донъяға юлыҡтым*
*Юрамал, уйнап ҡына.*
*Тәңре әйтте: "Ҡәҙерен бел,*
*Һин бында ҡунаҡ ҡына".*

**14.VII.99.**

*Ҡабатлау булһа, һыҙырмын.*

*Һайыҫҡан осҡанда шыҡырҙай, сәүкәләр сыр-сыу килеп ҡысҡыра. Бүтән мөһабәт ҡоштар ҙа осҡанда үҙҙәренә хас өн сығаралар. Мәшһүр һабан турғайы ла күккә ашып йырлай. Бер һандуғас ҡына ҡыуаҡ араһына ҡасып, йәшеренеп һайрай. Моғайын, даһиҙарҙың асылы шулдыр. Улар ялпыға күренер өсөн ижад итмәйҙәр, ә үҙҙәренең бөйөк рухтары менән үҙҙәре серләшәләр, үҙҙәре бәхәсләшәләр. Бәләкәс кенә һоро ҡошсоҡ — һандуғас — ана шул даһиҙар затынан. Тәбиғәт закондары ҡоштар өсөн дә, әҙәмдәр өсөн дә бер.*

**18.VII.99.**

*Кисә беренсе тапҡыр күңел булырлыҡ ямғыр яуҙы. Бөгөн дә төшкөләп китте. Игендәр тын алып ҡалды.*

**29.VII.99.**

*Тап 10 йыл әүәл, Ырымбур өлкәһендә Рауил Бикбаевтың һеңлеһе Зөлхизәләрҙә ҡунаҡ булғаныбыҙҙа, иртә таңда тороп немецтарҙан ҡалған ҡаралтыларҙы ҡарап йөрөгәндә, бер аласыҡ ишеген астым. Шунан бер эт килеп сыҡты ла минең уң балтырымды умырып тешләп алды. Эттең исеме Фред ине. Мин укол ҡаҙатып маташманым. Фредтың сәләмәт булыуына ышанып, сара күрмәнем. Шулай ҙа Рауил, аҙна һайын шылтыратып: "Фред ҡоторманымы?"— тип һорап торҙо. Әле генә күршем Альберт менән һөйләшеп торғанда, уның эргәһендәге эте Каштанка (йәнәһе, артист аҡтығы) шым ғына килеп, уң балтырымды батырып тешләп алды. Теге саҡтағы кеүек, салбар балағым да йыртылған булып сыҡты. Хәҙер Каштанканың хәлен белеп торорға тура килә. Ул ҡотороп китмәһә, шәт, мин дә ҡотормам. "Үҙебеҙҙең эт" тип, был юлы ла укол-фәлән менән маташманыҡ.*

*Быларҙы ни өсөн яҙам әле? Әллә ни ҙур ваҡиға түгел дә. Шулай ҙа мин, был "тешләнеү"ҙең файҙаһы барҙыр, тип ышанам. Ул, моғайын, организмды нығытып, кешегә эт сыҙамлығы бирәлер. Фредтың "дауаһы" 10 йылға еткәйне, Каштанканыҡы бишкә сыҙаһа ла ризамын. Унан арыһына тағы берәй эт табылыр әле. Тормошта ла мине тешләштергеләп нығыттылар. Берәүҙәр, Фред ише, өҫкә ташланды, икенселәр, Каштанка ише, арттан тешләп ҡасты. Һәр осраҡта фәһем һәм тәжрибә алдым.*

**8.VIII.99.**

*Береһе көндө Галина Гәрәеваның бал ҡорттары, тилереп, бөтә тирә-яҡ кешеләрен сағып бөттө. Мине 4-5 ерҙән эләктерҙеләр. Өсөнсө көн шешенеп*

*йөрөйөм. Етмәһә, кейәүем Олег мыҫҡыллап көлә:"Шешенгәнсе шулай нимә эстең, атай?"– ти. Йә эттән, йә бал ҡорттарынан яза алып йөрөйөм шунда.*

**15.VIII.99.**

*Вдруг начал вспоминать, в каких домах я жил в Уфе. В 1928 году ночевал у наших односельчан в доме № 113 по улице Егора Сазонова (потом – ул. Сталина, сейчас – Коммунистическая). В 1935–1937 годах, учась в педрабфаке, жил в общежитии по ул. Карла Маркса, 31. Внизу был хлебный магазин. Когда учился в пединституте, один год жил в общежитии по ул. Гоголя, 11. В августе 1938 года мы с Вали Нафиковым переехали на квартиру, Достоевского, 47. Это был двухэтажный деревянный дом, мы жили на втором этаже. Дом теперь снесен. В том же доме в апреле 1941 года мы с Раузой поженились. Наша хозяйка Хадия апа была родной тетей Раузы. Оттуда я уехал на войну. После войны до сентября 1947 года оставались там же. В сентябре 1947 года нам дали две комнаты в трехкомнатной квартире. Дом барачного типа находился по улице Свердлова, 49. Он тоже снесен. В декабре 1953 года нам выделило Правительство трехкомнатную отдельную квартиру по ул. Ленина, 65 (кв.9). В ноябре 1958 года по прямому указанию первого секретаря обкома КПСС Нуриева З. Н. предоставили нам 4-х комнатную квартиру с залом в 35 кв.м. Нуриев сказал мне:"Многие видные деятели культуры, литературы, приехавшие в Уфу, бывают у тебя в гостях. Твой дом должен быть просторным". Там мы прожили ровно 40 лет. Стены той квартиры хранят голоса и ауру многих и многих моих друзей и высоких гостей. Тут были Константин Симонов, Расул Гамзатов, Чингиз Айтматов, Сабит Муканов, Кайсын Кулиев, Хасан Туфан, Давид Кугультинов, Асхад Мухтар, Зульфия, Сергей Михалков, Гумер Баширов, Абдижамил Нурпеисов, Михаил Дудин, Мирзо Турсун-заде, Дмитрий Павлычко, Геворг Эмин, Яков Ухсай, Педер Хузангай, Президент Татарстана Минтимер Шаймиев, Шухрулло, Лев Константинович Богуш (академик), целые группы татарских, украинских, чувашских, азербайджанских, горно-алтайских, ленинградских, казахских писателей. Были иностранцы, не столь знаменитые, но видные деятели культуры и литературы.*

*В январе 1999 года переехали на ул. Энгельса, 5, чтобы соединиться с семьей Альфии. После болезни Раузы (она уже более 5 лет) мне трудно стало организовывать быт, Альфии – еще труднее. К новой квартире привыкаем медленно. Там остались 40 лет жизни, дух общения с людьми. Здесь этой атмосферы нет. Стены холодны, глухи, они не обогреты, не освещены, не обласканы душами моих друзей.*

**21.VIII.99.**

*1935 йылда педрабфакта уҡый башлағас та, беҙҙең бөтәбеҙҙе лә врач ҡараны. Общежитиеға килде ул. Йәш кенә мәрйә ине. Ҙур бүлмәлә малайҙар, сисенеп, сират көтәбеҙ. Нәүбәт миңә етте. Фамилиямды һораны. Әйттем. Исемемде әйтергә аптырабыраҡ ҡалдым. Мине былай "Мостай" тип йөрөтәләр, мулла ҡушҡаны – "Мостафа". Мин ҡыҫҡырып яуапланым: "Мулла сказал – Мустафа". Малайҙар көлөп ебәрҙе һәм байтаҡ ваҡыт мине ирештереп "Мулла сказал – Мустафа" тип йөрөттөләр. Бара торғас оноттолар.*

**3.IX.99.**

*Рауза бөгөн тәҙрәгә ҡараны ла:*
*– Көндөҙ бөгөн төҫө йәмһеҙ икән,– тине. Тышта ямғыр яуа.*

***

*Раузаның күңелен күтәреү өсөн мин йыш ҡына йыр сығарып, уға әйтәм.*

*Ағиҙелдең аръяғында*
*Көтөү-көтөү боландыр.*
*Көн-төн һине уйлай-уйлай*
*Диуаналар буламдыр.*

**6.IX.99. 11. 30 м.**

*Әле генә Назарҙың вафаты тураһында хәбәр етте. Йәнем тетрәне. Беребеҙ өсөн дә көтөлмәгән хәл түгел. Мин һине, Назар, ғүмер буйына яраттым (60 йыл). Төрлө саҡ булды. Һин минең данымдан һәм мөхәббәтемдән көнләшеп яфаландың, үҙеңде үҙең бөтөрҙөң. Минең бында бер гәйебем дә юҡ. Мин һинең даныңды ла, мөхәббәтеңде лә тартып алманым. Һин, Назар, ҙур шағирһың. Һин киттең, мин ҡалдым. Һинең үкенестәрең юҡ хәҙер. Үкенеүҙәр — тереләргә генә хас нәмә.*

*Уның менән тәү тапҡыр трамвайҙа осраштыҡ. Володарская урамында урынлашҡан Матбуғат йортонан үҙәккә табан ҡайтып килә инек. Күрәһең, ул мине шунда “Башҡортостан” редакцияһында шәйләп ҡалғандыр. Үҙе килеп танышты. Илле йылдан ашыу уның менән тормош тип аталған, әҙәбиәт тип исемләнгән “трамвай”ҙа бергә йөрөнөк. “Трамвай”ҙың айҡалып-сайҡалып барған, сөйләгөп-һөрлөгөп киткән саҡтары ла булды. Беҙ бирешмәнек, ҡолап төшмәнек. Аяҡ өҫтөндә ныҡ торҙоҡ. Был юлдарҙы мин уның кәүҙәһен күреп ҡайтҡас, көс-хәл менән яҙам.*

**7.IX.99.**

*Назарҙы оҙаттыҡ. Дүртөйләгә — Миңештегә алып киттеләр. Хушлашыу Нефтселәр һарайында булды. Халыҡ күп ине. Былай тышта, урамда халыҡ булманы. Мин быға бик ғәжәпләндем. Иҫән ваҡытында уның аудиторияһы ҙур ине. Ижад кисәләрендә тамашасылар шығырым тулы була торғайны. Белмәй ҡалыусылар күптер. Кешеләр баҡсала бит. Хушлаша алмай ҡалғандар үкенер инде. Назар менән бергә үҙемдең дә өлөшөмдө оҙаттым. Йәш буйынса башҡорт яҙыусылары араһында иң өлкәне мин ҡалдым. Сират миңә килеп төртөлдө. Ҡырлы-мырлы дуҫым, көт, оҙаҡламай мин дә һине ҡыуып етермен. Был хәл ҡотолғоһоҙ, һин бирешмәй киттең.*

**10.IX.99.**

*Только в одном случае разлука меня не огорчает — это разлука с солнцем на закате, ибо оно утром непременно вернется живым и здоровым.*

**13.IX.99.**

*Кисерештәр эҙһеҙ үтмәне. Ҡан баҫымым 220/110. "Ашығыс ярҙам" саҡырттыҡ, уколдар ҡаҙанылар. Төнөн тыныс йоҡланым.*

*Унынсы числола минең 80 йәшлегем тураһында Президент Указы булды. Был ҙур нәмә. Йөкмәткеһе лә ҙур, факт буларак та эре. Хәтерем хаталанмаһа, әлегә тиклем тере шәхескә ҡарата республикала мотлаҡ Президент Указы сыҡҡаны юҡ ине. Бер төрлө уңайһыҙ ҙа булып китте хатта. Саманан артмаймы икән был, тим. Шунығы ҡыҙыҡ: Указ сығыу тураһында берәү ҙә шылтыратманы. Күрәһең, быны һәммәһе лә — дуҫтар, таныштар ҙа — тәбиғи хәл тип ҡабул ҡылғандыр. Ә бит был ғәҙәти генә ваҡиға түгел. Мин уны бик юғары баһалайым. Ҙур награда был...*

**13.IX.99.**

*Подлинное счастье сродни вдохновению. В том и другом случае испытываешь такое ощущение, будто общаешься с небесами, прикасаешься к самому Создателю.*

**21.IX.99.**

*Бөгөн яңы ҙур бәлә өҫтәлде беҙгә: Рауза, йығылып, оса һөйәген һындырҙы. Әле ул атлап йөрөгәндә хәленә зарланһа, мин йыуата инем: “Шөкөр ит, бөтөнләй ятып сирләүселәр ҙә күп”. Зарланды, үҙ хәленә ризалаша алманы. Шоңҡар ине ул, тауыҡ хәленә төшөүен ҡабул ҡылманы. Бөгөн килеп ошо фажиғәгә тарыныҡ. Сабырлыҡ, сыҙамлыҡ кәрәк. Сирле бала кеүек бәләкәс кенә булып ята. Киске 9-ҙа профессор Булат Шамилевич Минасов килде. “Хәле насар. Хәҙер үк больницаға алып китергә кәрәк,— тине.—Иртүк операция яһарға тура килә. Был — ҡотолғоһоҙ. Юғиһә һәләк буласаҡ”. “Скорая помощь” килтертте. Сәғәт 10-да алып киттеләр. Әлфиә менән Олег китте. Минасов операцияны үҙе яһаясаҡ. Рауза әйтеп китте: “Йә тегеләй, йә былай булыр инде. Иртәгә иртүк кил. Һуңлама”,— тине. Был көндәрҙә ул һәйбәт кенә йөрөй башлағайны. Зиһене лә асыҡлана төштө. Үҙе: “Мин тиҙҙән китеп барырмын инде”,— тип бер нисә тапҡыр ҡабатланы элегерәк.*

**22.IX.99.**

*Сәғәт 9-ҙа Рауза эргәһендә булып ҡайттым. Реанимацияла ята. Төҫө ныҡ киткән. Мине танны. Сәғәт 10-да операция башланырға тейеш. Әле өйҙә Минасовтың звоногын көтөп ултырам. Эшләп бөткәс, ул шылтыратырға тейеш. Хәлдәр хәүефле.*

*...Операция уңышлы уҙған. Бөгөн эргәһенә индермәйҙәр. Иртәгә барырмын.*

**20.X.99.**

*Бына айҙан ашыу инде ығы-зығылы йәшәйем. Октябрҙең 22-һендә тантаналы йыйылыш. Ә Рауза реанимацияла ята. Күңелдә байрам юҡ. Радио, телевидение, гәзиттәр шаулай. Ныҡ шаулай. Әйтерһең дә, минең менән хушлашырға ашығалар. Был эштәр ихлас күңелдән эшләнәләр, тим. Әммә бындай шау-шыуҙар кешеләрҙең ҡолағын тондороп, минән биҙҙереп тә ҡуймағайы, тип ҡурҡам. Хоҙай ҙа (мосолман хоҙайы) тораташҡа әйләнһә, бәҫен юғалтыр ине.*

**5.XI.99.**

*Больницаға яттым, Рауза эргәһендә булайым, тинем. Ул һаман әле реанимацияла. Йәнемә урын таба алмауҙан “История древней Греции” тигән китапты уҡый башланым. Аристофандың шундай юлдарына тап булдым:*

> *Ведь демагогом быть — не дело грамотных,*
> *Не дело граждан честных и порядочных,*
> *Но неучей, негодных.*

**7.XI.99.**

*Был көндөң ниндәй бөйөк, ниндәй тарихи икәнен хәҙер аҡыл ғына баһалай, ә күпме генә теләһәм дә, әүәлгесә рухты ҡанатландырыусы, йәнде йәмләндереүсе яҡтылыҡ, йылылыҡ тоя алмайым. Байрамды урланылар, байрамды талап алдылар яуыздар.*

*Рауза икенсе ҡатта. Сәғәт һайын янына төшәм, ҡулдарын тотам. Тынысланa, хатта ҡыуана. Үҙе сабый шикелле беспомощная. Фекере ныҡ бутала. Күңелдә борсолоу ғына түгел — ғазап. Ни көтә беҙҙе?*

**8.XI.99.**

*Телевизорҙа милиция байрамына арналған концерт ҡараным. Шуның барышында төрлө хәбәрҙәр һөйләп, эпизодтар күрһәтеп алдылар. 1995 йылда Чечняла һәләк булған милиция майоры тураһында һөйләнеләр. Ҙур шәхес булған. Шуның тол ҡатынынан былай тип һоранылар: “Прошло 4 года после его смерти. Вы снова замуж не вышли?” Ошондай яуап булды: “Этого,*

*наверное, никогда не случится. Муж мой покойный поставил слишком высокую планку для мужчины, доступную, возможно, одному из миллиона". Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәс, күҙҙәремдән йәштәр бәреп сыҡты. Шул ҡатындың рух илаһилығына һоҡландым. Мәрхүм майорҙың үҙе үлгәс тә шәхес бөйөклөгөнә үлсәү булып ҡалыуына ғорурландым. Мин дә ир затынан бит әле...*

***

*Богатые евреи вроде Березовского своим беспредельным цинизмом и вызывающим нахальством ставят под удар своих сородичей — умных, порядочных, работящих евреев. Они вызывают, разжигают ненависть и вражду к целой нации. Корень антисемитизма в наше время не в генах россиян, а в деяниях березовских. Вот к такому выводу пришел я. Так же дудаевы, басаевы (уже масхадовы) эту миссию выполняют в Чечне. Он, начиная со времени вступления на "престол" Дудаева, ставят свой народ под ненависть других.*

*Я еще помню то время, когда люди дарили друг другу книги, поздравляя с днем рождения или с праздником. Мои дети Ильгиз, Альфия, Булат делали то же самое, поздравляя меня и Раузу.*

*"Странное" время, "странные"люди...*

**15.XI.99.**

*Бынау Сергей Доренко тигән телевидение бандиты аҙна һайын экрандан донъяға бысраҡ һибә. Ул үҙен, ҡыйыу арыҫланмын, тип уйлай, ахырыһы. Ул ни бары — емтек менән генә туҡланыусы сүл бүреһе, шакал бит. Бөгөнгө көндә ул — Россияла иң хәшәрәт сәйәси фәхишә, һатлыҡ йән. Түҙмәнем, шуға "ода" яҙҙым.*

*Эйәһеҙ эт, ояһыҙ эт*
*Өрмәҫ икән.*
*Өрөүҙең ул мәғәнәһен*
*Күрмәҫ икән.*
*Бәйҙәге эт хужа малын*
*Өрөп һаҡлай,*
*Эйәһен ул бүтәндәргә*
*Өрөп аҡлай.*
*Мәскәүҙә бар шундай бер эт —*
*Сергей атлы,*
*Емтек ашап, өрә-өрә*
*Һыны ҡатты.*
*Ғыжнап бөткән. Ә шулай ҙа*
*Йылғыр ҡалай:*
*Тәмләп-тәмләп хужаһының*
*Артын ялай*
*Ошо малай.*

**17.XI.99.**

*Тышта буран. Епшек ҡар яуа. Көн ауыр. Раузаның кәйефе үтә һүрән. Бөтә нәмәгә, хатта миңә лә битараф бөгөн.*

*Кисә Дим районында осрашыуҙа булдым. Мәктәп балалары һәм уҡытыусылар йыйылғайны. Район башлығы Зыфар Хәкимов бик матур, мәғәнәле һүҙ әйтте. Шиғырҙарымды балалар башҡортса ла, русса ла еренә еткереп уҡынылар. Йәштәр театры "Ҡыҙ урлау"ҙан өҙөктәр күрһәтте. Көлдөләр. Мин дә көлдөм.*



Рауил
БИКБАЕВ

# ХАЗИНА

## ПОЭМА

*Йырлағылар килеп китә,
Тәҙрәләрҙе шар асһаң.
Хәйерле иртә, күршеләр!
Ап-аҡ сәскәлә баҡса.*

*Көн ниндәй матур башлана,
Хәйерле көн, баш ҡала!
Майҙанда бейектә сәғәт
Дәүләт гимнын башҡара.*

*Күперәп сәскә атҡан баҡса,
Донъя тулған нур-ҡотҡа.
Мәсеттән аҙан моңо ла
Килеп етә был йортҡа.*

*Ҡунам тип тәҙрә төбөнә
Күгәрсен ҡанат ҡаҡты.
Баҡсалы, сәскәле йорттар
Ҡыуандырыр ҡомартҡы.*

*Төҙөгән ниндәй оҫталар,
Һокланмаҫ кемдәр генә.
Тәҙрәләре, кәрниздәре
Селтәр ҙә семәр генә.*

*Ҡайһы ижадсы ҡулдары
Йорттарҙы сәнғәт иткән?!
Ағастан селтәр бәйләгән,
Таҡтанан сигеү сиккән.*

*Йорттарға уйылып ҡалған
Дәрттәре, һәләттәре.
Һәр өйҙөң тик үҙ биҙәге,
Үҙ семәре, селтәре.*

*Аҡ болот һымаҡ сейәләр,
Шау сәскә алмағастар.
Донъяға һокланып, Юлдаш
Тәҙрәләрен шар асҡан.*

***

*Илдең аҫыл ире ине
Ҡаһарман Ғәҙел Аҡъюлов.
Ҡырҙы күпме ҡаһарманды
Тарихтың ҡара йот йылы.*

*Утыҙ ете, утыҙ ете,
Иңрәй ирҙәр, төрмә тулып.
Аталарын атҡан таңда –
Утыҙ һигеҙҙең йәйендә
Малай тыуҙы вариҫ булып.*

---

*Рауил Бикбаев – Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты, мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт, туризм һәм йәштәр эштәре буйынса комитет рәйесе. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев ордены кавалеры.*

*Атай ҡаҡҡан дүңгәләккә*
*Эленмәне сәңгелдәге –*
*Өйөн сабый күрмәне лә.*

*Әсә ҡулына әсе яҙмыш*
*Һалды үкһеҙ был баланы,*
*Биләп хәсрәт йүргәгенә.*

*Исемен Юлдаш тип ҡушты –*
*Эй, әсәнең ышаныуы.*
*Ҡара мөһөр төп исеме:*
*“Улы халыҡ дошманының”.*

*Өнһөҙ ҡалған әсә вә ул*
*Нужаларҙың үтте сиген.*
*Мираҫ булып атаһынан*
*Улына күсте аҡыл-зиһен.*

*Уҡыйым тиһә, биктәр ҡуйҙы*
*Ҡара мөһөр аҡ юлына.*
*Ярамай тарихсы булыу*
*Халыҡ дошманы улына.*

*Ҙур белемдәр бикле икән –*
*Өфөлә эш тулып ята.*
*Заводында абруйы ҙур,*
*Тик күңелен тарих тарта.*

*Исемен аҡлап Ғәҙелдәрҙең*
*Килде яҙыу-ҡатырғалар.*
*Тибеп сығарылған йортка*
*Яҙған икән ҡайтырға ла.*

*Егет булғас, асылды бит*
*Сабый саҡта асылыр ишек.*
*Өйгә алдан әсә инде*
*Берсә янып, берсә өшөп.*

*Йөрөтмәҫтер инде яҙмыш*
*Ҡабат типкеләп, түбәләп.*
*Эленеп тора түбәлә*
*Атаһы ҡаҡҡан дүңгәләк.*

*Юллап-даулап алды Юлдаш*
*Атай йортона ҡайтыуҙы.*
*Өйгә тағы ҡот өҫтәлде –*
*Килен төштө.*
*Малай тыуҙы.*

*Эленде ейән бишеге*
*Ҡарттай ҡаҡҡан дүңгәләккә.*

*Улы үҫә.*
*Донъя имен.*
*Бәхет өсөн күп кәрәкмәй!*

*Ошо йортка ҡайтканға ла*
*Ярты быуат үтеп киткән!*

*Көн башлана.*
*Юлдашҡа ла*
*Юлланырға ваҡыт икән.*

***

*Ҡуҙғалырға ваҡыт.*
*Был эш менән*
*Ҡайҙа ғына Юлдаш барманы.*
*Ул төҙөгән шәжәрәнең бөгөн*
*Ялғанмаҡсы яңы тармағы.*

*Ялғанырға торған был тармаҡты*
*Һуңға ҡалмай тиҙерәк табырға!*
*Был тирәлә күптән булғаны юҡ –*
*Танымаҫлыҡ булып яңырған.*

*Һәр тыҡрыҡты белгән Юлдаштың да*
*Аптыраwта тағы ҡалыуы.*
*Оҙағыраҡ күрмәй килеп сыҡһаң,*
*Таныш ерҙе ҡыйын таныуы.*

*Матурая Өфө.*
*Балҡып тора*
*Яңы театрҙар, банктар.*
*Ни арала ҡалҡа тауҙай йорттар –*
*Һаман торлаҡ етмәй халыҡҡа.*

*Үҫмер саҡтан ил тип билен бөккән*
*Ҡартлығында асҡа ҡаҡлана.*
*Кемдәр йәшәй икән был йорттарҙа,*
*Ала икән ниндәй аҡсаға?*

*Шаҡ ҡатырлыҡ торлаҡ хаҡтарына!..*
*Ниндәй хаҡтар!..*
*Башбаштаҡлыҡ шаша,*
*Кем һуң тыйыр?*
*Хөкөм юҡ микән?*

*Ғүмерендә бында фатир алмаҫ*
*Хәләл эш хаҡына тир түккән.*
*Олатайҙарҙың түккән тирҙәре,*
*Өләсәйҙәрҙең бөккән билдәре,*
*Атайҙарҙың яуҙа янғаны,*
*СССР тип түккән ҡандары,*
*Әсәйҙәрҙең ас-туң таңдары,*

Яуҙан ҡара ҡағыҙ алғаны,
Күпме бала менән ҡалғаны,
Ағайҙарҙың сиҙәм ярғаны,
Апайҙарҙың һыйыр һауғаны,
Тырышлығы минең тиҫтерҙең,
Өмөттәре етем-еҫерҙең,
Күпме быуын күпме көс һалған –
Бөйөк дәүләт шунан тупланған.

Миллиондарҙың хәләл хеҙмәтенән
Тупланғанмы илдең көс-ҡеүәте…
Нисә йылдар ҡотора маскарад!
Шул байлыкты урлап, Рәсәй буйлап
Миллиардерҙар үрсей!
Мәсхәрә!

Бармы беҙҙең һымаҡ таланған ил, –
Ботарлайҙар бөйөк Ватанды.
Был тиклем дә урлап була икән
Ҡаҙна малын, халык тапканды!
Үҫә бара һаман өйөрҙәре
Ҡандар эсеп туймаҫ талпандың.

Егеттәр бар –
Күкрәк көсө менән,
Уңғанлығы менән юл ярған.
Намыҫтары дәрттәр өҫтәп торһон,
Табыш юлдаш булһын уларға.

Яҙмыштары, ай-һай, еңел түгел,
Тик иғтибар артһын Баш йорттан.
Башҡортостан өсән терәк булып
Байыһындар яңы башҡорттар!

Илде ҡотайтырлыҡ байҙар артһын,
Илде байыҡтырып байыҡһын.
Үрнәк алһын унан йәш уңғандар,
Иҫерек ауыл тиҙерәк айыҡһын.

Ер сигенән килеп, байып ята
Еребеҙҙә күпме килмешәк.
Ҡул ҡаушарып, ғәмһеҙ ҡарап торһаҡ,
Ошо хәлдәр менән килешһәк,

Тура килмәгәйе тыуған өйҙә
Өйҙәш кенә булып йәшәргә.
Тупланығыҙ, башҡорт уңғандары!
Милләтебеҙ ҡарай йәштәргә.

Ҡаршылыктар аша Башҡортостан
Яңы уйҙар ҡора, юлдар яра,
Алға бара – иҫтәр китерлек!
Аңдып торған мәкер-хәйләләрҙе
Тик зирәклек менән еңерлек тә
Үткерлектәр менән үтерлек.

Ҡоторғанда заман,
Яҙмышты тик
Тырышлыктар менән тоторға.
Ситтән килеп ярҙам итмәҫ бер кем,
Ситтәр килер талар-оторға,
Ситтәр килер һоғонор-йоторға.

Бер кем ситтән килеп төҙәтмәҫ тә
Ситтән килеп бер кем ҡоткармаҫ.
Сит ярҙамдан донъя ҡотаймаҫ,
Булған ҡотоңдан да ҡот ҡалмаҫ.

Хәләл малды харап итә харам,
Милләт мөлкәтенә ҡул һуҙып.
Бурҙай эттәй бур – бай!
Урлап таптың
Йөҙ һумыңдың туҡһан туғыҙын.

Батша һарайындай был йортоңдоң
Нигеҙенән түбәһенә тиклем
Урланған мал –
Иҫтәр китерлек!
Урлап табылғанын һурып алһаң,
Йөҙ кирбестән ҡалмаҫ бер кирбес.

Байлыҡ сумырып,
Сымылдыҡҡа сумып
Йәшәүҙәре һиңә бик шәптер –
Был бит тирен түккән, билен бөккән
Бер ҡарт ята торған түшәктер.
Тик хаҡ хөкөм телһеҙ нишләптер.

Инде нисәмә кат иномарка
Яңыртаһың, һайлап иң шәптән.
Ғәйрәттәрен һәр бер машинаңдың
Ат көстәре менән һанама һин,
Кеше көсө менән иҫәплә:

Һөйрәп йөрөтә һинең лимузинды
Ыҙа сиккән күпме сабыйҙар.
Йыуа уны нахаҡ күҙ йәштәре,
Әллә ҡайҙан шуға таныйҙар.

Маһаяһың:
– Мин – хан, мин – солтан! – тип.
Лаф ораһың:
– Мин бит супермен.

*Илдең ҡанын имгән имгәкһең бит,*
*Юлыбыҙҙа бер шеш – төмгәкһең бит,*
*Һай, супермен, имеш!*
*Күҙгә төшкән бер сүп,*
*Сүп ир һин!*

*Үкһеҙҙәрҙе был йән йәлләр, тиеп*
*Мәрхәмәттәр көтмә һис кенә.*
*Илде талағандың бәғере таш,*
*Уғры байҙан сыҡмаҫ меценат.*

*Йырып-йыртып ҡыра ҡырағайлыҡ,*
*Меңдәр – тибелә, берәү – типтерә.*
*Һаман егелә халыҡ, һаман бөгөлә,*
*Егелгәнгә еккән екерә.*

*Бур ҙа – Аллаһ ҡоло!*
*Бер көн килеп*
*Ғәҙел хөкөм менән күҙләшер.*
*Ҡомһоҙ күҙенә утлы ҡурғаш булып*
*Үкһеҙҙәрҙең тамыр күҙ йәше.*

*Урамдарға һыймаҫ йылғыр байҙар*
*Әйләндермәк илде меҫкенгә.*
*Ҡасан ғына халыҡ трамвайҙа*
*Йөрөп ятыр ине өс тингә.*

*Һау бул, трамвай!*
*Юлың ҡутарылған,*
*Рельс-шпалдарың һүтелгән.*
*Тура килә бөгөн Юлдаш дуҫҡа*
*Хәтирәләр буйлап үтергә.*

*...Гиҙгән саҡта Өфө урамдарын,*
*Сыҙай алмай йөрәк һыҙлауына,*
*Мин дә әйтәм ошо һүҙҙәрҙе.*
*Ҡала ғына түгел,*
*Күпме кеше*
*Танымаҫлыҡ булыр үҙгәрҙе.*

*Таныштарҙы таный алмай торам,*
*Килеп сыҡҡандармы сит ерҙән?*
*Күңелдәрҙә беҙҙең бер үк әрнеү,*
*Юлдаш ҡорҙаш, Юлдаш фекерҙәш.*

***

*Беҙҙә һаман ихлас инаныуҙар,*
*Етербеҙ ҙә инде хаҡ көнгә.*
*Илдең ҡанын эскән ялмауыҙҙар*
*Тартылмайса ҡалмаҫ хөкөмгә.*

*Күңелдәрҙә өмөт ҡатыш әрнеү,*
*Таҫма телдәр нисек осона!*
*Уйҙарының осона сыға алмай*
*Сыкты Юлдаш юлының осона.*

*Был кешенең туктап ҡалғаны юҡ,*
*Тотоноуы булһа бер эшкә.*
*Мәғрур ҡыҙыл йорттар араһында*
*Етемһерәй һоро хрущевка.*

*Заманында был йорт тирә-яҡҡа*
*Күренеп тора ине, һай, мыкты!*
*Юлдаш бөгөн был биш ҡатлы өйгә,*
*Эҙләй-эҙләй, саҡ-саҡ юлыкты.*

*Ҡайҙан белһен йәштәр емерек ил*
*Харабанан ҡалкҡан саҡтарҙы:*
*Заманында күпме өйһөҙҙәрҙе*
*Ошо һоро йорттар ҡоткарҙы.*

*Бер мөғжизә ине күсеүҙәре,*
*Ниндәй ихлас ине байрамдар!*
*Юлдаш хәтерендә ул табындар*
*Тик татыулыҡ булып ҡалғандар.*

*Бишенсе ҡат.*
*Бына кәрәк ишек.*
*Ҡыңғырауы яра ҡолаҡты.*
*Ошондайҙы әйтеп ҡуйҙыртҡандыр –*
*Ишетеүе насар ул ҡарттың.*

*Асыусы юҡ.*
*Бик оло шул ағай.*
*Бындай йәштә кем бар атлыҡҡан?*
*Телефондан һөйләшкәйне улар*
*Осрашырға ошо ваҡытта.*

*Сабыр көттө Юлдаш.*
*Ҡыңғырауҙы*
*Һөрәнләтте тағы.*
*Бер яуап юҡ.*
*Асылып китте күрше ишеге.*
*Сыҡҡан кеше бойоҡ ҡына әйтте:*
*– Ерләнек бит кисә күршене.*

*Исмаһам, бер күреп һөйләшергә*
*Яҙмаған бит –*
*Ниндәй үкенес!*
*Тағы һуңланым, тип, юғалттым, тип*
*Буламы ни ғәфү үтенеп?..*

*Юлдаш юлда туктап ҡалғаны юҡ,*
*Һүнгән өмөт яңынан ҡабыныр.*

Шәжәрәнең был йорттағы осо
Табылыр ул,  барыбер табылыр.

***

Алда әле күпме оҙон юлдар,
Ғүмер ниңә шулай ҡыҫҡа һуң?
Булды Юлдаш ышанеслы юлдаш,
Һөнәренең булды оҫтаһы.

Маһирлыкта уға тиңләшерлек
Һирәк ине токарь эшендә.
Шуға Хеҙмәт даны орденының
Өсөһө лә Юлдаш түшендә.

Ҡот өҫтәне өйгә улы менән –
Азаматы менән килене.
Ғәҙел ҡаҡкан ҡотло дүңгәләккә
Бүләр сәңгелдәге эленеп,
Яңы быуын артты шәжәрәлә,
Һиҙмәне йорт тиҙҙән иларын…
Ниңә яҙмыш яңылыш хөкөм ҡылды –
Йәш ғаиләнең бәхетен урланы?
Ата-әсә юлда һәләк булды,
Иҫән ҡалды Азат улдары.

Юлдаш үҙе атай күрмәй үҫте,
Ейәне лә ҡалды атайһыҙ.
Яңы тәпәй баҫкан сағы ине,
Алда күпме юлдар атлайһы…

Үҫте сабый.
Атай һәләк булһа,
Ҡартатайҙан күргән – уҡ юнған.
Тамыр йәйҙе Азат күңелендә
Юлдаш әйткән, Юлдаш уҡыған.

Ғүмере буйы Юлдаш китап менән
Ҡанатланды. Янды. Шаңҡыны.
Был йорттағы тарих китаптары! –
Азатка ла тейҙе шауҡымы.

Йәшәмәне Юлдаш тарихтағы
Уйҙырмалар менән ярашып.
Һәр шәхескә үҙ баһаһы булды,
Ваҡиғаға – үҙенең ҡарашы.

Математик һанды боҙа алмай,
Ә тарихсы! –
Барыһын борғослай.
Мәҙхиәләр йырлай кәбәхәткә,
Ҡойороҡ болғай ахмаҡ бойороҡка.

Бармы фәндәр араһында
Тарихтан да нығыраҡ уйнаш иткән,
Уҙғандан да нығыраҡ боҙолған?!
Бөгөн барыһына ҡара яға,
Кисә буяй ине ҡыҙылға.

Нисә быуындарҙы һөрән һалып,
Ҡыҙыл байраҡ сөйөп атлатты.
ВКП(б), КПСС тарихын
Доға урынына ятлатты.

Алмашынды һөрән-цитаталар,
Алмашынған һайын юлбашсы.
Зиһене алышынған һәр юлбашсы
Бөйөктәрҙән бөйөк булмаҡсы.

Халыҡ ижад иткән ил тарихын
Үҙ яйына көйләй батшалар.
Әйтерһең дә, бөтә бөйөк эштәр
Яңы даһи килгәс башлана.

***

Уйҙарынан арынып китте Юлдаш,
Ҡапыл кемдер еңдән тартҡанға.
Өйөрө менән көньяҡ сабыйҙары
Мөлдөрәшеп күҙгә баҡҡандар.

Әле ҡасан ғына күпме башҡорт
Олаҡҡайны йылы тарафтарға…
Эй, яҙмыштар!
Донъя – ҡуласа.
Хәҙер шул яҡтарҙан бисаралар,
Беҙгә килеп, хәйер һораша.

Ҡара күҙле ҡара бала-саға
Ҡулын һона ҡарап мөлдөрәп.
Эй, бисара йәндәр еңдән тарта,
Йылдан-йылға улар күберәк.

Ә һуң күпме башҡорт ситтә зарыға,
Башҡортостан – гөлбостанға
Ҡайтырмынмы, тип, бер көн.
Ҡайтыр башҡортка урын тар,
Ҡасаҡтарға юл иркен.

Ҡасаҡ битлеге ябынған
Ҡараҡтар ҡосаҡта.
Үҙ балаң ҡаңғыра
Сит яҡта.

Башҡортостан!
Ерен-иркен һаҡлап,
Күпме ғәййәр башҡорт башы осҡан.
Килмешәктәр – түрҙән,

*Аҫабалар – остан,*
*Үрҙә – ҡуштан, кәштән,*
*Үҙеңдеке – тышта.*

*Төҙөк урамдарҙа*
*Емерек яҙмыштар.*
*Теләнселәр, хәйерселәр,*
*Хәсрәт-һағыштар.*

*Эй, баш ҡала, эй, бай ҡала,*
*Эй, Өфө ҡалалары!*
*Байрамдарҙа канат кирә,*
*Майҙандарҙа тирмә ҡора*
*Башҡорттоң ағалары.*
*Ҡурай тарта аҡ еләнле*
*Аҡһаҡал бабалары,*
*Сая бейеп, һоҡландыра*
*Йәштәре, балалары.*

*Эй, илгәҙәк илкәйебеҙ,*
*Эй, алсаҡ шул халҡыбыҙ.*
*Ҡунаҡтарын ҡаршы ала*
*Береһе тотоп икмәк, сәк-сәк,*
*Береһе һоноп бал-ҡымыҙ.*

*Күкрәп киреп ҡурай тарта,*
*Бейей йәйеп ҡоласын.*
*Моңланғанда һандуғас ул,*
*Кәрәк икән – ыласын.*

*Талпына ҡурай,*
*Моңлана ҡурай,*
*Алҡыштар яулап*
*Донъяны урай.*

*Ил-йорт тик тормай,*
*Алға ҡыбырлай.*
*Башҡорттар бейей,*
*Башҡорттар йырлай,*
*Ә донъя урлай.*

*Яңы урыҫ илде талай,*
*Аҡса һуға яңы татар.*
*Иҫке башҡорт ҡурай тарта,*
*Йырлай, бейей, моң тарата.*
*Иҫке башҡорт иҫереп ята,*
*Яңы башҡорт ерен һата.*

*Ҡатлы-ҡатлы йорттар,*
*Ҡатлам-ҡатлам тормош.*
*Ең һыҙғанып Башҡортостан*
*Яңы тормош ҡормош.*
*Башҡортостандың был тиклем дә*
*Ҡанатланғаны юҡ ине.*
*Тормоштарҙың был тиклем дә*
*Ҡатламланғаны юҡ ине.*
*Яҙмыштарҙың был тиклем дә*
*Һынғаны, ҡатҡаны юҡ ине.*

*Күптән инде Өфө буйлап*
*Юлдаштың ошолай йөрөгәне,*
*Рухы берсә ҡанатланып,*
*Күңеле берсә таланып*
*Ҡайтҡаны юҡ ине.*

***

*Ҡайтып етһә, тағы шул күренеш:*
*Шул Күренгес янда урала.*
*– Ҡурҡма, ҡурҡма,*
*Юлдаш ағаҡайым,*
*Һинән бөгөн бер тин һорамам.*
*Мин бай бөгөн! Кеҫәм тулы аҡса,*
*Үҙем ҡунаҡ итәм, теләһәң.*

*Ауыҙынан аға һеләгәйе,*
*Ҡулы ҡутыр, бите төләгән.*

*Заманында ниндәй егет ине,*
*Ниндәй ярһыу, ниндәй ҡанатлы!*
*Әйләнде лә бөттө Күренгескә,*
*Ҡалды Шәүлә, ҡалды Ҡараҫҡы.*

*Азаматтар менән бергә үҫте,*
*Афғандарға яҙмыш ташланы,*
*Ут эсенән иҫән йөрөп ҡайтты,*
*Йәне генә иҫән ҡайтманы.*

*Йәне һынып, рухы һүнеп ҡайтты,*
*Төштәренә инә мәхшәрҙәр.*
*Ул уттарҙан ҡайҙа йәшенергә,*
*Ни мәғәнә табып йәшәргә?*

*Ата-әсәһенең бөгөлгәне,*
*Үҙенең янып көйгәне..*

*Ҡартатайҙың исеме – таҡтаташта,*
*Нисек ҡараймайҙыр ул аҡ таш та,*
*Күреп ошо хәлдә ейәнен…*

***

*Өс йыл инде Юлдаш менән Азат*
*Икәүләшеп кенә йәшәйҙәр.*
*Белгәненән Азат өсөн Гөлнур*
*Өләсәй ҙә булды, әсәй ҙә.*

Ҡырҡ йыл ғүмерен
мәктәп өсөн биреп,
Китеп барҙы якты донъянан.
Нур-яктылыҡ бөркөп йәшәне ул,
Исемен әйтһәң, һаман нур яуа.

***

Тарих тураһында хәбәр сыҡһа,
Икеһе лә ҡолағын ҡарпайта.
Ҡартатаһы һөйләй. Ейән тыңлай.
Ейән һөйләй, тыңлай ҡартатай.

**Ҡартатай:**
Шәжәрәнең һәр быуыны ғәзиз,
Ҡайырылмаҫлыҡ булып үрелһен.
Тарихтарҙа быуылып ҡалған уйҙар
Яңы быуындарҙа терелһен.

Ниндәй өмөт менән барғайным бит!
Уңманы шул бөгөн сәфәрем.
Шәжәрәм тип һаман сабасаҡмын,
Күпме ҡалған булһа йәшәрем.

Ғәмһеҙ йәндәр шулай күпме йоҡлар,
Иҫәпкә бар улар, һанға юктар,
Иҫһеҙлеккә иҫең китерлек.
Ырыуың һиндә туҡталмаһа ғына
Һынауҙы ил еңеп үтерлек.

Эй, был заман!
Хәләл закондарҙы
Харам яҡҡа бороп ебәрә.
Төп Законды борғоларға була,
Тарихтарҙы боҙоп яҙып була,
Борғоланмай бары шәжәрә.

Шәжәрә шау тарих ҡына түгел,
Шәжәрә гел алға саҡыра.
Атай булыр күпме ир йораты
Аяғында баҫып саҡ тора.

Шешәһенә йәбешеп ауғандарҙы
Тиҙ ҡаптырыр әжәл ҡармағы.
Үрелеп үҫкән бөйөк шәжәрәнең
Өҙөлә, ҡорой күпме тармағы.

**Ейән:**
Тарих һөйләр ағастар ҙа һирәк,
Урмандарҙы ҡырып һалғастын.
Аҫыл ағастарҙың араһында
Иң изгеһе – ырыу ағасы.

Салауатты күргән имәндәр бар,
Быуаттарға тамыр ебәргән.
Мөмкин түгел хатта уларҙы ла
Ырыу ағасына тиңләргә.

Иң олоһо – илдең шәжәрәһе,
Шәжәрәлә – халыҡ хәтере.
Аңы барҙың ғына атыр таңы,
Хәтере булһа ғына ил тере.

Шәжәрә шау тарих ҡына түгел,
Киләсәккә нығыраҡ ҡан тарта.
Дөрөҫ булыр микән тик уҙғанға
Ҡайырылып китеү, ҡартатай?

Тарихыбыҙ меңәр йыллыҡ, тиеп
Бәғзе берәү күңелен йыуатмаҡ.
Ни мәғәнә уҙған мең йыллыҡҡа
Ялғанмаһа яңы быуаттар?

Боронғо моң менән бергә үрелеп,
Тулһын йортка яңы шатлыҡтар.
Тәүге башҡорттарҙы юллау кәрәк –
Тик булмаһын һуңғы башҡорттар!
Ҡарайым да күпме милләттәшкә,
Күҙем түгел, күңелем шәмәрә.
Һөйләшәләр йәштәр гибрид телдә,
Күпме ырыуҙың зат ағасына
Ялғана бит гибрид шәжәрә.

**Ҡартатай:**
Һине тыңлап ҡыуанам да, улым,
Борсолам да. Бындай дәүерҙә
Иң ауыры – һеҙгә.
Күпме йәштәр
Үҙен-үҙе һала ҡәбергә.

Йәштәр менән эшләү, һай,
ҡатмарлы,
Ошо эшкә ихлас тотондоң.
Бик йыш ҡына ялдар итер мәлдәр
Онотолһа, әйҙә, онотолһон,

Тик онотма:
Тиҫтерҙәрең менән
Һеҙгә ил тип янып йәшәргә.
Юлда әле әңгәмә күп булыр,
Иртә тандан – алыҫ сәфәргә.

***

Ҡартатай менән ейәндең
Имен үтһен сәфәрҙәре.

Мине һаман  нығыраҡ арбай
Тарихтың тылсым-серҙәре.

Тәүге башҡорт йәшәгән саҡ,
Халҡыбыҙҙың сал дәүере.
Табынғаны – сыңрау торна,
Табынғаны –  изге бүре.

Күңелемә тынғы  бирмәй,
Ҡаҙалғандай  йәнгә бер сөй:
Мине тәүге башҡорттан да
Һуңғы  башҡорт нығыраҡ борсой.

Шәжәрәбеҙ тамыры тәрән,
Шыйығаймаһын тармаҡтары.
Ботаҡтарын ботарларға
Әҙер залим бармаҡтары.

Иле өсөн  баш  күтәреп,
Баш  һалмаған ситтә  кемдәр?
Ер сигенәсә  киңәйгән
Башҡорт һөрөлөр һөргөндәр.

Ҡыҫҡарғандай хоҡуғыбыҙ,
Тарайғандан-тарая ер.
Илдең тотҡаһы булырлыҡ
Аҙайғандан-аҙая ир.

Тыуған ерем, берҙән-берем,
Ҡәғбәм дә һин,
Ҡәлғәм дә һин,
Сәждәм дә һин, сәм, ғәм дә һин,
Тәғәм дә һин, йәм, тәм дә һин, –
Башҡортостан!

Тарихыбыҙ  ғорур, бөйөк,
Күпме яҙма,  күпме әйтмә, –
Башҡортостан!
Һин – ҡәғбәмде,
Һин – ҡәлғәмде ҡаҡшатмаһын
Ил тарҡатыр сәйәсәттәр.

Һанға һуҡмау милләттәрҙе
Ниндәй  илде итте һәләк!
Ниңә шундай ҡыйралыштан
Юлбашсылар алмай  һабаҡ?

Низағлашыр саҡмы  ни һуң?
Бергә күпме яуҙар сапҡан,
Рәсәй халҡы туғанлашҡан.
Ағай-эне талашһа ла,
Атҡа менһә,  ил  ярашҡан.

Яу сапҡанда берҙәм бул да
Еңеү яулап, тарҡал,  имеш.
Ҡалманы ил берҙәм булып
Эйәрҙән дә төшкән  килеш.

Ҡайҙа булды  бөйөк дәүләт?
Китаптарҙа ҡалды бары.
Ҡаҙалды бит йөрәгемә
Ватанымдың ярсыҡтары.

***

Был яҡтарҙы  Юлдаш сабый  саҡта
Тыуған төйәк  күреп  йәшәне.
Атаһының тамыры –
Бошман-ҡыпсаҡ.
Тамъян  ырыуынан  әсәһе.

Әбйәлилдә йәйҙәр бигерәк  йәмле,
Был  йәннәткә тиңдәш  ер ҡайҙа?
Ҡасан  ғына Азат килтергәйне,
Алырға тип  килде бер айҙан.

Был бер айҙа күпме кисерештәр,
Түҙһен генә инде, эй, йөрәк.
Яҡтыкүлгә ялға килгәйне лә,
Ауылдарҙа булды  күберәк.

Ял  йортоңдан артыҡ дуҫ-иш  менән
Тирмәләрҙә йәйрәп ултырыу.
Ер сигенән ҡайта ауылдаштар,
Шәжәрәһен төпсөй һәр ырыу.

Һауыҡтыра күңел яраларын
Ҡурай  моңо, тылсым көй-йырҙар.
Бынау  кейеҙҙәрҙе баҫҡан ҡулдар
Шул тиклем дә оҫта булырҙар.

Сәсәндәрҙе тыңла!
Осҡон сәскән
Һәр һүҙендә ҡөҙрәт табаһың.
Айырылмаһын халыҡ был илһамдан –
Ҡаты булды тарих һабағы.

Ил  яңыра.
Яңы  көс  ярала.
Яҡыная алыҫ аралар.
Яңы  мәктәп,  яңы  мәсет ҡалҡа.
Ҡара!
Илаһи бер манзара:
Күтәрелә күккә Юлдаш  күңеле
Күтәрелгән саҡта манара.

Һәр кем үҫтергәндә тик бер ағас,
Хәстәрләһәк йорттоң нигеҙен,
Баҡса булыр барса төйәгебеҙ,
Ҡаплай алмаҫ хафа ил йөҙөн.

Күпме күрҙе халыҡ.
Ауырҙа ла
Ауманы ил.
Булды гел татыу.

Йәннәт еребеҙгә ябырыла.
Ҡайҙан яңы афәт –
Ер һатыу?

Аҡылы алмашынған юлбашсылар
Береһен береһе алмаштырып
торҙо…
Фармандары яңы имгәктең
Башҡа күсәк булды.
Тотош илде
Иҫһеҙ итте, аңын имгәтте.
Ипләп-ипләп инде ипкә килә
Имгәтелгән хәтере милләттең.

Башҡорт еркәйенә баш булырға
Күпме ҡомһоҙ күҙҙәр
Быуат-быуат буйы ҡаныҡты.
Тыуған еренән дә ҡәҙерлерәк
Нимәһе бар тағы халыҡтың?

Аҫыл күлдәр ҡулдан киткән саҡта,
Таланғанда ғәзиз был төйәк,
Иҫенә төштө
Юлдаш хәтерендә
Сабый саҡтан ҡалған әкиәт.

### “Әбйәлил” әкиәте

Күпме ваҡыт күлгә батырылған
Һалабашты һыҙырып мәл еткән.
Күл ситендә егет арҡан ишә,
Күл эйәһе һорай егеттән:
– Нимәгә был эшең?
– Арҡан менән
Күккә аҫып ҡуям күлеңде!
Эй, ялбара шул саҡ күл эйәһе:
– Ҡорота күрмә күлем-илемде!
Йәлләй күрсе мине, батыр егет,
Бигерәк ҡурҡыныс бит әйткәнең!
Атың-исемеңде беләйемсе.
– Исемем булыр минең Әбйәлил.
Күлде аҫма тиһәң, бер шартым бар:
Аҫыл толпар бүләк итәһең!
– Әйҙә, егет, башта йүгерешәйек,
Мине уҙһаң, шартың үтәлһен.

– Тәүҙә ҡустым менән ярышып
ҡара!
Ҡуҙғат әле анау ҡыуаҡты.

Ҡыуаҡ араһынан сапты ҡуян,
Ҡыуыш, әйҙә, ҡайҙа олаҡты!

Ғәрлегенән аҡыра күл эйәһе;
– Көрәшәйек хәҙер, ҡарышма!

Әйтә егет:
– Минең олатайым бар,
Шуны еңһәң, сығам алышҡа.
Һөрәнләсе анау өңгә барып,
Һин булырһың, бәлки, сосораҡ.

Өңөнән үкереп килеп сыҡҡан айыу
Күл эйәһен һуғып осора.

Күлде күбекләтеп ярһый хужа:
– Алда әле, егет, көйәһең.
Күл эйәһе күлде өс ҡат урай,
Йөкмәп алтмыш ботлоҡ бейәһен.

– Әйҙә, егет, күрһәт егетлегең,
Еңдем, тиеп кемебеҙ ҡысҡырыр?!

– Һинең бейәңде мин йөрөтә алам
Бот арама ғына ҡыҫтырып!

Шулай ти ҙә егет һикереп менә
Алтмыш ботлоҡ бейә һыртына.
Нисәнсе ҡат
Күлде урап саба,
Аҡ күбеккә малды батыра.

Күл эйәһе үҙ күлендә ҡала,
Алынһа ла ҡат-ҡат ҡоттары,
Вәғәҙәһен үтәй.
Ауылына
Ҡайта егет, менеп толпарҙы…

…Әбйәлилдең дан-шөһрәте арткан
Аҡыл-зиһене зирәк булыуҙан.
Ошо Әбйәлилдән таралғандар
Аҫыл заттар – тоғро азаматтар,
Ҡыйыу ирҙәр, уңған һылыуҙар.

*Быуын-быуын үрелеп,*
*Арттырғандар*
*Башҡортостан данын, ил ғəмен.*
*Төрлө ҡәүем, төрлө зат-ырыуҙар*
*Тупланғандар булып Әбйәлил.*

***

*Аңлағанға ишара ла етә,*
*Ымлап ҡына ҡалмай әкиәт,*
*Тарих һабаҡтары оран һала,*
*Ишетмәүгә шуны йән көйә.*

*Ер һатылған бер әсмүхә сәйгә,*
*Сәй урынына хәҙер – шешәләр.*
*Ерҙе-күлде беҙҙән ҡамар өсөн*
*Долларҙарҙан арҡан ишәләр.*

*Әбйәлилдең хәҙер үҙен быуа*
*Илбаҫарҙың ҡомһоҙ ҡамауы.*
*Яҡтыкүлдең яҡты йөҙөн таплап,*
*Мауыҙҙыны һырыған ялмауыҙ.*

*Ағыу-ҡором яғып, сыҡһын, тиеп,*
*Мөрйәләрҙән бары ҡара төтөн,*
*Ҡаплаһын, тип, илде хәсрәтле төн,*
*Булмаһын, тип, халыҡ берҙәм, бөтөн,*
*Өҙмәк улар илдең бар өмөтөн.*

*Башҡортостан ҡанат киргән саҡта*
*Ҡанаттарға таштар аҫмаҡсылар.*
*Ҡара пиар менән илде буяп,*
*Аҡ йөҙөнә ҡара яҡмаҡсылар.*
*Думалағы ҡанһыҙ ҡанундарҙы*
*Ҡорал итеп, ерҙе баҫмаҡсылар*
*Яңы баҫҡаҡсылар.*

*Ер-әсәне һатып ебәрергә*
*Бирелмәгән хоҡуҡ бер кемгә.*
*Түрә һата.*
*Шул түрәне һүккән*
*Кеше үҙе һата, күрәләтә*
*Балаһының киләсәген һата,*
*Байып ҡалайым тип бер көнгә.*

*Ялмауыҙға ҡала Мауыҙҙылар,*
*Яҡты күлдә һүнә яҡтылыҡ.*
*Тоғролоҡто еңә уғрылыҡтар,*
*Ҡайҙан тыуҙы былдай ят ҡылыҡ?*

*Ерҙәр китә, илдән мөлкәт китә,*
*Булырбыҙмы шулай бер йәл ил?*
*Әкиәттән ҡайт, зирәк Әбйәлил,*
*Ҡотолор сара ҡайҙа, әйт йәле!*
*Урал армыттарын байҡап бара,*
*Ҡараштары бойоҡ Юлдаштың.*
*Нисә йылдар мейене иҙә был уй,*
*Аңлайым мин хәлен ҡорҙаштың.*

***

*Һатмайыҡ, тип, ерҙе,*
*Оран һалдым*
*Яҙған саҡта “Баҙар балта”һын.*
*Киҫәткәйнем егерме йыл элек...*
*Кем уйлаған башын юйған башҡорт*
*Был тиклем дә ерҙе һатаһын?!*

*Эй, күгебеҙ!*
*Һин бит ете ҡатһың,*
*Ҡатлам һайын ендәр атланған.*
*Көҙгө кеүек йөҙөң тапланған,*
*Һөрмә тартмай, һөрөм яҡҡандар.*

*Эй, еркәйем!*
*Һин дә ете ҡатһың,*
*Усыбыҙға яғылып ҡына ҡала*
*Тирҙәр түгеп һиндә тапҡандар.*
*Етмеш ҡабат тирең һыҙыралар,*
*Туҙҙырыла етмеш ҡатламдар.*

*Ете ҡатһың да бит, эй, еркәйем,*
*Ҡатлам һайын – мәғдән, алтындар.*
*Тик төп байлыҡ ерҙең өҫтөндә бит,*
*Төп хазина – өҫкө ҡатында.*

*Алтын бөтә. Нефть ағып китә.*
*Ғәзиз ер өҫтөнә милләт һалған*
*Юл – мәңгелек. Баҫыу – мәңгелек.*
*Баҫыу барҙа – йәшәү мәңгелек.*
*Ил, милләтте ҡурсалайбыҙ тиһәң,*
*Һаҡлайыҡ беҙ ерҙе иң элек.*

*Күпме яуҙы еңеп, һаҡлап ҡалған*
*Еребеҙҙе һаҡлап ҡалмаһаҡ,*
*Иген сәсер, урыр-баҫыр түгел,*
*Баҫып торор ерең ҡалмаһа,*

*Ни мәғәнә беҙҙең орандарҙан,*
*Ҡулдан китһә изге хоҡуҡтар?*
*Ер булмаһа, юлың булырмы ни?*
*Көнөң бөтөр, барыр юл юҡта.*

*Милләт ағайҙары, апайҙары*
*Уйлайҙармы ниҙәр көткәнде,*

Онотһа ил Бабич ғазаптарын,
Ишетмәһә бөгөн әйткәнде?

Башҡортостан!
Заманында
Таланылар йолка-тапай.
Аҙаҡ һурҙылар байлыҡты
Маҡтай-маҡтай.

Хәҙер алалар мөлкәтте
Һуҡмай-ҡаҡмай.

Һин, – башҡорт балаһы,
Хужаһыңмы бөгөн
Башҡорт нефтенә,
Башҡорт урманына,
Хатта ташына?!

Белмәй ҙә ҡала ил
Ултырғанын төп башына.

Буш тороп ҡалғас,
Ни мәғәнә
Елкә ҡашыуҙан?

Һан артып та, әгәр аң артмаһа,
Иртәгә – һуң, бөгөн аңлатмаһаҡ!

Табаҡ та ғына табаҡ, һай, аҡ ҡағыҙ
Буранбайҙың яҙған хаттары,
Һәр башҡорттоң йөрәгенә етһә
Буранбайҙың илгә атлыҡҡаны,
Ир күкрәген өткән аһтары,
Артыр ине ил азаматтары,
Арымаҫ ине менгән аттары.

Башҡортостан тиеп Вәлидиҙең
Ниндәй уйҙар менән янғаны,
Тыуған тупрағына баҫа алмай,
Ят яҡтарҙа йөрәге янғаны
Барып етһен ине һәр башҡортҡа…
Илде юҡһыныуы, сәм, ғәре…

Солғап алды икән ниндәй уттар
Яҙған саҡта “Хәтирәләр”ен?..
Ошо китап – һуңғы аманаты,
Илгә ҡайтты китап.
Хаҡ енде.
Ҡулдан төшөрмәйсә шул китапты
Хоҡуҡтарҙы яҡлар саҡ килде.

***

Ҡасан ғына тотош ғазап ине
Өфөләргә барып етеүҙәр.
Көндәр буйы ғазап сиккән юлды
Хәҙер мөмкин йырлап үтергә.

Тауҙар ярып, юл һалғандар бөлә
Төшкәндәрен ниндәй ауырға.
Ил ағаһы үҙе көн дә юлда,
Етмәй ҡалмай һәр бер ауылға.

Ҡыйралғанда, ватылғанда Ватан,
Ябырылғанда йортҡа мең ҡаза,
Ыҙғыш-тартыштарҙан, тарҡалыштан
Илде ҡотҡарырлыҡ ир ҡайҙа?
Нәҡ шул саҡта,
Башҡорт ерен яҡлап,
Ҡалҡан булып ҡалҡты Мортаза.

Ил ағаһы өйөрмәләр аша
Яҡтылыҡҡа сығыр юл тапты.
Үҙ хәстәрен уйлап юл сапманы,
Ил хәстәрен уйлап юл сапты.

Барлап үтә илдең бар тарафын,
Талаптары ҡәтғи, юғары.
Халҡыбыҙҙы нығыраҡ бергә туплай
Яңы Башҡортостан юлдары.

Яңы быуындарға дәрттәр өҫтәр
Киләсәккә атлап үтергә
Рәхимовтың һалған киң юлдары,
Президент төҙөгән күперҙәр.

Артҡан һайын юлда хәрәкәттәр
Ғәҙелһеҙлек йәнде һыҙлата,
Ҡара тирҙәр түгеп беҙ тапҡанды
Мәскәү, талап, үҙенә оҙата.

Аҙ булдымы Урал хазинаһын
Шул Үҙәккә бушлай биргәндәр?
Бар Рәсәйҙе талап, туя белмәй
Мәскәүҙәге мәскәй-бирәндәр!

Бөлгөнлөккә халҡын батырып,
Илде емереү – ниндәй батырлыҡ!..
Бөйөк мәмләкәтте һәләк иткән
Һатлыҡ хаиндарҙы ҡәберҙәрен
Үҙҙәренән ҡаҙҙырып атырлыҡ.

Үҙәктәргә үткән Үҙәк онота
Кисә яман хәлдәр булғанын.

*Төҙөгән юлыбыҙҙы картәләйҙәр,*
*Тоҙаҡлайҙар телде, ил аңын…*

*… Урал йәмен күберәк күрһендәр*
*тип,*
*Тауға үрләй,*
*Тағы тауҙан төшә –*
*Юлдар оҙон. Юлдан уй оҙон.*
*Был саҡтарҙа Юлдаш кәйефләнеп*
*Ебәргеләр ине йыр һуҙып.*
*Ҡартатайҙың уйын бүлмәйем тип,*
*Ейәне лә килә шым ҡалып.*
*Ҡарап ала Юлдаш тирә-яҡҡа,*
*Һоҡланыр ҙа саҡта шомланып.*

***

*Тауҙар бейек тә ул –*
*Кешеләр түбән.*
*Дала иркен дә ул –*
*Ҡала тар.*
*Боҙола холоҡтар,*
*Ҡайырыла ҡанаттар,*
*Шығырлай умыртҡа.*

*Урман өҫкә ауып бара –*
*Өй һалырға ағас юҡ.*
*Йорттар өҫкә ауып бара –*
*Торорлоҡ аласыҡ юҡ.*

*Йән эйәләре бар ҙа ул –*
*Аҙ шул аҡыл эйәләре.*
*Ауылдарҙың һура ҡала*
*Ҡайнар ҡанын,*
*Елеген,*
*Йәнен.*

*Күпме бисара әҙәмдең*
*Төнө бар ҙа, көнө юҡ,*
*Өнө бар ҙа, көйө юҡ,*
*Усағы бар – уты юҡ.*

*Күпме өйҙәр етемһерәй,*
*Тәҙрәһенән ут күренмәй,*
*Ишегенән кеше кермәй.*

*Мәктәп бар ҙа ул –*
*Балалар юҡ.*
*Мәсет бар ҙа ул –*
*Бабайҙар юҡ.*

*Өйҙә бишек элер сөйҙөң*
*Кәрәге ҡалмай.*
*Мәктәптәрҙе шатландырыр*
*Сабыйҙар ҡалмай.*

*Атҡа менер ирҙәр ҡалмай,*
*Ир атланыр аттар ҡалмай.*
*Ҡурҡытмаһын ҡарттар йорто,*
*Унда барыр ҡарттар ҡалмай.*

*Күҙебеҙ бар ҙа ул –*
*Күрмәйбеҙ.*
*Ҡолағыбыҙ бар ҙа ул –*
*Ишетмәйбеҙ.*

*Телебеҙ бар ҙа ул –*
*Һүҙебеҙ юҡ.*
*Илебеҙ бар ҙа ул –*
*Үҙебеҙ юҡ.*

*Белемдәр бар ҙа ул –*
*Белек юҡ.*
*Иркен дә ул донъя –*
*Ирек юҡ.*

***

*Уйға батып килә Юлдаш,*
*Берсә дертләп, берсә ҡалғып.*
*Әллә ниңә тыуған йорто*
*Күҙ алдына килде тағы.*

*Эй, ғәзиз йорт!*
*Тарих һөйләр*
*Һәр семәре, һәр биҙәге,*
*Тик ҡаҡшата ил хәтерен*
*Ҡомһоҙлоҡтоң сир -биҙгәге.*

*Юлында ни тап килһә лә,*
*Иҙеп ситкә быраҡтыра.*
*Емерелә һәйкәл-өйҙәр,*
*Ҡыйратыла ҡомартҡылар.*

*Төҙөй белгәндәр өйҙәрҙе –*
*Күпме заман матур, ныҡтар.*
*Ҡайҙан ҡырағай ҡылыҡтар?*
*Юғала бит матурлыҡтар.*

*Күпме йәмдәре Өфөнөң*
*Ҡыйраласаҡ, тетеләсәк.*
*Быуаттарҙан килгән ҡоттан*
*Мәхрүм ҡала бит киләсәк.*

*Юлдаштарҙың йортона ла*
*Уҡталдылар күпме ҡабат,*

Тик бер шәхес иҫтәлеге
Емереүҙән тора ҡамап.

Бөйөк дәүләт эшмәкәре
Бында торған.
Ул саҡтарҙың
Көнкүреше ябай булған.
37 бурҙайҙары
Бында уны алған ҡулға.

Илһөйәр ир-азаматтың
Ашағандар шулай башын.
Йәшәгәнен ошо йортта
Һөйләй бары тактаташы.

Әл дә ул бар. Һаҡлай йортто.
Йотор ине һөмһөҙ күҙҙәр.
 Өгөтләйҙәр Ҡараҫҡыны
Нисәмә көн шул һөмһөҙҙәр.

Юлда Юлдаш.
Ҡайҙан белһен
Был золомдо, енәйәтте?..
Яуыз йәндәр Ҡараҫҡыға
Ҡат-ҡат ҡойҙо, ҡат-ҡат әйтте:

– Тиҙерәк байып ҡалам тиһәң,
Яндыр өйҙө!
Ут төрт йортка!
Һин төртмәһәң, кеше табылыр,
Һуң буласаҡ!
Бел, онотма!

Хәтәр бер йорт бында ҡалкыр.
Банк булып ҡалкыр бина!
Һине үҙе эҙләп килгән
Байыр сағың бына-бына!

Һиңә яңы фатир булыр,
Фатирыңа байлыҡ тулыр,
Йәлһең бигерәк,
Эштәрең хөрт.

Юлыбыҙҙы быуа был йорт,
Яндыр өйҙө!
Ут төрт!
Ут төрт!

***

Урманды бүреләр ҡыҙыра,
Яланда йыландар һыҙғыра.

Эй, заман! Тирә бит тирҙәрҙе,
Тирене нисә ҡат һыҙыра.

Ҡазалар, язалар
Ҡайҙа ла ҡаҙала.
Юлға ям ҡаҙалар.

Батшаһы ла, ҡашҡаһы ла,
Башҡаһы ла
Башҡа һуға.

Кем замана бурьяғында
Йолҡоп-талап, ҡарпып ҡала,
Һәрмәп ҡала, ҡармап ҡала.
Ошоларға – донъя хана!
Ҡалғандарға – кабала!

Ирмәк күрер өсөн – ҡала,
Ғүмер һөрмәк өсөн – дала.
Бөгөн дала балалары
Ҡалаларҙа тороп ҡала.
Ҡалғандарҙы кабала
Шул ҡоллоҡка ҡамап ала.

Үгеҙҙәй һеҙә һөмһөҙҙәр,
Шартлатып балыҡ һеҙгәндәй,
Илдең зиһенен шаңғытып,
Ҡанундарҙан ҡапҡан ҡороп,
Халыктың байлығын һеҙә,
Ҡаймаҡ, май эсендә йөҙә.
Мәсхәрәләнә ил йөҙө.

Ә ил күндәм.
Халыҡ түҙә.
Юл болғауыр,
Дәүер ауыр.
Донъя ауырыу.
Былай барһа,
Ил ишелер, ауыр ул.

Ниңә тарҡау ҡыйыу ирҙәр?
Иргәйелдәр бик тә берҙәм.

Ғәзиз ер тип, иман, дин тип
Алышкандар күпме быуат.
Баш эймәгән ғорур илде
Үткән ғәскәр ҡырып, турап.

Ауыл-ауыл һөрөлгәндәр,
Киткән баштар Себерҙәргә.

Шәжәрәнең тармаҡтары
Киҫелеп ҡалған сит ерҙәрҙә.

Бөгөн меңәр-меңәр башҡорт
Сараһыҙҙан Себер китә.
Күпмеләре ҡайтмай кире,
Башҡортлоғо йотолоп бөтә.
Ҡар башына ҡар еткәндәй,
Башҡорт башына башҡорт етә.

Аҫырҙарын бeлә тороп,
Баш күтәргән баһадирҙәр.
Ҡайҙа бөгөн баһадирҙар–
Үҙен-үҙе аҫа ирҙәр.
Үҙен-үҙе гүргә һала,
Шәжәрәһе өҙөлөп ҡала.
Арта тик етем-еҫерҙәр,
Етемһерәп ҡала ерҙәр.

Изге ерҙәр буш тормай шул,
Һаман тула килмешәктәр.
Эй, йәмәғәт!
Был эш менән
Нисек мөмкин килешмәккә?

Афәттә лә бер нигеҙҙән
Күпме ауыл бүленеп сыҡҡан,
Йотлоҡ йотор тип ҡарамай.
Үрсегән ил, зат ҡоромай.
Бөгөн күпме йорт буш тора,
Ҡалғандары – ҡарт-ҡоролар.

***

Юлдар оҙон. Уйҙар юлдан оҙон.
Юл ослана. Уйҙар осланмай.
Тауҙар ҡалды.
Дала ҡаршы алды.
Өфөгә лә инде күп ҡалмай.

Юлдан Юлдаш шулай
ашығып ҡайта,
Шәжәрәһе һәр саҡ иҫендә.
Был сәфәрҙә тапты ырыу-затын
Тағы нығыраҡ бәйләр исемдәр.

Беҙгә мираҫ иң ҙур хазинабыҙ –
Олатайҙар ярған юл яҙған.
Үҫһен Башҡортостан шәжәрәһе,
Елкендерһен алға йылъяҙма.

Күперенә еткәс Ағиҙелдең,
Ул ҡалҡынып ҡуйҙы һиҫкәнеп.

Тауҙа йәйрәп ятҡан баш ҡалаға
Ҡайтҡан һайын китә иҫтәре.

Арбай Өфө. Йәнде елкендерә
Салауаттың ғорур әйҙәүе.
Өфөләргә килгән һәр юлсыны
Хайран итә һәйкәл тәүҙә үк.

Белһә ине улар
Был ҡалала
Салауат та менән Юлайҙың
Кисергәнен ниндәй ғазаптарҙы?..
Уйлағанда хәтер һыҙланыр.

Аяҡ-ҡул бығаулы.
Нисәнсе ҡат
Язалайҙар йөрөтөп ил буйлап.
Ҡанһыратып, Өфөгә ҡайтаралар,
Тағы йота үҙенә таш зиндан.

Тәндәр тотош яра. Тик йән генә
Азатлыҡҡа һаман талпына.
Батыр бында нисек әмәл тапҡан
Хаттар таратырға халҡына?

Илде моңландырыр күпме йырҙың
Ҡанаттарын ҡатил ҡайырҙы.
Тик тере ҡуҙ булды ил хәтерендә
Ҡобайыры яугир шағирҙың.

Ярһыу атта ярһып ҡайтты батыр,
Түгел инде уға ҡала ят.
Быуаттарҙан быуаттарға әйҙәй
Өфө ҡаяһында Салауат.

Ҡунаҡтарға ихлас ҡолас йәйеп,
Таш ҡаяла ғорур торғаны.
Ҡайтҡан һайын ишеткәндәй Юлдаш
Салауаттың сая оранын:

– Аҡсалар гел алмашыр ул,
Баҙарҙар гел алдашыр ул,
Батшалар гел талашыр ул,
Аҡылыбыҙ алмашмаһын,
Рухыбыҙ алдашмаһын.

Мин мәңгегә һеҙҙең менән,
Киләсәкте уйым урай.
Нигеҙебеҙ булһын Урал,
Ҡулыбыҙҙа булһын ҡурай.

Хоҙайҙан фатиха алмаҫ
Ҡурай моңона янар бәлә,
Уралға үрелер ҡорал.

Башҡортостан һаман балҡыр –
Беҙҙең менән Урал батыр!

Яҡты ниәттәрҙе
Маҡсат итеп алһаҡ,
Көсөбөҙ аҙ түгел –
Беҙҙең менән Аллаһ!

Яҡшылыҡты яҡлап,
Яман хәлдә ҡалһаҡ,
Яңғыҙ булмабыҙ бит –
Беҙҙең менән Аллаһ!

Илдең ғәм-хәстәрен
Иңебеҙгә һалһаҡ,
Өҙөлмәһен өмөт –
Беҙҙең менән Аллаһ!

Теҙләнәбеҙ ергә,
Хаҡҡа табынабыҙ.
Үҫһен шәжәрәбеҙ –
Бөйөк хазинабыҙ!

– Һаумы, Өфө! Һаумы, Салауат! –
тип
Күпме үтте Юлдаш күперҙән.
Юлдар оҙон. Уйҙар юлдан оҙон.
Һүтергә лә һаман һүтергә...

Тик күңелдә бөгөн һис тынғы юҡ,
Бөтмәҫ хәүеф һаман һағайта.
Уйын бүлде Азат:
– Нимә төтәй?
Ҡара әле, ҡара, ҡартатай!

Ҡалған юлды улар уҡтай үтте,
Сыр-сыу килә халыҡ.
Шау. Ғауға.
Юлдаштарҙың өйөнә ут ҡапҡан,
Ҡара төтөн йортто солғаған.

Килеп тулған янғын һүндерергә
Машиналар.
Үкер-үкермә,
Тирә-яҡта барыһы аҡтарылған,
Юл ҡамалған йортҡа үтергә.

Ашығырҙар ине,
Кем уйлаған
Ошолай осланырын был юлдың?
Өлгөрмәне Юлдаш ергә баҫып –
Йорт эсенә Азат йомолдо.

Ағарынды Юлдаш.
Мәңгелеккә
Туҡталғандай ваҡыт был саҡта.
Сәсәй-сәсәй уттан сыҡты Азат,
Ауҙы шәжәрәне ҡосаҡлап.

Ә Ҡарасҡы, ҡулын болғай-болғай,
Ниҙер һөйләй был йорт янында.
Ут эсенә уны нимә тартты?
Күрәләтә инә янғынға.

Маҡсатына хәҙер ул ирешә –
Тапты, тапты. Ҡулда – шешәһе!
Шешә тотҡан Күренгесте күмеп,
Ишелеп төштө өйҙөң түшәме.

Сараһыҙҙан ғына бисараның
Ҡара күмер булып ҡалғаны,
Тыуған йортто үртәп,
Ослап ҡуйҙы
Афғандарҙа ҡат-ҡат янғанын.

Рәнйеп өҙгөләнде олатай рухы,
Ут эсендә ейәне гүр тапҡас.
Уттан да ғына бигерәк
Ғәрлегенән
Ҡара көйҙө аҡ таш –
Таҡтаташ.

Ялҡын ярһый. Күҙҙе ҡырҡа төтөн.
Был мәхшәрҙә нисек тын алмаҡ?
Йәшен һөртөп,
Абайланы Юлдаш:
Баҡса тулып алма тумалған.



## Фәрит СУФИЯРОВ

### *Яҙмыш ҡулындамын*

*Был донъяға тыуғастын да, тәүҙә*
*Яҙмыш алды үҙ ҡулына.*
*Бар булмышым, хөкөм-ҡарарың да,*
*Мин тәҡдирең, һинең ҡолоң да.*

*Биләүҙәргә төрөп һалдың мине,*
*Бишегемдә һөйөп тирбәттең.*
*Күҙ йәшемде түктем, илаттың,*
*Көлөргә лә үҙең өйрәттең.*

*Ҡыуанысын, шатлығын да бирҙең,*
*Ҡайғы-хәсрәтен дә күрһәттең.*
*Тыуған ерҙән йыраҡтарға илттең,*
*Юҡһындырҙың, ҡабат ерһеттең.*

*Ҡылғанымдан ләззәт татыттырҙың,*
*Тормош үрҙәренә үрләттең.*
*Көтмәгәндә, йәшен уты кеүек,*
*Һиҫкәндереп йәнде көйрәттең.*

*Ғүмер буйы яҙмыш ҡулындамын,*
*Төрлө булды хөкөм ҡарары.*
*Шатлыҡ кисергәндә күңел балҡый,*
*Ҡайғы күрһәм, йөҙөм ҡарайҙы.*

---

*Фәрит Суфияров 1939 йылдың 20 октябрендә Яңауыл районының Иҫәнбай ауылында тыуған. Педагогия институтын тамамлай. Башҡорт һәм татар телдәрендә сыҡҡан байтаҡ китаптар авторы, Ф. Кәрим, Ғ. Соҡорой исемендәге премиялар лауреаты, республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Хәҙерге көндә Яңауыл яҙыусылар ойошмаһының яуаплы сәркәтибе. Шағирҙы 70 йәше тулыу менән ихлас ҡотлайбыҙ!*

## Йыраҡ сәфәргә сығам

*Әсәй, йыраҡ сәфәргә сығам,*
*Юл фытырын бирәм, доға ҡыл.*
*Әүәлгесә фатихаңды алам,*
*Изге теләктәрҙә, зинһар, бул.*

*Бурандарҙа ҡалған сағым булды,*
*Ташҡын һыуҙарынан бүлендем.*
*Ел-дауылдар ҡосағында ҡалдым.*
*Имән ағасылай бөгөлдөм.*

*Юл өҙөлһә, ялғап алға үтәм,*
*Ҡотом осоп, йәнем шөрләне.*
*Һуңғы көрсөгөмә еткән саҡта*
*Рух һынманы, өмөт һүнмәне.*

*Илдәр гиҙәм, ут-һыуҙарҙы кисәм,*
*Ниҙәр күрмәç  гәзиз баштарым.*
*Юл буйында ятып ҡалғандарҙың*
*Уҡып уҙам ҡәбер таштарын.*

## Бар эшкә лә...

*Салғы алһам, янып бесән саптым,*
*Балта тотһам, бура бураным.*
*Бар эшкә лә ҡулым бара ихлас,*
*Мин булдыҡһыҙ кеше булманым.*

*Көтөү көттөм, һуҡа һөрҙөрҙөләр,*
*Ағайҙарым эшкә өйрәтте.*
*Егелдереп тормош йөктәренә,*
*Яҙмыш яҙғандарын һөйрәтте.*

*Минең өсөн эштең үгәйе юҡ,*
*Барыһын да тотам өмөттә.*
*Булдыҡһыҙға һанап, бармаҡ төртөп*
*Ситтә торғандар бар көлөп тә.*

*Көнгә керһәм, һөнәр арттырамын,*
*Матурлыҡҡа ғашиҡ күҙҙәрем.*
*Ҡулым менән теҙеп йондоҙҙарын,*
*Тыуған ерҙең күген биҙәнем.*

## Йондоҙҙар ямғыры

*Август төнөндә юлыҡтым*
*Йондоҙҙар ямғырына.*
*Ғаләм түренән һибелеп,*
*Түбәнгә ябырыла.*

*Сабаҡтай ялтырап китә —*
*Метеормы финишта?*
*Күк йөҙөндә күп мөғжизә,*
*Ҡанат йәйгән фәрештә.*

*Күк сөйҙө көмөш тәңкәһен,*
*Йомартлығын күрһәтте.*
*Ай-йондоҙҙар барыһы бергә*
*Шау тамаша күҙәтте.*

*Мин был төнгә ғәжәпләндем,*
*Сихырландым бер төҫлө.*
*Йыр ғаләмгә тартыламы,*
*Әллә күк түбән төштө?..*

## Тыуған ил

*Юлдарым йыраҡҡа илтә,*
*Ҙур икән тыуған илем.*
*Икмәге-һыйы бөтмәҫ күп,*
*Бөгөр өҫтәлдәр билен.*

*Шаулы нарат урмандарың,*
*Көмөш һыулы күлдәрең.*
*Бишектә саҡта ишеттем*
*Дәртле турғай телдәрен.*

*Күрҙем тауҙар ғорурлығын,*
*Баҫыуҙарҙың киңлеген.*
*Афәттәрҙән һаҡлайыҡсы*
*Тыуған ил именлеген.*

*Ерем йәшлегенә ҡайтты*
*Талдар бөрөлә саҡта.*
*Дарьяларың көйләп йырлай,*
*Тыуған ил, һинең хаҡта.*

**Камил**
**ЗИГАНШИН**

# ДӨЙӘНӘН ТӨШӘ – «ТОЙОТА»ҒА МЕНӘ БӘҘӘҮИ

**СӘЙӘХӘТНАМӘ***

## Тәүге тәьҫораттар

Аҡһыл-зәңгәр күк йөҙө, диңгеҙ тигеҙлегенә һибелеп ятҡан ҡыҙғылт-һары йәйпәк утрауҙар, ҡараһыу төҫтәге ҡырлас һырттар, ҡуңыр ҡом тауҙары, яр буйындағы шау быяланан торған күп ҡатлы бейек йорттар, алтын дуғалар менән ҡаймаланған ҡултыҡтар, унда-бында сәселгән кескәй генә шаҡмаҡ өйҙәр, сүллектәге бер йотом һыуға тиң, аҡ ҡоймалар менән кәртәләнгән һирәк йәшеллек – Берләшкән Ғәрәп Әмирәттәре Шарджа аэропортына төшөргә шыҡыйған лайнер иллюминаторынан (был аэропорт 1933 йылда төҙөлә һәм «Лондон – Дели» транзит самолеттары өсөн тәғәйенләнә) ошо рәүешле күҙ алдына килеп баҫа.

Паспорт контроле, күҙ алмаһын тикшертеүҙең 3 секундлыҡ процедураһы (электрон базала Әмирәттән депортацияланғандар хаҡында мәғлүмәт һаҡлана), мөләйем таможня хеҙмәткәрҙәре артта ҡала, һәм, ниһайәт, егерме биш урынлыҡ аҡ автобустар вокзалдан төрлө яҡҡа ҡуҙғала башлай.

Халыҡтың күпселеге Фарсы ҡултығы ярҙарына һыйынып ултырған Дубаи ҡалаһына юл тотто. Ни бары беҙ, «ете йүләр» генә, 150 километр алыҫлыҡтағы «Океаник»ка йүнәлдек – ҡунаҡхана Һинд океаны ярындағы Корфаккан ҡалаһы ситендә, асығыраҡ әйткәндә, Оман ҡултығы типһенендә урынлашҡан.

Башҡалар бында ниндәй уй менән йөрөйҙәр, белмәйем, минең иһә цивилизация ығы-зығыһынан мөмкин тиклем алыҫлашҡым, океан тулҡындарының арбағыс шауын тыңлап кинәнгем килгәйне. «Океаник»ты һайлауыбыҙға шул булышлыҡ итте: Фарсы ҡултығы ярының һыуы тиҙ һыуына – тәрәнлеге ни бары 40 – 60 метр ғына. Ә океандың һыуы ғына түгел, һауаһы ла сағыштырмаса (бер нисә градусҡа ) йылыраҡ.

Ҡом ҡалҡыулыҡтары итәгендәге йәшкелт-һоро ҡыуаҡлыҡтар ҡорбанын аңдыған сүл бүреһе арҡаларын хәтерләтә. Ялтырап ятҡан тигеҙ юлдың ҡара таҫмаһы саҡрым һайын асығыраҡ шәйләнгән тау һырттарын яҡынайта. Унда ла, һулда ла иҫәпһеҙ-һанһыҙ циркtар, киртләстәр, тупрағы ишелеп төшкән уялар, соҡорҙар, тәртипһеҙ һибелгән ҡая ҡырластары күҙгә ташлана. Юл ыңғайы кәрәҙле телефон

* *Дауамы. Башы 9-сы һанда.*

тапшырғыстарының ҡыҙыллы-аҡлы тимер вышкалары, антенналарының һоро колбалары ялтлап ҡала.

Һирәкләп ҡырҡ-илле йортлоҡ кескәй ауылдар аша уҙабыҙ. Ара-тирә тау итәгендә көйшәнеп йөрөгән дөйәләр, кәзәләр тап була. Нимә менән туҡланалыр инде улар – тирә-яҡта хатта мүк әҫәре лә күренмәгән таштар ғына тәгәрәшеп ята. Аравия ярымутрауы ҡасандыр Африка континенты өлөшө булыуын иҫбатлаусы саваннаға оҡшаш биләмә, ҡом-ташлы түбәләстәр артта ҡалды, һәм беҙҙең кескәй автобусты, гүйә, текәлеге менән ирекһеҙҙән үҙенә тартып торған тау һырттары упты.

Пейзаж хас та синайса: шундай уҡ сәйер биҙәкле, киҫкен рельефлы тәпәш тауҙар теҙмәһе. Ҡайһы берҙә йәшеллек тә күренгеләп ҡалғылай. Декабрь айының ошо яҡтар өсөн үтә ямғырлы килеүе менән бәйлелер инде был. Текә тарлауыҡтар менән айырылған үткер осло ҡаялар боронғо һинд ҡорамы башняларының емереклектәрен хәтерләтә.

Ауылдарҙа осраған финик емеше үҫкән пальмалар һәм ишек алдындағы ҡырағай таштар менән уратылған бәләкәй генә түтәлдәр йәм бирә.

Сәғәт ярымдан беҙ Һинд океаны ярҙарына йәйрәгән Фуджейра ҡалаһына индек. Ниһайәт, автобус салонына тулҡынландырғыс диңгеҙ еҫе таралды. Ҡаланың ҡап уртаһында тау гәлсәре кристалдарына оҡшаған үтә күренмәле яңы небоскребтар төркөмө һерәйеп тора. Улар араһында, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, мөйөш һайын йомро башнялы, стеналары балсыҡ менән һыланған боронғо ҡәлғә юғалып ҡалған кеүек. Офоҡта океан караптарының аҡ һындарын төҫмөрләргә мөмкин: сухогруздар, контейнер ташыусылар, 100-200 мең тонна һыйҙырышлы нефть танкерҙары һ.б., портҡа инергә рөхсәт көтөп, рейдта тора. Ҡала ситендә ике-өс ҡатлы виллаларҙы әүҙем төҙөү бара. Йорттар күп төрлө булыуы менән һушты ала. Газондар ҙа, сәскәләр ҙә, пальмалар ҙа юҡ, яланғас таштар, төҙөлөш сүп-сары ғына туҙышып ята. Әммә күр ҙә тор: ике-өс йылдан ошо ерҙәр йәшеллеккә күмеләсәк. Виллаларҙың ҡыйыҡтары яҫы, һәм, ғәҙәттә, уның уртаһына йәки ситенә ҙур булмаған башня эшләнеп ҡуйыла. Үҙенә йорт һалып сыға алмаған мохтаж граждандар өсөн ер бүлеп, дәүләт үҙ иҫәбенә өй төҙөй һәм бушлай тапшыра! Әкиәт бит был!

Фуджейра әмирәтендә дөйөм ил буйынса йәшәү кимәле әллә ни юғары булмаһа ла, тәбиғәте бик күркәм. Шунлыҡтан унда Дубай, Абу-Даби кеүек ҡалалар халҡы ял итергә ярата. Фуджейра биләмәһенә ингән ергә хаҡтар ҡиммәт, өҫтәүенә, иң матур урындар шәйехтәр ғаиләләре милкендә.

Илдә бөтәһе 7 әмирлек иҫәпләнә һәм уларҙың һәр ҡайһыһы ҡәрҙәш күсмә ғәрәп (бәҙәүи) ҡәбиләләрен берләштерә. Уларҙың башлыҡтары 1971 йылдың декабрендә Дубай ҡалаһына йыйылып, Берләшкән Ғәрәбстан исемендәге Федерацияға тупланыуҙары тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйған. Был ваҡытта илдә ни бары йөҙ мең кеше генә иҫәпләнгән. Хәҙер халыҡтың һаны 4 миллион ярымғаса үҫкән, ә миллион тирәһе Фуджейра әмирлегенә инә. Иҫ киткес үҫеш! Тәүге президент Заед Бен Әл Нахайан был посҡа ете тапҡыр һайлана. Тап ул әмирлектәрҙе берләштереү инициаторы була ла инде. Һөҙөмтәлә иҡтисад донъяһында «ғәрәп мөғжизәһе» тип нарыҡланған күренеш пәйҙә була. Тәүге президент 2004 йылда донъя ҡуйғас, уның урынына улы Хәлиф Заед Бен Әл Нахайан ултыра.

Нефть табыусы әмирлек икәү – Абу-Даби һәм Дубай. Ҡалғандары дотацияға көн күрә. Нефть менән бәйле эшмәкәрлеккә тиклем иҡтисад нигеҙен балыҡсылыҡ, күсмә мал аҫрау, ынйы йыйыу һымаҡ шөғөлдәр тәшкил иткән. Хәҙер был кәсептәр ил бюджетында әллә ни һиҙелерлек урын алып тормай.

Дәүләт менән хәлифтәр, йәғни хөкүмәт башлыҡтарынан торған Юғары Совет идара итә. Улар үҙҙәре араһынан президент һайлап ҡуя. Президент үлһә, уның

урыны ир туғанына, юҡ икән — өлкән улына күсә. Әмирлек менән идара итеүсенең ғаилә ағзалары шәйехтәр тип йөрөтөлә.

Был илдә һалым юҡ: өҫтәмә хаҡҡа ла, килемгә лә һ.б. Ни бары 4 процентлыҡ таможня пошлинаһы ғына туплана. Дәүләт бюджеты башлыса ҡара алтын һатыу иҫәбенә формалаша — тәүлегенә 2,5 баррель. Был һан ОПЕК эсенә инеүсе нефть сығарыу менән шөғөлләнгән илдәр продукцияһының 11 процентын тәшкил итә. Нефттең бер барреле 70 долларға һатыла икән, тимәк, Берләшкән Ғәрәп Әмирәттәре тәүлегенә 175 миллион доллар табыш ала.

Ситтән килгән ир кешегә ил гражданы статусын алыу мөмкинлеге бөтөнләй юҡ. Ҡатындарҙың, әгәр ҙә улар Берләшкән Ғәрәп Әмирәттәре гражданы менән 5 йылдан артыҡ никахта торһа, был статусты алыу хоҡуғы бар. Медицина ярҙамы урындағы халыҡҡа бушлай. Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдары уртаһына тиклем ситтән килеүселәр дөйөм халыҡтың 80 процентын тәшкил иткәнгәлер, ил бюджеты бындай көсөргәнешлекте күтәрер хәлдә түгел. Шулай ҙа ашығыс ярҙам, бер нигә ҡарамаҫтан, күрһәтелә.

Башланғыс белем алыу ҙа түләүһеҙ, ҡыҙҙар һәм малайҙар айырым уҡытыла. Иң тырыштары һәм һәләтлеләре Европа һәм Американың танылған юғары уҡыу йорттарында белемен арттырыуҙы дауам итә ала.

Белемле йәштәр дәүләт секторына эшкә урынлашыуҙы хуп күрә — хеҙмәт хаҡы юғары һәм тотороҡло. Ситтән килеүселәрҙең барыһы ла дәүләт учреждениелары эшенең яҡшы ойошторолғанын билдәләй. Быға аптырайһы түгел: ил башлығы, үҙен танытмайынса ғына, иртәнсәк берәй дәүләт учреждениеһына инеп, етәксенең эшкә ваҡытында килеү-килмәүен тикшерә ала. Әгәр етәксе эшкә һуңлай икән, уны шундуҡ вазифаһынан бушаталар.

Эш көнө сәғәт 8-ҙән алып 15-кәсә һуҙыла. Һуңғы йылдарҙа чиновниктарҙың һанын ҡыҫҡартыу күренеше күҙәтелә. Дубай хәлифе үҙен бик ябай тота: шәхси водителе юҡ, тән һаҡсылары икенсе машинала бер аҙ арттараҡ ҡалып йөрөй, «Мерседес»ының быялалары үтә күренмәле.

Дәүләт төҙөлөшөндә һәм иҡтисадында ҙур үҙгәрештәр булыуына, Америка тормошо стандарттарының һиҙелерлек йоғонто яһауына ҡарамаҫтан, бында шәриғәт закондары менән иҫәпләшәләр һәм ихтирам итәләр. Бер ниндәй фанатизм да, шәфҡәтһеҙлек тә юҡ. Һәр хәлдә бөтә халыҡ алдында үлем язаһы биреү күҙәтелмәй.

Әмирәттәрҙә бөтөнләй тиерлек криминал юҡ. Европалылар фекеренсә, был күренеш енәйәт өсөн ҡаралған язалау формаларының ҡатылығы менән бәйле: наркотиктар һаҡлаған өсөн — ғүмерлеккә төрмәгә ябыу, бик һирәк осраҡтарҙа ғына — үлемгә тарттырыу (һуңғылары 1996 һәм 2006 йылдарҙа булған), урлыҡ өсөн ҡулдарҙы ҡырҡыу (ошо енәйәт менән бер нисә тапҡыр төрмәгә эләккәндән һуң һәм дөйөм наркоз аҫтында) һ.б.

Ысынбарлыҡҡа тап килгән сәбәптәр иһә халыҡтың динилегенә, боронлан килгән традицияларға тоғро булыуына ҡайтып ҡала, минеңсә.

Урындағы халыҡтың йәшәйешендә иҫерткес эсемлектәрҙең, наркотиктарҙың бөтөнләй тиерлек булмауы илдәге иманлылыҡтың һәм тыныслыҡтың нигеҙен тәшкил итә.

Һәр кем 5 тапҡыр намаҙ уҡыу бурысына бик етди ҡарай. Ғәрәптәр үҙ балаларын үтә ныҡ ярата. Уларҙы ҡурсаҡ ише кейендерә һәм иркәләтә. Әҙәплелек һәм ҡунаҡсыллыҡ — ғәрәптәрҙең иң маҡтаулы һаналған сифаттары. Был тәңгәлдә уларҙа бәҙәүи тамырҙарының сағылышы асыҡ тойомлана: кеше аяғы баҫмаған сүллектәрҙә күсмә тормош менән йәшәгән халыҡ һирәк осраған юлсыларға һәр ваҡыт инсафлы ҡәҙер-хөрмәт күрһәтер булған. Хужаларҙың ҡунаҡсыллығына яуап итеп, юлсы һуңғы яңылыҡтар менән бүлешкән, табын артында оҙон-оҙаҡ һөйләшеп, аралашыу мөмкинлеген биргән.



Шәриғәт законддарына ярашлы, ир кешенең, әгәр ҙә ҡатындарын тигеҙ рәүештә тәьмин итә һәм ҡарай ала икән, 4 мәртәбә өйләнеү мөмкинселеге бар. Ҡатындарҙың һәр ҡайһыһының үҙ йорто булырға тейеш. Әгәр ҙә ғаилә башлығы хәләленең береһенә «Ниссан» машинаһы һатып ала икән, башҡалары ла ошондай уҡ дәүмәлдәге бүләккә дәғүә итә. Айырылышыу процедураһы бик ябай: шаһиттар алдында өс тапҡыр «талаҡ» һүҙен ҡабатлаһаң — һин азат. Әммә был аҙымға барыу бик хәүефле: ғәрәп ҡәүемендә бер ҡатын-ҡыҙға ике ир-ат тура килә. Һөҙөмтәлә, ҡатнаш никахтар һаны арта.

Сит илдә белем алған йәштәр буласаҡ ҡатындары менән студент йылдарында уҡ танышып, тыуған яҡтарына алып ҡайта, йә иһә үҙ илендә үк башҡа халыҡ вәкиленән булған ҡатын-ҡыҙҙы иш итә.

Дәүләт үҙ граждандары араһындағы никахтарҙы хуплай һәм һәр яҡлап ярҙам итә. Бындай ғаиләләргә туйҙа уҡ 20 000 долларлыҡ никах сертификаты тапшырыла. Бала тыуғандан һуң ата-әсәгә 2000 доллар аҡса бүленә. Ә беҙҙең илдә икенсе бәпәй донъяға килгәс, 250 мең, йәғни 10 мең доллар самаһы, түләнә. Афарин, Рәсәй! Задорнов әйтмешләй, үҙ илең өсөн ғорурлыҡ тойғоһо барлыҡҡа килә.

Шәхси тормош тураһында матбуғатта нимәлер яҙыу ҡәтғи тыйылған. Шунлыҡтан «һары матбуғат» та юҡ. Оло йәштәге ғаилә ағзалары ихтирам һәм ҙур иғтибар менән солғана. Тормошта килеп тыуған мөһим мәсьәләләрҙе сискәндә ололарҙың һүҙе хәл иткес көскә эйә.

Традицион шөғөлдәр араһында ыласын һунары — кеше һәм ҡош араһындағы үҙенсәлекле берҙәмлек билдәһе — ҙур урын биләй. Ғөмүмән, бында беләгенә ыласын ултыртҡан ир-атты йыш осратырға мөмкин. Хәйер, ысын һунар йыш булмай — йәнлек аҙ, йәнә һунар өсөн сағыштырмаса уңайлы ер биләмәләре ҡурсаулыҡҡа әйләндерелгән.

Ғәрәптәр — ихлас күңелле, ҡунаҡсыл халыҡ. Илдә башҡа милләт вәкилдәре лә иркен йәшәй, ихлас эшләй. Юғары квалификациялы белгестәр — Европанан һәм Американан, ябай эшселәр Азия илдәренән ағыла. Ситтән күсеүселәрҙең күпселеген Һиндостан (ресторан, ҡунаҡхана хеҙмәтләндереүселәре), Ҡытай (төҙөүселәр), Пакистан (водителдәр) граждандары тәшкил итә.

... Гид тарафынан бәйән ителгән теге йәки был мәғлүмәтте күңелебеҙгә һеңдерә-һеңдерә, ике ҡатлы матур йорттарҙан, рестарандарҙан торған Корфаккан

ҡалаһын уҙып, Оман ҡултығында урынлашҡан «Океаник» отеле алдына килеп туҡтағаныбыҙҙы һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ. Отелдең иллюминаторҙар һымаҡ яһалған иҫ китмәле ҙур тәҙрәләре һәм түбәһендәге «капитан рубкаһы» уны яр буйында торған ете палубалы океан карабына оҡшатып ҡуя.

Отелдең персоналы (тулыһынса тиерлек индустарҙан тора) асыҡ йөҙ һәм алсаҡлыҡ күрһәтеп ҡаршы алды. Беҙ, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, ыңғай мөхит тулҡындарына көйләндек. Душта ҡойоноп, ресторанға йүнәлгәйнем, лифт янында, бә-әй, Өфөлә бер йортта ғына түгел, бер ҡатта көн күреүсе күршемде осраттым. «Өфө — ҙур ауыл» тигән булалар. Күрәһең, тотош Ер планетаһы был лаҡапҡа тура килә хәҙер...

## Дөйөм мәғлүмәт

Ҡул аҫтында донъя атласы булмаған уҡыусыларҙың иҫенә төшһөн: БҒӘ икһеҙ-сикһеҙ Аравия утрауының көньяҡ-көнсығышында, Фарсы һәм Оман ҡултығын айырған «ҡаҙыҡ теше»ндә урынлашҡан, ә «ҡаҙыҡ теше»нең Иранға терәлеп торған осо Оман территорияһына инә. Шунын менән ул Рәсәйгә оҡшаш: беҙҙең дә үҙ анклавыбыҙ – Калининград өлкәбеҙ бар бит.

Илде бер яҡтан – ҡом сүллектәре, икенсе яҡтан бейеклеге километрғаса һуҙылған осло ҡаялар уратып алған. БҒӘ Сәғүд Ғәрәбстаны һәм Оман менән сиктәш. Майҙаны – 84 мең квадрат километр. Йылдың 350 көнө – ҡояшлы! Һуңғы ҡырҡ йыл эсендә халыҡтың һаны ҡырҡ тапҡырға тиерлек артҡан. Хәйер, артым Һиндостан, Пакистан кеүек илдәрҙән килеүселәр менән бәйле. Алдан телгә алынып кителгән осор эсендә бәҙәүиҙәрҙең уртаса йәшәү оҙонлоғо 58-ҙән 75 йәшкәсә күтәрелгән.

Сүллектәрҙә һәм тауҙарҙа үлән әллә ни ерегеп китә алмаһа ла, оазистарҙа иркенләп үҫә. Һирәгерәк осраған йәм-йәшел оазистар әллә ҡайҙан күренеп ултыра – улар шыйыҡ урман менән уратылған.

Һомғол финик пальмалары татлы, туҡлыҡлы емеш бирә. Урындағы халыҡтың төп аҙығы булыуы менән бер рәттән, ул тештәргә ыңғай йоғонто яһай, күреү һәм ишетеү һәләтен нығытыуға, яман шеш үҫешен тотҡарлауға булышлыҡ итә. Махсус плантацияларҙа 800 мең тонна финик йыйыла.

Илдә шулай уҡ ҡуйы, йәм-йәшел сатырлы гаф ағасы үҫә. Ул тамырҙары менән үҙенә 30 метр тәрәнлектән һыу ала алыуы менән үҙенсәлекле. Оазиста көн күреүсе халыҡ дауылдар үткәс ҡомдо кәрзингә тултырып, киренән сүллектәргә ташырға мәжбүр.



Йәнлектәр донъяһы бер үркәсле дөйәгә – дромедтарға ғына ҡайтып ҡала. Арҡаһындағы ҡуйы йөн уны ҡояштан һаҡлаһа, тояғындағы ҡалын һөйәле һәм ярылары эҫе, баҫҡан һайын ишелеп торған ҡомдан атларға ярҙам итә. Туҡланыуға килгәндә, әллә ни һайланмай – сәнскеле ҡыуаҡлыҡтарҙы ла ашай ала. Кәүҙә ауырлығын

700 килограмға тиклем арттыра алған дөйәләр, 400 килограмм тирәһе әйбер артмаҡлап, тәүлегенә 90 километр араны уҙа ала. Дөйә һөтөндә С һәм Д витаминдары һыйырҙыҡына ҡарағанда өс тапҡырға күберәк, ә аминокислоталарҙың нисбәте диетологтар тарафынан кеше организмы өсөн иң ҡулайы тип баһалана. Дөйә һөтө әсемәй, шунлыҡтан унан ҡатыҡ-фәлән етештереп булмай. Тәме яғынан ул кәзә һөтөнә оҡшаңҡыраған. Өҫтәүенә, дөйә һөтө һыуһынды яҡшы ҡандыра.

Хөкүмәт йәнлектәр һәм үҫемлектәрҙең һанын арттырыу өҫтөндә әүҙем эшләй, яңы төрҙәрҙе үрсетеү буйынса төрлө программаларҙы финанслай. Мәҫәлән, алһыу фламинго кеүек һирәк ҡоштарҙың һанын элекке хәленә еткереү буйынса махсус программа тормошҡа ашырыла.

## XXI быуат Вавилоны

Бер көнөмдө илдең ғорурлығы – яр буйынан 70 километрға һуҙылған Дубаи ҡалаһы менән танышыуға арнаным. Микроавтобус унда ике сәғәт эсендә алып барып еткерҙе. Ҡаланы ун йылдан ашыуыраҡ ваҡыт эсендә Америка архитекторҙары әҙерләгән генераль план буйынса төҙөп бөтәләр. Иҫке ҡаланан урта быуаттарға ҡараған ҡәлғәһе булған бер квартал ғына һаҡланған. Бөгөн ғәрәптәр боронғо ҡаралтыларҙы һүтергә ризалыҡ биргәндәре һәм ҡаланы тарихи, архитектур үҙенсәлегенән яҙҙырғандары өсөн үкенеп бөтә алмай. Ҡала халҡының һаны – бер миллион ике йөҙ мең кеше. Был һан йылдан-йыл 10 – 15 процентҡа арта бара. Үтә күренмәле, стенаһы быяланан булған күп ҡатлы бейек йорттар һанап бөткөһөҙ. Улар араһында киң билдәле Парус исемлеһе айырылып тора. Архитектура мөғжизәһе булған ап-аҡ люкс-отелдең бейеклеге 321 метр. Фарсы ҡултығындағы яһалма утрауҙа урынлашҡан отель ярҙан бер нисә йөҙ метр алыҫлыҡта төҙөлгән. Уға баҫма буйлап ҡына барырға мөмкин. Отелдең өҫкө өлөшөндә вертолет һәм күҙәтеү майҙандары, рестарандар бар. Аҫҡы ресторан һыу аҫты донъяһының ғәжәйеп күренештәре менән уратылған.

Ҡунаҡхана номерының уртаса хаҡы тәүлегенә 40 мең һум. Аҙ аҡса түгел, шулай ҙа... Усаҡ янында уҙған төн, миңә ҡалһа, күберәк кинәнес килтерә. Ҡала үҙәгендә донъялағы иң бейек бинаны – Йорт-Башняны төҙөү бара. Бейеклеге — 700 метр, 200 ҡаттан торасаҡ. Башня Дубаиҙың барса йорттарын бейеклеккә уҙып киткән, әммә эш ҡайнай ғына. Генподрядтың тендерын япон фирмаһы «Samsung» яулаған.

Яҡындағы комплекс «Яһалма ҡар тауы» тип атала икән. Саңғы шыуыу юлы – 60 метр, 5 трассаның дөйөм оҙонлоғо – 400 метр. Утыҙ градус эҫелектә тауҙан саңғыла шыуып төшөү харап мәрәкә!

Ҡала эсенә оҙонлоғо 20 километрға һуҙылған диңгеҙ ҡултығы ослайып инә. Тарлығы менән тәрән йылға йырҙаһына ла оҡшап китә. Уның аша ҡаланыҡылар түбәһе туҡыма менән ябылған, буйынан-буйына киң эскәмйәләр ултыртылған төбө яҫы диңгеҙ трамвайҙарында йөрөй. Урындағы халыҡ был такси төрөн «абр» тип атай. Бухтала бер нисә рәткә йәнәш, алғы өлөшө артҡыһына ҡаратып, каботаж караптар теҙелгән. Уларҙы тоташтырған траптар буйлап йөк ташыусылар тегендә-бында йүгергеләй: берәүҙәре трюмдарҙы бушата, икенселәре тейәй.

Ҡала урамдарындағы автомобиль тығындары – ғәҙәти күренеш. Хәл ғәрәптәрҙең «Тойота», «Ниссан», «Мерседес» кеүек ҙур джиптарҙы үҙ итеүе менән бермә-бер киҫкенләшә. Иҫке машиналар аҙ. Ғаиләлә, ҡағиҙә булараҡ, ике автомобиль. Береһендә эре генә – яңғыҙаҡ ир, икенсеһендә балалары менән ҡатыны йөрөй.

Ҡала ситендә рәт-рәт булып бөтә билдәле автобренд салондарының һайланма павильондары теҙелеп киткән.

БҒӘ ҡалалары урамдарында, исмаһам, бер генә бөртөк булһа ла кешенең

осрамауы аптырата ла, шикләндерә лә. Бәхтиһәң, барыһы ла үҙ машиналарында елдерә, йәйәү йөрөү был илдә әҙәпһеҙлек һанала, имеш. Аҡ тәнле йәйәүлене күргән такси водителе һис шикһеҙ тормозға баҫасаҡ: «Бәлки, бер-бер хәл булғандыр, ярҙам кәрәктер?» Ирҙәр оҙон итәкле аҡ мамыҡ күлдәктәрҙә — галабияларҙа (икенсе исеме — кандура) йөрөй. Иркен беселгән күлдәк һауаның яҡшы циркуляцияһына булышлыҡ итә. Ирҙәр башына ике ҡатлы тос ҡына ҡара балдаҡтар (икал) менән тотолған аҡ яулыҡ ябына — уныһы «гафия» тип атала. Ғәрәптәр, намыҫлы кеше сыбар кейемдә йөрөргә тейеш түгел, тигән ҡәтғи ышаныста йәшәй. Ир кешене аҡ кейем күркәм күрһәтә, тип һанала. Ҡатындарҙың һәм ҡыҙҙарҙың күлдәге лә, яулығы ла ҡара туҡыманан тегелә. Бәғзе ҡатын-ҡыҙҙың йөҙө асыҡ, берәүҙәренең күҙҙәре генә күренеп тора, икенселәре битен ҡара вуаль менән тулыһынса көпләп ҡуя. Тол ҡатындар зәңгәр күлдәк кейә. Аҡ кейемде ирҙән айырылған ҡатындар ғына кейергә хоҡуғы бар. Милли кейемдә БҒӘ граждандарына ғына йөрөргә рөхсәт ителә.

Ир-егеттәрҙең аҡ, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡара төҫтәге кейемгә өҫтөнлөк биреүе мәсьәләһенә килгәндә, ғәрәптәрҙең яуабы бер: ҡатын-ҡыҙ... — ир кешенең күләгәһе.

Дубаиҙы XXI быуаттың Вавилоны менән сағыштырыу урынлы булыр: берәй ҙур сауҙа үҙәгенә индеңме, төрлө мәҙәниәттәрҙең, телдәрҙең, кейем стилдәренең, йолаларҙың, көй-моңдарҙың ҡушылыуына шаҡ ҡатаһың. Бөтә милләттәрҙең дә вәкилдәре йыйылған тиерһең — барыһына ла тыныс, уңайлы. Кешеләрҙең сырайы асыҡ, ҡараштарында уҫаллыҡтың әҫәре лә юҡ.

Тағы шул оҡшай: һатыусылар көнсығыш сауҙаһына хас ныҡышлыҡ күрһәтмәй. Әммә мөрәжәғәт итһәң, шунда уҡ янға килеп, уны-быны аңлата һала. Рәсәйҙәрҙең, һәр хәлдә хәҙер, ғинуар айында, күп булыуы ҡыуандырҙы. Урыны-урыны менән урыҫ һөйләше күмеп тә киткеләй.

Спиртлы эсемлектәр бары тик ҡыйбатлы отелдәрҙә һәм рестарандарҙа ғына һатыла. Үҙем «эсмәйем тиерлек» категорияһына ҡарайым, шулай ҙа тыйыу булғанлыҡтанмы, һыра, шарап юҡлығынан мәхрүмлек тойғолары кисерә башланым. Тыйылған емеш татлы була, тиҙәр бит. Илдә уйын автоматтарының, казиноларҙың юҡлығы ла һөйөндөрҙө.

Заманса бейек йорттар фонында мәсет манараларының береһенән мәзиндәрҙең мегаполис шау-шыуы аша йырып үткән тулҡынландырғыс тауышын ишетеү минең өсөн көтөлмәгән хәл булды.

Ғәрәптәр футбол, теннис кеүек спорт төрҙәрен, күңел асыуға килгәндә, ат һәм дөйә сабыштарын үҙһенә. Ярыштар өсөн ҡаланың ярайһы уҡ иркен биләмәләре — ҡыҙыл таянғыстар менән уратылған дөйә тректары — бүленгән. Тректарҙың ғәҙәти оҙонлоғо — дүрт, һигеҙ йә ун километр. Тамашасылар сабыштарҙы машиналарында таянғыслы кәртә араһынан барған килеш күҙәтә. Әле яңыраҡ ҡына дөйәләрҙе 12 йәшкә тиклемге малайҙар сабыштыра ине, хәҙер уларҙы закон тарафынан индерелгән роботтар алмаштыра. Сабыштарҙа инә дөйәләр генә ҡатнаша — улар иркәк дөйәләргә ҡарағанда күпкә әүҙемерәк һәм етеҙерәк (тиҙлекте сәғәтенә 60 километрға тиклем еткерәләр). Яҡшы тоҡомдан булған бер үркәсле сабыш дөйәләренең хаҡы миллион ярым АҠШ долларынаса етә.

Дубаи ҡалаһынан сығып киткәндә, Дубаи илселеге хакимы шәйех Мөхәммәт Рәшит әл Мәктүмдең һарайына алып барған юлға боролдоҡ. Һарайҙы клумбалар, газондар, сәскә түтәлдәре уратып алған, бер аҙ ситтәрәк ағас йә ҡыуаҡлыҡтар ҡупшы ғына ултыра. Асфальт тигеҙлегендә тауис ҡоштар эре генә баҫып йөрөй, газонда ағуналар ҡыуыша, ағас араһында боландар утлай. Ҡойма һәм селтәрле ҡапҡалар аша һарайҙың йәшеллеккә күмелеп ултырыуын шәйләйһең. Ҡайтыр

юлға сыҡҡанда беҙҙе һоро «Мерседес» ҡыуып етте. Номер билдәләренең биш түгел, өс һанлы булыуы күҙгә ташланды. Водителебеҙ аңлатып бирҙе: «Шәйех ғаиләһе вәкиленең машинаһы...»

Келәм баҙарын үтеп киттек: юл буйына бер-береһенә төкөп торған киң павильондар ағас таяҡтарға һәм урҙаларға эленгән ебәк келәмдәр менән туп-тулы. Келәмдәрҙең үлсәме төрлөсә: берҙән алып утыҙ квадрат метрға тиклем ҙурлыҡтағыларынан һайлап була. Түңәрәк, оҙонса түңәрәк, фигуралы, тура мөйөшлө балаҫтар ҡапшап ҡарауға бәрхәттәй йомшаҡ, нәфис.

Замансалығы менән айырылып торған Дубаи ҡалаһын күреп ҡайтҡандан һуң алған тәьҫораттарҙы барлағанда, шуныһына ышаныуы бик ауыр ине: 40-50 йыл элек «нефткә тиклемге ғәрәп илселеге» ерендә балсыҡ менән һыланған таш өйлө кескәй ҡаласыҡтар ғына ултырған. Ҡомло, ҡая-ташлы, һирәк кенә оазислы ҡалған ерҙәрҙе бәҙәүиҙәр биләгән. Эҫе, ҡоро йәйҙәрен бәҙәүиҙәр оазистар тирәләй туплана. Октябрь айынан алып апрелгә тиклем был халыҡ, дөйәләргә атланып, ҡыҫҡа йөнлө һарыҡ көтөүе менән үҫемлеккә ярлы сәхрә буйлап сәйәхәт итә.

Бәҙәүиҙәрҙең тарихи тыуған йәнтөйәге Аравия ярымутрауының эске биләмәләре һанала. Сандыр, тарамыш кәүҙәле халыҡ сыҙамлылығы менән һәр төрлө ҡыйынлыҡтарҙы, мохтажлыҡтарҙы еңел генә үткәреп ебәреүҙәре менән айырылып тора. Меңәр йылдар буйы ер эшкәртеүҙе ҡолдар өлөшө һанап, игенселек менән шөғөлләнгән ҡәбиләләрҙе һанға һуҡмаған бәҙәүиҙәр XX быуат аҙағында, ултыраҡ тормоштоң уңайлыҡтарына ҡаршы тора алмай, үҙҙәренең тағатылмалы сатырҙарын — ике ҡатлы йорттарға, дөйәләрен «Тойота»ларға алмаштыра.

Бәҙәүиҙәрҙең бер ҡасан да документтары булмаған. Әле яңыраҡ ҡына улар, сиктәрҙе бар тип тә белмәй, мал өсөн уңайлы урындар эҙләп, көтөүҙәрен ҡыуа-ҡыуа, бер илдән икенсеһенә сәйәхәт иткән. Бәҙәүиҙәр — ҡитғалағы иң боронғо һәм үҙ-үҙенә йомолған халыҡтарҙың береһе. Ләкин һуңғы ун йыллыҡта быуаттар төпкөлөнән килгән ғөрөф-ғәҙәттәргә тоғролоҡ бер аҙ һүлпәнәйгән. Мәҫәлән, ғәрәптәр һәм бәҙәүиҙәр араһындағы ҡатнаш никах бөгөн әллә ни һирәк күренеш түгел. Күсмә халыҡ ваҡытлыса торлаҡтарҙа көн күрә: ҡатындар ыҡсым ғына станоктарында кәзә һәм дөйә йөнөнән ҡалын, шыраулы тауар туҡып, бер-береһенә ялғай һәм палаткалар тегә. Икенсе урынға күсергә булһалар, бәҙәүиҙәр палатканың тирәсен һәм таяуҙарын бергә төйнәп, дөйәләргә артмаҡлайҙар.

Сатырҙа йәшәү урыны икегә бүленә — ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар яғына. Һәр яҡтың үҙ сыуалы бар.

Ғаиләлә, ғәҙәттә, төп көс ҡатын-ҡыҙға төшә: мал ҡарау, ашарға бешереү, кейем тегеү. Сит ирҙәргә ҡатын-ҡыҙҙар эргәһенә яҡынайыу тыйыла. Әгәр ҙә бәҙәүиҙәргә ингән юлсы ҡабаланмай икән, бының билдәһе итеп ул аяҡ кейемен сисергә тейеш. Иң ҡанунлашҡан йолаларҙың береһе булып ҡәһүә эсеү церемонияһы һанала: ул бер-береһенә тығыҙ бәйле хәрәкәттәрҙән тора — тәүҙә ҡәһүә орлоҡтарын ҡыҙҙыралар, артабан килелә төйәләр, шунан музыка уйнатып, ҡунаҡтарҙы өҫтәл янына саҡыралар. Эсемлекте махсус һауытта ҡайнаталар һәм уның тәүге тамсыһын ергә түгәләр. Беренселәрҙән булып ҡәһүәне хужа тәмләп ҡарай, шунан сәғәт йөрөшөнә ҡаршы яҡтан башлап башҡаларға таратыла.

Бәҙәүиҙәр араһында ҡайҙа ҡоҙоҡ ҡаҙырға кәрәк икәнлеген бер хатаһыҙ билдәләй алған, компасһыҙ көйөнә, йондоҙҙарға һәм ер өҫтө төҙөлөшөнә ҡарап ҡына каруанды маҡсатлы әйҙәгән, ҡом бурандары хаҡында алдан иҫкәртеп, ҡәрҙәштәрен ҡом тауҙары борҡорауында һәләкәттән ҡотҡарғандар байтаҡ.

Уларҙың күп ҡатлы, еңел кейеме бер үк ваҡытта һауа ла үткәрә, ҡояш йылыһын да тотоп ҡала. Башты һәм муйынды ураған туҡыма сүллектә дым юғалтыуҙан һәм битте ваҡ ҡомдан һаҡлай.

XX быуатҡа ҡараған күсмә тормош менән йәшәүсе бәҙәүиҙәрҙең ваҡытлыса

туҡталҡа урындары һәм XXI быуат башындағы ялтырап торған быялалы бейек йорттар төркөмө – Фарсы ҡултығындағы нефткә бай илдең контрастары бына ошолай.

Ғәҙел булғанда, кеше аҡылының уй-хыялдарын кәүҙәләндергән бейек йорттарға нисек кенә һушың китмәһен, барыбер улар алдында үҙеңде кескәй себен ише тояһың. Заманса биналарҙа йәнгә йылылыҡ һәм йәм юҡ. Тормошта ярлы хис-тойғо менән йәшәү өҫтөнгә сыға. Йән – цивилизация тарафынан тыуҙырылған бәхет төшөнсәһе, ул матди ҡиммәттәрҙән азат һәм барыһы ла ябай, тәбиғи, аңлайышлы булған бәҙәүи йәйләүенә, уның төтөнлө усағы янына, атлыға.

## Ғәрәп тауҙары

Бөгөн таштары ыуалып торған тау һырттары буйлап баш әйләндергес раллиҙан һуң организмым адреналиндың йыллыҡ өлөшөн алғандыр. Күңел асыуҙың был төрө менән мауығыусылар өсөн БҒӘ-ҙә сүллектең матур күренешле йәтеш урыны бүленгән. Бындағы ҡом таҙа һәм ҡыҙғылт-көрән төҫтә, ә өс-биш метрлыҡ ғәҙәти ҡом убалары бейеклеге 50–70 метр булған һырттар менән алмашынып китә! Тауҙарҙың ҡырластарын һәм осло сусаҡтарын тәрән соҡорҙар, тарлауыҡтар айыра. Беҙҙең төркөм дүрт джипта сәғәттән ашыу тиерлек шулар буйлап елдереп йөрөнө. Маһир водителдәр машинаны йә һарҡыуға ҡыуа, йә, кинәт боролоп, текә ҡыразды штурмлай, йә тәгәрмәстәрҙән күтәрелгән ҡом ҡойонона ҡойоноп, тау сусағына ырғылабыҙ. Менәбеҙ ҙә бер нисә секундҡа һауала алғы тәгәрмәстәр менән аҫылынып торған хәлдә ҡатып ҡалабыҙ. Һуңынан артылыштың икенсе яғына ауышып, йәнә аҫҡа ҡарай тәгәрәйбеҙ.

Ниһайәт, барыбыҙ ҙа өс сусаҡлы түмәләскә ҡундыҡ һәм тирә-яғынан себен кеүек һырып алдыҡ. Тигеҙлек нөктәһен самалап, шул түбәләрҙең береһендә беҙ ҙә ҡатып ҡалдыҡ. Беҙҙән тирә-яҡҡа ҡом «һырттары» һуҙылып китә, ә ике-өс километр алыҫлыҡта сусаҡтары төтөн сығарып торған тағы бер нисә «тау массивы» тырпая. Уларҙан һуң, бөтә киңлекте тултырып, ел ихтыяры менән көн һайын урындан-урынға күсеп йөрөгән ҡом тауҙары даръяһы йәйелгән.

Көнбайышта асылған иҫ киткес панорама киске шәфәҡ күркәмлеге менән тулыланғайны. Уттай ҡыҙған ҡояш, әйтерһең дә, офоҡтағы ҡомдо ирекән дә, күк йөҙөн ҡарағусҡыл-ҡыҙғылт яҡтылыҡҡа мансып ҡуйған – уныһы беҙгә етәрәк зәңгәр төҫкә инә. Тирә-яҡ һил – осло тау сусаҡтарында һуҙылып ятҡан ҡом юлаҡтарының ел ыңғайына өрөп төшөрөлгәнлеге ҡолаҡҡа салынғандай хатта.



Күрше тау түбәләрендә өс джип ҡатып ҡалған. Водителебеҙҙең иң бейек сусаҡҡа атланып ултырғанлығына төшөнөү күңелгә рәхәтлек бирә. Ҡояш батыу менән джиптарҙың барыһы ла, команда бирелгәндәй, бер юлы аҫҡа ҡарай ысҡынып, аҡылдан яҙған тараҡандар ише, тау һырттары аша һаман да эҫелек бөркөп торған асфальттың ҡара таҫмаһына табан елдерҙе.

Икенсе «пескодром»ға ҡараңғы төшкәс кенә килеп еттек. (Был киңлектәрҙә эңер бик тиҙ төшә – күҙенде асып йомғансы, гүйә, декорация алмашына.) Ҡараһаҡ, квадрациклдарҙа туристар елдереп йөрөй. Беҙҙең төркөмдән бер минең генә ҡырсынлы ҡом буйлап «ҡорос ат»та сабырға ҡыйыулығым етте. Улар әллә ни бейек түгел, әммә яҡшы ғына ҡыуып килгәндән һуң... миңә ике-өс метр тирәһе һауанан «осоп барыу» мөмкинлеге тейҙе. Ҡорос «ат»та осоп китеп барған ыңғайы өр-яңы һәм үткер хис тыуа. Һай, елкенгән йөрәк!

Иҫтәлекле көндөң иң һуңында бәҙәүи ауылына һуғылдыҡ: ул туристар өсөн махсус рәүештә төҙөлгән булған. Айһыҙ төндә уны майҙанында сағыу янған усаҡтар ғына әҙ-мәҙ күрһәтә. Беҙ килеп еткәнсе ҡапҡа янында иллегә яҡын джип йыйылып киткән. Ялҡын телдәре яҡтыһында бәҙәүи ауылы, дөйәләр, тәрән таш ҡоҙоҡ, аҡ кейемдәге ғәрәптәр, ҡуҙ мейесендә ҡыҙҙырылған ит, майшәмдәр, кальян төтөнөнөң хуш еҫе үткән замандарҙың тере кәүҙәләнеше булараҡ ҡабул ителде.

Түңәрәк уйымы беҙҙәге кеүек ҡабырғаһында түгел, ә өҫтөндә урынлашҡан ай ҡалҡты. Яҡшы яҡтыртылған ҡамыш павильонда теләгән бер кеше аҡ киндерҙән тегелгән галабия кейеп, үҙен ваҡытлыса ғына булһа ла бәҙәүи итеп тоя ала. Мин башыма ҡыҙылға аҡ шаҡмаҡтар төшөрөлгән яулыҡ урап, өҫтөнән ике ҡатлы ауыр ҡулсалар менән (икало) нығытып ҡуйҙым. Яныма зауыҡлы биҙәүле бер үркәсле дөйәне етәкләп килтерҙеләр. Ул аяҡтарын бөкләп ҡомға ятты. Эйәргә ултырып ағас ҡашағаһына тотоноуым булды, «сүл карабы» ике тапҡыр киң эйелеп, өс метрға яҡын бейеклеккә күтәрҙе. Бер нисә фотокадр йөҙөмдә сағылып ҡалған ғорурлыҡ хисен мәңгеләштергән: мин, ысын бәҙәүиҙәр ише, аҫта соҡсоноп йөрөүсе кешеләргә өҫтән генә ҡарап торам...

Ауылда беҙҙе көткәндәр: оҙон өҫтәлдәргә ит, балыҡ, табикмәктәр, еләк-емеш тау-тау итеп өйөлгән. Һәр кем йәне нимә теләй шуны тәрилкәһенә һалып ала ла тура мөйөшлө киң майҙанға төкөп торған тәпәш өҫтәлдәр артына, яҫтыҡтарға барып ҡунаҡлай. Киске аш мәжлесе ҡыҙғайны, дәртле көнсығыш көйө яңғырап китте һәм майҙан уртаһына бейеүсе ҡыҙ йүгерекләп сыҡты. Күңелләнеп алған ҡунаҡтарҙың бәғзеләре уға ҡушылды. Рәсәйҙәрҙең уғата оялсанлығы тураһында киң таралған имеш-мимештәргә килгәндә, әйтеп китеү урынлы: был байрамда тап рәсәйҙәр кәйеф-сафаның уртаһында булды. Көнсығыш бейеүе менән мөрхәтһенмәгәндәр яҫтыҡтарға йәйелеп ятып, кальяндың хуш еҫле төтөнөн һурырға кереште. Кальян тартыу модаһы Фарсы ҡултығындағы илдәргә сағыштырмаса яңыраҡ, XVII быуатта, Төркиәнән ингән. Ғәрәптәр кальян тартыу шөғөлөнә тиҙ арала уҡ өйрәнеп, үҙҙәренең милли ғәҙәтенә әйләндереп тә ебәрә. Кальян дүрт өлөштән: мөштөктән, кальяндың өҫкө яғынан, төрөпкәнән һәм һыу өсөн тәғәйенләнгән һауыттан тора. Төтөн килтереп сығарыу маҡсатында, тәмәке үләне ҡулланыла – япраҡтарҙы төрлө-төрлө ароматизаторҙарҙа ебетәләр. Артабан уны кескәй кәсәгә һалалар ҙа өҫтөн ҡуҙланып торған күмер менән баҫырып ҡуялар. Хуш еҫле быу, һыу аша үткәс, тәмәке составында булған ыҫмала һәм башҡа зарарлы ҡушылдыҡтарҙан таҙара. (Кальянды үҙ ғүмеремдә бер нисә тапҡыр тартып ҡарағаным бар. Шәхси тәжрибәгә таянып, шуны әйтә алам: был шөғөл 5 – 7 тапҡыр һурыу менән генә сикләнгәндә генә ҡәнәғәтлек тойғоһо килтерә. Оҙаҡҡа һуҙылһа, ыңғай тәьҫораттар һүрелә, мейе зеңкеп ауырта башлай. Бәғзе берәүҙә, бәлки, улай түгелдер...)

«Океаник»ка бик һуң әйләнеп ҡайттыҡ. Юл ыңғайы кескәй генә автобусыбыҙға әйләнгән һайын таш тейәгән бейек «VOLVO» самосвалдары ҡаршы осраны – улар ҡырлас тауҙар яғынан Дубаи ҡалаһына табан елә. Бер колоннала ғына 300-гә яҡын автомашина һананым. Төн эсендә (уларға көндөҙ йөрөргә рөхсәт ителмәй) Фарсы ҡултығы яр буйына 2-3 рейс яһала. Килтергән йөгөн диңгеҙгә бушаталар – яңы виллалар һәм отелдәр өсөн майҙандар кәрәк.

Юлдар һәйбәт. Уларҙы төҙөү һәм тәртиптә тотоу, Рәсәйҙән айырмалы рәүештә, дәүләткә бик арзанға тура килә. Ер ҡаты, ҡомо һәм битумы ҡул аҫтында ғына, тупраҡтың ишелеп төшөү осраҡтары, сатлама һыуыҡтар юҡ.

Төп магистралдәр бөтә оҙонлоғонда яҡтыртыулы. Автострадалағы тиҙлек сәғәтенә 120 километрҙан артырға тейеш түгел, әммә ғәрәптәр машинаны 150 менән дә ҡыуып йөрөй. Был илдә сәйәхәттә булған ваҡыт арауығында полицейскийҙарҙы ни бары 2 тапҡыр ғына күрҙем. Шулай ҙа авария-фәлән була ҡалһа, улар бик тиҙ, ярты тәғәт эсендә, барып етә һәм протокол төҙөй башлай: ҡалала килеп тыуғанмы был юл-транспорт ваҡиғаһы, трассаламы – уныһы мөһим түгел.

## Нептунда ҡунаҡта

Һуңғы ике көнөмдө диңгеҙгә арнаным. Көслө ел арҡаһында диңгеҙ өҫтөн шторм баҫты. Катерҙың йөҙөп китеү ваҡытын кисектереп торҙолар – беҙ, туристар, диңгеҙгә сумырға тейеш инек. Ваҡытты бушҡа уҙғармаҫ өсөн мин ял итеүселәр араһында киң таралған шөғөлгә – алтынһыу ҡомда ҡыҙыныуға барып ҡушылдым. Ҡаршыбыҙҙа йыуан таш түңгәк ише утрау һерәйеп тора, ә алыҫта, офоҡ сигендәгендә, диңгеҙ лайнерҙарының һәм яхталарҙың ағарып торған һындары шәйләнә.

Тоноҡ ҡына геүләүсе тулҡындар яр буйында бәргеләнә. Ҡояш нурҙарын үҙенә һеңдергән һыу йымылдап торған зөбәржәт ҡырҙары кеүек балҡый. Ҡомда ҡыҙынып ятҡан арала диңгеҙ минән яҡынса 20 метрға алыҫлашырға өлгөргән икән. Яланғасланып ҡалған ҡомға һәм һуйырташтарға балалар йүгерешеп килеп етте: ҡабырсаҡ йыялар, сар ҙа сор үҙенә йәшенер урын эҙләп таштан-ташҡа үрмәләгән ҡыҫалаларҙы баҫтыралар.

Ниһайәт, ел тымды, диңгеҙ тыныслана төштө һәм беҙ, дайверҙар төркөмө, тиҙ йөрөшлө катерға ултырып, бер кешеһе лә булмаған диңгеҙ ҡултығына юлландыҡ.

Дөм-ҡараңғы мәмерйәләре һәм мәрйен өйөмдәре менән арбап тороусы диңгеҙ һыуынан әкәмәт сүрәттә ашалған иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡая таштарға аллы-гөллө балыҡ эркеүе ҡамауында (мин уларҙы тутыйғоштар тип йөрөтәм) килеп төштөк. Тәрәнлекте күрһәтеүсе махсус ҡулайлама 18 метрҙы күрһәтә. Ҡолаҡтарымды өрҙөрткәс, уларҙың һыҙлауы баҫыла төшкәндәй, ҡан баҫымы ла тигеҙләнә.

Тығыҙ төркөм менән һыу төбөнән ярты метр бейеклектә йөҙәбеҙ. Балыҡтарҙың һәм тирә-йүндең хозурлығына һоҡланып, хис-тойғоларҙы «о' кей!» ауазы менән белдерәбеҙ. Һыу аҫтында ваҡыт ерҙәгенә ҡарағанда тиҙерәк үтә. Инструктор кислород баллонының баҫым күрһәткесенә ҡарап ҡуйҙы ла «барығыҙ ҙа – өҫкә!» командаһын бирҙе. Катерҙа, ҡурғаш биллектәрҙе һәм баллонлы жилеттарҙы сискәс тә, кемеһе сәйгә, кемеһе минераль һыуға йомолдо – сумыуҙан һуң организм бик ныҡ һыуһыҙлана. Кисен, ике сәғәт буйы отель ресторанында киске ашта ултырған ваҡытта шундай фекергә киләм: бик әкрен ҡыланғанда, аҙыҡ ейеү менән төшкө йәки киске аш тулыһынса эшкәртелеп, ашҡаҙан «әйҙә тағы!» ымишараһын биргәнсе һуҙырға һәм уны осһоҙ-ҡыйырһыҙ процесҡа әйләндерергә мөмкин. Иртән иртүк беҙҙең оҙатып йөрөүсебеҙ ярымутрау осонда урынлашҡан Оман анклавын күрергә теләүселәрҙе алып китте. Артабан яхтала ғәжәйеп уңай, һыу инеү, сумыу, балыҡ ҡармаҡлау мөмкинлеге булған диңгеҙ ҡултыҡтарының береһенә юлланырға тейеш инек. Сик һыҙатында бер ниндәй ҙә КПП юҡ, бары тик «Оман солтанатына рәхим итегеҙ!» тигән яҙыу эленеп тора.

Күҙ күреме етерлек арауыҡ тау һырты рәттәре менән тулған. Нимәһе менәндер Урал тауҙарын да хәтерләтеп ҡуя, ләкин уларҙың киртләс-ҡырластары күпкә ослораҡ һәм тирә-йүндә бер семтем тупраҡ әҫәре юҡ – ни бары һорғолт пирамидалар ғына.

Унлаған балыҡ тотоу һәм ял итеү өсөн тәғәйенләнгән елкәнле кәмәләр бәүелгән

пристандән төштән һуң ҡуҙғалдыҡ. Яр буйлап һуҙылып килгән һәм ваҡыт (иң оҫта таш шымартыусы) тарафынан ашалған тауҙар зәңгәрһыу томанда ирепюҡҡа сыға. Диңгеҙ, тауҙар, балҡып торған күк көмбәҙе — барыһы ла ҡояш нуры тултырылған ҙур бер һауытҡа оҡшаш беленер-беленмәҫ миғражға килеп ҡушыла.

Якорҙы аулаҡ бухтаға ташланыҡ. Уға инеү урыны тулҡындар тарафынан киртелеп бөткән ҙур тешле оло ауыҙға тартым. Ат дағаһы формаһындағы ваҡ ҡына аҡ ҡомло пляж ике осо менән тау тармаҡтарына барып терәлә. Һыу йоҡоға талғандай тыныс.

Тантаналы һәм тәрән тынлыҡта якорь төшөргән ваҡыттағы сыңйыр тауышы ҡот осҡос шау ише ишетелә. Маска һәм ласталар кейеп, мин асыҡ океан башланған «ишектәр»гә ҡарай йөҙәм. Ҡапыл һыуҙың йәшкелт үтә күренмәлелеген ниндәйҙер ҡыҙғылт микроорганизмдарҙың мыжғыуы баҫып алды. Күреү мөмкинлеге шундуҡ ярты метрғаса түбәнәйҙе. Бер ни күрмәй тиерлек баяғы «болот» аша йөҙөп үтеп киткәс, иҫ китмәле ҙур диңгеҙ ташбаҡаһы менән осрашыу бәхете тейҙе. Ул мине шәйләмәне, һәм мин оҙаҡ ҡына был ғифриттең йә бер, йә икенсе йөҙгөс тәпәйе менән танауы осонда өйөрөлөп йөрөгән кескәй генә балыҡтарҙы һелтәнеп ҡыуып маташыуын күҙәтеп торҙом.

Янбыҙҙан шулай уҡ үҙ дәрәжәләрен белеп кенә йөҙөп барыусы олпат, ҙур балыҡтар, «тутыйғоштар», «буй-буй биҙәклеләр» эркеүе уҙып китә. Һыу аҫтының сәйер йәшәүселәре, ҡырағай ҡая таштарын ҡаплап бөткән төрлө төҫтәге ылымыҡтар һәм мәрйендәр әйләнәһендә тороп ҡалһам, үҙемде аңлата алмаҫлыҡ бәхетле тоям. Бығаса минең өсөн тамаша ҡылыу мөмкинлеге булмаған хыяли, космос өсөн генә хас үҙенсәлекле бер матурлыҡҡа эйә донъяны хәҙер, форсаты сыҡҡан һайын, күҙәтеп туя алмайым. Үҙенде икенсе планетаға килеп эләккән кеүек итеп хис итәһең. Бөтә нәмә лә ғәҙәттән тыш һәм ысынбарлыҡҡа тап килмәгәндәй.

Оло-оло таштар араһында сумырға тырышып ҡараһам да, ниәтем килеп сыҡманы: беренсенән, һуҡма тулҡындар бик көслө ине, икенсенән, диңгеҙҙең тура һәм кире ағымы менән көрәшә-көрәшә ҡая сығынтыһына һуғылып, тәнем сыйылып бөткәйне.

Сәғәт ярым эсендә беҙҙең төркөмдән ике кеше ауырлығы өс-дүрт килограмм тартыр берәр барракуда тотоп алды. Өсөнсөһө тотоп та өлгөрҙө, карап бортына ярты метр ҡалғас төшөрөп тә ебәрҙе. «Уф, Алла!» — тип бошоноуынан был егеттең беҙҙең яҡтарҙан булыуын самаланым. Таныштыҡ. Саҡ ҡына яңылышҡанмын: Башҡортостандан түгел, Татарстандан икән.

Иртәгәһенә ҡарлы-буранлы Тыуған илебеҙгә ҡайтырға юлланабыҙ. Тиҙҙән яратҡан Өфөм, яҡындарым менән осрашасаҡмын, тип һөйөнһәм дә, был илде ташлап китеүебеҙгә бер аҙ эс бошонҡорай. Һаман да иң мөһимен, иң ҡыҙығын күрмәй ҡалғанмын төҫлө. Күрһәм дә, бәлки, уның асылына төшөнөп, тойоп өлгөрмәгәнмендер.

Киске аштан һуң яр буйында диңгеҙҙең икһеҙ-сикһеҙ, арбағыс шауына ойоп ултырҙым. Тулҡындарҙың бәғзеләре хәйләле ҡыштырҙап аяҡтарыма тәгәрәп килә лә үҙҙәренең артынан саҡыра кеүек. Ҡып-ҡыҙыл ҡояш офоҡҡа төшөп етте лә, яй ғына, әммә бер мәлгә лә туҡтамайынса, диңгеҙгә сума башланы. Тулҡын бөҙөрө буйлап утлы «һуҡмаҡ» ятты. «Бында ҡабат килеүең икеле», — тип уйланым мин моңһоу ғына. Ниңә, тиһегеҙме? Ҡәләмдәшем Михаил Чванов был йәһәттән бик тапҡыр яуап биргән: «Ерҙә матур урындар бихисап, шунлыҡтан бер һуҡмаҡтан ике тапҡыр йөрөмәҫкә лә мөмкин».

Әйткәндәй, урындағы халыҡ хатта кескәй генә шатлыҡтарға ла риза булып йәшәй белә. Уларға беренселеккә ынтылыу, көнләшеү хас түгел. Һәр кем хәленә ҡарап, бөтә нәмә лә: бәхет тә, ҡайғы ла Хоҙай Тәғәлә ихтыярында, тип йәшәп тик ята. Аллаһ әмеренә ҡаршы барыу ҙур гонаһ һанала.

Ихтирам нигеҙендә төҙөлгән үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе күҙәтәм дә: «Кеше һәр кемде ярата алмай, әммә уларға шәфҡәтле һәм түҙемле була ала», — тигән әйтемде иҫемә төшөрәм.

Йәнә шуға иғтибар иттем: ғәрәп донъяһы, европалылар менән сағыштырып ҡарағанда, ҡабаланмай йәшәй һәм, шуға ҡарамаҫтан, күп нәмәгә өлгөрә.

Меңйыллыҡтар карауаны уҙа тора, ә бындағы әхлаҡ һәм тәртип нигеҙҙәре үҙгәрмәй тиерлек. Яҡшымы был, насармы? Әйтеүе ҡыйын. Уның ҡарауы, кешеләре ҡәнәғәт һәм был — иң мөһиме.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны өҫтәгем килә: Әмирәт халҡы беҙҙе хөрмәт итә. Лайыҡлыбыҙ, тимәк, тигән һығымта яһаным. Үҙебеҙгә үҙебеҙ хөрмәт менән ҡарай башларға ваҡыттыр инде. Үткәндәргә төкөрөп йәшәгәндә, бәхетле киләсәктең нигеҙен ҡороп булмай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, башланған һәр нәмәнең аҙағы ла була. Берләшкән Ғәрәп Әмирәттәре менән танышыу тамам. Сәйәхәт итергә яратыуым тағы ҡайҙарға илтер мине? Тиҙҙән белерһегеҙ, тип ышанам...

**Руссанан Ләйсән МАРАҠАНОВА тәржемәһе.**

---

## Аргентина — күңелдәрҙе арбар ил

Ғәжәп, әммә аграр ил булып һаналған Аргентина, — ҡаҙылма байлыҡтан, сәнәғәттән алынған килеме менән маҡтана алмаһа ла, ентекле уйлап тормошҡа ашырылған ауыл хужалығы (бойҙай, шарап, тире һәм унан эшләнгән әйберҙәрҙе сит илдәргә сығарыу) иҫәбенә Көньяҡ Америка ҡитғаһында үҙенең 40 миллионлы халҡын мул көнкүреш менән тәьмин иткән иң бай илдәрҙең береһе ул.

Аргентина Көньяҡ Америка “ҡойроғо”ноң көнбайыш өлөшөн биләй. Майҙанының ҙурлығы буйынса донъяла һигеҙенсе булһа, ҡитғала иһә, Бразилиянан ҡала, икенсе урында.

Төньяҡтан көньяҡҡа табан бихисап саҡрымдарға һуҙылыу сәбәпле, февраль айында һауа температураһы төньяҡта +38$^0$С, ә көньяҡта, Антарктидаға яҡын Утлы ерҙә, -2$^0$С ҡына булыуы ихтимал.

Ил сиктән тыш европалашҡан. Аргентиндар ниңәлер бының менән маһайып, бүтән көньяҡ американдарҙан үҙҙәрен өҫтөн ҡуйыусан. Был айырыуса Буэнос-Айрес ҡалаһында ныҡ күҙгә ташлана. Баш ҡала халҡының илдәре донъя күләмендә “иң-иң”дәрҙең береһе булыуына шиге юҡ. Улай тиһәң, беҙҙең йәшәү кимәле менән аргентиндарҙыҡын сағыштырып, береһенә лә атап ҡына өҫтөнлөк биреп булмаҫ ине.

Үҙәктән ситтә йәшәүселәр ябайлыҡтары менән айырылып тора. Лидерлыҡ өсөн көрәш, байлыҡ, абруй улар өсөн мөһим түгел. Үҙҙәренә тәғәйен эште лайыҡлы башҡарып, һәүетемсә генә аҡҡан тормоштарына шөкөр ҡылып ғүмер итеүҙәренән ҡәнәғәт кеүектәр.

Ерән төҫлө ҡыу үләндәр, сәнскеле ҡыуаҡтар менән сыбарланған һөҙәк ҡалҡыулыҡтарҙан торған, ҡоро йырҙалар менән йырғысланған ташлы ярымсүл — Патагония яйлағы (плато) байтаҡ ҡына территорияны үҙ эсенә ала. Бынан бер нисә тиҫтә йыл элек кенә Аргентина ковбой-гаучолары Патагонияның ташлы ҡалҡыулыҡтарында ике метр бейеклектәге ғәйәт ҙур тәгәрмәстәргә ултыртылған бер күсәрле арбала күсмә тормош менән көн иткән. Бындай дәү тәгәрмәстәр һарыҡташтар һибелгән юлһыҙ майҙандарҙа ҡуй, һыйыр көтөүлектәре өсөн яйлы

ерҙәр эҙләп даими рәүештә күсенеп йөрөү йәһәтенән уңайлы һаналған. Көнбайыштан Патагония биленә тиклем ап-аҡ боҙлоҡтар менән ҡапланған иҫ киткес бейек Анд тауҙары теҙмәһенә теркәлә, ә яйлаҡтың шаҡтай уйһыу ҡырыйҙарын Атлантик океан һыуҙары йыуа. Шуныһы сәйер: һыуҙың үтә күренеүсәнлеге самалы. Өҫтәүенә, төньяҡҡа табан тоноҡлоғо арта бара. Иң таҙа һыу Утлы ер районында, әммә бында ла уның үтә күренеүсәнлеге ни бары дүрт-биш метрҙан ғына. Буэнос-Айрес ҡалаһы биләмәләрендәге һыу балсыҡ төҫөн хәтерләтә — сафлығы ноль кимәлендә. Был, минеңсә, Атлантикаға ағып төшөүсе йылғаларҙың тәбиғи буръяҡлығына бәйле.

Атлантик океандан иҫеүсе елдәр Патагонияла йыш ҡына ҡом бурандарын уйната. Юлдарында бер ниндәй ҡаршылыҡ осратмаған циклондар ташлы ярымсүл өҫтөнән бик иркен үтеп, осло түбәле Анд диуарҙарына килеп теркәлгәс, бөтә дымды шунда ҡалдырып китә. Тымыҡ океандан йүнәлгән ҡар-ямғыр ҙа мәғрур тауҙарҙы әленән-әле ҡойондороп ҡына тора. Һөҙөмтәлә мөһабәт боҙлоҡтар хасил булған. Утлы ергә саҡлы һуҙылған параллель ҡалҡыулыҡтар теҙмәһе ошо яҫы боҙлоҡтар менән ҡапланған. Беҙ уларҙың Перито Морено һәм Виедма тигән иң ҙурҙары аша үттек. Боҙ менән тулған тарлауыҡтарҙағы глетчерҙарҙың, йәғни тауҙарҙан шыуышып төшкән боҙлауыҡтарҙың ҡалынлығы 500—700 метрға етә. Үҙҙәре артынан әллә нисә саҡрымдарға һуҙылған “тел”дәр ҡалдырып шыуған боҙҙар, яр ситенә еткәс, киҫәктәргә ваҡланып, ике метр бейеклектәге тулҡындар урғылтып, гөрһөлдәп һыуға төшә. Бәғзеләре һелкенеүҙән гәлсәр кеүек онталып, ярсыҡтары ян-яҡҡа сәселә. Яңы ғына барлыҡҡа килгән айсбергты ҡамап алған боҙ онтаҡтары бер-береһенә ышҡылып тулғаналар, саңлауҙағы асыулы диңгеҙ арыҫландарын хәтерләткән ауаздар сығарып, йөрәккә шом йүгертәләр. Йөҙөп йөрөгән боҙ тауҙарының берәүҙәре аҡ булһа, икенселәре зәп-зәңгәр төҫтә. Йәшелдәре лә осрап ҡуя. Ҡайһылары тотош монолит, йәғни бөтөн таш, ә берәүҙәре йылтылдап торған эре кристалдарҙан уҡмашып тора. Ҡоро ергә сыҡҡан боҙлоҡтар алдында, ҡағиҙә буларaҡ, бейеклеге алтмыш метрға еткән дуға рәүешле мореналар, йәғни боҙҙар менән шыуып төшкән тау тоҡомдары өйөлөп ята. Былар — әүәлге, күпкә еллерәк боҙлоҡтарҙың эҙҙәре.

Патагонияның тупрағы төньяҡта ҡараһыу-һоро, ә көньяҡҡа табан төҫө асыҡлана бара. Дым етешмәүҙең һөҙөмтәһе, күрәһең. Ҡояш көньяҡ киңлектәрҙә күк көмбәҙенең төньяҡ яртыһында йөрөй. Шул сәбәпле, тауҙарҙың һәм ҡалҡыулыҡтарҙың төньяҡ битләүҙәре көньяҡ өлөштәренә ҡарағанда яҡшыраҡ йылына (беҙҙә иһә киреһенсә). Һыуҙар, ишелеп-ҡушылып, сәғәт йүнәлешенә ҡаршы борола. Патагонияның төпкөл райондарына юлдар юҡ, шуға халыҡ бында бик аҙ йәшәй, ә был, үҙ сиратында, тәбиғәтте кеше ҡулы тейеүҙән һаҡлап ҡалған.

Ҡырағай хайуандар донъяһы көнсығышта ярлы, уның ҡарауы көнбайышта ифрат бай һәм төрлө. Айырыуса Анд тауҙары итәгендә. Бында ҡуяндар (урыны менән тиҙәктәре ерҙе келәм кеүек ҡаплай), төлкөләр, пумалар, страустар, анд кондоралары, алһыу фламинголар бик күп. Сағыштырмаса ҡоро райондарҙа көтөү-көтөү гуанак — юғары анд ламаларының тигеҙлекте үҙ итеүсе ҡәрҙәш төрө — йөрөй.

Ҡултыҡтар, боғаҙҙар, күлдәр менән телгеләнгән тауҙар иле — ул Утлы ер архипелагы. Көньяҡ Американың антарктик сиге бында. Урмандары ҡуйы, бер типта. Аяҡ аҫты ҡумырыҡтар, йәғни ел ауҙарған ағастар менән тулған. Урмандар диңгеҙ кимәленән 300 метрға тиклем генә ҡалҡыу урындарҙа үҫә. Өҫтәрәк иһә яланғас ҡарлы таштар һәм боҙлоҡтар. Йығылған ағастар түбән температурала йөҙәр йыл дауамында серей.

Материктан архипелаг — Магеллан, ә Антарктиданан Дрейк боғаҙҙары менән бүленеп тора.

Утлы ер утрауҙарында осмаҫ диңгеҙ ҡоштары пингвиндар, диңгеҙ

арыҫландарының ҙур-ҙур колониялары ҡаршылай. Диңгеҙ арыҫланы – был ата ялҡау хайуан – тәне менән сәйер рәүештә таштарҙы ҡаплап, “ооуррр” тип ҡысҡырып ята. Ғәйәт ҙур аталары күпкә ҡарараҡ. Яр буйҙарын меңәрләгән пингвиндар төйәк иткән. Ерҙә килбәтһеҙ генә ҡоштар... һыуҙа һәләк шәп һәм етеҙ. Ваҡыты менән яр буйындағы һыу ҡайнап китәме ни: ҡоро ергә кемуҙарҙан бер-бер артлы пингвиндар ырғыла. Уларҙың ҡысҡырыуы ҡарғалар шау-шыуына оҡшаш, тик тауыштары оҙайлыраҡ һәм йомшағыраҡ. Шишмәләрҙә маһир плотина төҙөүселәр – ҡондоҙҙар күп. Ҡасандыр яңы климатҡа яраҡлаштырыу өсөн Канаданан йәмғеһе 50 ҡондоҙ алып килгәндәр, хәҙер уларҙың һаны 140 мең. Был һан архипелагта йәшәүсе кешеләр иҫәбенән күберәк. Үҙ сиратында, әлеге йәнлек урман өсөн хәүеф тыуҙыра: улар юлдарында осраған бөтөн нәмәне, шул иҫәптән серемтәне лә, аҙыҡҡа әйләндерә.

Аргентиндар – тәбиғәткә яҡын халыҡ, шуға уларҙың тирә-яҡ мөхиткә ҡараштары ла был йәһәттән һаҡсыл. Урманға сүп-сар тултырылған моҡсайҙарҙың ғына түгел, хатта тәмәке төпсөгө лә ташланмауы һоҡландыра. Рюкзакка тағылған сүп-сар моҡсайын махсус урынға илтеп ҡалдыралар. Беҙҙең илгә хас булған йәмһеҙ яҙыуҙарҙы, мәҫәлән, “Бында Миша булды” һымағыраҡтарҙы бер ерҙә лә осратмаҫһың.

Кибеттәрҙә бары аргентина шараптары ғына һатылыуы ҡыҙыҡ күренде. Был йәһәттән шарап етештереүселәр ҙә, ҡулланыусылар ҙа ҡәнәғәт. Сөнки һәр ике яҡтың ихтыяжы тулыһынса аҡлана: шараптың хаҡы ла арзан, сифаты ла шәп.

Автомобилдәр, нигеҙҙә, АҠШ-тыҡы йә Японияныҡы. Американыҡылар ниңәлер тотонолған, бик иҫке күренә, ә Японияла етештерелгәндәре – яңы ғыналар. Патагонияның ташлы юлдарында бөтә ерҙәрҙе бер итеп үтеп йөрөгән беҙҙең “Нива”ны ла осратырға мөмкин. Ул бында бик осһоҙ – ни бары 6000 АҠШ доллары.

Ауыл ерендә эттәрҙе бик күп тоталар. Улар шундай ҙур, эре булһалар ҙа, уҫал түгелдәр. Ят кешеләргә тиҙ эйәләшәләр. Етмәһә, һарыҡ көтөүен дә оҫта көтәләр икән.

Аргентина халҡы туризм тармағын үҫтереүгә күп көс һала. Нисек һәм нимәнән булһа ла аҡса эшләргә һис йыбанмайҙар. Хатта планетабыҙҙың иң көньяҡ төрмәһен һәм XIX быуат паровоздары менән тар колеялы тимер юлын да аҡса сығанағына әйләндергәндәр: әүәле был төр техникала, ҙур төрмәне йылытыу өсөн, тотҡондарҙы Утлы ер урмандарына утын әҙерләргә йөрөткәндәр.

Ә беҙҙә әйтеп тораһы ла түгел: һоҡланғыс тәбиғәт күренештәре аша үткән боронғо “Белорет – Ҡатау-Ивановск” тар колеялы тимер юлын һүтеп, металломға ебәрҙеләр.

Ошоғаса Аргентиналағы кеүек тәмле, йомшаҡ итте тәмләгәнем булманы, буғай. Хатта тәмләткестәрһеҙ көйө лә еңелсә генә ҡурылған ит ауыҙҙа иреп тора, әленән-әле ашау теләгеН көсәйтә. Һыйыр һәм һарыҡ иттәре берҙәй тәмле. Сере нимәлә һуң? Бәлки, климаттың уңайлы шарттар тыуҙырыуындалыр, йә атмосфераның таҙалығында, йә ерҙең туҡланыу базаһына яраҡлы үҫемлектәргә бай булыуынандыр? Мәгәр, аңлатырға ҡыйынһынам.

Аргентиндар, ҡайҙа ғына булмаһын, көн оҙоно йербамате ҡыуағының киптереп ваҡланған япраҡтарынан мате (матэ) тип аталған сәй эсә. Был йәһәттән һәр кемдә эҫе һыулы термос, сәй бешереү өсөн калебаса – махсус һауыт, бомбилье, йәғни сәй һурыу өсөн нәҙек кенә төрөпкә була. Эсемлек арыу-талсығыуҙы бөтөрә, эшкә һәләтлелекте, көс-ҡеүәтте 5 - 6 сәғәткә арттыра икән. Әммә мате һыуһынды ҡандыра һәм организмды тейешле тонуста тоторға ярҙам итеүсе файҙалы эсемлек кенә түгел, бәлки, кешеләрҙең әңгәмәһен йәнләндереүсе ритуал булып та һанала. Бер калебасанан бергәләшеп сәй эсеү иһә кешегә ихтирам тойғолары белдереүгә бәрәбәр.

Анд тауҙары — Көньяҡ Америка ҡитғаһының Тымыҡ океан ярҙары буйынан һуҙылып киткән мәғрур теҙмәләр ул. Аргентинала, Чили менән сиктәш ерҙә, бөтә Төньяҡ Америкала ла иң бейек тау — Аконкагуа (6960 м) урынлашҡан. Тауҙарҙа һауа торошо йәһәт үҙгәреүсән. Ап-аяҙ көн бер нисә минут эсендә ҡойма ямғырҙар йә ҡарлы дауыл менән алмашыныуы мөмкин.

Иң сағыу тәьҫир ҡалдырған күренештәрҙең береһе, моғайын, Игуасу шарлауыҡтары (“guasu” - ҙур, “y” - Гуарани ҡәбиләһе телендә һыу тигәнде аңлата) булды. Был һирәк осрай торған феномен айырым-айырым 274 шарлауыҡтан тора. Уларҙың U-рәүешле тәрән упҡынды хәтерләткән иң ҙуры — “Шайтан тамағы”: киңлеге — 150 м, оҙонлоғо — 700 м, бейеклеге — 82 м. Легендаларҙа бәйән ителеүенсә, Хоҙай үҙе иҫ киткес индианкаға ғашиҡ була ла уны кәләш итеп алырға ниәт тота. Әммә гүзәлкәйҙең йөрәге ябай ер егетен үҙ итә, һәм ғашиҡтар ҡасырға ҡарар ҡыла. Асыулы Хоҙай Тәғәлә каноэға ултырып йөҙөп барыусыларҙың юлын бүлеп, Игуасу йылғаһының ҡаты ерен иҙә-емерә, һәм ажғырып торған һыу ҡаҙаны ғашиҡ йәрҙәрҙе мәңгелеккә йота.

Игуасу шарлауыҡтарында 1 секунд эсендә 2000 кубометрға яҡын һыу ағып төшә — был ике Ағиҙел йылғаһының тамағына торошло. Ул Африка шарлауығы Викториянан бейеклеге яғынан да, ҡеүәте йәһәтенән дә өҫтөн.

Мин, оятлы бәндә, был мөһабәт шарлауыҡтың барлығын Аргентинаға экспедицияға әҙерләнгән ваҡытта ғына белдем. Һүҙ юҡ, тел менән әйтеп аңлатҡыһыҙ, иҫ китмәле тамаша.

Ҡая монолиттарына ҙур ҡеүәт менән зәһәрләнеп бәрелгән һыу стихияһы шаңҡыта, таң ҡалдыра. Ике мең тонна һыу баҫымы аҫтындағы ер һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә һелкенеп тора. Таш ҡаҙандар өҫтөндә һыу туҙандары болоттар хасил итә һәм бөтөн тарлауыҡты һөттәй аҡ тулҡындар менән тултыра.

Утлы ерҙә индеецтарҙың вағыраҡ ҡәүемдәре йәшәгән (төньяҡта эрерәк һәм көслөрәк ҡәбиләләр тереклек иткән). Уларҙың аяҡтары мөсһөҙ, сөнки яр буйы индеецтары нигеҙҙә каноэларҙа йөрөгән. Еңел табыш булған диңгеҙ бесәйҙәренең майы һәм балыҡ менән туҡланғандар. Европалылар килгәс, улар индеецтарҙы үҙҙәренең аҙыҡтарын ашарға, кейемдәрен кейергә мәжбүр иткән. Ләкин кейемһалым дым тартҡан, яҡшылап кипмәгән; сәбәбе — был ерҙә һәр ваҡыт еүеш һәм һалҡын. Ошоға бәйле, улар йыш ҡына һалҡын алдыра, сирләй башлаған. (Урындағы халыҡтың көндәлек, ғәҙәти әйбере: ҡышын — кейек тиреһе, йәйҙәрен кейемдәре янбаштарына бәйләнгән өсмөйөшлө бәйләүестән генә ғибәрәт булған. Организмдары ла һыуыҡҡа яраҡлашҡан, бирешмәгән.) Һуңғараҡ усаҡ янында йәшәгән индеецтарҙы йорттарға күсерәләр. Һәр саҡ еүеш, дымлы кейем һәм ғәҙәти һаналған диңгеҙ арыҫландары майынан Европа аҙығына күсеү бер тетрәнеү булһа, уларына туберкулез һ.б. Европа инфекциялары, эпидемиялар өҫтәлә. Ә был, үҙ сиратында, халыҡ һанын ҡырҡа кәметә. Әлеге көндә утрауҙа йәшәгән, Яр буйы индеецтарының мәҙәниәтен һаҡлаған, телде, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе онотмаған, шамандар ҡәбиләһенән сыҡҡан берҙән-бер индианкаға 81 йәш.

Эске индеецтар иһә европалылар тарафынан ҡырып бөтөрөлә. Эш башы шунда: индеецтар үҙҙәренең төп аҙығы тип һанаған һарыҡтарға һунар иткән. Европа кешеләре бының өсөн индеецтарҙы аяуһыҙ ҡырған. Хәҙер генә ул европалылар бар донъяға “үлем язаһы — кешеһеҙлек” тип яр һала.

Экспедиция барышында канадалылар, голландтар, швейцарлылар менән аралаштыҡ — һәммәһе лә Рәсәй менән ихлас ҡыҙыҡһына, беҙҙең илдең уңыштарын ихтирам итә.

Аргентинала ун мең урыҫ йәшәй, күптәре 90-сы йылдарҙағы рэкеттан ҡасып бында төпләнгән. Тыуған илдәренә ҡайтырға хыялланалар. Өйрәнеүе, яраҡлашыуы ауыр: һин һәр ваҡыт сит булып ҡалаһың. Сит-ят тарафтарға юл тотҡанда барыһы ла тиерлек, унда матур, йылы, әкиәткә тиң рәхәтлек хөкөм һөрә, тип



фекер йөрөтә. Ләкин урындағы йәшәйеш менән яҡынданыраҡ танышып, тереклек итә башлағас, шул мәғлүм була: мәшәҡәт өҫтөнә мәшәҡәт өйөлә, тәүлектәр буйы арымай-талмай тир түгеү зарур.

Беҙҙең мәктәптәр белемде күпкә төплөрәк, яҡшыраҡ бирә. Шуға ҡарамаҫтан, Аргентина менән Бразилия Көньяҡ Америкала иң үҫешкән илдәр һанала. Уғрылыҡ һәм полицияның был йәһәттән эшлекһеҙлеге беҙгә ҡарағанда хөртөрәк. Официантка Наташаның (Керчтан) фатирынан бурҙар ике тапҡыр бер нәмәһен дә ҡалдырмай алып сыға. Хәҙер иһә Наташа артыҡ әйбер алмай, һауыт-һабаһы, матрасы ғына бар.

— Тәүге өс йылда ғына рәхәт, һуңынан тыуған яҡтар үҙенә тарта. Рәсәйҙән матурыраҡ бер ил дә юҡ. Күпме йылғалар, хозур урмандар! — ти Наташа.

Күпселек урыҫтарҙың ҡайтырға мөмкинселектәре лә юҡ, хәлбүки, асарбаҡ хәленә төшкән улар. Бәғзеләрен сиркәү үҙ ҡанаты аҫтына алған — рухи таяныс күрһәтә, ғәҙәти тормошҡа ҡайтырға ярҙам итергә тырыша.

Аргентина ирҙәре осрашҡанда ҡосаҡлашып, бер-береһен үбеп алалар. Тағы бер ғәжәпләндергәне: таксиҙы Буэнос-Айреста биш секундтан артыҡ көтмәйһең. Бында — ҡырҡ мең такси.

Америка альпинистарының әйтеүенсә, донъялағы иң шәп альпинист — ул Рәсәй кешеһе.

**Руссанан Нәркәс ҒӘЛИУЛЛИНА тәржемәһе.**




**Зәһит**
**МУРСИЕВ**

# ҠЫПСАҠ ОРАНЫ

## ХИКӘЙӘТ

Йөҙ башы Яхъяны атына арҡыры һалып алып ҡайттылар. Тимер уҡ унының муйынын тишеп үткәйне. Бәк үлемен иптәштәре бик ауыр кисерҙе, ә кәләше Нәргизә өсөн был аяҙ көндө йәшен һуҡҡандай тәьҫир итте. Тауҙай ауыр ҡайғы баҫты уны. Ҡатын-ҡыҙ өсөн ир юғалтыуҙан да насары юҡ, ирең барҙа – бәхеттең етенсе ҡатында, ә ирһеҙ...

Хәйер, Нәргизә был хаҡта уйламай ине. Ул һөйөклө иренең юҡ булыуына, үҙенең бер мәлдә япа-яңғыҙы ҡалыуына, бының ысынбарлыҡтағы хәл икәненә төшөнә алмай аҙапланды. Ана, икһеҙ-сикһеҙ дала киңлегендә ыуылйыған ҡылғандар ҙа кисәге хәлдә, күктәге ҡояш та, кешеләр ҙә, сәхрә уртаһына ҡоролған сатырҙар ҙа шул килеш, ә унының ире Яхъя, имеш, юҡ. Шулай буламы ни? Һаташыуҙыр был... Юҡ шул. Күҙе күргәндәре төш түгел, үҙе лә аҡылдан яҙмаған: һуғышсылар ҡорған өйә, башлыҡтарын хөрмәт менән һуңғы юлға оҙата.

Шунының менән бөттөмө? Яхъя... юҡҡа сыҡтымы? Ҡылысын уйнатып дошман өҫтөнә ыласын кеүек ташланмаҫмы, ил-йортон һаҡламаҫмы, аулаҡта наҙлы ҡулдары менән Нәргизәнең тәненә ҡағылмаҫмы, иптәштәре araһында унының килешле буй-һыны күренмәҫме? Юҡ, былай булмай! Яхъяның ҡайыш-эйәре, уҡ-йәйәһе, үткер ҡылысы бар, һуғыш кейемдәре, улар ғына түгел, йәндәй ҡәҙерле аты – Ҡылкөлтә бар. Тағы ла нимә кәрәк? Тағы ни кәрәк, Нәргизә?!

Ҡатын оҙаҡ итеп күккә ҡарап ята. Болоттар әллә ҡайҙарҙан, алыҫтарҙан йөҙөп килә лә, айҙы ҡаплап тора, шунан, күрешеү ваҡыты бөткән ғашиҡтар кеүек, теләр-теләмәҫ кенә айырылышып китә. Нәргизә Айҙағы Зөһрә ҡыҙҙан күҙен айыра алмай. Һай, был бәхетһеҙ ҡатын-ҡыҙ яҙмышы. Зөһрә ҡыҙ кеүек, Нәргизә лә бөгөн һөйгән йәрһеҙ тороп ҡалды түгелме? Ғашиҡ йөрәктәр берекһә, бер-

---

*Зәһит Мурсиев Ҡариҙел районы Әбүталип ауылында тыуған. Әбүталип башланғыс, Әртәкүл һигеҙ йыллыҡ, Байҡыбаш урта мәктәптәрендә уҡығас, шаҡтай йылдар колхозсы була. Һөнәрселек училищеһын тамамлап, ун йыл төҙөлөштәрҙә ташсы булып эшләй. Ситтән тороп уҡып Дыуан ауыл хужалығы техникумы дипломын ала. 1983 йылдан – Ҡариҙел район гәзите редакцияһы журналисы. Ике китап авторы.*

береһен юғалтыуы ауыр, ифрат ауыр... Юҡҡа ғына Зөһрә ҡыҙ Айға ашмаған икән. Нәргизәнең түп-түңәрәк айға оҙаҡ текләп ятыуҙан күҙҙәре талсыға. Сеү! Айҙа силәктәрен аҫҡан Зөһрә һылыу түгел, ат менгән һуғышсы ҡатын күренә түгелме? Сәс толомдары һибелгән, менгән аты ҡойроғон һуҙып алға ынтылған. Нәргизә, ғәжәпләнеп, күҙҙәрен селт-селт йома: күренеш, иртәнге томан ише, зым-зыя була. Шәүлә иреп юҡҡа сыҡты, ә Нәргизәнең башында тәүәккәл, хәтәр уй тыуҙы. Үҙ уйынан үҙе ярһыған ҡатын күлдәген сисеп атты ла иренең һуғыш кейемдәрен кейеп алды. Ай-һай, ҡалын үгеҙ тиреһен махсус эшкәртеп, уҡ һәм бысаҡ тишмәҫлек итеп ҡатырылған кейем ауыр ғына икән дәһә! Ҡайыштарын бынан бушатып, тегенән ҡыҫып яйлағанда, кәүҙәһенә ярайһы уҡ ипле ятыр ҙа ул...

Икенсе көндө Нәргизә Яхъяның йән дуҫы Ырыҫҡолға өндәште.

— Мине ҡылыс тоторға өйрәт! Ҡылыс һелтәргә, уҡ атырға, һөңгө ҡаҙарға — барыһына ла өйрәт! Мин илбаҫарҙарға ҡаршы һуғышырға теләйем!

Ырыҫҡолға был ғәжәп тойолдо.

— Байбисә, һуң... Ҡатын-ҡыҙ ҡылыс тотоп һуғыша тиме ни? Ирҙәр эше бит ул!

Уның һүҙҙәрен ҡыйыу ҡатын ҡырт киҫте.

— Һин мине башҡаса байбисә тип атама! Мин байбисә түгел! Мин — Яхъя! Уның йәне, ҡаһарман рухы минә күсте. Күрмәйһеңме ни, өҫтөмдә — яугир кейеме, билемдә — ҡылыс... Өйрәт минә яу алымдарын!

***

Илбаҫарҙарҙың ҙур ғына төркөмө ялға туҡталды. Көнө буйы ат өҫтөндә килеү күпте күргән дружинасылар өсөн дә ауырыраҡ шул, барыбер арыйҙар. Ниәттәре — юлдарында осраған ҡыпсаҡ отрядтарын ҡыйратып, йорт-ерҙәрен талап, ҡатын-ҡыҙҙарын, балаларын ҡоллоҡҡа алып китеү. Ләкин маҡтанырлыҡ уңышҡа ирешкәндәре юҡ әле. Тирә-яҡҡа һаҡсылар ҡуйып сыҡҡандан һуң, ғәскәриҙәр йоҡоға талды.

Иван шомло тауышҡа ҡото осоп уянды. Ҡыпсаҡтар! Көтмәгәндә улар һөжүм иткәндәр. Төнгө тынлыҡты уртаға ярып сәйер ауаз яңғыраны:

— Ур-р-ра!

Ҡыпсаҡтар дейеү пәрейҙәре кеүек ябырылды. Бер аҙҙан отрядтың яртыһын ҡыйратып ташланылар. Илбаҫарҙарҙың бер аҙы ғына ат өҫтөнә менеп ҡаршылыҡ күрһәтә алды. Ҡаушаған Иван ҡылысын таба алмай аҙапланды, һүгенеп, ерҙә ҡармаланып булашҡанда, өҫтөнә кемдендер үле кәүҙәһе ауҙы... Йөҙтүбән йығылған урыҫ, танауы менән ҡылыс һабына бәрелгән ыңғайы, ун аҙымдай ғына ерҙә эске кейемдән генә ҡалдырылған ерән атамандарын шәйләне.

— Биреләм, биреләм!

Әллә ҡайҙан пәйҙә булған атлы ҡыпсаҡ, төнгө ҡараңғылыҡта һүрән генә ялтлап киткән ҡылысы менән бер генә өҙә һуҡты — ерән сәсле баш ырғый-һикерә мәйеттәр араһына тәгәрәне. Йәнә Иван шуны күреп өлгөрҙө: дәһшәтле ҡыпсаҡтың, ҡылысын һелтәгән ыңғайына, толом-толом сәстәре һибелә ине! Әллә ҡатын-ҡыҙ инде?!!

...Алыш тамам. Ҡыпсаҡтар дошмандарының мәйетен барлап торманы, талап, мал йыйып маташманы, тере ҡалыусыларҙы әсиргә алыу уйы ла юҡ ине уларҙа. Нисек иҫкәрмәҫтән ҡубып сыҡһалар, шулай уҡ тауышһыҙ ғәйеп булып ҡуйҙылар. Шаҡтай ваҡыт үткәс кенә, ҡурҡыуынан һаман да һушына килә алмаған Иван аяғүрә баҫып ян-яғына ҡаранды.

Иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан Ивандан һорау алыу өсөн уны кенәз ҡаршыһына алып килделәр.

— Минең башыма һуҡтылар, һушымды юйып йығылғанмын. Иҫемә килһәм, барыһы ла үлеп бөткән...

— Шулай ҙа нимәләр күрҙең?

— Ҡыпсаҡтар иҫ киткес күп ине. Беҙ улар менән эй һуғыштыҡ, эй һуғыштыҡ, ә улар арта ғына торҙо...

— Һин миңә шуны әйт: басурмандарҙың башлыҡтарын күрҙеңме?

— Күрҙем, кенәз, күрҙем! Дейеү бәрейеләй бер нәмә шунда, ҡылысы ялт-йолт уйнай, һелтәнгән ыңғайы толом-толом сәстәре йылан өйөрөләй туҙғый. Беҙҙекеләрҙең уғына ла, ҡылысына ла бирешмәне, сихырсылыр ул, әфәндем...

— Толом-толом сәсле, тиһеңме? Улар таҡыр башлы бит! Ҡурҡышыңдан күҙеңә күренгәндәрҙе һөйләп, башымды ҡатырырға булдыңмы ни әле һин? Арҡаң ҡамсы һағындымы?

— Юҡ-юҡ, кенәз, тамсы ла арттырмайым, кәрәкһә, тәре үбәм бына. Ул бәрейҙең тауышы ла сәйер, бисәләрҙеке кеүек.

— Нимә, бисә тауышы, тиһеңме? Һин уның тауышын да ишеттеңме ни? Нимә тине һуң ул?

— «Ура!» — тип ҡысҡырҙы. Айырым асыҡ ишеттем, көтмәгәндә төн тынлығын йыртып, башта ана шул «Ура» һүҙе яңғыраны. Күҙ асып йомғансы ҡамауҙа ҡалдыҡ — өҫтөбөҙгә төрлө яҡтан уҡтар яуҙы, басурман ғәскәре һөжүм итте.

— «Ура» тиһеңме? Ниндәй һүҙ һуң ул? Әллә берәй яңы ырыу килеп сыҡҡанмы? Кенәздең ҡуштандары шунда уҡ бер әсир ҡыпсаҡтан белешеп килде: “ура”тигән һүҙ урыҫса “окружай” була икән.

— Окружай, окружай... — тип үҙ алдына һөйләнде кенәз.

Урап алырлыҡ булғас, тимәк, ысындан да ишле ғәскәр һөжүм иткән дә баһа! Ҡыпсаҡтарҙа бындай отрядтар аҙ түгел, ваҡыты-ваҡыты менән улар күп меңлек ғәскәргә тупланып та хәрәкәт итә. Тик ундай сәйер башлыҡтары тураһында ишеткәне юҡ ине. “Ярай, ҡарап ҡарайыҡ, — тип зәһәр уйланды кенәз. — Тағы берәй ерҙән килеп сыҡмаҫтармы икән?”

Кенәз яңылышманы, урыҫтар өҫтөнә әле бынан, әле тегенән “Ура!” ҡысҡырып ташланыусы ҡыпсаҡтар өйөрө ҡалҡыны. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ шымсыларҙы, ваҡ-ваҡ дозор отрядтарын дала буйлап таратыу бушҡа булды. Кисен бөтә ерҙе тикшереп сығалар — таба төбөндәй тип-тигеҙ далала йән әҫәре булмай. Төн етеүе була, һаҡсылар бер тауышһыҙ юҡ ителә. Унан һуң инде тирә-яҡты «ура» оранына күмеп, кенәзгә буйһонған отрядты бер тынала ҡыра ла һала. Әллә ел алып килә уларҙы, әллә болоттарға йәшеренәләр, әҙәм затынан түгелдер инде улар... Ә ҡыпсаҡтарҙың башлығы һуң! Исеме лә сәйер, яуҙаштары әллә «Яха», әллә «Яга» тип өндәшә. Бындай өҙөк-йыртыҡ мәғлүмәт һирәк-һаяҡ иҫән ҡалған ивандарҙан мәғлүм булды.

***

Яхъя үҙенең Ҡылкөлтәһен йәненән артыҡ күреп ярата. Мөмкинлеге сыҡҡанда уны иркәләй, ял-ҡойроғон таҙарта. Ә ҡойроғо был аттың ғәжәйеп оҙон һәм ҡуйы. Бушҡамы ни уны Ҡылкөлтә тип атайҙар! Башҡа аттарҙан ул елбер ҡойроғо менән айырылып тора. Ҡылкөлтә өҫтөндәге йөҙбашын күреү менән дошмандар: «Яга, Яга, баба Яга идет!» — тип һөрән һалып, кемеһе ҡайҙа ҡаса башлай. Йөҙ башының аты иһә теләһә ниндәй килмешәк атты ҡыуып етә һәм Яхъя үткер ҡылысы менән дошманды башҡа был ерҙә йөрөмәҫлек итә.

Өркәк ат яугирҙы хурлыҡҡа ҡалдыра, ә Ҡылкөлтә һис бер ниҙән ҡурҡмай. Яхъя шуға ла үҙен ҡыйыу тота һәм алыштарҙа еңеп сыға. Эйе, һүҙ Яхъя тураһында бара. Нәргизә юҡ. Байбисә ғәйеп. Ә Яхъя, дошмандарға тынғылыҡ бирмәгән, уларға ыласындай ырғылыусы йөҙбашы, бар. Уның йүгерек ғәскәре дала киңлектәре буйлап елдәй елә, “ҙур һаҡалдар” — урыҫтар көтмәгәндә эреле-ваҡлы отрядтарын тар-мар итә, тәрән тылдарына үтеп, ылауҙарын, стандарын туҙҙыра һәм тағы эҙһеҙ юғала. Төньяҡ кешеләренең ҙур-ҙур ғәскәрҙәр йыйып ҡарауы ла файҙаһыҙ — күҙгә күренмәгән дошман менән нисек һуғышаһың инде?

Нәргизәгә ире Яхъяға “әүерелеүе” еңел булманы. Күскә кем баш? Иң аҡыллы, иң хәйләкәр, иң сос, етеҙ, батыр һуғышсы. Яу ҡоралы ҡылыс, һөңгө менән оҫта эш итеүсе, мәргән атыусы. Әллә Нәргизәгә ысындан да иренең рухы күсте, әллә күктәр шулай теләне, иркә ҡатын тоғро дуҫы Ырыҫҡол һәм Ҡылкөлтә ярҙамы менән Яхъяға әйләнде. Ил өсөн кем ҡәҙерлерәк — сатырҙа буҙлап ултырған тол ҡатынмы, киң күкрәкле айғырын һау-һаулап, хәләл ергә баҫып ингән дошмандарҙың башын ҡыйған батыр ир — йөҙбашы Яхъя бәкме? Бына шуға ла Нәргизә — юҡ, Яхъя — бар!

Яхъя ҡылысынан иҫән ҡалыусылар аҙ булһа ла, дошмандар ауыҙынан уның тураһында береһенән-береһе шомло хәбәрҙәр тарала. Имеш, ул бер кемде лә иҫән ҡалдырмай, имеш, ул кеше затынан түгел, шуға ла уны бер уҡ та алмай. Дошман отрядтары төнөн йоҡларға ҡурҡа, ләүкегән усаҡ ҡаршыһында һағайып далаға ҡолаҡ һала. Йомран тауыш бирһә лә, Яхъя уғы, тип баштарын эйә яугирҙар. Ләкин был данлыҡлы йөҙбашы өсөн кәртә түгел, ул әле бер, әле икенсе урында үҙ эшен эшләй тора. Үҙенә ҡоролған тоҙаҡтарҙы нисек үтәлер. Әллә осоп сығамы? Баба-Яга бер болоттан икенсеһенә осоп үткәне ай яҡтыһында айырым-асыҡ күренде, үҙ күҙем менән күрҙем, тип берәү суҡына-суҡына ант иткән, ти хатта. Тик атланғаны ат түгел, ә... һепертке, имеш.

Кенәз уйлана-уйлана тулған айға ҡарап ята. Нишләптер йоҡо алмай. Ҡапыл уның талсығыуҙан шешмәкләнгән күҙҙәре шар асылды: түңәрәк ай ҡаршыһынан һеперткегә атланған Баба-Яга осоп бара лаһа! Ҡурҡынған кенәз күҙҙәрен сытырлатҡансы йомдо, унан тиле кешеләй йәнә күккә текләне. Ә унда... бары тик тулған ай ғына.

***

Бер нисә ай, йыл, әллә тиҫтәләгән йылдар дауам иттеме был хәл — тарих ташына яҙылған хәбәр һаҡланмаған. Шулай ҙа йәнә бер риүәйәт халыҡ хәтерендә уйылып ҡалған: Яхъяның һул ҡабырғаһына һөңгө ҡаҙала. Быны күргәс, хатта Ырыҫҡол да ҡурҡышынан ҡатып ҡала. Ә Яхъя ҡылысы менән һөңгө һабын сабып өҙә лә, бер ни булмағандай, алышыуын дауам итә. Шунан һуң яугирҙар таң атҡанса ҡырҡ саҡрым ер сабып уҙа. Күкрәгенә һөңгө ҡаҙалған кешенең ҡырҡ саҡрым атта сапҡанын бер кемдең дә күргәне юҡ, донъяла ундай мөғжизә булмай ҙа. Барыһы ла сәйерһенә, шомлана. Бәлки, ысындан да Нәргизә менән Яхъя таҙалығы, көс-ҡеүәте бер кәүҙәгә күскән булғандыр? Ниһайәт, ҡыпсаҡтар үҙ стандарына саптырып ҡайтып етә. Шунда Яхъя ҡулы менән ымлап Ырыҫҡолдо саҡыра ла уға бер генә йомош ҡуша:

— Минең урынға һин ҡалаһың.

Булған хәлме, әллә борондан ҡалған уйҙырмамы, тигәндәй... Урыҫтарҙа бөгөнгө көнгәсә “Ура!” ораны һаҡланып ҡалған былай. Йәнә шул: айлы төндәрҙә юлбаҫарҙарҙың күҙенә осоп барған Баба-Яга күренеп ҡала икән. Йәмһеҙ, ҡартайып бөткән әбей итеп һүрәтләйҙәр уны күреүселәр. Хәйер, быныһы аңлашыла, ниндәй яуыз бәндә: «Мин йәш һәм сибәр байбисә күреп ҡурҡтым», — тип таныһын? Тик шуныһы аңлашылмай: елдәр менән ярышыусы Ҡылкөлтә ни эшләп һеперткегә әйләнде икән? Уның һөйәктәре күптән сереп, ҡыл ҡойроғо елберләп яталыр инде, әллә... шуның зәхмәтеме? Бер кем бер ни белмәй. Донъяла күп нәмә онотола шул.

## «Күңелемдә - донъя сере»



**Морат СОЛТАНОВ**

### Төнгө элегия

*Был төн тағы беҙҙең өсөн*
*Әҙерләгәндер ауын:*
*Йоҡо аралаш ишетәм*
*Күлдәгең ҡыштырлауын.*

*Аяҡтарың тыпылдата*
*Ниндәйҙер сәйер бейеү.*
*Унда сая ғорурлыҡ һәм*
*Кеселекле баш эйеү.*

*Һин үҙең көй һәм үҙең йыр,*
*Тамашасы мин бары.*
*...Тышта даулай зәһәр буран...*
*Барыбер ирер ҡары.*

### Ҡустыма

*Моңһоҙ ҡала...*
*Йота алмаҫлыҡ ҡалъя...*
*Битараф һәм ғәмһеҙ донъя...*
*Инде миңә ни ҡала?..*

*Көлә-көлә, илай-илай*
*Күңелемдә йәйә шаулай,*
*Йәнем һыҙлай, ҡанай!*
*Тағы тула, таша күңел*
*Тулы айҙай.*
*Йөрәк тулы*
*Ҡайғы-һағыш,*
*Алғыш-ҡарғыш.*
*Былар – бысаҡ менән соҡоп*

---

*Морат Солтанов Учалы районының Ҡотой ауылында тыуған. БДПУ-ны тамамлай. Октябрьский ҡалаһының 3-сө гимназияһында һәм “Нарыштау” гәзите редакцияһында эшләй.*

*Маңлайға яҙған яҙмыш.*
*Үлем ҡайҙа яралмыш һуң,*
*Бәхет ҡайҙа таралмыш?..*

*Киттең дә, ти... Ерҙә, эйе,*
*Йәшәү ҡыйын.*
*Һин булмағас, мин ни бары*
*Яңғыҙ ҡайын.*
*Ҡыйын,*
*Шундай ҡыйын!*
*Ҡанһырай һәр көн һайын*
*Минең йөрәк.*
*Беләм, уға һин кәрәк...*

***

*Шундай хозур йәйге иртә:*
*Ҡоштар сут-сут һайрайҙар!*
*Һин тораһың аҫылынып*
*Дөм-ҡараңғы һарайҙа.*

*... Төн. Тулы ай. Саҡырҙылар*
*Һине тышҡа уйҙарың –*
*Ҡарарға ике йондоҙҙоң*
*Һуңғы үлем туйҙарын.*

*Ай йөҙөндә шәүлә күргәс,*
*Ниңә инмәнең өйгә?*
*Ниңә һин бейей башланың*
*Был донъяла ят көйгә?..*

*Күҙҙәреңдә балҡынылар*
*Йәһәннәмдең уттары.*
*Ҡәбер һалҡынын тойманы*
*Арҡан тотҡан ҡулдарың...*

*Ниҙер һиҙеп һаташҡанда*
*Ҡара төндә әсәйең,*
*Һин инде – ике арала,*
*Тын етмәүҙән сәсәйһең...*

*Аяғың ерҙе тоймағас,*
*Ауырттымы муйының?*
*Кәләштекенән йылымы*
*Ерҙең ҡара ҡуйыны?*

*Хәҙер һин дә – төн ялсыһы,*
*Тулы айҙың йәлләте.*
*Һинең гонаһыңды Хоҙай*
*Инде кемдән түләтер?..*

*Үҙ артынан әйҙәгәс тә*
*Ҡараңғылыҡ батшаһы,*
*Ҡатының менән улыңды*
*Был донъяла ташланың.*

*Яҙған уларға һәр төндә*
*Уянырға һаташып, –*
*Гүйә, йөрөйһөгөҙ бергә*
*Зыяратта аҙашып.*

*Әле сәңгелдәктә улың,*
*Иртәгә – һине һорар;*
*Йәшле күҙен мөлдөрәтеп*
*Йәш әсәһенә ҡарар.*

*Тик ай тулы саҡта ғына*
*Шәүләң килер улыңа,*
*Ҡара йылан булып ятыр*
*Сабыйыңдың юлына.*

*Әйҙәйәсәк үҙ артынан...*
*Бирһәсе Хоҙай ярҙам*
*Һинең арттан атламаҫҡа*
*Упҡынға текә ярҙан...*

*...Шундай хозур йәйге иртә:*
*Ҡоштар бәхет юрайҙар.*
*Һин тораһың аҫылынып*
*Дөм-ҡараңғы һарайҙа...*

---



## Гөлдәр КҮЗБӘКОВА

### Һин – татлы ғазабым

*Нисек тыныс булған һине һөймәгәндә,*
*Ғазап уттарында янып-көймәгәндә.*
*Көнләшәмен керпегеңә ҡунған аҡ ҡарҙан,*
*Юлдарыңа өҙөлөп төшкән япраҡтарҙан.*
*Һинһеҙ нисек тыныс булған күңелгә,*
*Хәҙер һин тип үҙәккәйем өҙөлә.*
*Тик барыбер*

---

*Гөлдәр Күзбәкова Мәләүез районының Әбет ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлаған. Әле Башҡортостан радиоһында эшләй.*

*Һин генә тип үҙәктәрем өҙөлһөн,*
*Янып-көйөү хистәренә түҙелһен.*
*Булһа булһын көнләшеүем ҡатыраҡ,*
*Уның һайын ғазап уты татлыраҡ.*

*Тынныслығым юғалһа ла ризамын,*
*Һин бит – минең яҡты, татлы ғазабым.*

## *Яҙҙым…*

*Һине күргәс тә үк*
*Тәүҙә телдән яҙҙым.*

*Унан тора-бара*
*Төн йоҡомдан яҙҙым.*

*Тамағымдан үтмәй –*
*Ашауҙан да яҙҙым.*

*Тапшырманым. Ләкин*
*Бик күп хаттар яҙҙым.*

*Башҡа менән күреп*
*Аҡылымдан яҙҙым.*

*Бәлки, уҡырһың, тип*
*Инде шиғыр яҙҙым.*

***

*Бурандарға уралып*
*Урамдарҙан ураныҡ.*
*Аҡ буранды, аҡ ҡарҙарҙы*
*Тик бәхеткә юраныҡ.*

*Әсе елдең һалҡынын*
*Йылы тының иретә.*
*"Ҡайтам!" – тием. Бышылдайһың:*
*"Иртә бит әле, иртә"…*

*Инде буран туҡтаған,*
*Урамда тынлыҡ ята.*
*"Иртә" тиһең, иртә шул:*
*Оҙаҡламай таң ата.*

# ТУҠ БУЙЫ – ТЫУҒАН ЯҒЫМ

*(Сөләймән Муллабаевтың тыуыуына 85 йыл)*

*Туҡ буйҡайҙары, ай, һоҡ, тиҙәр*
*Һоҡланмаған кешеләр юҡ, тиҙәр.*

**Халыҡ йыры.**



Сөләймән Миңлеғужа улы Муллабаевҡа быйыл 10 октябрҙә 85 йәш тулған булыр ине. Ул Ырымбур өлкәһе Красногвардеец районының Иҫке Юлдаш ауылында тыуған. Ауылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағандан һуң, уҡытыусы булып эшләй. 1942 йылда армияға алына. Волхов һәм Ленинград фронттарында һуғыша. 1943 йылда ҡаты яралана һәм оҙаҡ ҡына госпиталдә ятып, яңынан һуғышҡа китә. 1944 йылдың декабрь айында демобилизациялана. Ауылға ҡайтып, ул күрше Ибрәй, Үтәй, Ҡабаҡ мәктәптәрендә уҡыта. 1948 йылда Иҫке Юлдаш ауылына ҡайта һәм мәктәптә эшләй башлай.

1954 йылда – Аҡбулаҡ педагогия училищеһын, ә 1972 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. Сөләймән Муллабаев 42 йыл балалар уҡыта, оҙайлы педагогик хеҙмәте өсөн “Халыҡ мәғариф отличнигы” исеме бирелә. Ул I дәрәжә Ватан һуғышы орденына эйә, байтаҡ миҙалдары бар, халыҡ араһында күп эш алып барғаны өсөн “Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф эшмәкәре” тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды.

Беренсе китабы (“Ҡәҙерле һүҙ”) 1963 йылда донъя күрә. Унан һуң инде уның тиҫтәнән ашыу шиғри китаптары баҫылып сыға: “Тылсымлы күл”, “Беҙҙең мәктәптә байрам”, “Сайҡала сал дала”, “Олатайым йомаҡ ҡоя”, “Торналар”, “Һуғышта үтте йылдар” һ.б. Ул үҙе тураһында ошо һүҙҙәрҙе яҙа:

*Ғүмер түбәһенә менгәндә*
*Юлдан таймаҫ өсөн тырыштым,*
*Донъя көткәндә татыным мин*
*Әсе-сөсөһөн дә тормоштоң.*

Сөләймән ағай үҙен талантлы балалар яҙыусыһы, юмористик шиғырҙар авторы, һүҙ ҡәҙерен белгән лирик итеп танытты. Сабый күңелле кеше генә балалар өсөн яҙа алалыр. Уның әҫәрҙәрендә балаларға оло һөйөү, кескәйҙәргә хас бер ҡатлылыҡ һәм уларға ихтирам менән ҡарау сағыла.

*Әсә телен белгәндең*
*Теле матур, бай булыр.*
*Белмәгәндең белеме*
*Һәм күңеле һай булыр”*

(“Туған тел”)

Уҡытыусылыҡ эше менән бер рәттән әҙәби ижад эшмәкәрлеге алып барыу, әлбиттә, еңелдән түгел. Күп кенә шиғри шәлкемдәре "Совет Башҡортостаны" ("Башҡортостан"), "Башҡортостан пионеры" ("Йәншишмә"), "Йәшлек", "Ялҡын", "Яңы ваҡыт", "Каруанһарай", "Хеҙмәткә" һ.б. гәзиттәрҙә һәм "Ағиҙел", "Башҡортостан ҡыҙы", "Һәнәк", "Аманат" һ. б. журналдарҙа йыш баҫылды. Беҙҙең китапханала Сөләймән ағайҙың үҙ ҡулы менән әҙерләгән альбомында 1951 йылдан йыйған шиғри әҫәрҙәре бар. Бына шуларҙан алынған юлдар:

*Алтын бишек, тиҙәр һине,*
*Туҡ буйы — тыуған яғым.*
*Һыу ингәндә, сәңгелдәктәй,*
*Тирбәтә мине ағым.*

("Туҡ буйҙары")

Уның шиғри әкиәттәре байтаҡ: "Өләсәй әкиәттәре", "Аҡ көсөк", "Ҡоролоҡ"...

*Борон-борон заманда*
*Йәшәгән, ти, Ҡоролоҡ.*
*Ҡоролоҡҡа ҡаршы көс*
*Булмаған һис торорлоҡ.*
*Ҡоро зәһәр елдәргә*
*Урман башын эймәгән.*
*Дауылдар килһәләр ҙә,*
*Беҙ бирешмәбеҙ, тигән.*

("Ҡоролоҡ")

Сөләймән ағайҙың байтаҡ ҡына юмористик һәм сатирик шиғырҙары ла бар: "Кармазин", "Ғәйбәтсе Ғәйшә", "Сәми Сәмиғә", "Одеколон" һ.б.

*Тормош матур, беҙ йәшәйбеҙ*
*Шундай гүзәл заманда,*
*Тик тормошто йәмһеҙләгән*
*Эскелек бар һаман да.*

*Самогонды "сәми" тиеп*
*Ҡыуып һата Сәмиғә.*
*70 һумы килеп тора*
*Һәр бер шешә "сәми"гә.*

*Бар икән ниәтлеләр:*
*Шулар килеп, Сәмиғәгә*
*Өс йөҙ һум түләттеләр*
*Һәм данын үрләттеләр.*

("Сәми Сәмиғә")

Шуныһы ҡыуаныслы: шағир беҙ тормошта көн дә күреп-күнегеп бөткән күренештәрҙе, хәл-ваҡиғаларҙы үҙенсә яңы төҫ өҫтәп, һүҙ сәнғәтенең серҙәренә тәрән төшөнөп, көтөлмәгән биҙәктәр менән балҡытып ебәрә.

Китаптарында мәҙәк хәлдәр хаҡында бик күп шиғырҙар тупланған, ғөмүмән, тормошта ундай ваҡиға-күренештәр ҙә йыш осрай. Ниндәй генә шиғырын алһаҡ та, беҙҙең халыҡҡа ҙур ҡыуаныс ул, сөнки балалар ҙа, өлкәндәр ҙә шиғырҙарын яратып уҡый.

Фронтовик-шағирҙың патриотик шиғырҙары “Ҡотҡарылған яҙ”, “Һуғыштан ҡалған һағыш” исемле китаптарында тупланған.

*Ғүмер үрҙәренә үрләгәндә*
*Һыуғыҙатты түбә юлдары.*
*Йәшлегебеҙ яуға тура килде,*
*Иңгә атты һуғыш йылдары,—*

һымаҡ юлдар тотош быуындар биографияһын хәтерләтә һәм бөгөнгө хәүефле заманда уны хәтерҙән сығармаҫҡа өндәй. Бөтәһен дә үҙе кисергән шағир набаты изге һүҙ булып ҡабул ителә һәм һәр кемде уйландыра:

*Ләкин, дуҫтар, маҡтаныуҙан түгел:*
*Илгә биргән хәләл көсөм бар,*
*Аҙ булһа ла ижад емешем бар,*
*Маҡтаулы һәм ауыр эшем бар,—*

тип тә яҙғайны әҙип бынан байтаҡ йылдар элек.

Үҙенең ауылдаш игенселәргә, икмәккә лә дан йырлай ул:

*Шуның өсөн икмәгем аҡ минең,*
*Ҡайырып-ҡайырып уны теләмен.*
*Һәр телемгә көсөм кергәнгәме,*
*Икмәгемдең тәмен беләмен.*

Шағир хаҡлы әйтә, хаҡлы ғорурлана, сөнки “Хеҙмәт фронтының һалдаты мин, өҫтән төшмәҫ йөклө биштәрем” тип күптән әйткәйне. Шуның өсөн дә үҙе бөтә ихласлыҡ менән хәләл хеҙмәтте, хеҙмәт кешеһен күтәрә һәм күрһәтә.

Тынғыһыҙ хеҙмәт һәм ижад менән йәшәгән яҙыусының әҙәбиәткә юлының тәбиғилеген дә әйтке килә. Ул үҙе яулап, һайлап алған маяҡлы юлдан барҙы һәм һүнмәҫ данлы ижад ҡалдырҙы. Ырымбур өлкәһендә үткән онотолмаҫ осрашыу кисәләре уның ярҙамында ойошторолдо. Р. Шәкүр, К. Мәргән, И. Дилмөхәмәтов, Р. Бикбаев, Р. Тойғон, Ғ. Шафиҡов, Ғ. Хөсәйенов, Т. Йосопов, Н. Мусин һәм башҡалар ауылдаштары, яҡташтары күңелендә, әлбиттә, оло тәьҫораттар ҡалдырҙы. Шуға уның уҡыусылары уға, ҡәләмдәштәренә оло, ҙур рәхмәт белдерә. Шағирыбыҙ, уҡытыусыбыҙ тураһындағы яҙмамды уның ошо шиғри юлдары менән бөтөрәм:

*Йырҙарым да, инде шишмәләй,*
*Ярһып юл алһа ине.*
*Халҡым йөрәгенә инеп*
*Ғүмергә ҡалһа ине.*

*Иҫке дуҫтарым янына*
*Хушлашыр өсөн киләм.*
*Минең йөрөр юлдарыма*
*Йәйелгән һары келәм.*

**Гөлйемеш МӘМБӘТОВА,**
**район үҙәк китапханаһының әйҙәүсе библиографы.**
**Ырымбур өлкәһе, Красногвардеец районы.**

# ШАҒИР УРАМЫ

*(Самат Ғәбиҙуллиндың тыуыуына 70 йыл)*



Ҡәләмдәшемдең 1967 йылда донъя күргән “Тауыш килә тауҙарҙан” китабын ҡарап ултырам да берсә аптырайым, берсә һоҡланам: ғәжәп кеше булған икән дә Самат. Үҙе ябай ғына, сабыйҙарса бер ҡатлы, тиҙ генә һағышланып барыусан, сибек... Ә шиғырҙарында ана ниндәй:

*Дауылдарға күкрәк киргән*
*Ҡаяларҙың ише мин.*
*Теләһәм бөтә йыһанды*
*Дер һелкетер кеше мин...*

Әйтергә кәрәк, Самат Ғәбиҙуллинды эскә йәшерелгән сая холҡо, ҡыйыулығы, батырҙарға хас тәүәккәллеге шиғырҙарында сатнатып әйтеп бирелгән. Уларҙағы баҙыҡ образдар, сағыу биҙәктәр, ярһыу хис-тойғолар, Самат үҙе лә тормошта шундайын бер ғәйрәтле, батырҙарса фиғелле олпат баһадирҙыр, тип уйлата. Бына ҡайҙа шиғриәттең ышандырыу көсө, арбар хисе!

Элегерәк (1965 – 1968) күрешә йөрөһәм дә, уның менән ныҡлап, яҡындан танышыу мин Бөрйәнгә уҡытырға барғас булды. Район үҙәге Иҫке Собханғолда уҡытыусыларҙы август кәңәшмәһендә осраштыҡ.

Мин Бөрйәнде һорашам (миңә бында йәшәргә, эшләргә бит әле!), ә уны Өфө яңылыҡтары ҡыҙыҡһындыра: “Ҡәләмдәштәр ни хәлдә? Ниндәй китаптар сыҡты?..” Һөйләшеп һүҙ бөтмәне, кәңәшмә үтеп тә китте. Айырылышыр алдынан Самат эшләп йөрөгән район гәзите редакцияһына инеп сыҡтыҡ. Ул миңә үҙенең уҙған (1967) йылда ғына сыҡҡан тәүге китабын бүләк итте. Автографын әле лә ҡат-ҡат уҡыйым: “Ҡәҙим дуҫ! Бергә-бергә үтһен ғүмерҙәр. Ят күрмәһен беҙҙе ят күҙҙәр. Самат. 25.08.68.”

– Исеме ниндәй бит әле китабыңдың! – “Тауыш килә тауҙарҙан!” – тип һоҡланыуыма ул, ғәҙәтенсә, һаран ғына йылмайҙы ла:

– Уҡып сығырһың. Эсендә шиғырҙары ниндәйҙер әле... Әйткәндәй, шиғырҙарыңды гәзиткә ебәр әле. “Әҙәби бит” бирербеҙ. Һинең Бөрйәнгә эшкә килеүеңде шуның менән билдәләрбеҙ, – тип ҡуйҙы.

Ә китаптағы шиғырҙары шәп ине. Авторҙың шымыраҡ бер кеше булыуы, тышҡы йөҙ-ҡиәфәте шиғырҙарҙың юғарылығын билдәләмәй шул.

*Улар менән халҡым шуға бөгөн*
*Ер йөҙөндә берҙәй һөйкөмлө:*
*Улар ғорур минең халҡым кеүек,*
*Халҡым ғорур Урал шикелле!*

Бына был – шағир Самат Ғәбиҙуллин, шағирҙың ысын йөҙө, ә тормош-

көнкүрештәге, донъяның ығы-зығыларында ҡаҡҡыланған-һуҡҡыланған ябай, үтә бер ҡатлы Самат түгел.

Шиғырҙарында ул, ысынлап та, үҙенә оҡшамағансараҡ батыр ҙа, ҡыйыу ҙа, ауан да. Әле тәүге китабы сыҡмаҫтан байтаҡ алда “Ленинсы” гәзитенең “Шиғыр блокноты”нда унының бынамын тигән бер шәлкем шиғырҙары (ун алты шиғыр!) донъя күрҙе. Шул шәлкемгә дөйөм исем биргән шиғри юлдарҙы беҙ, БДУ студенттары, ятлап алып һөйләп йөрөнөк:

*Эй, йөрәгем — янған усаҡ,*
*Ҡас ышыҡтан, сыҡ асыҡҡа!*
*Елпеп торһон заман еле*
*Һәм шаңдаҡ бир тирә-яҡҡа...*

Беҙ Бөрйәнгә эшкә килгәндән алып Самат беҙҙе ташламаны. Байназарға килгән һайын йә мәктәпкә, йә ғаилә менән беҙ йәшәгән туҡалаҡ ҡына мәктәп өйөнә инер ине. Ул һүҙендә торҙо: минең бер шәлкем шиғырҙарымды “Ҡунаҡ булып килмәнем мин Бөрйәнгә” тигән дөйөм баш менән “Таң” гәзитендә бирҙе. Артабан да ай һайын “Әҙәби бит” махсус сығарылышын уҡыусыларға еткереүҙе ул ғәҙәткә индерҙе, йолаға әйләндерҙе. Тап ошо осорҙа районда әҙәби мөхит яҡшырҙы, башлап яҙышыусыларға, ҡәләм тибрәтеүселәргә иғтибар артты. Әҙәби түңәрәк эшләп китте. Башланғыс ижадымда мин дә әүҙемләшә төштөм.

Самат “Таң”да, шиғырҙарҙан тыш, йәмғиәт тормошона ҡағылышлы теге йәки был материалдар яҙыуымды һорап, яңылыҡтарҙы һорашып мәктәпкә шылтыратып торҙо. “Ана шуны тиҙ генә яҙып ебәр, Ҡәҙим!” — тип үтенә. Һорауын бер-ике көн эсендә үтәй һалып, материалды ебәреүем була, ул балаларса ҡыуанып йәнә шылтырата, ихлас рәхмәтен белдерә. Унын ҡыҙыҡһыныу даирәһе лә ваҡыт үтеү менән төрләнә, киңәйә барҙы. Минән ул йәнә халыҡ ижадына, тел хикмәттәренә ҡағылышлы материалдар ҙа һорап алып баҫтырҙы. Байназар урта мәктәбендә уҙғарылған төрлө әҙәби сараларҙы, кластан тыш эштәрҙе, кисәләрҙе лә Самат йыбанмай гәзит биттәрендә яҡтыртып барҙы.

Беҙ Бөрйәндән күсеп киткәнгәсә килеп йөрөнө ул, беҙҙе ташламаны. 1970 йылдың йәйендә, беҙ ҡапыл ғына күсеп китеп барғас, был хәлгә ул ышанмай, Байназарға килеп, беҙҙе эҙләп йөрөгән. Уға беҙҙең бушап ҡалған өйҙө асып күрһәткәндәр. Шунда ғына Самат беҙҙең Бөрйәндән китеүебеҙгә ышанғанлығын хатҡа яҙҙы...

Хат тигәндән, Саматтың миндә байтаҡ хаттары һаҡлана. Уларҙың барыһында ла унының миңә ҡарата булған ихласлығы, эскерһеҙлеге, дуҫтарса тоғролоғо ярылып ята.

1996 йылдың 3 августында Бөрйәндә (Шүлгән мәмерйәһенә барышлай) осрашыуыбыҙҙа мин уға үҙемдең “Рух яҙыуы” исемле китабымды биргәс, шундуҡ кире һондо: “Бәттәс, автограф яҙ! Нисек инде буш бирәһең?” — тине. Унын күҙҙәре һағышлы, ҡарашы уйсан ине. Шундай йәл булып китте Самат, йәшлек саҡтары иҫкә төштө. Хәҙер минең алда торған Самат инде олоғайған, ныҡ бирешкән, һаулығы ҡаҡшаған кеше ине. Ә ул саҡта уға ни бары 57 йәш ине. Һаулығы насарайыуы сәбәпле, ул эшләмәй. Иҫке Собханғолдағы фатирында бер үҙе, пенсияға ғына йәшәп ята.

Донъяның яңы ғына аҡҡа төрөнгән мәлендә — ҡыш башында беҙ Сабир Шәрипов менән икәүләп йәнә Бөрйәнгә Самат янына килдек. Уны Яңы Мөсәт ауылында апайҙарында эҙләп таптыҡ. “Көнөбөҙ” тип исемләнгән өр-яңы китабын ҡулына алғас, күҙҙәренән йәш тәгәрәне лә китте. “Алты йыл көттөм мин һине!” — тип кенә әйтте дуҫыбыҙ. Ысынлап та, унын “Сыңлар ҡылдарым” (1990) китабынан һуң алты йыл үтеп тә киткән икән шул... Шунан, үҙенең ныҡ

тулҡынланыуын күскә тыйып, беҙҙе өйгә сәй эсергә саҡырҙы...

Ҡышҡы көндөң ғүмере ҡыҫҡа. Самат дуҫыбыҙ беҙҙе оҙатырға сыҡты. Һөйләшеп һүҙ бөтмәне, айырылаһылар ҙа килмәй.

Яуыр-яумаҫ, иренеп кенә ҡар һибәләй. Көн йылы, тымыҡ. Шөкөр, бурандарға алыҫ әле. Ауыл янындағы мәңге туңмаҫ Ҡаранйылға, боҙ селтәрҙәр менән ҡаймаланған ярҙарына сың-сың һуғылып, ҡышҡа һис кенә лә иҫе китмәй, кинәнеп аға ла аға. Гүйә, ер битенә сал тарихын яҙып бөтөп, бөгөн ул шиғыр яҙа. Бөрйән данын илгә күтәреүсе арҙаҡлы улдарының береһе Самат Ғәбиҙуллинға маҡтау йыры — мәҙхиә яҙа һымаҡ тойолдо миңә Ҡаранйылғаның ҡыш башындағы был дәртле ағышы...

Был беҙҙең шағир Самат Ғәбиҙуллин менән һуңғы осрашыуыбыҙ ине.

## *Шағир урамы*

Самат Ғәбиҙуллиндың яҡты иҫтәлегенә

*Ҡобайырҙар иле,*
*Ҡурай иле,*
*Күле "Йылҡысыҡҡан" — күргәнгә.*
*Бабсаҡ ҡәбере.*
*Серле Шүлгән... Хатта*
*Шағир урамы бар Бөрйәндә.*

*Эйе, унда шағир урамы бар,*
*Ҡаяларға башын терәгән.*
*Терәмәгән —*
*Йүгереп килә лә ул*
*Тулҡындарға төшөп тирбәлә.*

*"Самат урамы" — ул шишмә ише:*
*Баҙалдарҙан алып көс-ҡеүәт,*
*Ҡорғаҡ күңелдәргә килеп ҡоя,*
*Ҡайнар тойғо, тилбер хис тейәп!*

*Бөрйән урмандарын һиҫкәндереп,*
*Уятып Мәсем, Юрма тауҙарын,*
*Тауыш килә — тау шишмәһе сыңы —*
*Ҡаяларҙан шаңдау ауҙарып...*

*Сал Бөрйәндә "Самат урамы" бар,*
*Ҡаяларға башын терәгән.*
*Терәмәгән — йүгереп килә лә ул*
*Ағиҙелгә сумып тирбәлә...*

*Йыр-моңло ил.*
*Шиғри хискә бай ил —*
*Мең йыр, мең һүҙ, мең төҫ йылмая...*
*Ғәжәп булыр ине:*
*Шул Бөрйәндә*
*Шағир урамы ла булмаһа!*

**Ҡәҙим АРАЛБАЙ.**

Самат
ҒӘБИҘУЛЛИН

## Кешеләрем!

*Аҡыллы һүҙ һеҙгә һөйләй алмам,*
*Ул аҡылды һеҙҙән йыяһы бар.*
*Тыя алмам хилаф аҙымдарҙан,*
*Үҙ-үҙемде әле тыяһы бар.*
*Ниҙәр ҡылып, ниҙәр кисерһәм дә,*
*Һеҙҙең менән булдым,*
*булырмын гел,*
*Кешеләрем!*
*Һеҙҙең менән генә*
*Юлдарымда уңдым, уңырмын гел.*
*Һеҙҙән алда бара алмам, ахыры,*
*Барһам икән артта ҡалмай ғына.*
*Үтһәм икән юлдың осонаса*
*Ауырлыҡтар һеҙгә һалмай ғына.*

## Шиғырҙарым

*Дағаларҙан сәсрәп ҡалған таштай,*
*Юлдарымда сәселеп ҡалдығыҙ.*
*Аҡҡа төшмәй,*
*телгә килеп етмәй,*
*Күптәрегеҙ эстә яндығыҙ.*
*Шиғырҙарым – ғәзиз балаларым,*
*Рәнйерһегеҙ инде, һиҙәм мин.*
*Майҙандарҙа яңғыҙ ҡалаһығыҙ,*
*Туҡтап тормай ары еләм мин.*
*Һеҙҙән алда йөрөр исемем юҡ,*
*Йәшәү сәмен һеҙгә һаламын.*
*Әрһеҙ балалар бит, бирешмәҫтәр,*
*Тигән өмөт менән ҡаламын,*
*Шиғырҙарым – ғәзиз балаларым…*

## Ҡуйма юл!

*Шыплап тейәп Бөрйән ағастарын*
*Төрлө яҡҡа тая КрАЗ-дар.*
*Мәйет сыҡҡан өй шикелле ҡала*
*Шыр яланғас тауҙар, ҡыраздар.*
*Кем таламай беҙҙең урмандарҙы,*
*Яйын табып уны кем һатмай?!*
*Сытыр-сатыр, түңгәклектәр аша*
*Ҡоштар оса ҡуныр ер тапмай.*
*“Байҙыҡына” йомарт дәү түрәләр*
*Ағастарҙы биргәс гектарлап,*
*Өлгөрәмдәр,*
*кемуҙарҙан килеп,*
*Урмандарҙы һаман ботарлай.*
*Ҡоро-бушҡа киткән беҙҙең ағас*
*Көмөш булып кемгә тамырын*
*Белә-күрә, Бөрйән халҡы һаман*
*Ҡарап ҡала күҙен талдырып.*
*– Районды‌ң хужалары – беҙ! – тип*
*Ирәйешеп ултыра түрәләр.*
*Бойороҡ үтәй улар*
*һәм урынын*
*Һаҡлау хәстәрлеген күрәләр.*
*Шәм шикелле ҡайын, ҡарағайҙар*
*Ағыла ла ситкә ағыла.*
*“Ас бөрйәндәр” тигән дан күтәрҙек,*
*Нимә көтәбеҙҙер тағы ла?!*

*Иҫеңә кил, ағай,*
*сәмлән, ҡустым,*
*Һуҡыр бойороҡтарға кәртә бул!*
*Екереүҙәрҙән ҡурҡып күп йәшәнек,*
*Етте!*
*Хәҙер быға ҡуйма юл!*

# АУЫЛДАШЫМ

*(Рәйес Түләктең тыуыуына 50 йыл)*



Үлем хаҡындағы хәбәрҙең дөрөҫ булмауы бармы икән? Әгәр ҙә былдай хәбәр хәҡиҡәткә тап килмәй ҡалһа, унда һүҙ барған тере кеше хаҡында: «Ай, ғүмере оҙон булғыры, мең йәшәгере...» – тиҙәр. Мин дә шулай тип әйтергә бик теләгәйнем. Етмәһә, ауылдашымдың вафаты хаҡындағы был хәбәрҙе 1 апрелдә ишеткәнгә күрәлер ҙә, яңылыш һүҙ таралыуы хаҡындағы икенсе яңылыкты иғлан итеүҙәрен түҙемһеҙләнеп көттөм. Ышанғым килмәне. Ҡолаҡ берҙе ишетһә лә, күңел икенсене көҫәне. Әллә инде уның менән сабый саҡтан алып күршеләш булып йәшәп, бергә уйнап үҫкәнгәме, бер үк Һаҡмарҙың шарлауын, ауылыбыҙ янындағы болонлоҡта сиңерткәләр сырылдауын, кәкүк, һандуғас, саҡ-суҡ тауыштарын тыңлағанғамы, үҫә төшкәс, офоҡ артындағы оло донъяларға бергәләп атлап сыҡҡанғамы, булмышының һәр һыҙатын, күркәм сифаттарын, уңыштарын уңышһыҙлыҡтарын, хаталарын, шатлыҡтарын һәм хафаланыуҙарын яҡшы белгәнгәме, тауышын үҙемдекеләй яҡын тойғанғамы (минеңсә, беҙҙең ауыл кешеләре бер үк тауышлы һымаҡ), ул шулай тиҙ генә, көтмәгәндә, донъялыҡтан китерлек кеше түгел ине. Бала саҡтан спорт менән даими шөғөлләнгән, аҙаҡ һауа десанты ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт иткән, тормоштоң һәр төрлө һынауҙарын, ауырлыҡтарын үтеп, әсе-сөсөһөн татып, утты-һыуҙы кисеп утыҡҡан, типһә тимер өҙөрлөк, баҫһа баҡыр иҙерлек бәһлеүән ине бит ул...

Ауылдашым, күршем, тиңдәшем (беҙ төрлө йылдарҙа тыуһаҡ та, арабыҙ өс ай ярым ғына), ҡәләмдәшем, фекерҙәшем Рәйес менән үлеренән ун көн алда Матбуғат йорто алдында осраштыҡ. Дөрөҫөрәге, ул Матбуғат йортонан сығып, мин инеп килә инек. Күптән күрешкәнебеҙ юҡ. Мин өсөнсө ҡаттағы «Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһына йүгереп инеп кенә сыҡтым, ул аҫта көтөп торҙо. Артабан Аграр университетҡа тиклем йәйәүләп барҙыҡ. Һуңғы тапҡыр күрешеп һөйләшеүебеҙ ҙә шул булған икән. Рәйес һурылып, ябығып киткән, быға тиклем үҙем белгән Рәйескә бөтөнләй оҡшамаған, ни әйтһәң дә риза, элекке кеүек үҙенекен яр һалып, ҡаратырышланып иҫбат итергә ынтылып та тормай.

Ошондай хәленең сәбәбен белешергә теләп, кинәйәләп кенә һаулығы хаҡында һорашҡайным, ул барыһын да яҙға бәйләп, «Яҙ көнөндә ялман ите лә аш булыуы»на бәйле фәлсәфәгә нигеҙләп аңлатты. Ауылыбыҙҙың шул көндәрҙә генә вафат булған беренсе профессиональ ҡурайсыһы Зәйнулла Раевты иҫкә алғас, Рәйес ул саҡта ла 1979 йылда тәүләп икәүләп ауылдан Өфөгә килгәндәге һүҙҙәрен ҡабатланы. Быға тиклем йөҙ, мең тапҡырҙар әйткәйне ул миңә был һүҙҙәрҙе: «Әхмәр, әйҙә, төкөрәйек Өфөһөнә, ауылға ҡайтайыҡ. Һиндә ике ҡул, миндә икәү – дүрт ҡул, һиндә ике аяҡ, миндә ике аяҡ – дүрт аяҡ, һиндә ике күҙ, миндә ике күҙ – дүрт күҙ. Шүлкә яғындағы урман ситенә өй һалырбыҙ, ер алырбыҙ, мал көтөрбөҙ, баҡса үҫтерербеҙ, рәхәтләнеп

йәшәйәсәкбеҙ. Ҡолас ташлап ижад итербеҙ. Яҙғандарыбыҙҙы Өфөләге гәзит-журналдарға, нәшриәткә ебәреп кенә ятырбыҙ. Ысын ижад емеше барыбер ҡасан булһа ла баҫылып сыға ул. Бында тамаҡ хаҡына кемгәлер инәлеп, үҙ бәҫебеҙҙе төшөрөп, йөҙ һыуын түгеп йөрөгәнсе...»

Рәйесте ошолай ҡайҙалыр ынтылыу, ашҡыныу, үрһәләнеү кәйефе бер ҡасан да ташлап китмәне. Бөгөн генә бөтә тулылығында аңлайым мин уның был халәтен: йөрәгендәге бер туҡтауһыҙ яңыу уны шулай ҡайҙалыр ашҡындырып-талпындырып йәшәткән. Һәүетемсә, һәлмәк, талғын ғына һөйләшеп ултырып та булмай ине бит уның менән. Уның күңел маятнигының уғы йә «ампли-туда»ны, йә «ампли-сюда»ны ғына белде, урталыҡты тойманы кеүек. Уй-фекер йөрөтөүендәге тынғыһыҙлығы, фекер динамикаһы, хистәренең ҡапыл гөлтләп тоҡаныуы менән ул, гүйә, тыуғанынан алып тик яныу өсөн генә яратылғайны. Әйтерһең дә, завод конвейерынан сыҡҡан двигателде бер тапҡыр тоҡандырғандар ҙа, ул эшлектән сыҡҡансы, бер туҡтауһыҙ эшләргә лә эшләргә тейеш. Минең уйымса, шағирҙар тап шулай булаларҙыр ҙа ул. Рәйестең яңы ғына яҙған шиғырын кемгәлер уҡып ишеттереү теләге менән ете төн уртаһында кешене йоҡоһонан уятыу ғәҙәте хаҡында күптәр белә. «Сибай–Өфө» поезына ултырып тәүге тапҡыр Өфөгә китеп барғаныбыҙҙа ла ул мине баш ҡалаға барып еткәнсе әллә нисәмә тапҡыр уятып, яңы ғына ҡағыҙға төшкән шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе. Шиғырын тыңлау ғына түгел, уға ҡарата үҙ фекереңде лә әйтергә тейешһең әле. Шул сағында тәнҡит һүҙҙәре әйтеп ҡара, ул күңел емешен үҙ балаһын йыртҡыстан һаҡлаған кейек кеүек яҡлай ине. Юҡ, Рәйес тәнҡитте ҡабул итә, тик әйткән һүҙенең хаҡлығы өсөн көрәшә лә белә ине.

Ҡайһы саҡта мин уның яңы яҙылған берәй шиғырын килешле итеп маҡтаһам, ул миңә: «Ҡустым, был һүҙеңде бөтә ерҙә лә һөйләп йөрө», – тип йылмая килде. Ижадсылар үҙ-ара аралашып йәшәгәндә, ижад иткәндә нимәләр генә булмай. Шуға күрә мин Рәйестең бындай саҡтарын тик бер генә маҡсатта иҫкә төшөрәм: шағир үҙе тере сағында ижадына ҡарата хаҡ баһаны алырға тейеш. Был йәһәттән Рәйес Түләк ижады тулы баһаһын алдымы икән? Ә теге поезда тәүге тапҡыр баш ҡалаға барған саҡтағы төнгө шиғыр тыңлауҙарға килгәндә, Өфөгә аяҡ баҫҡансы ул тотош дәфтәр шиғыр яҙып өлгөргәйне. Студент саҡта ул хатта, үҙ ятағында шиғырын тыңларлыҡ кеше таба алмайынса, студент ҡаласығындағы башҡа ятаҡтарҙағы таныштарының, дуҫтарының ишектәрен туҡылдатып йөрөгәнен беләбеҙ. Ап-айныҡ көйөнә. Бына шундай кеше ине ул. Атайымдың бер туған ағаһы Басир олатайым шундай кеше ине. Ул төн уртаһында бар ауылды йоҡоһонан уятып, ишектәрен туҡылдатып: «Нишләп йоҡлап ятаһығыҙ, елки-палки, Һаҡмар аға бит» , – тип үҙ шиғырҙарын һөйләп йөрөй торғайны.

Рәйестең был халәтен аңлар өсөн уның бары тик «Яныу» поэмаһын уҡыу ҙа етә. Рәйес Түләк ошо әҫәрендә бар тулылығында асыла, шағир һәм шәхес булараҡ үҙенең донъяға тәғәйенләнешен, маҡсатын билдәләй, минеңсә. Ул да булһа – халыҡты, милләтте ниндәй һәләкәт алдында торғанлығын иҫкәртеү, тарихи һабаҡты онотмаҫҡа, уяу һәм ғәмле, сәмле йәшәргә өндәү. Янған һарайға күҙ йоммай теҙелеп инеүсе һарыҡтарға ҡаршы сығып, уларҙы туҡтатырға теләүсе кәтәүсегә ниндәй борсолоу хас булһа, үҙ милләтен, кешелекте шундай янғындарҙан ҡурсырға, араларға теләүсе шағир вазифаһын башҡарҙы кеүек Рәйес. Ошо бурысы үтәлгәс тә, донъялыҡтан китеүе лә ҡәҙимге ғәмәл булып тойолдо уға. Шағирҙың бик күп шиғыр-поэмаларында ҡабатлана ошоға ауаздаш фекер. «Яныу» поэмаһының да аҙаҡҡы өлөшөндә шундай һүҙҙәр бар:

*... Хуш! Бәхил бул! Шиғыр итеп яҙ һин*
*Был хаттарҙы. Булһа яҙырлыҡ.*
*Мин бушандым. Хәҙер ҡәберҙә лә*
*Тыныс күңел менән ятырлыҡ ...*

«Яҙмыш» шиғырында иһә шағир үҙен йылға буйлап ағып барыусы боҙ өҫтөндә янған ут менән сағыштыра һәм шундай һығымтаға килә:

*Барыһы ла ошо яҙмышымда,*
*Төрөлгәндәй ап-аҡ биләүгә.*
*Тәүҙә усаҡ быҫҡып һүнер микән,*
*Әллә ирер микән боҙ тәүҙә?*

Хәҙер инде шағирҙың рухын шулай тип тынысландырырға булалыр: усағың быҫҡып һүнмәне, Рәйес, ялҡыны беҙҙең күңелдәргә күсте. Тик һин самаһыҙ ялҡынланып янғанға күрә, боҙоң ғына ирене. Уйлаһаң, уйылып китерлек бит: ғүмер, яҙмыш, йәшәү маҡсаты хаҡында шундайын ҡанатлы һүҙҙәрҙе әйтер өсөн ниндәй кисерештәр, уй-тойғолар солғанышында йәшәргә кәрәк икән? Ә бит тап ошо шиғырында Рәйес үҙенең яҙмышын әйтеп тә биргән. Илатырлыҡ, аңлауҙарҙың сөңгөлөнә уйылып китерлек, йөрәгеңде ҡанатырлыҡ итеп әйтеп биргән. Уның шулай донъялыҡтан иртә китеүе лә янып йәшәүенә бәйле бит. «Боҙ»оң оҙаҡҡараҡ етһен тиһәң, янмайынса, йөҙ йәшкә еткәнсе лә йәшәргә мөмкинһең. Ә был осраҡта һуң? Ҡапыл балҡып, ҡапыл һүрелеүең кемгә хәжәт тиһеңме? Улай булһа, оҙайлы ғүмерең буйы күҙ көйөгө булып быҫҡыуыңдан ни фәтеүә? Туҡтауһыҙ эҙләнеүе, берсә балҡыуы, берсә үрһәләнеүе, ташҡындарға ташланыуы, асырғаныуы уның булмышын, асылын яңынан-яңы һынауҙарға дусар итте, ғәм менән янып йәшәргә әйҙәне.

Бөгөнгөләй хәтеремдә, беҙ Рәйес менән баласаҡ баррикадаларының ике яғында, ике командала торҙоҡ. Мин – ағайым Зөфәрҙең, ул Вәзиғтең әтрәтендә бер-беребеҙгә ҡаршы әллә һуғыш уйыны уйнаныҡ, әллә ысынлап «һуғыштыҡ» инде. Һәр хәлдә, Рәйес үҙ әтрәтенең комиссары булып, лейтенант погондары тағып, планшет аҫып йөрөй торғайны. Бер нисә мәртәбә уның менән йөҙгә-йөҙ осрашып, ысынтылап һуғышып та киттек. Йөҙгә һуғышып түгел, башҡортсалап, ҡолаҡ төбөнә тондорошоп. Ҡайһы саҡ беҙҙе атайҙар килеп айыра ине. Минең «Атайыма әйтәм» тигән шиғырым шул нигеҙҙә яҙылды. Нисек кенә булһа ла, бала сағыбыҙ ана шулай ҡапма-ҡаршы торған ике лагерҙа үтте. Аҙағыраҡ, урам уйындарынан айырылып, танауҙарыбыҙға еҫ ингәс, Рәйес менән беҙҙең юлдар ижади юҫыҡта киҫеште. Сыңғыҙ һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә уҡығанда икәүләп физика уҡытыусыбыҙ Рәүеф Бикташев ойошторған «Йәш техник» түңәрәгенә йөрөй башланыҡ. Түңәрәктә Австралия һунарсыларының ҡоралын – бумеранг яһаныҡ. Тик уны яһап бөтһәк тә, һынай алманыҡ. Әле килеп Рәүеф Ғәлләм улы аңлатыуынса, ул был эште үҙе туҡтатҡан. Бумеранг менән бер-беребеҙҙең күҙҙе сығарыуҙан ҡурҡҡан икән. Рәйес менән икебеҙҙең берлектәге «Буранбайҙың яҙған хатын уҡып...» тигән китабыбыҙ сыҡҡас, китаптың исем туйы Сыңғыҙ һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә лә үтте. Беҙ шунда Рәйес менән физика уҡытыусыбыҙ Рәүеф Ғәлләм улына китабыбыҙҙы бүләк итер алдынан шундай һүҙҙәр әйттек: «Һеҙ беҙгә белем биреп, бумеранг итеп донъяға осороп ебәргәйнегеҙ, беҙ һеҙгә китап булып әйләнеп ҡайттыҡ...» Бик йәтеш килеп сыҡты. Ни өсөн тигәндә һунарсының ҡулынан йәнлеккә табан осҡан бумеранг та кирегә табан осоп әйләнеп килә бит инде.

Уртаҡ ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килгәс, хәҙер инде бала саҡтың сәкәләшеүҙәре, үпкәләшеүҙәр бөтөнләй онотолдо. Ул саҡта минең атайым, бар ауыл халҡын аптыратып, аэросана яһап йөрөгәйне. Шул мәлдән башлап Рәйестәрҙең усаҡлығы (аласығы) беҙҙең «Авиация заводы»на әүерелде, йәғни аэросананың камил вариантын беҙ үҙаллы яһарға керештек. Атайым механизатор булғас, мин был “завод”ты деталдәр менән тәьмин итеүсегә әүерелдем. Яһап бөттөк, бер көн тышҡа сығарып, ҡоролмабыҙҙың двигателен ҡабыҙып ҡараныҡ, тик ул урынынан ҡуҙғалырға ғына теләмәне. Яңыса винт яһарға булып, «Йәш техник» журналына яҙылдыҡ. Шулай мәж килеп йөрөгән сағыбыҙҙа ауылыбыҙ вундеркиндтары Сәмиғулла Нәүширбанов менән Хәйҙәр Ғәйетбаевтың малайҙарға

диафильм күрһәтеүҙәрен ташлап (улар диафильмды төндә өй эсенән тәҙрә ҡорғанына ҡуя инеләр, өй янындағы рәшәткә буйы малайҙар өсөн кинозалға әүерелә торғайны), ниндәйҙер лампалы приставка эшләргә тотоноуҙары мәғлүм булды. Етмәһә, ул приставка менән радиоэфирға сығып, сымһыҙ-ниһеҙ генә, телефон кеүек, үҙ-ара һөйләшеп тә була икән. Аэросана үҙенән-үҙе икенсе планға күсте, беҙ Сәмиғулла менән Хәйҙәргә ҡушылдыҡ һәм бер нисә көндән ауылыбыҙҙа, ауылыбыҙҙа ғына түгел, районда, районда ғына түгел, донъяла сенсация яһаныҡ. Рәйестәрҙең өйөндә икәүләп ултырып, Сәмиғуллаларҙың өйөндәге теге ике вундеркинд менән сымһыҙ-ниһеҙ генә телефон аша һөйләштек. Рәсәйгә, Башҡортостанға кәрәҙле кеҫә телефондары туҡһанынсы йылдарҙа саҡ килһә, беҙҙең Буранбай ауылында кеҫә телефоны етмеш икенсе йылда эшләй ине инде, һәм шул телефон авторҙарының береһе Рәйес Түләк булды. Әлбиттә, дөйөм радиоэфирға сығыуыбыҙ эҙһеҙ үтмәне. Иң тәүҙә беҙҙең был «хулиганлыҡ»ты (ул саҡта «радиохулиган» тигән термин бар ине) радио тыңлаусы ағайҙар һәм апайҙар белеп ҡалды, сөнки беҙ эфирға тығылып, уларға иркенләп концерт тыңларға ҡамасаулағайныҡ. Бер аҙҙан силсәүит, милиция беҙҙең «ҡолаҡты борҙо». Рәйес Сәмиғулла Нәүширбановҡа бағышланған «Тулҡындар» шиғырында был ваҡиғаларҙы шулай иҫкә ала:

*Схемалар. Иртәләрҙән кискә,*
*Кистән таңға саҡлым...*
*Радиоэфир – Америкаһы ул*
*Беҙҙең бала саҡтың...*

Сәмиғулла, Хәйҙәр, Рәйес...

Хәҙер өсөһө лә бер үк зыяратта «йоҡлай». Ҡасандыр бар тирә-яҡты аптыратып, ғәжәпләндереп сымһыҙ телефон менән һөйләшеп йөрөгән бала сағым Эдисондары «теге донъя»ла ла сымһыҙ ғына аралашып-һөйләшеп йөрөйҙәрме икән? Ул «тарафтан» был тарафҡа сым, мәғлүмәт каналы һуҙыу мөмкинлеге булмағас, быға хәбәрҙәр түгелбеҙ шул. Шулай ҙа бер ерҙә лә махсус белем алмайынса ла теләһә ниндәй маркалы телевизорҙы, компьютерҙы, ҡатмарлы радиомеханизмдарҙы күҙ йомоп һүтә һәм ремонтлай алған Сәмиғулланың; махсус рәүештә уҡып алған умартасы һәм тракторсы һөнәрле көйө генә лә кибернитиканы, фотосинтезды, юғары математиканы, молекуляр химияны, ҡатмарлы физиканы, биологияны, теологияны, философияны, психологияны, тарихты академик кимәлдә белгән, китап ене ҡағылған ауылыбыҙ Әбүғәлисинаһы һәм Әфләтуны Хәйҙәрҙең; заманыбыҙҙың киң масштаблы фекер эйәһе, атаҡлы ғалимы һәм шағиры Рәйес Түләктең шулай иртә гүр эйәһе булыуҙарына аҡыл ышанһа ла, күңел ышанмай барыбер.

Ошо өсәүҙең араһынан тик Рәйес Түләк кенә ваҡытында юғары белем алып, үҙенә Аллаһы Тәғәлә һәм тәбиғәт тарафынан бирелгән һәләтте асып, бар донъяға күрһәтә, милләтебеҙгә хеҙмәт иттерә алды. Ғүмере ҡыҫҡа булды, шулай ҙа ошо ваҡыт арауығында Рәйес Түләк егерме беренсе быуат башы башҡорт шиғриәтенең иң сағыу өлгөләрен тыуҙырыуға өлгәште.

Украинаның Труцкавец ҡалаһында яҙып ҡайтты Рәйес үҙенең киң билдәле «Ҡашмау» поэмаһын. Ул Өфөгә ҡайтҡанда беҙ: Рәмил Ҡол-Дәүләт, Ғәбиҙулла Зарипов, Дамир Шәрәфетдинов, Рафиҡ Ҡунаҡбаев минең ятаҡ бүлмәһендә сәй эсеп ултыра инек. Рәйес шым ғына килеп инде лә, беҙҙең менән һаулыҡ та һорашып тормаҫтан, ишек төбөнән үк яңы поэмаһын уҡырға тотондо. Уҡып бөткәс кенә үҙен ҡосаҡлап алдыҡ, һаулыҡ һораштыҡ. Һәр ҡайһыбыҙ үҙ фекеребеҙҙе әйттек. Арабыҙҙа эпитеттарға "аяуһыҙ" булыуы менән айырылып торған Ҡол-Дәүләт шул саҡта: "Рәйес, һин был поэманы яҙғас, дошмандарың күбәйәсәк..."– тине. Мин иһә: «Егеттәр, башҡорт әҙәбитендә Рәйес Түләктең «Ҡашмау» поэмаһы бар сағында,

беҙгә шиғриәттә делать нечего, прозаға күсәм», – тинем. Ысынлап та, шул саҡта күңелемдә ҡапма-ҡаршылыҡлы ике төрлө тойғо яралғайны. Тәүгеһе – Рәйестең ошо поэмаһын тыңлағандан һуң үҙемдең яҙған шиғырҙарымдың «наивный» ғына икәнен аңлау, икенсеһе – ошондай поэманы яҙған кешенең ауылдашым булыуына бәйле ғорурланыу тойғоһо...

Сәмиғулла менән Хәйҙәр ҙә яһап ҡаранылар быйдай аҙымды. Икеһе лә, бер ниндәй махсус әҙерлекһеҙ көйгә, бер нисә техник һәм гуманитар юғары уҡыу йортона инеп тә, унда уҡып китә генә алманылар. Уҡыу программаһын үҙләштерә алмағандары өсөн түгел, һәр бер талантлы кешегә хас булғанса, яҙмыштарын билдәләр ихтыярһыҙлыҡтары арҡаһында, улар тәбиғи һәләттәрен концептуаль фекерләү нормаһына еткерә алмай, шәхестәрен үҫтерә алмай, тарҡалып ҡуйҙылар. Икеһе лә ошо көндә кәмендә академик булырлыҡ егеттәр ине...

Бумеранг, аэросана, лампалы приставка яһау булһынмы, ҡурайҙа, гармунда уйнарға өйрәнеү булһынмы – әйткәнемсә, ижади эҙләнеү Рәйес менән икебеҙҙе баласаҡ баррикадаларынан бер ярға тартып алып, һуңғы сиктә шиғриәт, әҙәбиәт тигән донъяға алып килде. Мин унынсыны бөтөрөп колхозда эшләп йөрөйөм. Рәйес урта мәктәпте тамамлағас, тракторсы-машинисҡа уҡып алды ла шунан армияла хеҙмәт итеп ҡайтты. 1979 йылдың йәйендә Һаҡмарҙа һыу инеп, ҡомда ҡыҙынып, Рәми Ғариповтың шиғырҙар китабын уҡып ятһам, армиянан ҡайтып, тракторсы булып эшләүсе Рәйес тә һыу инергә килде. Икәүҙән-икәү ҡалғас, мин тоттом да Рәми Ғариповтың шиғырҙарын уҡырға керештем. Рәйес уларҙы йөҙтүбән ятҡан килеш тыңланы ла, сираттағыһын уҡып бөткәс, янып торған тәмәкене яңылыш тәненә баҫҡан кешеләй һикереп тороп, аяғына баҫты:

– Ҡайҙа, күрһәт әле китабыңды, кемдең шиғырҙарын уҡыйһың ул? – тине.

– Рәми Ғариповтыҡы...

– Ҡана, үҙем уҡып ҡарайым әле, – ул китапты ҡулымдан тартып тиерлек алды ла уҡырға кереште. Мин иһә, уның үҙен генә ҡалдырып, һыуға сумдым. Оҙаҡ ҡына йөҙөп йөрөнөм, үҙем күҙ ҡырыйы менән генә китапҡа төбәлгән Рәйесте күҙәтәм. Байтаҡ ваҡыт һыуҙа йөрөгәс, сыҡтым да уның эргәһенә эҫе ҡомға һуйҙайҙым.

– Шәп бит, әй, шиғырҙары. Рәми Ғарипов тураһында ишеткәнем бар ине, яңыраҡ үлеп ҡалды шикелле. Тик бына китабын уҡымағайным. Белгең килһә, Әхмәр, тик берәүгә лә әйтмә, мин дә бит шиғыр яҙам...

– Һе, мин дә яҙам...

Ана шулай, осраҡлы ғына рәүештә, беҙ уның менән шиғыр яҙыуыбыҙ хаҡындағы серҙәребеҙҙе бүлешә алдыҡ. Бында беҙгә Рәми Ғариповтың ошо китабы ярҙам итте, тел асҡысы булды. Ниңәлер, шиғыр яҙыуыбыҙ хаҡында бер кем дә белергә тейеш түгел, тигән үҙебеҙ уйлап сығарған ҡағиҙәне генә хәҙерге көн күҙлегенән аңлатыуы ауырҙыр. Белмәйем, ни өсөндөр ул саҡта шиғыр яҙыу тик ҡыҙҙарға ғына хас нескәлек һәм хискә бирелеү шөғөлө һаналып, ир-егеттәр өсөн кәмселек тип иҫәпләнә ине булһа кәрәк. Әллә шуның өсөнмө, әллә киләсәктә үҙебеҙҙе ҙур шағирҙар итеп күрергә теләүҙәнме, беҙ шул көндө Һаҡмар ярында Рәйес менән Өфөгә китергә ҡарар иттек. Артабан инде беҙ уның менән асылда бер үк һуҡмаҡтан атлап оло донъяға табан йүнәлдек, буғай. Әлбиттә, тынғыһыҙ йәнле Рәйес шул китеүебеҙҙән Өфөнө ташлап, кире ауылға бик күп тапҡырҙар ҡайтты, шунсама тапҡырҙар Өфөгә кире килде. Яҙмышыбыҙ төрлөсә булһа ла, беҙ уның менән бер үк юлға тоғро ҡалдыҡ.

Яҙмыш тигәндән... Мин Рәйес менән күршеләш йәшәп үткәргән бәхетле баласаҡ миҙгелдәре хаҡында уйланһам, һәр ваҡыт Рәйестең атаһы Ғоссам олатайҙы (беҙҙең яҡта атайҙан өлкән кешегә олатай тиҙәр) иҫемә төшөрәм. Башҡа яҡтарҙа нисектер, беҙҙең яҡтың атайҙары ниңәлер йәшкәҙәгән күҙле, нескә күңелле булыуҙары менән айырылып тора һымаҡ. Был сифат уларҙың ихтыярһыҙ булыуын аңлатмай, шулай ҙа

тормоштоң һәр төрлө аяныслы мәлдәрендә йыш ҡына уларҙың һулҡылдауын, күҙҙәрендәге йәшен башҡаларға күрһәтергә теләмәйенсә, ҡараштарын ситкә күсереүенә шаһит булғаным бар. Уның ҡарауы, беҙҙең яҡтың әсәйҙәре, өләсәй-ҡартәсәйҙәре ҡорос ихтыярлы була белгәнә лә шаһитмын.

Нисек кенә булмаһын, Ғоссам олатай хатта ябай ғына бөжәктең дә йәне ҡыйылыуын, сәскәнең, ағастың һәләк булыуын ҙур юғалтыу итеп кисерә белгән зат булды. Һәр бер нәмәне аяр ҙа, йәлләр ҙә йөрөр ине. Уның был сифаты биш бала араһындағы берҙән-бер улы Рәйескә лә күсә. Беҙ үҫкән саҡта ауылыбыҙ фольклоры гәүһәрҙәре араһында Рәйестең атаһы хаҡында шундай бәйет тә бар ине:

*Ун дүртенсе июнь көнө*
*Яңғыҙ ҡайын ҡолаған.*
*Яңғыҙ ҡайын ҡолаған, тип*
*Ғоссам олатай илаған.*

Ауылыбыҙ янындағы тау үҙәгендә үҫә ине ул яңғыҙ ҡайын. Берҙән-бер көндө шул ҡайынды йәшен атты. Ҡайын йәшен атыуҙан киҫелгән кеүек ауҙы, олоно серегәнсе бик оҙаҡ ваҡыт шунда ятты. Көтөүсе Ғоссам олатай шул ҡайынды йәлләп илаған икән.

*Атай үпкәһендә киткән ярсыҡ*
*Ун йыл йөрөй минең йөрәктә, –*

тип яҙғайны Рәйес үҙенең атаһына арнаған бер шиғырында. Һуңынан ғына белдем: Ғоссам олатайҙың үпкәһендә йөрөгән, уны ҡәбергә алып киткән мина ярсығына бәйле үтә фәһемле тарихы ла бар икән. Миңә уны Рәйестең Мәрзиә апаһы ҡәләмдәшемде һуңғы юлға оҙатҡанда һөйләне. Ғоссам олатай, һуғышта үпкәһенә мина тейеп, ҡаты яраланғас, операция яһарға йыйынған тәжрибәле хәрби врач уға был операцияның уңышһыҙ тамамланыу ихтималлығы, бер нисә һалдаттың тап ошондай операция арҡаһында үлеп ҡалыуы хаҡында иҫкәртә. Врач уға тыуған яғына ҡайтырға, өйләнергә, балалар тыуҙырып йәшәп ҡалырға тәҡдим итә. Олатай шулай итә лә. Дөрөҫөн әйткәндә, үлемесле яраһына бәйле ошондай ҡатмарлы һәм ауыр шарттарҙа ҡатыны Яңылбикә инәй менән дүрт ҡыҙына һәм улына ғүмер бүләк итергә өлгөрә. Ғоссам олатайҙың был аҙымы яу ҡырында күрһәткән батырлыҡтарына йәнәш оло ҡаһарманлыҡҡа тиң. Шул сағында ул, башҡорт әҙәбиәтенә оло әҙипте бүләк итәм, тип башына ла килтермәгәндер. Ошо ваҡыт арауығында ниндәй һыҙланыуҙар, ғазаптар менән йәшәүен Ғоссам олатай үҙе генә белгәндер.

Кем белә, бәлки, Рәйестең ашҡынып, янып йәшәүендә лә, ялҡынланып ижад итеүендә лә Ғоссам олатайҙың «Ғүмер биреп өлгөрөп ҡалырға» тигән ынтылышы яталыр. Юҡһа Рәйестең ғүмеренең һуңғы йылдарында поэмаларға, романдарға нигеҙ, символ булырлыҡ фекер-образдарын ябай мәҡәләләргә нышып тултырып, нисек булһа ла әйтеп ҡалырға ашығыуын нисек аңлатмаҡ булаһың инде? Рәйестең “Башҡортостан» гәзитендә баҫылған һуңғы мәҡәләләрен генә киренән уҡып ҡарағыҙ. Уларҙа шағирҙың атаһы Ғоссам олатайҙыҡына оҡшаған «...өлгөрөп ҡалырға кәрәк» тигән ынтылышын тоймау мөмкин түгел. Былар – аталы-уллы Ғоссам һәм Рәйес Түләковтарҙың һуғышта, тормошта һәм ижадта яһаған батырлыҡтарының бына тигән өлгөләре. Халыҡта шиғриәткә ихтыяж бөтмәҫ ул, мине икенсе нәмә борсой: шағирҙар бөтмәҫме икән? «Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр» тип ҡабатларға яратабыҙ ҙа ул, матурлыҡтың үҙен кем ҡотҡарыр икән? Бөгөн проза, драма әҫәрҙәренә ихтыяж һиҙелә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, поэзия тураһында быны әйтеп булмай. Прагматиктар заманында романтик булыу, шағир булыу еңел түгел. Ысын булһа, бөгөн Америкала шағирҙарға иғтибар артҡан. Саҡ ҡына шиғыр яҙырға һәләте булған кешене унда берәй фирма үҙ ҡанаты аҫтына ала икән. Шағир булғаны өсөн түгел, шиғыр яҙа белгәне өсөн түләйҙәр икән уға. Беҙҙә шағирҙар, киреһенсә, ситләтелә. Юҡ кимәлендә улар бөгөн. «Литературная газета»

һуңғы осорҙа шағирҙарҙың күпләп үлеүе тураһында яҙып сыҡты. Репрессиялар осоронда ла ундай уҡ күп һәләк булмаған улар. «Сегодня уход из жизни самых крупных из них (поэтов) становится лишь предметом для регистрации в соответствующей конторе», – тип шул тиклем һыҙланып яҙып сыҡҡайны Псков шағиры Станислав Золотцев», – тигәйне Рәйес үҙенең бер сығышында. Был һүҙҙәрҙә шағирҙың үҙ һыҙланыуҙары ла сағылыш тапҡан. Шағирҙарға замандың, властарҙың мөнәсәбәте хаҡындағы был һүҙҙәре уның «Мең дә икенсе кис...» шиғыр китабына ла ингән. Беҙ шуға ла шаһитбыҙ: шағирына Өфө ҡалаһы ҡуйынын асманы, Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты булған шағирҙың баш ҡалала хатта фатиры ла булманы. Өфөлә фатир алыр өсөн Рәйескә башҡалар ыңғайына башын эйеп йөрөргә, әйтер һүҙен әйтә алмайынса, ҡалыптар менән фекер йөрөтөргә, бер урында күндәм генә кәмендә утыҙ йыл хеҙмәт итергә, тәртипле «флюгер» булырға кәрәк ине шул. Мин бында кемделер ғәйепләргә теләмәйем, беҙҙең тотош система шулай ҡоролған шул. Икмәк, көн итеү хаҡына хатта шағирҙар ҙа баш эйеп йәшәргә тейеш шул.

Аллаһы Тәғәлә үҙенең һайланмыш бәндәләренә һынауҙарын да ҡаты ҡуя, күрәһең. Рәйес ғаиләһе менән бик күп тапҡырҙар баш ҡалаға бер килеп, бер кире ҡайтып, ҡағылып-һуғылып йөрөй торғас, Сибайҙа фатир алды. Бында ҡала хакимиәтенең ул саҡтағы башлығы Зиннур Йәрмөхәмәтовҡа рәхмәтлебеҙ. Түләковтар Сибайҙа инде кешесә йәшәй башлағандарында, еңгәйҙең ҡаты сиргә юлығыуы ауылдашымды алдағыларынан да ауырыраҡ һынауҙар алдына ҡуйҙы. Бирешмәне Рәйес. Тештәрен ҡыҫып, тағы ла сәмләнеберәк ижад итте, яҙғандарында ғазаптары арта төштө.

«Кеше хуплау өмөт итеп яҙһа ла, теләге ҡабул булғас, тыныслана. Ҡурҡыныс был. Паскаль: «Кешенең иң бәхетле мәле – бәхет хаҡында хыялланған һәм уға ынтылған мәле. Күҙалланған бәхетеңә ирешкәс, ул ябай ҡәҙимгелеккә әйләнә», – тигән. Яҙылған шиғырымдан ҡәнәғәт булһам, башҡа яҙмай торам. Ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо тыуғас ҡына, яңы әҫәр яҙырға һәләтле икәнемде тоям», – тип әйткәйне Рәйес «Киске Өфө» гәзитендәге бер әңгәмәһендә. Был саҡта инде шағир йәш саҡта икәүләп баш ҡалаға килгәндәгесә туҡтауһыҙ өҙгөләнеүенән туҡталып, уйҙары утығып, ярһыулығы дарманға, ялҡынланыуҙары тандырға әүерелеп, донъяның әүрәткес осраҡлыҡтарынан, осҡартын ялпылдауҙарынан, осраҡлы шатлыҡтарынан дүнеп, ныҡҡа арҡа терәгәйне.

«Үҙ кимәлендәге аралашыуҙан ситтә торған теләһә ниндәй талант һүрелеүгә дусар», – тигән Флобер. Рәйес бер туҡтауһыҙ Өфөгә ынтылды. Тап шул саҡта ул баш ҡалаға кире килеп, ятаҡтан бер бүлмә алып, ныҡлап ижадҡа тотондо. Мин уны үҙем эшләгән “Киске Өфө” гәзите редакцияһына эшкә саҡырҙым. Килде лә егелеп эшләп тә китте. Ул беҙгә «Класс сәғәте» тигән рубрика тәҡдим итеп, шул рубриканы үҙе алып барҙы. Әйтергә кәрәк, Рәйестең тәрбиә темаһына арналған был философик уйланыуҙары беҙҙең гәзит өсөн оло табыш булды, бигерәк тә Рәйескә мәктәптә эшләүсе синыф етәкселәре рәхмәтле ине. «Ҡулыбыҙға гәзитте тотоп, дәрес үткәрергә инәбеҙ ҙә китәбеҙ, шул тиклем кәрәкле рубрика булды беҙҙең өсөн» тип хаттар яҙа ине уҡытыусылар. Беҙҙә күп тә эшләмәҫтән, Рәйесте «Китап» нәшриәтенә эшкә саҡырҙылар, ижади мөхиткә яҡыныраҡ булыр, тип шунда китте. Һуңынан ғүмеренең аҙағынаса ул «Башҡортостан» гәзитендә хеҙмәт итте, үҙенең киң билдәле мәҡәләләрен баҫтырҙы.

Бына шул саҡтағы Рәйестең көндәлегендәге бер яҙмаһы: «Әле йәшәп ятҡан Өфө ятағы бүлмәһенән дә тыныс урын юҡ бөгөн. Сөнки ҡайҙа етте шунда ултырып яҙа алмайым. Күңелгә ятышлы урын кәрәк. Тағы ла бер хикмәт бар: яҙыр алдынан өйҙө тәртипкә килтереп алам, шунһыҙ яҙырға ултыра алмайым. Бала саҡтан ҡалған ғәҙәттер ул. Иҫ белгәндән дүрт апай өйҙө шул тиклем таҙа тотто – ҡаныма һеңгән ул тәртип тигән нәмә».

Рәйес Түләк бер ваҡытта ла дежур һүҙҙәр һөйләмәне, дежур мәҡәләләр яҙманы, дежур шиғырҙар ижад итмәне. Сибай педагогия училищеһында уҡыған сағында мин уның дәресенә инеп ултырҙым. Шиғыр тураһында ине ул дәрес. Әгәр ҙә уның дәрестәрен һүҙмә-һүҙ яҙып, матбуғатҡа баҫып сығарһаң, улар училище, институт, университет студенттары өсөн генә түгел, хәҙер Яҙыусылар берлеге ағзаһы тип һаналған, «... исемендәге дәүләт премияһы лауреаты» булған бик күптәр өсөн дә һабаҡ-дәрес булырлыҡ. Булмышы, асылы менән шағир ғына түгел, ғалим да, мөғәллим дә ине ауылдашым Рәйес Түләк.

Ғүмеренең һуңғы йылдарында Рәйес «Зөлхизә» тип аталған ҙур күләмле поэтик проза әҫәре өҫтөндә эшләне. Был әҫәренең жанрын автор «Романға повесть» тип атаған, йәғни йөкмәткe менән форма араһындағы айырманы ошо рәүешле тигеҙләргә теләгән. Әммә, минеңсә, башҡа бик күптәр ҙә ошо фекерҙе яҡлай: Рәйестең был әҫәре – башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының, улай ғына ла түгел, башҡорт халҡының фажиғәле яҙмышын һүрәтләүсе роман. Халыҡ романы. Был әҫәрҙе Александр Пушкиндың «Евгений Онегин» әҫәре менән бер рәткә ҡуйырға була. Үкенескә ҡаршы, «Зөлхизә»не авторы тамамлап өлгөрмәне. Шулай ҙа, киләсәктә был әҫәр әҙәбиәт белгестәре тарафынан үҙенең лайыҡлы баһаһын алыр, тигән ышаныстамын. Романдың әлеге өлөшөнөң аҙағында шағир башҡорт халҡының Рәсәй ысынбарлығындағы тормошон шундай юлдар аша һүрәтләй:

*Һәм: «Бәхил бул, йыуылмаған Рәсәй,*
*Хакимдар һәм ҡолдар ватаны».*
*Тыуыуҙарым һиндә хата булһа,*
*Мин төҙәтәм ошо хатаны.*

*Үлеп түгел. Һинән баш тартам мин –*
*Сит илдәргә китеп төҙәтәм.*
*Йәшен атһын мине – бер саҡ һине*
*«Тыуған илем» тиеп һүҙ әйтһәм.*

*Юшҡындарын йыуам йөрәгемдән*
*Кисергәндең һиндә, күргәндең.*
*Тотҡонлоғоң – төрмә. Азатлығың –*
*Ихатаһы бит ул төрмәнең.*

Рәйес Түләктең үҙе үлгәндән һуң аҙна-ун көн үткәс сыҡҡан «Мең дә икенсе кис...» китабының тәүге битендә мәрхүм булған ата-әсәһенә, туғандарына бағышлауында шундай юлдар бар:

*Ҡуйынында һеҙ ятҡанға ғына,*
*Беләм, Ер ысҡынмай күсәрҙән...*

Шағир үҙе лә ата-әсәһе, туғандары янына – Баймаҡ районының Буранбай ауылы зыяратына барып ятты. Был хәлде аң менән ҡабул итеүе ауыр, үкенесле. Шулай ҙа хәҙер инде Рәйестең үҙе лә күреп өлгөрмәгән китабындағы шул уҡ шиғыр юлдарын үҙенә бороп әйтергә генә ҡала:

*Ҡуйынында һин ятҡанға ғына,*
*Беләм,*
*Ер ысҡынмай күсәрҙән...*

Шағирҙарҙың ғүмере мәғәнәһеҙ булмаған кеүек, уларҙың үлеме лә оло мәғәнәгә эйәләр. Һәр хәлдә шағир үҙенең ҡайҙалыр – тарихҡамы, киләсәккәме – китеүенә лә фанилыҡ менән баҡыйлыҡ арауығына торошло мәғәнә һала.

*Хушығыҙ! Уңмаһам, ҡайтып,*
*Һеҙҙеңсә ҡартайырмын.*

*Ә хәҙергә эҙләп киттем*
*Матурлыҡ Арҡайымын, –*

ти ул «Эҙләйем» шиғырында. Үкенескә ҡаршы, тәҡдире уға «ҡартайырға» бойормаған. Улайһа, ҡайҙа китергә ашҡынған һуң шағир? Матурлыҡ Арҡайымы шундамы икән? Әллә шағирҙар, ысынлап та, үлмәйҙәрме? Әллә үҙҙәре генә аңлаған һәм белгән юлдар менән аң һәм рух араһындағы донъяла тороп ҡалалармы? Туфан һыуы ҡалҡҡас, параллель йышлыҡҡа сыҡҡан майялар кеүек. Шулайҙыр, юғиһә шул уҡ шиғырҙағы был юлдар ҡайҙан?

*Баҙнат итмәй торам әле*
*Елкәндәрҙе кирергә.*
*Киләсәккә китергәме,*
*Китергәме кирегә?*

Рәйес үҙе теләп янды, яныуға тиң яҙмышын үҙе һайлап алды. Дөрөҫөрәге, уның яҙмышы тотошлайы менән яныуҙан торҙо. Ғүмере лә шуға ҡыҫҡа булды. Әммә ул ғүмерен бушҡа ғына бирмәне. Күптәребеҙҙе аямай үртәгән дәһшәтле янғынға үҙе теләп инеп янды ла беҙҙе был хаҡта иҫкәртеп китте.

*Ер сатнаһа, һин тешеңде*
*Шығырҙаттың – түҙмәнең...*
*Тәнең менән Ерҙе һаҡлап,*
*Ауҙың ғына – үлмәнең.*

*Урта быуаттарҙан килдең,*
*Килдең таш быуатынан.*
*Халҡыбыҙҙың бөйөк рухын*
*Тәфсирләп аңлатырға*
*(Янғындан аңғартырға).*

*Ҡалҡан булдың һин уҡтарҙың*
*Беҙгә йүнәлгәненә,*
*Илгә төбәлгәненә,*
*Миңә төбәлгәненә.*

*Ҡалҡан булдың, тик булманы*
*Ышыҡланыр «урының».*
*Ысын шағирына Өфө*
*Асманы шул ҡуйынын.*

*Таш йорттарҙы тиңләнең шул*
*Баррикада-табутҡа.*
*Тик Өфөнән киталманың*
*Һәм ҡалманың, ҡалып та...*

*Урта быуатыңа киттең,*
*Киттең таш быуатыңа, –*
*«Башҡорттар йәшәйҙәр!» тиеп*
*Тарихты йыуатырға.*

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

---

# ҠАБАТЛАНМАҪ ИЖАД ДОНЪЯҺЫ

Шиғриәт алдында һәр саҡ бер маҡсат торған һымаҡ — йәшәйештең асылын, тормош мәғәнәһен аңларға тырышыу, кешенең күңеленә асҡыс таба белеү, рухи юғарылыҡҡа ынтылыу. Был маҡсат замандан-заманға тулылана бара. Был турала күпме әйтелмәһен, һәр яңы осор, һәр яңы шағир уға үҙ өлөшөн индерә, уны үҙенсә аңлай һәм үҙенсә аса. Тимәк, әҙиптәр туҡтауһыҙ эҙләнә һәм әҙәбиәт туҡтауһыҙ хәрәкәттә. Был хәрәкәттә ниндәйҙер ҡараштар иҫкерә, яңылары тыуа, ә нимәлер быуындан-быуынға тапшырыла килә.

1959 йылда Баймаҡ районының Буранбай ауылында тыуа Рәйес Түләк. Беренсе Этҡол урта мәктәбен тамамлай. 1977—1979 йылдарҙа хәрби хеҙмәттә була, аҙаҡ колхозда эшләй. 1988 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлап, тыуған яғында уҡыта. 1990 йылдан Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһының Яҙыусылар союзы ағзаһы. 1996 һәм 1999 йылдарҙа “Йәшлек” гәзитенең, 1998 йылда “Шоңҡар” журналының, 2004 йылда “Башҡортостан” гәзитенең, 2005 йылда “Ағиҙел” журналының йыллыҡ лауреаты.

Рәйес Түләк шиғырҙары менән үҙендә ҙур өмөт тыуҙырҙы һәм артабанғы ижады менән ышанысты тағы ла нығыта барҙы. Ул тәрән фәлсәфәүи фекерҙәре менән тиҫтерҙәренән ныҡ айырылып торҙо. Йөрәген әрнеткән, халыҡты борсоған күренештәр, хәл-ваҡиғалар хаҡында янып яҙҙы. Шуның өсөн дә уның шиғырҙары, поэмалары меңдәрсә уҡыусыларҙың күңелен яуланы. “Ҡашмау” һәм “Яныу” поэмалары башҡорт шиғриәтендә бер күренеш булып баһаланды.

Уның үҙе күрергә насип булмаған “Мең дә икенсе кис...” китабы тотош әҙәбиәтебеҙ өсөн ҙур ваҡиға булды. Былдай китаптар йыш тыумай. Уға Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр премияһы бирелеү үҙе үк күпте һөйләй. Уның шиғырҙарында Бабич, Рәми традицияһы, уларҙың һулышы һиҙелә. Тәрән йөкмәткеле шиғырҙары менән бер рәттән, “Ҡашмау”, “Яныу”, “Күпер” поэмалары, “Зөлхизә” тигән романға повесы тупланған.

Әҙәбиәттә традицион образдарға иң беренсе Уралды индерергә булыр ине. Уралтау тыуған ил символына әүерелгән. Башҡортостан, Урал образдары Рәйес Түләк ижадында тыуған ер, моң иле, дуҫлыҡ-туғанлыҡ иле, сал тарихлы һәм яҡты киләсәкле ил рәүешендә сағылыш таба. Шағир “Башҡортостан” шиғырында был илдәге милләттәр дуҫлығы тураһында яҙа:

*Башҡортостан, һинең ҡуйыныңда*
*Көн күрәләр күпме халыҡтар.*
*Тоғролоҡта ғына ул дуҫлыҡ бар,*
*Тик дуҫлыҡта ғына хаҡлыҡ бар.*

Ҡасандыр хаҡ, нахаҡ яҙмыш был милләттәрҙең яҙмышын бергә бәйләгән икән, уларға бер илдә йәшәргә яҙған икән, тимәк был халыҡтар дуҫ булып, бер-береһенә тоғролоҡ һаҡлап йәшәргә тейештәр. Ошо хаҡта Р. Түләк “сит милләт вәкилдәренә кейәүгә сыҡҡан башҡорт ҡыҙҙарына” түбәндәге юлдарҙы яҙа:

*Ғәфү итәм тиеп уҡталып та,*
*Һыйҙыра алмайым һис бер ҡалыпҡа –*
*Йөрәк аҫтындағы салауаттарҙы*
*Һаттың, һылыу, ят бер халыҡҡа.*

Сит милләт егеттәренә кейәүгә сығып, ят халыҡтың һанын арттырыусы, үҙ халҡын тыуасаҡ салауаттарҙан мәхрүм итеүсе ҡыҙҙарҙы ғәйепләй шағир. Эйе, был балалар бит башҡорт телен белмәйәсәк, сөнки мөхит ят, әммә сит телде лә яҡын итә алмаясаҡ, сөнки уның тамырҙарында башҡорт ҡаны аға. Бына шулай телһеҙ генә түгел, рухһыҙ, моңһоҙ башҡорттар үҫә. Бына шуға әсенә лә инде шағир. Ул "Башҡортлоҡ" шиғырында ла ошо уҡ мәсьәләне күтәрә. Сәхнәләрҙә осҡон сәсрәтеп бейегән егет һәм ҡыҙҙарға өндәшә ул, Салауат, Әминәләрҙән кәм күренмәйһегеҙ, ә сәхнәнән төшкәс:

*Эй, башҡортлоҡ! – сәхнәләрҙән төшкәс,*
*Сисеп ырғытылған еләнеңдәй,*
*Һүтеп ырғытылған толомоңдай.*

"Булмышығыҙ ниндәй һеҙҙең, башҡортлоҡ бары тик сәхнә өсөн генәме ни?" – тип борсола.

Яҙмыш тураһында уйланыуҙар хәҙерге шиғриәттә йыш осрай. Ғүмер бер генә килә, һәм уны нисек тә файҙалыраҡ итеп үткәреү кешенең маҡсаты булырға тейеш. Донъя фанилығы, ғүмер ҡыҫҡалығы ниндәй генә образдар аша бирелмәй. Р. Түләк үҙенең яҙмышын – боҙ өҫтөндәге усаҡ, ә ғүмерен насар хәлдәр тураһындағы яҡшы әҫәр менән сағыштыра. Уның шиғырҙарында ғүмер ағышы былдайыраҡ сағылыш ала:

*Береһенән-береһе ваҡ*
*Мәшәҡәткә күмелдем.*
*Һиҙмәнем үткәнен төндөң,*
*Үткәнлеген көнөмдөң.*

("Береһенән-береһе ваҡ...")

"Ғүмер" исемле шиғырында ла ошо уҡ уйҙар. Кеше тыуа һәм уға офоҡ асыла. Кеше офоҡтан офоҡҡа китә, әммә яҙмыш барыбер ергә илтә. "Эй, был тормош – бала уйынындай" тип үкенес белдерә ул. Ғүмер шул тиклем ҡыҫҡа, нимә булһа ла эшләп өлгөрөп булырмы ошо ваҡыт эсендә, тип борсола шағирҙарыбыҙ. Илебеҙҙе ғәмһеҙлек күмеп бара, экология проблемаһы, тел мәсьәләһе, милләт-ара ыҙғыштар... Уйлаһаң, уйылып китерлек.

Рәйес Түләк тарихҡа йыш мөрәжәғәт итә: "Арҡайым", "Оран", "Урал батыр монологы", "Монар", "Үткәнме, киләсәкме?", Мәүлит Ямалетдиновҡа арналған шиғырҙарында автор үткәндәрҙе һүрәтләй, башҡорттарҙың тирмә ҡороп йәйләүҙәрҙә йәшәүе тураһында яҙа, хатта ошо ваҡыт тураһында хыялланып йәшәүен дә йәшермәй.

*Был һуң ниндәй тормош, тиеп һорайһыңмы? –*
*Мин кис ятып, ығы-зығы бер аҙ тынһа,*
*Гел ошо ил килеп баҫа күҙ алдыма.*

("Үткәнме, киләсәкме?")

Бөгөнгө көн уны аптырауға ла, хафаға ла һала:

*Был донъяла пәйҙә булмаҫ тимә*
*"Башҡортостан" тигән буш нигеҙ.*
*О, ул хәлде... Беҙ ожмахтан түгел,*
*Тамуҡтан да ҡайтып күрмәбеҙ...*

(М. Ямалетдиновҡа)

Шундай матур тормошло илдә йәшәр өсөн беҙ нисә тапҡыр тыуҙыҡ, әммә тыуған һайын хәл насарая, рух һүнә, тағы ла был ергә, илгә килһәк, беҙ нимә күрербеҙ, буш нигеҙ генә ҡаршыламаҫмы беҙҙе, тип әсенә Р. Түләк.

Ғәзәл – көнсығыш халыҡтарының классик поэзияһында борондан уҡ килгән шиғри формаларҙың береһе. Ул ике юллы шиғыр берәмектәренән – бәйеттәрҙән тора. Традицион тема – ҡатын-ҡыҙға булған мөхәббәтте данлау. Схемаһы: аа, ба, ва... Ләкин башҡорт һәм татар поэзияһына килеп ингәс, ғәзәл ҙур ғына үҙгәрештәр кисерә. Уларҙа һәр төрлө теманы сратырға мөмкин. Шулай уҡ схемаһы – аа, бб, вв. Йәғни һәр бәйет айырым рифмаға ҡорола. Хәҙерге шиғриәттә ғәзәлдең ошо формаһы йышыраҡ осрай. Р. Түләк ижады миҫалында ҡарап үтәйек. Уның "Таналыҡ", "Себергә", "Үткәнме, киләсәкме?", "Ут" кеүек шиғырҙары шундай формала яҙылған. Мәҫәлән:

*Ир-егеттәр төйәк итә тыуған ерен,*
*Ә мал-тыуар төйәк итә туйған ерен –*
*Башҡорт һарҡынтыһы менән тулған Себер,*
*Халыҡ тиеп әсенмәйҙер береһе бер.*

("Себергә")

Ә "Ғәзәл" исемле шиғыры элекке формала яҙылған:

*Йүкә, миләш һап булмаҫ та, унан һап яһап булмаҫ,*
*Һыйырға һоло ашатып, яуға сабыр ат булмаҫ.*
*Әй, ҡәрҙәшем, ышан миңә: таҙ төшкән, тип башыңды,*
*Илгә фашланмайым, тиеп, ҡырҡып уҡ ташлап булмаҫ...*

Был шиғырҙың схемаһы – аа, ба, ва... Һәр бәйеттең рифмалашыусы юлдары "булмаҫ" рәдифе менән килә.

Р. Түләк таҡмаҡ жанрына ла мөрәжәғәт итә. Уның "Башҡорт таҡмағы" тигән шиғырында һигеҙ куплет бирелә, улар 8-7 ижекле юл менән яҙылған. Таҡмаҡтарында башҡорттарҙың дыуамаллыҡ һыҙатынан әсе көлә шағир:

*Һай-й-й!*
*Салауатты тыуҙырған да,*
*Тотторған да беҙ бит ул.*
*Дыуамаллыҡ беҙҙең өсөн –*
*Йәшәй торған ыстимул.*

Киң таралған таҡмаҡ көйөнә һалынып ҡына тора юлдары, хатта "һай" тигән ҡеүәтләү һүҙен дә өҫтәп ебәргән. Был Түләктең таҡмаҡ традицияһын уңышлы дауам итеүен күрһәтә.

Р. Түләктең "Яҙыуҙар" циклы – уның мәҡәл тапҡырлығына эйә икәнлегенә миҫал:

*Хата түгел ул – сәбеңә яҙа атыу.*
*Иң ҙур хата – яҙлығыуҙан ҡурҡып ятыу.*

Йәки:

*Айғыр өсөн донъя ауырлығы –*
*Ауыҙында ятҡан ауыҙлығы.*

Был шағирҙың күҙәтеүсәнлегенән, тормош тәжрибәһенән һәм халыҡҡа яҡынлығынан киләлер, моғайын. Уның "Бәйге", "Үгеҙ" шиғырҙары береһе өн эйәртеме ҡулланып яҙылһа, икенсеһе полилог формаһында бирелеүе менән ҡыҙыҡлы.

*Эй, са-бам, са-бам, са-бам,*
*Са-бам, фи-ниш-ҡа та-бан.*
*Эй, са-бам, са-бам, са-бам,*
*Тик а-тым биг-рәк са-бан.*

("Бәйге")

Был форма шиғырҙың йөкмәткеһенә тап килә. Шәп итеп сабып барған атта ултырған кеше һөйләгәндәге тойғо тыуа. Тимәк, шағир ат сабыуын өн яңғырашы аша бирә алған. “Үгеҙ” шиғырында бер бәләкәй генә ваҡиға бирелә. Ул полилог формаһына һалынған.

*— Ҡайһы яҡҡа?*
*— Түбән яҡҡа.*
*— Ней булды?*
*— Килә үгеҙ.*
*— Ҡайһы үгеҙ?*
*— Һөҙгәк үгеҙ.*
*— Ә нишләп көләһегеҙ?*
*— Нишләп ҡаршы йүгерәһегеҙ,*
*— Һуң нишләп көләһегеҙ...*

Был формала ваҡиғаны эҙмә-эҙлекле күҙ алдына килтерергә һәм уға кешеләрҙең ҡарашын белергә булышлыҡ итә. Һөйләшеүҙә ҡулланылған “Ох”, “О-о”, “И-и”, “И-һи-һи”, “А-һа-һа” ымлыҡтары ошо ваҡытта тыуған буталышты бирә. Рәйес Түләктең диалог формаһында яҙылған шиғырҙары ла бар: “Ай тотолғанда”, “Тау артына ҡояш ышыҡланһа”, “Элек һәм хәҙер”, “Ҡаялағы ҡайын”, “Ҡарт һәм шишмә” һ.б. Кешеләр мәңгелек темалар: яманлыҡ һәм яҡшылыҡ, батырлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ, донъя фанилығы тураһында һөйләшәләр, бәхәсләшәләр. Геройҙар диалогтарҙа уй-фекерҙәре аша үҙ-үҙҙәрен характерлап бирәләр.

*— Ай! Мин һиңә ғәжәпләнәм, аптырайым,*
*Ахырыһы, шул тиклем дә яндырайһың:*
*Нишләп алдан уҡ әҙерләп, нурҙар йыйнап,*
*Был тотолған көндәреңдә яндырмайһың?*
*— Ай-һай, егет, һорау һалдың ҙурҙарынан,*
*Әлегә мин алйығанмын моң-зарымдан.*
*Һорауыңды тикшерербеҙ һин тотолғас,*
*Был Ер һине япҡас ҡояш нурҙарынан.*

(“Ай тотолғанда”)

Бында донъя фанилығы тураһында һүҙ бара. Айҙың яуабында ҙур мәғәнә ята. Һәр кеше үҙ артынан эҙ ҡалдырырға тейеш. Хатта ер ҡуйынына инеп яткас та, һинең исемең яҡты уйҙар менән иҫкә алынырға тейеш. Диалог формаһы ниндәйҙер оло теманы бәләкәй формаға һыйҙырырға, уны ҡыҫҡа һәм асыҡ итеп бирергә ярҙам итә.

Әҙәби әҫәрҙәрҙә экология мәсьәләһе һәр ваҡыт киҫкен. Бер яҙыусы ла, шағир ҙа, драматург та был темаға мөрәжәғәт итмәйенсә, кешенең мөнәсәбәтен, уй-хистәрен, һоҡланыуҙарын, борсолоуҙарын тәбиғәт күренештәре менән бәйләмәйенсә ҡалмай. Ул — замандың иң актуаль мәсьәләләренең береһе, тиһәк, бер ҙә хата булмаҫ. Йырҙарҙа йырланған, маҡталған, даны төрлө яҡтарға таралған, күптәрҙең күҙен ҡыҙҙырған Башҡортостан тәбиғәте үҙенең йәшел төҫөн юғалта бара, йылғаларының сылтырауы ла ишетелмәй төҫлө, күккә ашҡан тауҙары сүгә. Былар бөтәһе лә кешенең вайымһыҙлығынан киләләр, моғайын. Шуға күрә хәҙерге заман шағирҙарын кешелектең рухи экологияһы ла борсоулы уйҙарға һала. Рәйес Түләк ижады ла тәбиғәт проблемаларын ситләп үтмәгән. Мәҫәлән, “Шишмә тип дан алған Таналыҡ һаҙлыҡ булып ята” (“Таналыҡ”), күңел хәтирәләре менән бәйле йыл миҙгелдәре:

*Быйылғы көҙ ғәжәп ҡырыҫ килде,*
*Көн аралаш яуа ямғыры.*

*Иҫкә төшә ошо көҙҙәй бер йәй —*
*Бала сағым... пионер лагеры.*

“Миҙгелдәр”, “Юлда”, “Осрашыу”, “Ағас менән йылға”, “Монар”, “Яҙ” һ.б. шиғырҙарында тәбиғәттең бар асышы сағыла. Уңышлы сағыштырыуҙар менән оҫта эш итә шағир: япраҡ – ҡашмау (“Көҙ тыны”), Талҡаҫ – Ирәндек күкрәгенә эленгән түшелдерек (“Ҡанлы тарих”), Арҡайым – башҡорттоң юл башында һалған ҡултамғаһы (“Арҡайым”). Шулай уҡ метафоралар, йәнләндереүҙәр менән фекерҙәрен матур итеп асыуға өлгәшә.

Илебеҙҙә “Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында”ғы закон ҡабул ителеүгә инде ун йыл. Уны тормошҡа ашырыу өсөн байтаҡ эштәр эшләнә, милли телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу, башҡорт рухын үҫтереү һәм күтәреүгә күп көс һалына. Рәйес Түләктең дә башҡорт теленең артабанғы яҙмышына ҡағылышлы шиғырҙары бар: “Телһеҙ гимн...”һ.б. “Яныу” поэмаһының 7-се хатында автор бына нисегерәк яҙа:

*— Урыҫтарҙың сабый балалары ла*
*Русса белә, русса һөйләшә, —*
*Тиеп аптыраған беҙҙә берәү...*
*Әй, Мәхмүтйән ҡустым, мең йәшә.*
*... Әгәр ҙә һин тик утыҙ йыл әүәл*
*Урыҫ һөйләшенән көнләшһәң,*
*Башҡорттоң бит хәҙер ҡап яртыһы*
*Тик урыҫса ғына һөйләшә.*
*... Хәҙер күпме башҡорт сабыйының*
*“Пап, мам” тиеп теле асыла.*
*Был бит шул уҡ һарайҙарға*
*Инеп барыуыбыҙ асылда.*

Башҡорт булып та башҡорт телен белмәгән, урыҫлашып бөткән башҡорттарҙы шағир янып барған һарайҙарҙан сығып ҡасып барған ҡомаҡтарға оҡшата. Был ысынлап та шулай, сөнки, кешеләр алдында оят булмаһын, башҡорт исемен йөрөтөп, балабыҙ кәм-хур булмаһын, тип күптәр тыуғандан уҡ сабыйҙарын урыҫ телендә аралашырға өйрәтә. Шунан инде улар “по башкирски понимаю, но разговаривать не умею” тиҙәр.

Әҙәбиәттә иҫкермәҫ, мәңгелек бер тема бар. Ул– мөхәббәт, ғишыҡ утында яныусыларға арнауҙар. Һәр осорҙа шағирҙар, яҙыусылар һ.б. уны үҙҙәренсә яңырта, йәшәтә, төрлө сағыштырыуҙар таба, яңы фекерҙәр һәм һүҙҙәр әйтә, кисерештәрен һәм хистәрен аҡ ҡағыҙға ҡара итеп төшөрә. Рәйес Түләктең мөхәббәт рухы менән һуғарылған шиғырҙарында (бағышлауҙарында) үкенес тә, ҡыуаныс та, һағыш һәм моңһоулыҡ та – барыһы ла бар. Мөхәббәттән боролоп китерлек көс таба алмағанына ғәжәпләнә ул.

Ғөмүмән алғанда, шағирҙың ниндәй генә шиғырын йә поэмаһын алма, уларҙа тос фекер, кинәйә тулы. Уны иң ныҡ хәүефләндергәне – Башҡортостан яҙмышы, милләттең бөгөнгөһө һәм киләсәге. Шағирҙың ил һәм халыҡ тураһындағы уйланыуҙары был образдарҙы яңыса асты, шиғриәтебеҙгә яңы сифаттар өҫтәне, һәм шуның менән Рәйес Түләк әҙәбиәт донъяһында сағыу йондоҙ булып балҡыны.

**Земфира ТАҺИРОВА,**
**БДУ аспиранты.**

Рәйес
ТҮЛӘК

## Миҙгелдәр

*Миҙгел менән миҙгел алмашыуҙан*
*Йөрәккенәм тора биҙе(е)рәп.*
*Хәҙер яҙҙар барыбер яҙырак ул,*
*Хәҙер көҙҙәр күпкә көҙөрәк.*

*Ә бит улар баҫалҡылар ине…*
*Ҡасан ғына, ҡайҙа, ҡайһылай? –*
*Ташлап киттем әҙме миҙгелдәрҙе,*
*Бушап ҡалған шырпы ҡабылай.*

*Хәҙер улар хужа*
*ағышына*
*Бар хисемдең, барлыҡ уйымдың, –*
*Йөрәгемә инеп төпләнделәр*
*Миҙгелдәре һуңғы ун йылдың.*

*Ана, тәүге сәскә…*
*тәүге ямғыр…*
*тәүге ҡарҙар яуа иркәләп…*
*Ана, һуңғы таждар ышығында*
*Серем итә һуңғы күбәләк.*

*Был күбәләк хәлдәре лә миңә*
*Килер, ләкин ҡасан, ҡайһылай? –*
*Миҙгелдәрем ташлап китер мине,*
*Бушап ҡалған шырпы ҡабылай.*

*Ә әлегә былa атлап барам,*
*Хәтирәләр менән иҙ(е)рәп…*
*Хәҙер яҙҙар барыбер яҙырак шул,*
*Хәҙер көҙҙәр барыбер көҙөрәк.*

## *Пирамида*

*Ҡаҡ маңлайҙа тупаҫ мөгөҙ кеүек –*
*Сүллек уртаһында пирамида.*
*Тарихсылар иҫе китеп яҙа*
*Ошо пирамида тураһында.*

*Төҙөгәндәр уны, тип яҙалар,*
*Йыйналышып тотош ил-ҡәүемдәр.*
*Эстәрендә бөтөн килеш ята*
*Нух заманда мәрхүм фирғәүендәр.*

*Яндарына инә алмай ваҡыт.*
*Ни әйтәһең? Бөйөк хеҙмәт. Бөйөк.*
*Меңәр йылдар аша шул халыҡтың*
*Ҡөҙрәтенә бағам, башым эйеп.*

*Эйгән башым ҡабат күтәрелә,*
*Донъяға күҙ һирпәм эйәк сөйөп...*
*Тамырҙарым буйлап урғыла йыр –*
*Башҡорт халыҡ йыры...*
*эй, бөйөклөк!*

*Моң бит ул, юҡ унда йәнһеҙ кәүҙә.*
*Йән, күңел һәм рухи ялҡын унда.*
*Башҡорт йыры – тәнкәйҙәрһеҙ йән ул,*
*Тәнкәйҙәре ҡалған яу ҡырында.*

*О, ул йырҙар! Тәнде түгел, йәнде*
*Бөтөн килеш һаҡлар пирамида!*
*Уйым минең Нух заманда мәрхүм*
*Башҡорт батырҙары тураһында.*

## *Арҡайым*

*Ҡанатланһам, талыр ҡанаткайым,*
*Ат атланһам, арыр аткайым.*
*Мин ҡырҡ быуат аша елдәй елеп*
*Ҡайтыр инем һиңә, Арҡайым.*
*Арҡайым,*
*Арҡайым,*
*Ҡанатланһам, талыр ҡанаткайым,*
*Ат атланһам, арыр аткайым.*
*Һиндә генә көстөң матурлығы,*
*Матурлыҡтың көсө тупланған.*
*Ай, Арҡайым! Һин – башҡорттоң – минең*
*Юл башында һалған ҡултамғам.*
*Ҡултамғам,*
*Ҡултамғам,*
*Һиндә генә көстөң матурлығы,*

*Матурлыктың көсө тупланған.*
*Арҡайым да тигән, ай, ҡаланан*
*Сығып та ғына киттем ҡабалан.*
*Бәхетлемен – тағы ҡырҡ быуатлыҡ*
*Киләсәктә һине табалһам,*
*Киләсәктә... мине табалһаң (?!)*
*Табалһам,*
*Табалһаң, –*
*Ҡанаттарым талмаҫ, ҡанатланһам,*
*Ат арымаҫ, атҡа атланһам.*

## Дуҫлыҡ монументы

*Бына!*
*Салауаттың ҡолаҡтарын*
*Һәм танауын ҡырҡҡан ер – бына.*
*Таштан юнып «Дуҫлыҡ монументы»*
*Төҙөгәндәр уның урынына.*

*Ил сигендә торған межа кеүек,*
*Күккә ашҡан был таш манара*
*Талап ҡуймаҡ, минең азатлыктың*
*Сиге бында, тиеп ҡарарға.*

*Арҡаларын ҡуйып бер-беренә,*
*Дүңгәләктәр тотоп ҡулына,*
*Ике әбей әрепләшә шып-шым:*
*– Ике дуҫтың береһе ҡол була.*
*– Ике дуҫтың береһе ҡол була.*

*...Тағы июнь. Парлы сәскә тотоп,*
*Киләм бына һинең ҡаршыңа.*
*Монумент. Мин ҡарайым бит һиңә,*
*Ҡарағандай ҡәбер ташына.*

*Ғәрләнһәм дә, ерәнһәм дә (ахыры,*
*Күңел күнгән, күҙҙәр өйрәнгән),*
*Киләм: бында минең азатлығым,*
*Халҡым азатлығы ерләнгән.*

## Һөлдә

*Беҙ икәүҙән-икәү генә*
*Бер бүлмәлә –*
*Һин дә мин*
*Тергеҙергә маташабыҙ*
*Үткәндәрҙең һөлдәһен:*

*Тәүге осрашҡан саҡтарҙы,*
*Тәүге танышҡан саҡты...*

*Әйтерһең дә, аҡтарабыҙ*
*Ҡыйбатлы саркофагты.*
*Теүәлләнек инде, буғай,*
*Башын, арҡа һөйәген.*
*Миңә күңелле. Һин генә*
*Үкенәһең, көйәһең,*

*Илайһың...*
*– Хаҡлығымы был*
*Фәлсәфәүи йоланың?*
*Теге саҡ бит мин үкендем,*
*Теге саҡ мин иланым.*

*Тап килмәй һөйәк һөйәккә,*
*Хис – хискә, көнө – көнгә. –*
*Үткәндең тереләһе юҡ,*
*Бөтөрөнмә, үкенмә,*
*Илама.*

*– Йөрәкһеҙ һөлдә,*
*Бел! Терелмәҫ киренән.*
*Ә тулмаған өлөштәрен*
*Эҙләрһең ирең менән.*

## Оран

*Мин – яуҙарҙа үлгән башҡорттарҙың*
*Тере рухы – һеҙгә һүҙ ҡушам.*
*Уралтауҙа һеҙ йәшәһен тиеп,*
*Ҡайта алмай ҡалдыҡ һуғыштан.*
*Беҙҙең өҫкә баҫып атлайһығыҙ,*
*Был ерҙәрҙә беҙ һәр аҙымда.*
*Башҡорт ерен, һары майҙай күреп,*
*Беҙ тасҡаныҡ йөрәк ҡанында.*
*Ер өҫтөнә һин дә, һин дә, һин дә*
*Шытып сыҡтың беҙҙең орлоҡтан.*
*Ғүмер баҡый ҡоллоҡ булыр илең,*
*Ошо хаҡта әгәр онотһаң.*
*Аҡһаҡалдар! Белмәйһегеҙ... Һеҙме?! –*
*Буйҙар етмәгәнен терһәккә.*
*Һеҙ бит һаман булмышығыҙ менән*
*Алдар эленеп торған элмәктә.*
*Быуындарҙан күсереп быуындарға*
*Һаҡлағанбыҙ икән кем өсөн?*
*Ҡайҙа иттегеҙ һеҙ Уралтауҙың*
*Ҡар(а)урманын, алтын-көмөшөн???*
*Был һорауҙы, сабыйың теле менән,*
*Мин һорармын, мең ҡат һорармын.*
*Ҡайҙа, тиеп, бәҫе, күркәмлеге*

*Салауаттан ҡалған Уралдың?!!*
*Һорармын мин – яугир башҡорттарҙың*
*Тере рухы:*
*– Әй, ил инәһе!*
*Башҡортлоҡто баҫҡан ошо ҡәһәр*
*Әллә һинән, һинән киләме?*
*Һин төкөрҙөңмө әллә иманыңа,*
*Беҙ ҡалдырып киткән ырыҫҡа?*
*Нисә улың илен ташлап китте,*
*Нисә ҡыҙың сыҡты урыҫҡа???*
*Ниндәй Рәсәй һуң ул түйыу белмәй*
*Башҡорт еркәйенә ҡаныҡҡан???*
*Алтын түгел – беҙҙең һөйәк бит ул,*
*Нефть түгел – ул бит беҙҙең ҡан!!!*
*Һеҙҙе урап ятҡан – офоҡ түгел,*
*Ваҡыттыр бит шуны аңларға.*
*Ул бит – беҙҙең ҡәбер. Ҡояш булып*
*Беҙ ҡалҡабыҙ һеҙҙе барларға.*
*Йөҙөбөҙ саф, сөнки намыҫ таҙа,*
*Беҙҙең намыҫ ҡанда сайҡалған…*
*Уян, башҡорт!!!*
*Үлгән улдарыңдың*
*Ҡәберенән тороп саң ҡағам!*

## Һуңғы хыял

*Зиһенемдә хәтирәләр генә,*
*Хыялдарым бара һүнеүгә.*
*Иң ғәжәбе: йөрәк шуға күнә,*
*Күңелем дә шуға күнегә.*

*Күҙ йәшем дә йөрәгемә һарҡый,*
*Күҙҙәремә тығылып әсетмәй.*
*Аҙан да юҡ миндә, тәкбир ҙә юҡ,*
*Манараһы ауған мәсеттәй.*

*«Ошо үткән йылдан ҡалған яра*
*Юҡ түгелдер инде кемдең дә», –*
*Тип йыуатҡан булам үҙ-үҙемде*
*Эт йылының һуңғы төнөндә.*

*Иҫкә алаларҙыр, тигән булдым,*
*Байрам табынында дуҫтарым.*
*Ниндәйерәк тост әйтәләр икән,*
*Ишетергә ине тостарын.*

*…Өр-яңы Йыл бишегендә ята,*
*Бишкә төрләнмәҫлек түгел дә.*
*«Хыялдарым ҡабат терелер» тигән*

*Хыял дөрләп китте күңелемдә*
*Эт йылының һуңғы төнөндә...*

## Там

*Бүләк итсе миңә бер төнөңдө,*
*Үкенескә ғүмер ҡалмаһын.*
*Ҡәҙер төнө булып инер ул төн*
*Тарихына ошо ҡаланың.*

*Сабыр төбө – һары алтын. Һиңә*
*Бүләк итермен, тип, алтынын,*
*Сабыр иттем. Инде йәнем һиҙә*
*Алтын түгел, ҡартлыҡ һалҡынын.*

*Бер генә төн, зинһар, бүләк итсе,*
*Үкенескә ғүмер ҡалмаһын.*
*Сәбәп итһәң, ярҙам итәм, тигән*
*Вәғәҙәһе бар бит Алланың.*

*Ҡәҙер төнө булып баҙлап китһен*
*Ҡәбер төбө кеүек бер төнөм.*
*Бел: мин көтәм уны, тау аҡтарып*
*Эҙләгәндәй алтын бөртөгөн.*

*Бүләк итсе...*
*О, юҡ! –*
*Бүләк итмә!*
*Мин алырға барыбер ҡыймамын.*
*Йәшә ерҙә, йәнем! Мине арбап,*
*Һуңғы сере булып донъяның.*

***

*Ҡара йөҙҙәр, ҡәһәр*
*һыҡҡырҙар, тип*
*Йөҙөбөҙгә ҡара яҡһындар,*
*Кеме илап, кеме көлөп беҙҙән*
*Баш тартһындар дуҫтар,*
*яҡындар,*

*Бәддоғалар уҡып, урам буйлап*
*Йөрөтһөндәр беҙҙе*
*муллалар...*
*Мин Өфөнән ҡыуылырға риза,*
*Һинең менән бергә ҡыуһалар...*

Ғәли
ИБРАҺИМОВ

# КИСЫЙӘ

## ТАРИХИ РОМАН*

### III китап

## БҮГӘСӘҮ БАТША ҺАНАТЫ

9

Аҡҡалпаҡ бик дәртле, нисектер ярһыу төҫлө. Алпар элек тә уның шулайыраҡ булыуын белә. Яуға киткәндән бирле ауырлыҡты күрһәтмәне, ҡурҡыуын һиҙҙермәне. Йөҙө сыныҡты, һалҡын елдәр сыныҡтырҙы, һәр ваҡыт етди булыу уны ныҕытты.

Быларын белә Алпар. Бөгөн бигерәк тә ярһыу. Бәлки, үҙ төйәктәренә ҡайтыу ҡыуандыралыр. Нисек кенә булмаһын, ошонда йәшәнеләр. Үҙ йорттары кеүек. Әле инде уларға батша килде. Эш артты, ҙур эш, яуаплы эш, ғүмер онотмаҫлыҡ, маҡтаулы эш, ҡәйнәһе әйткәндәй. Хәҙер бында Батша яланы бит! Шулай ҙа бөгөн Аҡҡалпаҡтың кәйефен аңларлыҡ түгел.

Бер килке баш-күҙ алғас, Алпар менән икәү ҡалғанда:

— Их, донъя! Артынан ҡыуып етерлек түгел! — тип һоҡланып тирә-йүнгә ҡараны Аҡҡалпаҡ.

— Бик йөрәкһенгәнһең.

Аҡҡалпаҡ йылмайҙы, күҙ һирпте. Йырланы:

*Яңауыл урамдары, оса ҡом-бурандары...*

Һағыналыр. Унда хәҙер атаһы юҡ, әсәһе юҡ. Шулай ҙа тыуып-үҫкән ерҙәр. Яңауыл... Ҡасандыр, Алпар донъяға тыуған саҡта күсеп килеп йорт ҡорғандары өсөн шулай тиҙәр ине.

Унан һуң әллә ни саҡлы урам һалынды, ә был — һаман Яңауыл. Күпмегә ҡалыр.

Улар белмәй: Стәрле һыуы буйындағы көйәнтә кеүек һуҙылған ҡултыҡтағы был ҡыҫҡа ғына урамға тағы ике йөҙ илле йылдан һуң да унда йәшәүсе ҡайһы бер ҡарттар, ҡарсыҡтар элекке ғәҙәт буйынса Яңауыл тиерҙәр әле.

— Һағынаһыңмы? — тине Алпар.

— Юҡ.

---

**Башы 3–7-се, 9-сы һандарҙа.*

— Ниңә шулай йырланың?
— Былтыр барҙыҡмы?
— Барҙыҡ.
— Хәтерләйһеңме, Туҡтағол ҡалай итеп ҡарап торҙо беҙгә? Күҙҙәренән йәш мөлдөрәп, эйәк тамырҙары ҡалтырай. Ергә йығылып, аяҡ табанын ярларға етеште бит. Күрһәткән яфаһы өсөн бит ул. Миңә, һиңә. Бөтә яҙығы өсөн, яфаһы өсөн язаһы. Миңә шул саҡлы рәхәт ине. Үҙеңдең дошманыңдың шундай хәлдә булыуын ҡарап тороу. Беҙ уны аҫманыҡ, киҫмәнек... Үҙе йән бирҙе.
Үҙәгенә үткәйне шул, тип Алпар уны һүҙҙән бүлдермәй тыңланы.
— Ул юҡ бит инде.
— Ә бынныһы бар. — Аҡҡалпаҡ уң яҡҡа — тауҙар артына табан күрһәтте.
Саҡ ҡына түбәнерәк Нөгөшкә Үрек ҡоя. Шунын үренә табан бер аҙ барһаң, Тайбулат ҡарт ауылы булыр.
— Теге ҡартты әйтәһеңме? Йәшәй бирһен.
— Эйе, һиңә ни... Ә миңә ни саҡлы ғәрлек. Үҙ ғүмеремдә үҙем юйыр сиккә еткән саҡтарым аҙ булманы.
— Хәҙер ни...
— Ҡономдо алғым килә. Алам барыбер.
Бында оҙаҡ тормаҫтар. Ҡуҙғалып китерҙәр. Аҡҡалпаҡ та тороп ҡалмаҫ. Бергә... Ни күрһәләр ҙә — икәү. Уның берҙән-бер күңел таяуы — Алпар.
Китер... Тик тегеңә бөгөн үк... ҡуҙғалып киткәнсе үк.
— Алпар, — тип шул хаҡта иренә әйтергә булды.
— Әү...
— Әйҙә, теге ҡарттың донъяһын, тим.
Аңлашылып тора. Ек күргән. Бәхете тапалған. Донъяһын туҙҙырып китергәме? Алпарҙың үҙенең дә ундай эшкә иҫәбе юҡ түгел ине. Аҡҡалпағының йәшлегенә ҡул һуҙырға баҙнат иткәне өсөн кәрәк ине, бик таман булыр. Әле бынауҙа, уның эргәһендә, ул эште уйламай йәшәлгән. Тәүҙә көс уның яғында ине. Хәҙер беҙҙең яҡта, ти. Тик бына күңел ғәме унда булырға тейешме? Юҡ, юҡ. Ул бында.
— Кинйә абыҙ йомошон атҡарырға кәрәк.
— Һора ла, киттек. Бер көндә әйләнербеҙ. Шуны алдымда тубыҡландырһам, арманым ҡалмаҫ.
— Юҡ, булмаҫ. Ҡайтҡас.
— Донъяныҡын әхирәттә ҡалдыраһым юҡ.
Эше мөһим икәнен аңлай. Үпкәләне. Иренә әйтмәй генә... Асыуланды. Егеттәр бирәм, тине. Беренсе тапҡыр, барыбер үпкәләне, бәлки, һуңғыһы ла булыр.
Әле туҡталманы. Батыр егеттәре — Таулы ауылынан киткән ҡасҡындарҙыр. Иҫән булһа, Танайғол ҡартты алып барып ҡайтырға булды.
Ҡарт юлды белеп алған. Йөрөк йән тирә-йүнде байҡап бөткәндер. Юл башлаусы — күсәм булып алға баҫты.
Аҡҡалпаҡ кейенде. Еңел тун, ыҡсым ҡолаҡсын, аяҡҡа — сарыҡ. Шуны әкәмәт ярата. Үҙе йылы, үҙе уңайлы. Ҡунысын тубыҡтан түбән ҡыҫмау менән ҡыҫып бәйләһә, батҡанда ҡар ҙа кермәй.
Ирҙәр менән бер төҫлө ярағланды: ян-һаҙағы яурынға артылған, һөңгөһө эйәр башына беркетелгән, суҡмары бәйләнгән, кескәй хәнйәре билгә тағыулы.
Киттеләр. Үрек буйына төштөләр. Үргә юл бар. Ҡарурман үткәүелдәре, яҙғы йырындар, иреп бөтмәгән ҡарлы уйһыуҙар.
Килеп еттеләр. Аҡҡалпаҡ үҙе алға сығып, үҙенә бик яҡшы таныш йорт ҡаршыһына туҡталды. Тайбулат ҡарт биләмәһе. Таныш йорт, таныш аҙбар-ҡура. Бына ҡаҙыҡ баштарындағы ҡыу баштар — айыуҙарҙың, аттарҙың баш һөлдәләре.

Йорт типһененә халыҡ йыйылды. Бисә-сәсә тәүҙә мәҙәк итте. Бағыйҙар килгән, эйе, күскә ҡыуғы төштө, ғауға һалынды, тигәндәрҙер. Аҡҡалпаҡ алда.

— Һаумыһығыҙ?

— Арыу ҙа. Һеҙ кемдәр?

— Беҙ илгә илбеҙ, яуға яубыҙ. Һеҙ батшаға табиғмы?

Унан танынылар. Бәй, бәй... Бер бисә лә бар. Уларҙың килене. Ә юҡ, еңгә тейешле килен... Уға табан атлағандай иттеләр, туҡталдылар.

Тайбулат ҡарт килеп сыҡты. Күсемгә ғауға төштө, тип ҡурҡып сыҡҡан. Ҡаушағаны күренеп тора. Йәнәһе, күсен ҡурғырға тип, ҡулына тәү күргәнен — сәсағас тотҡан. Ҡасандыр һунарға йөрөгәндә айыу өңөнә тығыр өсөн яһатҡан тығын.

Нишләһен, болалы ваҡыт.

— Һеҙ кем? Һеҙ Бүгәс ҡасҡыннанмы? – тип екерҙе Тайбулат.

Танайғол яуап ҡайтарҙы:

— Күрһәтербеҙ һиңә Бүгәсте! Үҙе килһә, табанын яларһың.

Ҡалтыранды ҡарт.

— Эйе, эйе... батша хәҙрәттәре.

Аҡҡалпаҡ, баҙап тормайынса, уға тура текләне.

— Шулай тиң, Тайбулат бай.

Тауышы нескә — ҡарт таныны.

— Бәй, бәй! Минең бисә лә баһа.

— Батша түгел, ти. Ҡалымын түләп бөтмәгән. Тәүҙә ике өйөр йылҡы. Ун яугир ебәрһен, ти.

— Ә һин кем улай тиергә?

— Мин батша нүкәре, йәғни яугиры.

— Хе, хе... Бына бер яугир, имеш.

Уның янындағы ҡуштан ҡарттар ҙа көлдө. Әбей-һәбейҙәр ҙә килештермәне. Ә йәштәр Аҡҡалпаҡ өсөн ғәрләнеп тештәрен ҡыҫты. Ә ул үҙе яҡ-яҡҡа ҡарап алды, элекке киленегеҙ күрһәтер әле, тигәндәй, күҙҙәренән ут сәсеп байҡап алды.

Ул тәүҙә ҡолаҡсынын өҫкәрәк күтәрҙе, толомға инмәй ҡалған сәс өлтөгән ҡыҫтырып ҡуйҙы.

Аҡҡалпаҡ, тегенән күҙ айырмай ғына, яурынынан янын алды, сапсаҡ хәрәкәт менән ҡаҙаҡтан бер уғын ҡармап алды ла, янына һалып, киҙеһен ебәк керешкә ултыртты. Юғарыла ала ҡарғалар оса ине. Өҙәнгеһенә баҫа биреп, шуларҙың береһенә тоҫҡап, бәлдей биреп (янды кирелә биреп) тартты, ян кереше бөтәһенә ишетелерлек булып зыңҡылданы. Уҡ осто. Осто, ә ала ҡарға ялпылдап ҡарттың өй башына килеп төштө.

Ҡарт ҡурҡты, бисә-сәсә, әбей-һәбей хайран ҡалды. Тиктәҫ булмаған. Ирегеттәр уның мәргәнлеген маҡтаны, ә бергә килгәндәре ғоурланып һоҡланды.

— Яугир түгелме? — тине ҡарттың бер егете.

Өндәшмәне, башын аҫҡа эйҙе.

Аҡҡалпаҡ ҡалтаһынан бер ҡағыҙ алды.

— Тыңлағыҙ. Петр Федрич батшаның фарманы, — тип уҡып сыҡты.

Ауыҙҙарын асып тыңланылар. Бер ҙә бағый түгел икән. Ана бит, ирек бирәм, тигән. Фарман итә. Ҡыйыр-ҡыймаҫ һорайҙар: "Үҙен күрҙеңме, алдында баш эйҙеңме?"

— Күрҙем. Беҙҙең арала ул. Һеҙгә һау-сәләмәтлек теләй. Һеҙгә лә, миңә бағынһындар, тине. – Аҡҡалпаҡ ҡарап торҙо. — Йәгеҙ, ир азаматтары... Аттарығыҙҙы эйәрләгеҙ! Ҡорал-яраҡтарығыҙҙы алығыҙ, бармы батырҙар?

— Бар.

— Бар... Беҙ башҡорт түгелме әллә...

Яңыраҡ ҡына Аҡкалпаҡ уйынсалап әйткәнде иҫтә тотопмо, тап унынса ике өйөр йылҡыһын ҡыуып килтерҙеләр. Аттарҙың ҡолағына ик һалғандар, осаларына тамға баҫҡандар. Улар ҡарттыҡы ине. Хәҙер батшаныҡы.

— Был йылҡылар минеке бит.

— Хәҙер батшаныҡы булыр.

— Юҡ, юҡ. Бер генә батшанан да уны әжәткә[1] алғаным юҡ!

– Әйттем бит, батша, ҡалым түләп бөтһәң, тине, — тағы шаяртты Аҡкалпаҡ.

Үҙҙәре теләгән ир-егеттәр ҙә, шунда уҡ әҙерләнеп, аҙ-маҙ юл һалығы алып, аттарҙың баштарына йүгән һалдылар, эйәр-өпсөн кейҙерҙеләр.

Улар ҙа хәҙер батша хеҙмәтендә булыр, ҙур яу артылырҙар. Егеттәр атҡа атланды. Улар элек тә аң булып, әҙер торғандар. Ләкин был сытырлы урман, тауҙар араһындағы төпкөлгә кем килеп хәбәр итһен. Былар үҙҙәре ҡайҙа барһын.

Әле юл булды. Аҡкалпаҡ күсенә иш булды. Бик һәйбәт. Бүрегә генә юлдаш кәрәкмәй.

Килештергәндәр. Тайбулаттың ҡара юрға атын етәккә, ялына ҡыҙыл ебәк таҫма үргәндәр. Уныһы — батшаға бүләге, йәнәһе.

Бына шунда Аҡкалпаҡ күңел кинәнеүе, йән кинәнеүе менән ҡартҡа ҡарап торҙо:

— Үҙе сәнселеп китһен. Усағында уты һүнһен. Малдары ҡош-ҡортҡа юлыҡһын, ғүмер йәлсемәһен, — тип ҡарғанды Аҡкалпаҡ.

Киттеләр.

10

Ҡор яланында ятып эш сығарып булмай. Кинйә бер аҙ тирә-йүнгә ым биреп — ыпталап, байтаҡ кеше йыйып алды. Бер ни тиклем тупланылды, сиреү һәле алынды. Ләкин аҙ. Ҡайҙалыр төпләнеп, ҙурыраҡ көс йыйырға кәрәк.

Ҡайҙа?

Әле көс Салауат, Юлайҙа бар.

Бәҙерғол менән Юламанда бар.

Белобородовта бар.

Иҙел башында, Әүжәндә йыйып була. Унда — заводтар, унда — крәҫтиәндәр, унда — башҡорт яугирҙары...

Ана шул яҡҡа китергә ҡарар итте Пугачев менән Кинйә. Яйыҡ казактары Ырғыҙ тамағындағы заводҡа тупланған. Уларға хәбәр итергә лә ҡуҙғалырға кәрәк.

Бынан туп-тура китер өсөн Нөгөш буйлап үрләргә. Йәйге юлдар бар-барлығын. Әле унда — юл өҙөгө.

Был хаҡта әйткәс, Пугачев:

— Воскресенскийға барырға кәрәк, — тине.

— Эйе, унда һине яҡшы ҡабул итерҙәр. Көс тә ишәйтеп булыр.

Әҙерлек, сапҡындар елә. Тегеһенә хәбәр барһын, быныһынан хәбәр килһен. Воскресен заводына, Тумановҡа. Әҙерләнһендәр. Ышаныслы кешеләренә, заводҡа бара торһондар. Юлда хәбәр килһен. Көс күп кәрәк.

— Батыр ҡатын ҡайҙа? — тине Пугачев.

— Киткән.

Асығын әйтһә, Кинйә шунда уҡ, артынан елдер, тиер ине.

Кис булды. Ҡараңғы төштө. Аҡкалпаҡ күренмәне.

Аҡкалпаҡ юҡ. Алпар борсола. Ах, шайтан, үҙһүҙләнеп киткән. Ҡайтмай. Бер-бер хәл булмаһа ғына. Артынан китер ине. Бында булыу кәрәк. Кинйә абыҙ

---

[1] *Әжәт — бирәһе бурыс.*

йоҡламай, ә ниңә ул китһен... Ләкин был төбәкте әле асыҡ белдермәйҙәр. Һаҡлыҡ кәрәк.

Бына батша йоҡлай, ял итһен. Кинйә уйлана. Бик ауыр, бик яуаплы заман. Кемгә ышанаһың? Улының һүҙҙәрен иғтибар менән айыша. Кемдәр генә ташлап китмәне, ташлау ғынамы, ҡаршы тарафҡа ялланалар. Бер-береһен тоттороп, ҡотолоп ҡалырға. Дуҫындың башын ашау бит был. Ҡыҙрас Муллаҡаевтан быны көтөп була. Туҡтамыш Ишбулатов та шул сама әҙәм. Ә бына Әлибайы, яман Кейекбайы? Һабаҡтарын уҡытаһы ине лә, кем белә, уларҙы белеп булмай... Берәй ваҡыт шундайҙарҙың береһе минең үҙемде лә, улымды ла тотоп бирерҙәр. Ҡотолоп кинәнерҙәр.

Булған бит: Торабирҙе уғлы Бәләпәйҙе, Иҫәнғазы уғлы Алдарбай батырҙы шулай тотоп, янаралдарға илткәндәр. Батшаны ла үҙ кешеләре бығаулаған, күптәрҙе, бик күптәрҙе...

Үҙен шундай ауыр уйҙар биләүгә үҙен әрләп тә ҡуйҙы. Күпте уйлап, күклейәшелле булырғамы... Хаҡ яҙғаны. Бөтә сара күрелә бит.

Уйлай китһәң, Бүгәсәүҙең үҙенә унда хәүеф, яман яҙмыш аҙым һайын бармаҡ янап тора. Ышаныр кешеһе бөттөмө? Һәй, берәү китһә, бишәү табылыр, тағы булыр.

Хәтәр бөтмәй, хәйләһеҙ донъя булмай, хәтәрһеҙ күрәш юҡ. Унын һанаттары янарал булыр, иҫке баярҙар урынына – яңылары. Ярандары булыр, гөбөрнатор булыр. Ерҙәргә ынтылырҙар, яңы заводтар һалырҙар. Баструк та булыр, армайҙар ҙа бөтмәҫ, дар ағастары булыр, юлда ыңғырашып барыр колодниктар өҙөлмәҫ. Ҡамсы һуғылмай, әҙәм баштары ҡыйылмай тормаҫ. Әҙәми зат шулай хилафлыҡ менән мең-мең яҙыҡтар кисереп ғүмер һөрөргә яратылғандыр инде.

Шулай ҙа был бүтән.

Халыҡта унын ысын Петр Салис түгелен беләләр. Кинйәнән ҡыялатып һорайҙар. Тик ул ысынын әйтә алмай. Ярамай. Шулай ҙа эйәрәләр. Сөнки халыҡтың үҙенеке булыуы яҡшыраҡ. Юғиһә, тағы дворян, янарал-маҙар ыҙалатасаҡ.

Батша тимәй генә эйәреп, бөтә фарманын еренә еткереп йәшәйһе ине лә бит... Юҡ, байы, дворяны ғына түгел, бөтә халыҡ ялпыһы батша тиергә күнеккән. Үҙ хатаһылыр. Уға табына, уны алла күрә. Ихтимал, был – әллә ҡасанғы дәүерҙән, борон-борондан бирле килгән йола, ғәҙәт. Үҙ хатаһылыр. Ул ҡанда бар, күнелгә һеңешкән. Батша, хан, солтан... Умарта күсендә ҡорт инәһе барын күреп тә, күҙ алдына, аңдарына шул килә. Әйтерһең, уларҙың үҙ әсәләре, үҙ аталары юҡ. Халайыҡтың үҙе тапҡан, үҙе яһаған хатаһы ла баһа. Үҙ ҡулына үҙе бығау һалған.

Нишләйһең, батша тиһендәр. Ул заманда хан, батша тигән һүҙҙе кешеләр күнеленән, ихтимал, юйып ташлау мөмкин дә булмағандыр, әлбиттә.

Кинйә серем дә итмәне тиерлек. Алпар менән алмашлап һаҡта булды.

Пугачев торҙо. Иртә ине әле. Тау баштары томандан асыла. Туғай һөт туфаны тиерһең.

Воскресендан сапҡын килде. Тыныс, көтәләр. Яйыҡ казактарынан Вознесенға сапҡын елде.

– Ну, Кинзей, юлға сығырға кәрәк.

– Хәҙер... – Кинйә янындағыларға: – Күс ярағын байҡайыҡ.

Әҙерләнеләр. Бөтәһе әҙер тиерлек. Уяндылар. Аттар эйәрләнде. Эйәр өҫтәренә юл һалығы һалынып, оҙатырға сыҡтылар.

Алпар әсәһе:

– Килен ҡайҙа?

Кинйә ишетте. Ысынлап та, әллә... Уға әйткәйне: ошонда ҡал, яу сабыу ҡыҙҙар, килендәр эше түгел, һеҙ тамыр һаҡлағыҙ, йәшәү заңы шулай ҡуша. Батырҙар ауа, яңы батырҙар тыуа торорға тейеш. Аҡкалпаҡ яҡын да килмәне. Мин бергә барам, минең бер кешем юҡ хәҙер, айырмаң, тине. Буранбикә ҡала бит, яңғыҙ

булырһың, тип тә ҡараны. Унның атаһы, әсәһе бар, һеҙ бар, ти. Минең берҙән-берем, бергә йәшәйбеҙ, бергә ауырбыҙ.

Әллә шуны иҫләп, алдан китеп торамы? Ҡайҙа барырҙы белмәй ҙә баһа. Алпарҙан һорай:

– Килен ҡайҙа?

– Киткәйне.

– Хушлаштығыҙмы?

– Ул, барам, ти. Хәҙер ҡайтыр.

– Көтөп тор.

– Юҡ, үҙе ҡыуып етер.

Алпар һиҙенде. Киткән икән. Был хаҡта асығын әйтһәң, ҡалып тор, бергә ҡыуып етерһегеҙ, тиер ине. Әйтмәне.

Ләкин Һеләүһен үҙенең егеттәренән һорашып белгән. Әбеш менән Төмтөк Аҡҡалпаҡтың ҡайҙа китеүен әйткәндәр. Кинйә шунда уҡ Алпарға, бар, үҙең бар, тип ебәрҙе.

Юлға сыҡтылар. Үректе кисеү уңайлы. Шунан сығып торғанда, Көҫәпәй, тағы бер нисә кеше пәйҙә булды. Кинйә һағайғандай булды.

– Саҡыртмағайныҡ.

– Бадишам ағзам хәҙрәттәренә садыҡ булыуға ант итәйек тип ашыҡтыҡ.

– Унығына мәрхәбә!

Батша ҡаршыһына барып баш эйҙеләр.

– Мең йәнебеҙ менән беҙ ҙә ҡабул ҡылабыҙ.

– Батша яланында икән, тип ишеттек.

– Ниндәй Батша яланы тағы? Беҙ – Ҡор яланында.

– Хәҙер башҡаса.

Бына һиңә кәрәк булһа... Исемен дә тапҡандар, хәбәр ҙә тараҡкандар. Ышан һин, тик таң-ғәжәпкә ҡалырлыҡ түгел. Көҫәпәй[1] ишетмәй буламы? Аҡса килтергән. Мал әҙерләгән.

– Бына, ҡорт маяһынан. Сиреүгә кәрәк булыр.

Һәйбәт тотҡан. Риза Кинйә, ҡәнәғәт.

– Шулай ир-егет бул. Ырыусының уғы ла юғалмаҫ.

Элекке һүҙҙәре өсөн уңайһыҙ ҙа кеүек.

– Беҙҙең яҡҡа асыуланма, еҙнә, – тине Көҫәпәй.

– Минең элекке асыуым күптән һүнгән. Унан ҡалған көлдәрҙе аҡтарып тормам, улары үткән. Аңдышҡан ауыл булмаҫ, ирегешкән ил булмаҫ. Әүҙәм йәшәүгә ни етә. Атайың да, ҡәрҙәштәрең дә иҫән-һау булһын. Минән фатиха.

– Батшаның бойороҡ-ярлыҡтарын биреп, эш ҡуш. Алмашҡа кешеләр әҙерлә. Әле бында иҫән-һау йөрөгәнгә яңы ат, кәрәгенә кейем-һалым. Әле юл күрһәт.

Кинйә уларҙы янынан ебәрмәне. Ышанманы. Былай ғына ҡыланалар, ә эстән ут йоталар, уларҙың бағый тип әйтеүҙәре, батша хаҡында “яңғыҙ ҡарға саҡырып яҙ килтермәҫ” тигәнен еткерҙеләр. Әле уларҙы иҫкә алыу ваҡыты түгел. Юҡ, береһе лә китмәһен. Аманат тәртибендә янында булһындар.

***

Көҫәпәй алдан төшкән.

Һуҡаныш буйҙарына етеп киләләр. Уң яҡтан бер бағауылсы елдереп килеп етә.

– Бер төркөм килә, – ти.

Кем булыр? Пугачев:

– Батшаға яңы көс килә, – тине.

Яңы көс. Ҙур түгел, шулай ҙа ярай. Һыу тамсылап йыйыла.

---

[1] *Көҫәпәй Аптраҡов – Нуғай даруғаһы Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫо старшинаһы.*

Танынылар. Бер аҙы үҙҙәренеке. Аҡҡалпаҡ алып киткән. Яңылар бар. Алпар менән Аҡҡалпаҡ йәнәш килә.

Тик... яҡын килгәс, күренде: Аҡҡалпаҡ эйәрҙә саҡ-саҡ ултыра. Төҫө ҡасҡан.

Алпар һүҙен дә әйтә алмай.

Аҡҡалпаҡ үҙе:

– Атты... ҡарт ебәргәндер.

– Кем?

Алпар эйәргә бәйләп һалынған берәүгә:

– Ана.

Танайғол ҡарт һөйләп бирҙе.

Аҡҡалпаҡ күсе Үрек буйынан китеп, байтаҡ барғас, арттан атҡан. Аҡҡалпаҡ:

– Ах! – тигән, ләкин бирешмәгән. – Тотоғоҙ! – тигән.

Эҙләп тапҡандар. Үҙен ергә төшөргәндәр. Тәне йылы. Арҡала ҡан. Бына бит ҡыйыны. Кем алдында сисенеп, яраһын сирәк һалдырып бәйләтһен? Ҡалай етте шулай бәйләгәндәр, тегене тотоп туҡмай-туҡмай килтергәндәр. Тайбулат ҡарт ебәргән.

– Ах, үлтереп китәһе булған үҙен, – ти Аҡҡалпаҡ.

Яңынан ултырып, арттан атыусыны эйәргә бәйләп һалғандар.

– Тиҙерәк Батша яланына етәйек! – тигән Аҡҡалпаҡ.

Тиҙ барып буламы һуң әле... Юлда Алпар осраған. Ҡаушаған, әйтерһең, үҙенә атҡандар.

– Әйҙә, әсәйем янына.

– Яраға яҡшылап сирәк һал... шунан – батша артынан. Уңалыр яраһы.

Ире тыңлай. Ләкин хәле ауыр ине. Барып ҡушылғансы бик ныҡ йонсоған.

Танайғол ҡарттың ҡалған һүҙен тыңлап та бөтмәнеләр, былай ҙа күренеп тора.

– Быны нимә эшләтәбеҙ? – тинеләр яу килгән егеттәр.

Пугачев Кинйәгә боролдо, ләкин ул бер һүҙ әйтергә лә өлгәрмәне, үҙе:

– Үҙегеҙ ни ҡарар ҡылаһығыҙ?

– Аҫырға кәрәк. Аҫабыҙ!

– Һеҙҙең ихтыярҙа...

Ә Алпар, Кинйәнең әйтеүе буйынса, хәле ауырая барған Аҡҡалпаҡты Арыҫлан ауылына илтеп ҡуйырға йүнәлде.

Атаман һүҙе ишетелде: иртәгәме, һуңынанмы беҙ ҙә ҡайтып килербеҙ.

Аҡҡалпаҡ:

– Юҡ... Абыҙ ағай... атаман...

– Бар, бар. Ял ит, һауыҡ... Иртәгәме, һуңынанмы беҙ ҙә ҡайтып килербеҙ.

Оҙаҡламай тау битләүе. Былтырғы үлән күп. Улар шунда төнгө ялға туҡтанылар.

## 11

Бошман-ҡыпсаҡтарҙың ата-баба ерҙәренә аяҡ баҫтылар.

Бында улар байтаҡ ҡына ине. Көҙ көнө Кинйә менән киткәндәр бөтәһе һаҡланмаһа ла, яуҙа ауғандар урынына ла, ауыр йәрәхәт алып ҡайтарылғандар урынына ла яңылар килә торҙо. Бына яу яландары үтеп, һалҡынына-еленә түҙеп, әйләнеп ҡайтып, таныш һуҡмаҡтарға аяҡ баҫтылар.

Бөтәһенә таныш.

Бына Һеләүһен полковниктың йәш сағында был ерҙәрҙә урман ҡыҙырып, тауҙар артылып йөрөгән ерҙәре. Атаһына ла бик яҡын.

Яҙғы көн ярты аҡыл. Ҡояш һүрелде, болот. Боҙлауыҡ, ҡар, унан ямғыр һибәләй.

Улар Ҡандышлы буйҙарын үтеп, Ҡарауыл тауына артылдылар. Ҡаршыла, Тора-һыу аръяғында – Нәмәҙе тауы, һул яҡта – Бағра тауы, унын артында, Нөгөш аша – унын ауылы Арыҫлан.

Кинйә үҙен-үҙе онотҡан төҫлө, ҡамсыһын һабынан ҡуша тотҡан килеш алға һуҙып, бөтәһен дә батшаға күрһәтеп һөйләп бара:

– Ана, ҡаршыла, ҙур терһәк яһап, Бөгәл йылғаһы аға. Мин тәүҙәрәк шунда йәйләй инем. Крәҫтиәндәр килгәс, шуны белеп, мулла йәйләгән, Муллашка йылғаһы, тинеләр. Ә тыуған төйәгем, ана, һулдараҡ – Наҙы йылғаһы. Ауыл шунда ине.

Кем генә үҙ ерҙәрен һағынып, яратып һөйләмәҫ. Кинйә тағы һөйләр ине. Көтөбөрәк торған Көҫәпәй Пугачев алдына сығып, алға табан ҡулдарын йәйрәтеп күрһәтте:

– Бына, батшам хәҙрәттәре, был һинең заводың!

Кинйә көлөмһөрәп ҡәйнеше Көҫәпәйгә күҙ һирпене. Килештерә! Көҙҙән бирле быны батша заводы тип йөрөткәндәрен ишеткән, әлбиттә. Уға ышанамы, юҡмы, әммә бында килеп еткәс, ҡурҡа биреп һүҙен килештерә. Пугачев уйын йыйып алды.

– Эйе, эйе... Миңә баш эйҙеләр. Туптар ҡойҙолар.

Воскресен. Әйтерлек тә: иң беренсе булып уға туптар бирә. Тәүҙә үк, уны күрергә тип, Ырымбурға табан Воскресен кешеләре килде, бында хатта единорогтар яһалды. Ундайҙарҙы Шувалов гаубицалары тип, хикмәте сер итеп тотолған туптар. Ләкин завод эшселәре таптылар серен.

Эйе, ҡушылдылар, булыштылар, алып барып бирҙеләр. Яков Антипов ҡатнашлығында 15 туп ҡойолдо. Төрлө туптар, ә алтауһы – ана шул йәшерен хикмәтле туптар.

Кинйәнең, киреһенсә, күңеленә төйөр төймәлде.

– Бына ошо заводтың хужалары алды ерҙәрҙе.

Пугачев:

– Һинең ерҙәр инеме?

– Беҙҙең ерҙәр ине. Бөтә ырыуҙыҡы. Атайым тармытына сыҡҡан йәрәбә.

Нимә тиһен... Был ерҙәр Кинйәнекеме, әллә бергә атлаған Айыттыҡымы, әллә Твердышев баярыныҡымы, ул ҡыуалап килтергән крәҫтиәндәрҙекеме? Әйтеүе ҡыйын.

– Тәхеткә ултырып алайым әле. Үҙем указ яҙып, ҡайтарып бирермен.

Кинйә көлөмһөрәп ҡуйҙы.

– Уныһы...

– Эйе, хәйер! Хәҙер үк ал. Заводчик Твердышев быltыр үлгән бит.

Кинйә тағы көлөмһөрәне. Бына бит, әле генә завод батшаныҡы ине, хәҙер заводчиктыҡымы булып сыҡты. Әллә кемдең ҡулдары һалған, кемдәр тир түгә – шуларҙыҡымы?

Был хаҡта Көҫәпәй уйлай беләме, Пугачев та баш ватманы, Кинйә лә былай ғына...

Батша ишеткән, онотмаған. Заводчиктыҡы тиһәң дә, Иван Борисович Твердышев бер үҙе генә хужа түгел, ағалары Яков менән Петр ҙа бар. Апалары Татьянаның ире – Иван Семенович Мясников. Унын ҡустыһы Матвей.

Ә уға нигеҙ һалыусы Иван Борисович үлгәс, ҡайһыһы хужа булып ҡалыр? Хикмәт бит: заводтар бар, ер-һыуҙар икһеҙ-сикһеҙ, урмандар күп. Ә шуларға вариҫ булып ҡалыр өсөн компания хужаларының береһенең дә улы юҡ. Ни бары ҡыҙҙар ғына үҫтергәндәр. Һәм улар, донъя ығы-зығыһынан шөрләпме, йөрәктәре түҙә алмай, берәм-берәм донъя ҡуя башланы. Бай мөлкәт ҡыҙҙарға бүленде, ә

уларҙың кейәүҙәре – юғары дәрәжәле вельможалар ҙа, әлбиттә. Дарья тигәндәре – Пашковта, Ирина – Бекетовта, Аграфена – Дурасовта ирҙә, Екатерина – Казицкая булып сыҡты.

Воскресен заводы генерал Пашковтыҡы буласаҡ. Ләкин ул, ҡурҡып, заводҡа үҙе килеү түгел, яңы управляющий ебәрергә лә баҙнат итә алмай ине әле. Әлегә Яков хужа булыбыраҡ йөрөй.

Кинйә:

– Ерҙәрҙе бирҙең дә, ти. Ә был крәҫтиәндәр ҡайҙа барыр? Ҡуҙғатырғамы?

– Эйе. Эйе... Уларҙы яуға ҡуҙғатырға!

– Эшләһендәр, торһондар шунда. Улары менән беҙ дуҫ йәшәйбеҙ. Килешеп була. Минең дә знакомдар күп.

– Эйе, теге Грязнов. Бына Степан, улы.

Завод күренә. Яҡын ҡалғанда, көн тағы асылды. Ҡояштан йылы нурҙар бөркөлдө.

Тау биттәренән йылы быу, ошо миҙгелдең үҙенә генә хас елберләп иҫкән һағым йылыһы. Иркәләгәндәй, бөтә тәнгә рәхәтлек бирә.

Урам оҙон. Юл Төсөркәй күперенә килеп ҡушыла. Имән ҡапҡа тышында халыҡ. Алда Степан ҡарт. Эргәһендә Петр Беспалов. Икмәк-тоҙ тотоп сыҡҡан.

– Йөҙ йәшә, государь!

– Батша хәҙрәттәре, рәхим ит!

Приказчик Беспалов былтыр, крәҫтиәндәр шаулай башлағас, иҫән ҡалырға тип, Ырымбур янына туптар алып барҙы. Пугачевта булды. Ләкин уның ҡушҡанын ысын күңел биреп атҡарманы. Пугачтың еңелеүен ишеткәс, карателдәрҙе көттө. Килһәләр ҙә "вай", килмәһәләр ҙә "вай". Шунан бирле ике йөҙләнеп йәшәй. Әле лә ятып ҡалманы, ҡаршы алырға сыҡты.

Пугачев күкрәк киреп, батша төҫөн алды.

– Һаумыһығыҙ, минең балаларым!

Пугачев төштө. Атын етәкләп алдылар. Ул икмәк-тоҙ ҡабул итте.

Алға киттеләр. Сиркәү ҡаршыһында поп кадилоһы менән. Эргәлә контора. Штаб урынлаштырыу менән, Кинйә төрлө яҡҡа шәйләктәр ебәрҙе. Шунһыҙ... Юҡ! Аждаһа ауыҙына барып ингән кеүек булырһың.

Ауылға кергәнсе үк ул яҡ-яҡҡа ебәрҙе Айыттың дуҫ егеттәре менән үҙенең Ҡыҙыл тауына, изге ташына бер төркөм. Дөрөҫө шунда. Ауылда күҙгә бик салынмаһын. Был батша ҡасҡындарҙы йыйған, тиерҙәр.

Ә Һеләүһен үҙенең бер аҙ кешеһен Ҡыҙҙар тауында ҡалдырҙы, бер нисәне Бөгәл йылға буйына ебәргәйне. Кинйә – Верхотор юлына – Һәләүеккә табан, Наҙы тамағына кешеләр ебәрҙе: урам остарына, быуа буйҙарына.

Ауыл тирәһе. Ауыл бейек имән ҡойма менән кәртәле. Ҡапҡаларҙа һаҡ. Тыштан тәрән генә урҙар ҙа бар. Арыраҡ та кәрәк.

Ә Тора аръяғының тау ҡултығына ултырған урамға – Ермоловка посадына былай ҙа ышаныс ҙур. Уның артында заводта эшләүселәр йәшәй... Артында, юрматы ырыуы ерҙәрендә, күмер яндыралар. Ағиҙелгә саҡлы ҡалын урман менән ҡапланған һыҙат-һыҙат булып өс буй тауҙар теҙелгән.

Пугачев үҙе лә танышып алды. Улай-былай була ҡалһа, унда ни, һулда ни барын белергә кәрәк. Ул быуаны ҡараны. Завод стена менән уратып алынған. Артабан Тора һыуы аръяғында, тау ышығында бер матур ғына урам.

Пугачҡа оҡшаны.

– Матур посад!

– Ермоловка посады, – тине Беспалов, ялағайланып. – Унда беҙҙең күмер яндырыусылар йәшәй.

Тауға арҡа терәп, йылыла йәшәйҙәр. Алда йылға аға. Тәҙрәләре ҡояшҡа ҡарай.

Степан ҡарт:

— Тормош йылыһы ғына төшмәй.

— Ниңә, ожмах кеүек, — Беспалов телен сартлатты.

— Тамуҡ хәле...

Тыныс кеүек.

Оҙаҡламай конторала төшкө аш булды. Шунда хәл менән танышып алдылар. Ләкин ҡарт улы Григорий[1] хаҡында ла, Иван Грязнов хаҡында ла хәбәр асманы, күренеп тора: Беспаловҡа ышанмай.

Һуңынан белде: Грязнов былайыраҡ күскән. Григорий — Силәбелә. Икеһе лә еңелеп, артҡа сигенгән.

Пугачев:

— Ышаныслы кеше бармы? Курьер ебәрергә кәрәк, — тине.

Степан:

— Бар.

— Указ яҙырға. Кинзей, ҡайҙа, килһендәр! Йә Әүжәнгә, йә Белорет заводына.

Яҙыусы бар. Яҙылды. Сапҡындар елде.

Аш мәжлесе бөткәнде көтөп торғандар. Сығыу менән төрлө яҡтан һырып алдылар. Әҙер манифест бар. Ғәҙәт буйынса шуны уҡынылар.

Халыҡ гөр килә, ҡәнәғәт. Ҡул сабыу. Йәшәһен батша!

Уның бүтән булыуы, ябай булыуы оҡшай халыҡҡа.

Әле урамда — халыҡ телендә шул. Уны, был үҙебеҙҙеке, тиҙәр. Уның ат өҫтөндә егеттәрсә килеүен маҡтайҙар, ябай кешеләрҙән тайшанмай аралашыуын яҡын итәләр.

Шулай ҙа берәүҙәре:

— Батша тигәс тә, әллә ни ере юҡ. Беҙҙең Ҡарғалы байҙары ла унан уҙҙыра, — тиҙәр.

Икенселәре:

— Башына төшкәс, нишләһен... Бисәһе рәнйеткән. Байытҡан да, бөлдөргән дә — ҡатын.

— Ә ниңә бисәһен еңмәгән? Шуны тота ла белмәгәс, илде тота алырмы?

— Еңде Катеринаны... Бер үҙеме ни, янында гвардия, деүәрәндәр. Шулары һатҡан быны.

Халыҡ ысын-ысынлап батша тип ышана.

Эй, батша тип ышаныу! Нишләп шулай батша тип табыныу киткәндер? Бар бит хәл-ваҡиғалар, халыҡ батшаһыҙ ҙа береккән. Фирҙәүсиҙең “Шахнамә”һе, ана...

Кем нисек яҡын килә ала. Береһе:

— Мине ал, йәнем-тәнем менән һиңә хеҙмәт итәм,— ти.

Батша риза:

— Ярай, казак итәм, һөйлә, һин кем?

Һөйләй теге.

— Ҡысҡырып һөйлә, бөтәһе лә ишетһен.

Берәүҙе Мясниковҡа әсәһе һатҡан. Илап киткән, асыуланып... Ул саҡ яу ваҡыты, аслыҡ, штраф (10 йәштә — 1738 йыл).

Мясников — ит сауҙаһы, иген сауҙаһы вәкиле. Алып китте Сембергә, унан бында заводтар һалды. Килтерҙе, күпме сыбыҡ һуҡтырыу, ыҙа... Әсә ниңә һатты, ниңә ҡарғаны, тип уйланы батша. Уны ҡайтып әйтергә, илатырға ине. Һуңынан аңланы.

[1] *Григорий Туманов.*

Шул Ҡасҡын Һамаров менән килә. Ауылда нотоҡ һөйләй. Күптәр ғәскәргә яҙылды.

– Гулять можно?

Пугач бер өҫкә ҡараны.

– Юҡ, уныһына иртә әле. Шау-шыу булмаһын. Уяу тороғоҙ.

Был Кинйәгә оҡшаны.

– Әҙерләнегеҙ!

Әҙерләнеү шул көндө лә, икенсеһендә лә дауам итте. Кинйә үҙенең кешеләрен саҡырып, батша исеменән дә, үҙ исеменән дә бойороҡ-ярлыҡтар ебәрҙе. Бында үҙ кешеләрен, йәнә Степан кешеләрен ҡалдырып, иртән Кинйә ауылына юлланды. Бер көнгә, ҡунаҡҡа.

12

Айым элегерәк ишеткәйне. Көҫәпәй ишеткәс, ул нишләп?.. Юлға сыҡты. Ауыр юлды еңел итеп, йыраҡ юлды яҡын итеп. Ашҡынып-талпынып, ҡанатланып, осорға етешеп, барып етәм, тине.

Күрергә, бер һүҙен ишетергә. Әгәр... ҡайтыр булһа, алып ҡайтырға.

Уйҙары, теләктәре ҙур. Ниҙәр уйламаны, ниҙәр теләмәне.

Күп тә барманы – сапҡын. Айым төҫ-башынан уҡ таныны. Кинйәнең сапҡындары. Башына аҡ яулыҡ бәйләгән була. Күҙҙәре ҡыҙарған. Йоҡо күрмәй. Ат алмаштыраар ҙа еләләр, барып ҡайтһа – тағы юл...

– Еңгә, ҡайт!

– Мин барам.

– Унда тап булмаҫһың. Ҡуҙғалдылар. Үҙҙәре ҡайтыр, әҙерләнеп торһон, тине.

Айымдың уймаҡ ауыҙы боҙолдо, йоҡа ирендәре ҡыймылданы, дуғалы ҡыйғас ҡаштары йыйырылды. Уйың үҙеңсә булмаһын әле, кире ҡайтыу. Ләкин тыңламай ҙа булмай.

Ҡайтып әҙерләнергә тотондо. Янғыҙы килмәҫ, һый етерлек булһын. Һарыҡ-ҡуйҙары, күрше-күләндән турһыҡ-турһыҡ ҡымыҙ йыйҙырҙы.

Үҙ ҡулдары менән бешереп, үҙ ҡулдары менән килтерергә. Ҡымыҙ ҡойғанда аяҡсы булып, тәүге аяҡты үҙе бирергә.

Бөтә азаматтарға табаҡ-табаҡ ҡурҙаҡ ҡуйыр.

Бөтә сиреүгә күнәк-күнәк айран яһар.

Ул ҡурмас, ул ҡурҙаҡ... Бөтәһе, бөтәһен дә.

Үҙе – бер яҡтан, килене – бер яҡтан. Йүгерешәләр. Шатлыҡ. Ә Һәләүеккә бигерәк тә.

– Атаман атайым ҡайта! Палкауник ағайым ҡайта!

Ләкин шул көндө генә ҡайтмайҙар бит әле.

Шулай йөрөгәндә, Алпар менән Аҡҡалпаҡ килеп төштө.

– Ай, собханалла!

Хәле ауыр, ни булды? Бөтә эш ташланды, онотолдо. Бигерәк тә Буранбикәгә ауыр. Утты-һыуҙы бергә кисеп, ауырын-ҡыйынын үтеп...

Буранбикә, сисендереп, арҡаһын йыуҙы, Айым кипкән үләндәр, йомшаҡ сирәк япты.

– Һин ҡара, килен.

Үҙе тағы йүгерә.

Икенсе көндө лә түгел, өсөнсө көнөнә тағы сапҡын.

Айымдың бөтәһе әҙер. Ҙур эшкә әмер биргәндәй:

– Ҡаҙан аҫтарына яғығыҙ! – ти.

Үҙе ҡарай. Малайҙар төрлө урында.

— Ана... Күренделәр!

— Киләләр! Бағра яғынан.

Айым йәш саҡтағыса атҡа атланды, ҡаршы барырға тип.

Кисеүҙе сығыу менән осрашалар.

Бына ире! Бәй, бынығы кем, Кинйәнең хөрмәт итеүенән күреп, батшалыр, ти.

— Батша килә, батша! — тиҙәр.

Айым менән Кинйә бер ауыҡ ҡарашып торҙолар. Ире Айымға, ҡартаймағанмы, ти, ҡатыны, йонсомағанмы, тип уйлай. Шатлыҡтан йөҙө балҡып тора.

— Имен-аманмы?

— Имен. Үҙең арыумы?

Ул ара Кинйәнең Аҡъялы кешнәп ебәрҙе, Тумағы яуап бирҙе, бер-береһенең еҫен тойоп алдылар. Айым, атты әле генә күргәндәй, эйелеп яңағынан һөйөп алды.

— Ай, ошо ат Кинйәмде үҙ өҫтөндә йөрөткән. Бөтә ҡурҡыныстан, бөтә ауырлыҡтан. Был аттар мал тарпаны — ҡырағай ат тиерлек түгел икән.

Батшаны һыйлау. Аҡ тирмәлә. Аяҡ аҫтына аҫыл келәм түшәлгән. Түргә — ҡыҙыл сәхтиән мендәрҙәр.

Ултырыуы уңайһыҙ булыр, тип уйлағайны Кинйә. Юҡ, ҡунағы күнеккән икән.

Пугачевҡа бөтәһе ҡыҙыҡ, оҡшай.

Һый килтерҙеләр. Уларҙы ташығанда кереп-сығып йөрөйҙәр. Кинйәнең ҡатыны ла, килене лә. Айым ябайыраҡ кейенгән. Оҙон күлдәк, еңһеҙ камзул. Бигерәк тә ул Буранбикәгә иғтибар итте. Ыҡсым кейенгән. Яуҙа йөрөгәнендә күргеләй ине, әле бөтөнләй икенсе — бүрек аҫтында ҡалпаҡ. Ҡашмауҙар, тәңкәләр. Аяҡта дағалы бейек үксәле күн итек. Һәр ҡатында итәк, еңдәр нағышлы, тәңкәләр сыңлап тора. Ҡулда беләҙек, ҡолаҡта алҡалар, кершән яҡҡандар, һөрмә лә тараҡҡандар, инлек тә яҡҡандар.

“Батшаны ҡаршылайҙар”, — тип уйланы Пугачев. Араларында Алпар сотниктың ҡатыны ғына күренмәй. Уның хәле бик ауыр, имеш, теге мәлгүндең уғы ағыулы булған, имеш.

Бөгөн китергә икән. Һеләүһене белеп, бөтәһен әҙерләй башланы. Унан күреп, Һәләүеге, мин дә китәм тип, ат килтереп, эйәр һалып йөрөй. Эйәрләй ҙә белер, ат өҫтөндә йөрөүҙә лә һынатмаҫ. Ә яу юлы, яу ғазабы уның өсөн түгел. Йәш әле, бик йәш.

Уны күндерҙеләр. Ә Айымын бөтөнләй икенсе тойғолар баҫҡан да баһа.

Айым бер арала:

— Һинең өсөн дә, үҙебеҙ өсөн ҡурҡам, атаһы, — ти.

Китмәҫкә өндәй.

— Мин дә Ҡасҡын һымаҡ, Әлибай һымаҡ ҡалайыммы?

— Юҡ та...

— Һуң?

— Әленән-әле ауылға ғауға төшә. Түрәләр эҙләү яһайҙар.

Юҡ, китер... Быны үҙе лә белә. Шуның өсөн бөтәһен алдан әҙерләп тә ҡуйған. Ҡымыҙ тултырырға турһыҡтар, малдың бөтә тиреһенән тегелгән ботлоҡтар, ал ҡул тиреһенән яһалған ҡулсалар әҙер... Ҡымыҙ туп-тулы булыр. Тағы ҡайтыуға тағы әҙерләр. Әле тегелеп бөтмәгән шырылар — һауыт-һаба яһау өсөн иләнгән тиреләр бар. Бер генә тирене лә әрәм итмәне ул.

Ирен оҙата.

Айым иренә хуш аяҡ бирмәй булмай.

— Тәңрең һиңә мораҙыңды бирһен.

Ире ашыға.

– Туҡтағыҙ әле. Бер аяҡ ҡымыҙ эсергә лә әмәлең юҡмы? Улайһа, мин оҙата барам.

Бына һиңә! Улы Һәләүек бер яҡтан, мин дә барам, ти. Балаһы – бер эш, ҡатыны...

Етди ҡараны.

– Айым!.. Шашма. Өйҙә – килен, өйҙә – ауырыу. Йорт-ил һинең ҡулда ҡала. Ныҡ тот.

Айым үҙен тотто. Уйын ваҡыт түгелдер шул. Һәләүеген дә туҡтатты.

Улы тыңланы... Ҡалды... Бөтәһе лә ҡалды. Кинйә китте.

Һуңғы тапҡыр бер-береһен күҙмә-күҙ күреүҙәре ине уларҙың.

13

Төнөн Вознесен заводында тупланғандар килеп етте. Ҡараңғы төн ҡайһы бер ваҡытта шомло була, мәкерле хәл-ваҡиғалар яһай. Кем белә, әле был казактарҙы имән ҡойманан тышта ҡундырыу хәйерле кеүек ине. Ләкин саҡыртыу хәбәрен алып барған сапҡынды үҙ яндарында тотоп, улар дөрөҫ эшләгәндер. Кинйә бөтәһен белә, күрә. Яман уйҙа түгелдәр.

Ауылға индереп, унар-унар итеп өйҙәргә урынлаштырҙылар. Шулай ҙа завод кешеләре лә, башҡорттар ҙа уяу булыу хаҡында иҫкәртеп ҡуйылды.

Бөтәһе һәүетемсә ине. Пугачевтың да күңеле тынысланып ҡалды.

Казактар бик ашығыс килгән. Йонсоғандар. Ял кәрәк ине. Арлы-бирле хәл-әхүәл һорашып ҡына булды.

Иртән. Пугачев янына саҡыртылған атамандар килде. Һөйләштеләр.

– Бынан Әүжәнгә китербеҙ. 100 саҡрым. Тауҙар араһына инеп китһәң, юл тыныс. Унда көс йыйырбыҙ. Унда Хлопуша барғас, туптар ҡойҙолар, йәҙрәләр, единорогтар. Үҙҙәре килде. Ен ташы кеүектәр. Әле лә килерҙәр.

Эйе, уйҙары күп. Беҙ улай итербеҙ, беҙ былай итербеҙ. Һәр кем үҙ уйлағанын әйтә, бере әйткәнсә ҡалғаны күнеп тора. Улай итәбеҙ, былай итәбеҙ...

Бөтәһе, Кинйә лә ҡаршы түгел. Таныш уйҙар. Ул икенсе бүлмәлә лә кешеләр менән һөйләшә. Эш ҡуша, әҙерлек алып бара, казактар һөйләшеүе лә ҡолаҡҡа салынып тора.

Саҡыртыуы буйынса Ҡасҡын Һамаров килгәйне.

Әлегә яндарында башҡорт старшиналары юҡ. Ҡайһылары Бердала уҡ китте, ҡайһылары Ҡарғалыла, Һаҡмар ҡаласығында һуғышта еңелгәс китте. Бының өсөн бик ныҡ асыуланырлыҡ урын бар, әлбиттә. Тик уларҙы уҡмаштырып тоторлоҡ йүн юҡ ине. Яңынан йыйырға кәрәк. Кинйә уларҙы саҡырып кешеләр ебәрҙе. Ләкин ул асыу белдермәне.

Ҡасҡынға ла тыныс ҡына:

– Ҡайтып көс йыйҙың, хәҙер эшкә тотон, – тип хәбәр итте ул.

– Бөгөн үк ҡоромдо алып киләм!

– Юҡ, килтермә әле. Батша ни әйтер.

– Бойороғон үтәрмен. Мин уның асылын, нәҫелен үҙ күреп алдым күңелемә.

– Беҙгә яңынан күтәрелергә кәрәк. Олуғ сиреү бер урында тормаҫ. Ә ҡалғандар ныҡлы таяу булһын. Хәҙер урыҫтар, башҡорттар, мишәрҙәр, татарҙар, ҡалмыҡтар бер-бер булып ярҙамлашыу кәрәк, – тине Кинйә.

Ҡасҡын:

– Ҡурҡып йөрөгән һау булмаҫ.

Кинйә:

– Һау булһа ла, дан булмаҫ.

Күрше бүлмәлә һаман иҫәп-хисап ҡоралар. Кинйә, рөхсәт һорап, Ҡасҡынды алып керҙе.

– Бына Һамаров яраның тағы фарманыңды көтә.

– Кил, ултыр. Бына бит, башҡорттар йыйыла, – Пугачевтың кәйефе күрәйҙе. – Яйыҡтыҡылар йөҙҙән ашыу, ҡалмыҡтар байтаҡ. Ә Яйыҡ казактары шунда ҡалырҙармы?

Пугачев та, атамандар ҙа уға хөрмәт менән текләп ҡараны. Һамаровты беләләр, ғәскәр йыйҙы, Өфө янында булды, граф Зарубиндың ярҙамсыһы. Әле һуң:

– Бергә алып китәбеҙме?

Кинйә:

– Полковник Һамаров бында ҡалып, ғәскәрҙең артын ҡаплаһын, Бөгөлсән, Воскресен араһында төйәкләнеп, Өфө юлын үҙ ҡулында тотһон, бадишам.

– Эйе, был юлда Голицын карателдәре тулған. Полковник Хорват, Рылеев[1]... Ҡул-аяҡтарын ҡыҫҡарт. Унан – кәрәк ергә саҡыртып, фарман ебәрермен. Хеҙмәт ит.

– Баш өҫтө, Петр Федрич...

– Бында ултыр. Тыңла, коллегия нимә уйлай.

Коллегия тиерлек ҡалмаған да... Шулай ҙа етди уйлашыу ваҡыты.

Пугачев урынынан торҙо:

– Бына былай... Тумановты саҡыртырға, Әүжәндә ҡаршылаһын. Грязнов та килһен.

Степан бында ғына:

– Хәҙер хәбәр итермен. Указ кәрәк,– ти.

– Яҙырбыҙ.

Атамандар:

– Юл өҙөгө бит. Өлгөрөрҙәрме икән?– тип шикләнә.

– Булмаһа, Белоретта осрашырбыҙ.

– Уныһы шулай.

– Минең Салауат полковнигым, йәш батыр килеп етер.

Кинйә:

– Ул да, атаһы Юлай ҙа Михельсонға ҡаршы алышалар.

Иҙеркәй:

– Улар һул ҡулды ныҡ тотҡандар.

– Шулай дөрөҫ булыр, Идорка! Шунда теге яуыз аждаһа менән алышып, йәнен йәһәннәмгә олаҡтырһындар. Быныһы ла булды!.. – Тағы өҫтәлгә йоҙроҡ менән туҡылдатып алды.

Творогов:

– Унда Белобородов. Бергә торһондар.

Чумаков:

– Беҙгә табан яҡынлаһын ул.

– Эйе, килһен!

Юлға сығырға.

Бөтә тирә-яҡты Ҡасҡын Һамаровҡа ҡалдырҙылар.

– Ышаныс юҡ, – ти Ҡасҡын. – Беспалға ышанмайым. Унан күҙ яҙҙырмам.

“Яманһарынан да, улы Кейекбайға ла күҙ-ҡолаҡ. Күрше старшиналарға әмер ебәр”. Батша указында шулай яҙылған.

---

[1] *Рылеев Иван Карпович – Санкт-Петербург карабинер полкының подполковнигы.*

Пугач:

– Ҡара, ныҡ ҡара. Һин бында главный атаман.

– Баш өҫтө!

Ə Кинйə, ихтимал, уның үҙенə лə ышанып етə алмайҙыр. Һелəүһенде ҡалдырҙы.

– Батшаны онотма.

– Юҡ, йомала уға хөббə доғаһы ҡылдырырмын.

Мулла улы. Заманы имен булһа, бер мəхəллə алып, мулла булыр, михрапта[1] ғына вəғəз уҡып ултыраһы бар ҙа. Мөнбəр[2] ҙə вəғəз һөйлəргə.

– Тирə-яҡты һаҡла, кешелəр туплағыҙ, олуғ сиреүгə ярҙам булыр. Һəр ваҡыт хəбəр ебəрə тор.

Хушлашты Кинйə. Һуңғы осрашыу булғанын һиҙгəн төҫлө. Əсəйеңде алып кил, тине улына.

Һелəүһен ашыҡты. Əсəйе атлығып килде. Лəкин өлгөрə алманы. Ҡойроҡло йондоҙ күреүелер. Хəйер, Пичин[3] йылы йүнле булмай, имеш.

Киттелəр. Ылау юҡ. Йəйəүлелəрҙе лə эйəртмəнелəр. Бик тиҙ йөрөрлөк булһын. Заводта, ғəскəре ҙур, тип ҡалалар. Хəҙер ярайһы ғына, лəкин батша өсөн, бигерəк тə тəхет яулау өсөн бик бəлəкəс, сəнтəй бармағы осондай.

Бындай ғына көс менəн һаҡ булыу кəрəк. Урман яғалап, тауҙар аралап барырға.

Оло юлдан еңелерəк булыр ине. Оло юлдан барып, туп-тура Кинйəкəй ауылына, Юлдашҡа, Көҫəпҡолға, унан Һəлəүек буйына сығып, яңы һалынған Кинйəкəүгə,[4] Маҡарға... юҡ əле, юл ауыр булһа ла, тауҙар аралап, яҙғы һыулы үҙəндəр үтеп, урмандар аша барырға тура килə.

Шулай ҙа юл ыңғай Кинйə осраған кешелəр аша уңда, һулда ҡалыусыларҙы онотманы, юрматы йортауайы Көҫəпҡол Азатбайға, телтемдəр йортауайы Һайран Һəйеткə, Юлдаш ауылында элегерəк сотский булып торған Бурыевҡа, Ағиҙел буйындағы Алдаҡай ауылындағы йəшəүсе дуҫы Телəүембəткə, Байыҡ ауылындағы сотник Байыҡ Сарбаевҡа, Байғужа ауылы муллаһы Мостафа уғлы Байғужаға... ҡош телендəй булһа ла тип, үҙ сəлəмен, батша əмерен юлыҡтыра барҙы.

Верхоторға... Воскресен заводының ярҙамсы заводы. Шул уҡ Твердышев, Мясниковтарҙыҡы. Бында ҙур быуа. Шуның типкенендə ваҡ-ваҡ ҡына ете йылға ҡушылып, боронғолар үҙ тораларының, аллаларының төйəге иткəн йылға хасил итəлə.

Рустар был төйəкте Семигорье тиҙəр. Заводта эшлəүселəр, башҡорттар ҡушылды. Ҙур көс.

– Беҙ ҙə Семигорье кеүек ҙурайҙыҡ, – тиҙəр.

Көс ишəйҙе, күңел көрəйҙе.

Бында быуа, бында мөгəзəйҙəр, бында ауыл, заводта эшлəүселəр, крəҫтиəндəр йəшəй. Сиркəү янында туҡталдылар. Йыйылдылар. Быуа аҫтында. Таш ярығында бер ҡайын үҫкəн. Үҙе кəкре, үҙе ныҡ.

– Үҫə бит, – ти Пугачев.

– Беҙҙең кеүек бил бөгөп, бөкөрө сығарып үҫə, – ти бер ҡарт. – Беҙҙең эште күрһəтеп тора.

– Шулай ҙа йыуан.

– Беҙҙə лə шундай ныҡлыҡ бар.

---

[1] *Михрап – мəсеттең көньяғында мулла өсөн эшлəнгəн уйылма урын.*
[2] *Мөнбəр – хəбəр (автор һүҙлегенəн).*
[3] *Пичин йылы – маймыл йылы.*
[4] *Кинйəкəү – хəҙерге Петровский ауылы.*

**Алтынсы бүлек**

# Яу батшаһы Йәмәлкә

*Салауатҡай килә ғәскәр менән,*
*Ат уйнатып, Үҙән буйлатып.*
*Ҡалҡанҡайы һалмаҡ, уғы мәргән,*
*Дошман яуын ҡырҙы шаулатып.*

**(Халыҡ йыры.)**

1

Завод контораһында һөйләшеп, алдағы көн хәстәрлеге хаҡында уйлашып, барыр юлды билдәләп, кәңәш-төңәш төйнәп ултырғанда, Емельян Пугачев, күңелендә ҡалған Салауатҡа иҫәп тотоп:

– Әле ҡайҙа минең йәш полковнигым? – тигәйне. Уны саҡыртырға иҫәбе бар ине шул.

Ләкин йәш полковник Салауаттың да, Себер юлы атаманы итеп тәғәйенләнгән Юлай Аҙналиндың да эштәре ҡыҙыу, көрәштәре һүнмәгән: Йүрүҙән, Әй, Эҫем буйҙарынан китерлек хәлдә түгел ине үҙҙәре.

Унда йән алыш – йән биреш алыштар бара ине әле.

Салауат Көнгөр ҡалаһы янында яраланып ҡайтһа ла, тынғы тапманы. Ҡала алынмаған. Унда секунд-майор Гагриндың гусарҙары ҡалды. Ҡаланы алып булмағас, Кузнецов Иван Степанович китергә булған. Яугирҙар үҙ төркөмдәренә бүленеп таралғандар. Красноуфимды ла карателдәр килеп баҫҡан.

Салауат ярһыны... Яраларына иғтибар итмәне. Уңалғанмы-юҡмы, төҙәлер. Батыр яраһыҙ йөрөмәй. Февраль аҙағында ул үҙенең урҙуғаһы менән Красноуфимдан 40 саҡрым алыҫлыҡта Буғалыш ауылына килеп урынлашты. Байтаҡ кеше үҙе килде. Ишетмәҫ тип үҙе ат еткән ергә сапҡын, етмәҫлек урынға кеше артынан хат ебәреп, бойороҡ хаттары таратты. Ике мендән ашыу яугир хәҙер ҡулы аҫтында.

Красноуфимға йүнәлде.

Уны ҡабат алып, Салауатты ҡыйратыу өсөн Көнгөрҙән подполковник Папов Александр Васильевич килде. Көсө ҙур, туптары күп. Тиңләшерлек түгел ине, әлбиттә. Ләкин Салауат өсөн – алышырлыҡ дошман.

14 мартта, Красноуфимда. Өс көндән һуң Буғалышта ҡыйратты. Салауат бик аҙ ғына көс менән үҙ яҡтарына – Әй буйына табан сигенде.

Унда яңы сиреү йыя башланы.

Белобородов Красноуфимға килмәй, ярҙам итмәй. Ҡошсо иләүе старшинаһы Илсеғол Этҡолов бөтөнләй яҡын ине бит. Ярҙам һорағас, Белобородов килмәгән. Шуға ғәрләнеп, Илсеғол киткән. Салауат иһә икеһенә лә асыулы.

Еңел булманы, батша хеҙмәтенә тип, һәр йорттан – кеше. Атлымы, йәйәүлеме – барыбер. Уның ҡушыуы буйынса сотнигы Иләтбай Илембаев йөрөнө, йыйҙы.

Был көндәрҙә – ауыр хәбәрҙәр. Ырымбур янынан да, Өфө янынан да. Яугирҙар ғәскәре ике урында ла ҡыйралған. Ҡыйын булһа ла, рухы төшмәне Салауаттың. Төрлөһө була бит, яу юлы унда йәлсемәһә, башҡа ерҙә еңеү бирер.

Батша иҫән, батыр бар.

Яу еңелеүен ишеткәс, Ҡолой Балтас утҡа баҫҡан бесәй шикелле ҡоторона, бөтә тирә-йүнде айҡый, күргән береһен әйтеп, ошаҡлай, ә тегендә, көнбайыштараҡ, ҡарт бүре Ҡыҙрас Муллаҡаев[1] яуҙан айырылып, баш һалғас, үҙ ғәйебен аҡлар

[1] *Ҡыҙрас Муллаҡаев – Нуғай даруғаһы Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы, б. к. полковнигы.*

өсөн, яу башлыҡтарын тотоп бирергә вәғәҙә итә. Торновты тотоп биргән, тигән хәбәр бар.

Эйе, ундайҙар бар.

Салауат менән Юлай самалай: Пугачев тау араларына – Әүжән, Иҙелбаш янына юл тотор. Ошо хаҡта, батша хәҙер ҡайҙа барыр, тип Салауат, Юлай фараз итәләр.

– Зауыдтарға...

– Әүжән юл өҫтө. Иҙелбашына...

– Эйе, Кинйә абыҙ ҙа. Зауыд кешеләре лә!..

Карателдәр Себер юлына сығыр. Ҡайһыһы? Голицынымы, Михельсонмы?.. Әйтеүе ҡыйын. Әммә Пугачев артынан төшөрҙәр.

Шуға карателдәр юлына арҡыры төшөү өсөн, Салауат менән Юлай үҙ алайҙарын бергә туплап, Усть-Ҡатау, Эҫем заводтары тирәһенә тупланғайны.

Сотнигы Илтәбай Илембаевты сиреү тупларға ебәрҙе.

– Ҡыҫалар, һай, ҡыҫалар! – тине Салауат, йөрәкһеп.

Эйе, был ҙур яуҙың тағы бик ауыр мәле яҡынлай ине.

...Кәңәшмә Ташлыла, Воскресен заводында ғына булманы, унда Пугачев үҙ янында ҡалған ышаныслы ярандары менән кәңәш-төңәш итһә, князь Голицын янында, генерал Деколонг штабында, Мансуровта ла уны тотоу өсөн ярһып-ярһып төрлөсә пландар ҡорҙолар. Воеводалар уйлаша, губернатор бер-бер артлы чиновниктарын, генералдарҙы йыя. Башкомандующий ставкаһында Мәскәүҙә, Петербургта. Шул Емельканы тотоп быҒаулау хаҡында әллә ниндәй, әллә ниндәй саралар күрҙеләр, пландар төҙөнөләр. Императрица Екатерина Икенсе үҙе лә, берсә әсенеп, берсә мәкерләнеп, туҡтауһыҙ баш ватты. Әммә береһе лә, шул яуыз Пугач өсөн был күп түгелме, тип уйламаны. Бөтә көс, бөтә саралар. Быларын һәр кем аңларлыҡ, Юлай ҙа, Салауат та ап-асыҡ беләләр, әлбиттә. Тик бына Михельсондың...

Өфө янында ҙур еңеүгә ирешкән подполковник Михельсонға ла тынғы бирмәне. Голицын менән беҙ уны ике яҡтан килтереп ҡыҫтыҡ тип, хәҙер бөттө тип Өфөлә ял итергә туҡталды. Ғәскәре бер сама ял итте. Аттар алмаштырылды, ылауҙар алды. Аҙыҡ-түлек, фураж. 60 туп, дары запасы тупланды.

Өфөлә оҙаҡ тормаҫ. Пугачев Урал тауҙары араһына үтеп, тағы байтаҡ ҡына көс туплаған, уны һәр урында ололап ҡаршы алалар икән. Михельсон корпусына ял булманы, тағы ҡуҙғалып, Урал аръяғына сығырға әмер бирелде. Әле аяҡ аҫты кибеп, йәйге юл төшөп өлгөрмәһә лә, уның ғәскәре тауҙар араһына табан ҡуҙғалды. Ул үткән ерҙә янған ауылдар, үлектәр, дар ағастары ҡала.

...Ә ул бында килер... Батшаның ҡаршыһына килеп сығырға тырышыр. Йә уға уңданмы, һулданмы килтереп бәрер, тотоп алырға уҡталыр...

Бер көндө бер сыуаш белеше килде. Ҡобау олоҫонан. Юлай олоҫо. Өфөгә яҡын. Уларҙың ауылы кешеләре яуҙа ҡатнашҡайны.

Ерҙәренә башҡорттан һис кем теймәй. Йәшәйҙәр.

Уларҙы суҡындырыу бара. Былары, үҙҙәренең мәжүсилеген[1] һаҡлайбыҙ тип, был яҡҡа килгән. Хәҙер – шуға ҡаршы.

Ул хаҡта артыҡ һүҙ булмаҒас, бер килке шаулаштылар ҙа тындылар. Ҡомарҙары һүрелгән уларҙың, тип уйланы Салауат. Юҡ икән.

– Салауат удаман, әйт әле, песнең патька (батша) бөттөмө ни?

– Юҡ! Кем шулай яман һүҙ тарата?

– Песнең ҡуштаннар[2] шулай һөйләй.

---

[1] *Мәжүсилек – язычество.*

[2] *Ҡуштан – ялағай.*

– Ауыҙҙарын ябығыҙ. Һине сотник итәм. Үҙегеҙ һөңгө алығыҙ. Бер йөҙ кеше йый. Өс көндән хәбәр итермен. Ҡара һин! Үҙең барһаң ине. Староста һайлат. Сотник тип шунда әйт. Йөҙ яугир тупла. Сотник булырһың.

– Туплайым. Һин килһәң, ныҡ булыр.

Салауат башына уй төштө. Быларҙы ла онотма. Сыуаштар бында күп түгел, ә мариҙар – бихисап.

Ул шуларға китте.

Көс йыйырға. Уңайлы урындарға тупларға. Бөтә башҡортто. Иләтбай кеүек, һәр йорттан. Мишәрен, типтәрен дә. Бына эргәлә – Эҫем заводы, Усть-Ҡатау, Ҡатау-Иван. Унда урыҫ крәҫтиәндәрен йыйҙылар. Урман эсенә.

Тыуҙар яһатып, күрәндәр ҡоролдо. Әйҙә, Салауат янына яҡын барһындар. Ярҙам килә, тиер, шунда урмандан яланға сығырҙар. Ә улар сығыуына туптар әҙер торор.

Юҡ, Салауат бындай хәйләне генә аңлай, уларҙы аңлай. Ғәскәре әҙер. Кеше ебәрә.

Төнгө ҡунаҡ – төнлөк ябыуы.

– Кемдәр? Илме, яумы?

– Ил, ил.

– Кем атаман?

– Солтанморат.

– Улай булһа, башта ҡоралдарҙы һалығыҙ, аттарҙан төшөгөҙ.

Ундайҙары ла була. Ҡайһыныһын бик ныҡ ҡурҡытып-өркөтөп ҡайтарып ебәрәһең, ҡайһы берәһе ҡайтырлыҡ йүнен юғалта. Унда барып күренеүҙән ҡурҡып, үҙ яҙыҡтарын юйып “аҡланыр” өсөн ҡала.

Ә бер көндө – ике әҙәмде тотоп килтерҙеләр (бер ҡыҙ менән бер егет).

Ҡыҙ кеше шулай килергә баҙнат иткән.

Кем? Салауат күҙен ала алмай. Күҙҙәре ҡамашҡандай булды. Нимә был: ожмах ҡыҙымы? Юҡ, был – Зөләйха! Уның күҙҙәре лә ҡарашы! Уның ҡуңыр йөҙө.

Юлай ҙа таныны. Элекке дуҫы Балтастың был яҡҡа кейәүгә бирелгән балдыҙының ҡыҙы!

Ниңә килгән?

– Бына... быларҙы... Салауат... Юҡ, Юлай йортауай, юҡ, һеҙгә алып килдек. Һеҙҙе аңдып йөрөгәндәр.

– Кемдәр һуң?

– Әйтмәйҙәр, йөрөш-килештәре шикле ине.

Зөләйха үҙе аңдып йөрөмәйме, тип уйламаны Юлай. Еҙнәһе ебәрһә лә килмәҫ. Бында ни өсөн килгәнен аңлай. Салауат менән осрашырға. Тик үҙе лә ап-асыҡ килә алмай бит бында. Йәшерен килгәндә, быларҙы һиҙгәндәр.

– Ярай, һин, ҡыҙым, анау тирмә эсендә ултырып тор.

Китмәй тора.

Салауат:

– Бар, Зөләйха.

Ундайҙары ла була. Ә бер көндө урман ситендә Салауат менән Юлай икәүҙән-икәү һөйләшеп ултыралар ине.

Икәүҙе тотоп алалар. Таныш түгел.

– Кемдәр?

Әйтмәйҙәр әйтмәгәс, Юлай күреп тора – шымсылар. Салауат ҡулында ҡамсы тилберҙәтеп алды. Икеһе бер тиң уға ҡараны. Ой, бының ҡамсыһы йомшаҡ булмаҫ. Ундай кешеләр ғәҙәте генә йомшаҡ. Килеп ҡапҡас, асығын һөйләй ҙә беләләр.

– Кем ебәрҙе?
– Ғәбдессәләмов.

Юлай беләә ине уларҙы. Батырша яуында халыҡты тотторою, тотоп биреү. Батыршаның үҙен тотоуҙа ла ҡатнашҡан.

– Ҡайһыһы?
– Ямғыр.
– Әллә Мөхсинеме?[1]
– Икеһе лә.

Баҙға ябып ҡуйырға ҡушты.

Юлай быңдайҙарҙы беләә. Уларға ғәфү булһа, уларҙан үлем килә.

– Быларын үҙем ҡарармын. Һин оҙатып ҡуй. Әйт, бүтән йөрөмәһен. Үҙең тиҙ ҡайт.

Салауат тирмәгә табан китте. Унан Зөләйханы эйәртеп алып сыҡты ла килгән юлына кире алып китте. Оҙата килгән һаҡсы егете артҡа ҡала биреп эйәрҙе.

Юлай, эй, йәнәһе, ике бисәһе булып та, Зөләйханы тилертә, тип уйлап ҡалды. Шайтан малай. Булыр малай. Ниндәй атаман, яу башлығы, уҙамандарҙы бейетә. Юлай үҙе лә тыңларға тейеш була. Әле атай булып, килмәһен, тип әйтергә ҡушты, әйтәсәкме? Ана бит, аттарын яҡын килтерҙеләр, тубыҡ-тубыҡҡа, яурын-яурынға тейеп бара.

– Был малайыңды бында ҡалдыр. Миңә яугирҙар кәрәк, – тине Салауат киткәндә.

– Үҙем дә ҡалам. Яуҙа һәр саҡ эргәңдә булырмын.
– Тирмәңдә ултыр.
– Ултырҙы, ти, һин барҙа...
– Йә, бар, ваҡыт юҡ.

Зөләйха боролоп ҡараны. Егет, аңлап, артта ҡалды. Былар – ҡыуаҡтар ышығына. Салауат, иркәләп, яурынынан ҡосаҡланы. Ҡыҙ бала ла наҙланды.

– Кит, тиһең бит. Ваҡыты түгел шул. Кәкүк тә үҙ миҙгелендә генә саҡыра. Яйын белеп, һайлап ҡына. Ә мин...

– Бик йәтеш килгәнһең... – Салауаттың күңеле йомшарып уҡ китте.

– Кәкүк, тиһеңме, ә һин һандуғас бул. Моңо ташһа, ул миҙгел һайлап тормай, һайрай башлай, уның да теле талыға. Яу бөткәнен көт, тиһәң, көтәм инде.

– Күңелең ялыҡмаһын.

Шул ҡыҫҡа ғына осрашыу ҙа ҙур бәхет ине ҡыҙға. Тик ул риза түгел.

– Мин барыбер ҡорона күсеп киләм, – тине айырылышҡанда.
– Кил.

Салауат ҡайтҡас, атаһы Зөләйха хаҡында бөтөнләй онотҡан төҫлө ине. Бындағы икәүгә күрһәтеп:

– Ебәр, киҫәттем. Әммә һаҡ бул. Бындайҙар менән тирә-йүн тулған. Беҙҙең күҙҙәр уларҙыҡынан үткер, ҡолаҡтар сос булһын. Шәйләктәр ҡуй.

– Ҡуйырмын. Себен дә үтмәҫ.
– Нимә?
– Бер беҙҙә генә аҙ. Бөтә тирә-йүнгә аңлатайыҡ. Әйтәһе һүҙҙәр бар.
– Кәңәшкә йыяйыҡ, тиһеңме?
– Кәрәк ул.
– Эйе, кәрәк.
– Һинең күҙ-ҡолаҡтарың ныҡ булһын. Ә мин зауыдтар менән һөйләшермен, – тине. Үҙ-ара эш бүлешкән кеүек.

---

[1] *Мөхсин Ғәбдессәләмов – мишәр, Ноғай даруғаһы старшинаһы.*

– Эйе, мин уларҙы ҡыҫып килдем.
– Ҡыҫыу һәр ваҡыт ярамай... Уларға үҙем...
– Һин старшиналар менән дә... Һиңә уңайлыраҡ... мин халыҡ менән.
– Ярар.
Салауаттың күҙ-колаҡтары Өфөнән подполковник Михельсондың юлда булыуын хәбәр иттеләр. Красноуфим яғынан да ҡыҫып киләләр.
...Яҡын-тирә старшиналарҙы кәңәшкә йыйҙылар, заводтан рустар ҙа бар. Салауат – баш атаман. Һум[1] ҡоростан ҡылыс таҡҡан. Мөбәрра[2].
– Уҙамандар... Мәғлүм ҡылам, һеҙ бала түгел. Яу һүрелә, яу тоҡана. Ҡыш үтте. Яҙ етте. Күтәрелергә ваҡыт!
Күнелдәре һүрелгән кеүек, үҙҙәре яман һүҙ ысҡындырмаһалар ҙа, кешегә һылтаналар. Бүгәс ҡасҡы, тиҙәр икән.
Арала береһе:
– Хәбәрҙәр яман бит.
– Яҡшы хәбәр булһа, яу еңде, тип әйтеп була. Әле яғалашаһы бар.
– Йыйыҡтыҡылар таралған бит. Араларында низағ башланды!
Салауат ҡамсыһын бөкләп тотто. Шулай була. Әммә Юлай шикләнде. Ҡыҙып китһә... Юҡ, ҡыҙманы.
– Һөйләгәндәр һөйләй бирһен. Язаһын күрерҙәр. Ә һеҙ...
– Батшаның хәле нисек икән? Ҡырылды, тигән хәбәр йөрөй.
– Ауыҙҙарын ябығыҙ! – Ҡыҙып китте Салауат.
Атаһы:
– Ярай, һүҙҙе тыйырҙар, – тине.
Быңдай ваҡытта улының ҡыҙыу икәнен белә.
– Мәғлүм ҡыламын: батша иҫән. Яңы ғәскәре бар. Ул эштәрен көйләп алғансы беҙ бар, ҡанаттары күп уның. Әммә бында карателдәр килер. Ныҡ торорға.
Белобородовты яманлап алдылар:
– Мишәрҙәр боҙа.
– Ул Бәхтиәргә дары яһарға ҡушҡан. Үтәмәгән.
Салауат:
– Эттәр!
Салауат белә: белобородовсыларҙа ғәйебе. Үҙенә лә Белобородов ярҙам итмәгән. Ләкин асыуҙы онотоу кәрәк, үсләшеп, көнләшеп буламы?!
Урыҫ:
– Бына, ул ярҙамға килгән. Һатҡыла.
–Беләбеҙ.
– Ярҙам итегеҙ. Хәле ауыр. Беҙ башҡорттарға ярҙам итәбеҙ. Ә һеҙ...
– Яҡшы булырмы? Йә, әйт, – бер урыҫҡа табан атланы. Өҫтөнә менеп китер тиерһең.
Урыҫ:
– Беҙҙекеләр һынатмаҫ.
– Һеҙме? Беләм мин!
Атаһы тағы тыйҙы.
– Үндайҙар ҡайҙа ла була... Уларға беҙҙән айырылып ни файҙа? Тәгәрмәскә аҫырҙар, дарға тағырҙар. Ҡамсы инде.
– Бән, полковник, бойороҡ бирәм: көс туплағыҙ, әҙерләнегеҙ, ҡорал-ярактарығыҙ яраҡлы булһын, менгеләрҙең дағаларын тикшерегеҙ, ылауҙар әҙер булһын, аҙыҡ, һоло етһен.

---

*[1] Һум – иң сифатлы.*
*[2] Мөбәрра (ғәр.) – таҙартылған.*

Кәңәше, әмере һолло[1] икәнен аңлайҙар.

Ярһыны.

Үҙе дипломат та, үҙең йыртҡанды үҙең ямарға кәрәк.

– Бына завод кешеләренән өйрәнегеҙ, улар һәр ваҡыт – әҙер, ыҡсым.

Теге урыҫ рәхәтләнеп ҡуйҙы.

Салауат:

– Беҙҙе хәбәрҙән өҙмәң. Һәр кем рипурт биреп торың.

Һүҙ ҡуйыштылар. Әмер алдылар: көс йыйырға, тупланырға!

Ауылдағы башҡорттар, заводтағы крәҫтиәндәр, эшселәр. Мишәрҙәр, типтәрҙәр. Һәммәһе, һәммәһе...

Һуңынан Салауат:

– Мин, атай, Михалсунды ҡаршылайым. Һин Һатҡыға бар. Ярҙам ит Белобородовҡа.

– Уға ни ярҙам? – тине атаһы.

– Минең дә асыу бар уға.

– Дөрөҫ, улым, ундайҙы онотоу яҡшы. Юғиһә, Гагринмы, Деколонгмы арттан килтереп бәрер.

Атаһы тәүҙә Һатҡы яҡтарына сапҡын ебәрҙе. Сапҡындары Бәкәтин иләүенә Баҙарғол Юнаевҡа, Кәҫле, Ҡыштым заводтарына хәбәр алып китте. Иртәгәһенә Юламан Ҡушаевтан, Өпәленән (Уфалей) өпәйҙәр сапҡыны килде.

Унан Юлай үҙе лә шул яҡҡа китте.

Юлайҙың шул яҡҡа указы таралды. Ә Салауат бында, ат еткәненә ат саптырып, бойороҡ-ярлыҡтар ебәрҙе.

Халыҡ йырлағанса, Салауаттың яҙған фармандары яугирҙар күңеленә бер төрлө, дошман йөрәгенә икенсе төрлө ҡуҙ һалды.

Һөйләштеләр.

Улының дыуамаллығы ҙур булһа, атаһы ла үҙҙәре ябырылыу алдынан да, ҡаршы тараф һөжүменә атылғанда ла һис икеләнмәйенсә, тәүәккәл таш тотҡан, тип ынтыла, эш көрсөктә күренә, тиергә ярата.

– Эш көрсөктә күренә, – тине әле лә.

Һәр башҡорт азаматына таныш һүҙ. Боронғолар ҙа, һуғыш-алышҡа әҙерләнгәндә, шулай тигәндәр, әле лә шулай тиҙәр.

2

Воскресен заводында кәңәш-төңәш итеп, киләсәккә уй ҡорғанда, Әүжән яғына, тигәс, Пугачев Афанасий Соколовты иҫенә төшөрҙө. Былтыр уны шунда ебәргәс, шунда туптар яһатҡан, йәҙрәләр ҡойҙорған, Ырымбур янына күпме кеше алып килде. Әле һуң?.. О, хәҙер батша үҙе барасы! Икмәк-тоҙ менән ҡаршы алырҙар. Ҡул осонда йөрөтөрҙәр.

Ышанды! Заводҡа саҡлы бергә эйәреп килгән завод кешеләре, Матвеев бар. Береһе кәңәштә ултырҙы. Үҙҙәренә саҡыра.

Әле бына шул яҡҡа дәртләнеп бара.

Ара алыҫ. Юл өҙөгө. Тау араларында ҡар иреп бөтмәгән, йылғаларҙың ташҡыны ҡайтып етмәгән. Шулай ҙа барып була. Һыбай кешегә юл еңелерәк. Бында тыныс.

Мәләүездән, Стәрлетамаҡ яғынан был яҡҡа бик ынтыла һалмаҫтар. Шулай ҙа Кинйәкәүгә һуғылғансы уңғараҡ тартырға.

Алда – алғасҡы таптар,[1] ян-яҡта – атлы шәйләктәр, артта – артсы баш.

Бөтәһе лә – Кинйәнең ышаныслы кешеләре. Унын үҙенә еңелерәк. Хәҙер күп эште башҡа полковниктар, башҡа атамандар башҡара. Пугачевты Яйыҡ казактары уратып алған. Ә ул тирә-йүн менән бәйләнеш тота.

---

[1] *Һолло – һәләтле, булдыҡлы.*

[1] *Алғасҡы тап – алдан барған халыҡ төркөмө (отряд).*

Ул алдан кеше ебәреп, сапҡындары елә. Аттары елгер аяҡлы, ел етмәҫ. Баштарында – ҡыйыҡсалап, ҡолаҡтарын баҫтырып аҡ яулыҡ. Шунан уҡ беләләр, сапҡын йоҡоһоҙ, күҙҙәре ҡыҙарған. Һиҙгерҙәр. Һаҡсылар. Кемдеке булһын. Кинйә атамандыҡы. Бойороҡ-ярлыҡтар алып килә.

Ләкин һүлпәнлек. Ҡурҡыу көтөргә итәләр. Янына юлдан алыҫ булмаған Кинйәкәй, Юлдаш, Алдаҡай кешеләрен саҡыртты.

Хәйләләй Алдаҡай: "Барырбыҙ! Ҡыуып етербеҙ". Аралағы тәпәш буйлы, оҙон һаҡаллы Алдаҡай ҡарт күнмәҫкә итә.

Һәр береһенән берәр кеше алып ҡалды: "Иллешәр кеше килһен! Шунан ҡайтырһығыҙ".

Алдаҡай:

– Беҙ аманат булып ҡалабыҙмы?

– Шулай ҙа булһын, ти.

– Йә Өфө воевудаһы, йә Мәскәү ала торғайны.

Кинйә Пугачевҡа ҡараны.

– Батша ала. Сиреүҙәр килһен, башында булырмын. Әллә рази[1] түгелме?

– Ә мин... Мең йәнем менән риза. Ҡабул ҡылып алғанбыҙ. Эйе, мин, мин...– тип баш һелкә, һаҡалы һелкенә, ҡыҙыҡ ҡына. Үҙе бер ҡарыш, һаҡалы биш ҡарыш тигән кеүек. Күнде.

Бындай эш өсөн Байым сотникка, Байғужа муллаға, Көҫәпҡол старшинаға, Һайранға ла сапҡын ебәрҙе. Үҙҙәрен күргән яҡшы булыр ине. Һулдараҡ ҡалдылар.

Верхотурҙа йылғалар бергә ҡушыла. Урыҫтар шуға күрә Семитурье тиҙәр. Әле шул яҡҡа яңы сапҡындар китә торҙо, килгәндәре килеп ҡушыла торҙо.

Алдан ишетеп, Байғужа[2] бер төркөм менән улын ебәргән, Байым[3] үҙе алып килде, Көҫәпҡол Азатбаев менән Һайран Һәйетов старшина ла килеп ҡушылды.

– Йәмәлкә фарманын алғас та килдек, – тине Көҫәпҡол. Кинйә былай әйтеүҙе бик үк килештермәне:

– Һин!..

– Һәй... Беҙ уға садәҡәт[4] булыуға ант иткәнбеҙ... Әле ни, үҙебеҙсә.

Эй, башҡорт яугирҙары үҙ-ара һөйләшкәндә күптән инде уны Петр Салис, Петр Федрич тип тә, бадишам ағзам хәҙрәттәре, тип оҙон-оҙаҡ итеп әйтмәй. Ана шулай, әле Көҫәпҡол әйткәнсә, Йәмәлкә батша, тиҙәр, Бүгәсәү тиһәң ни, Петр тиһәң ни. Ә бит бағый тип, дәғи тип әйтмәйҙәр. Былай бик тә яҡын кеүек.

Хәйер, үҙ алдында булмаһа, урыҫтар ҙа күбеһенсә батюшка йә Емельян Иванович тиҙәр.

Көҫәпҡол байтаҡ кеше алып килгән. Ҙур алай. Аман алып ҡалғандарға ла килә.

Көс күҙгә күренеп ҙурая. Ай үҫәһен көн үҫкән батыр, тип кенә әйтерлек. Был бер батыр ғына түгел, оло сиреү, батша әрмеһе.

Кинйә лә, Петр батюшка үҙе лә шат.

Оло юл. Тауҙар, мөһабәт Ямантау. Ҡарлы тау әле. Ауылдар һирәк осрай. Әммә кешеһеҙ түгел. Хәбәр алдан таралған. Юлға сығып торалар. Батшаға бүләк. Аттар. Аҙыҡ-түлек.

Үректе үтеп, берсә тауҙар артылып, берсә үҙәндәр төшөп барғанда, Кинйәнең Аҡъял аты кешнәне, юҡҡа түгел. Кинйә һиҫкәнде. Уң яҡтан кемдер килә. Алпар. Уның Тумағы кешнәгән икән.

---

[1] *Рази (иҫкесә) – риза.*
[2] *Байғужа Хужамышев – Исәт провинцияһы Әйле олоҫо старшинаһы, б. к. отряд командиры.*
[3] *Байым Ҡыҙраев – Исәт провинцияһы Күбәләк олоҫо старшинаһы, б. к. полковнигы.*
[4] *Садә (фарс.) – эскерһеҙ, хәйләһеҙ, саф.*

Алпарҙың төҫө ҡасҡан. Шулай булмай ни, ҡатыныңды үлтерһендəр əле, шуны ерләп кил.

Ана, йоҙроғон ыуа.

– Ниңə ыуаһың?

– Бəләкəстəн ҡалған ҡылығым.

– Гел шулаймы?

– Юҡ... Һирəк.

Кинйə белə: бик ауыр саҡта ғына.

Кинйə ҡаршы алды. Алпар ҡатынын ерләгəн дə ашығып килгəн. Һорашманы Кинйə. Үлтерергə ебəргəн ҡартты нишлəткəндер. Буш итмəҫ.

Шул йылға буйынан үрлəгəн бит. Ен ташы кеүек ныҡса кеше Аҡҡалпағы арҡаһында күргəн мəкер хаҡына йəйлəүенə ғауға һалмай булмағандыр. Бик ҡайғырған, йонсоған. Йөҙө хəсрəт, яңағы яңаҡҡа батҡан. Шулай ҙа байтаҡ ҡына яугир эйəрткəн. Бөтəһендə лə ҡалъяны менəн ян, уҡтары менəн һаҙағы.

Береһе Алпарҙың үҙ янында. Үҙе ҡошсо булһа ла, уны ҡошсо иткəндер. Йəш.

– Яуға сыҡтыңмы? – Кинйə һорай.

Күкрəк кирҙе, һөңгөһөн күтəрə бирҙе.

– Эйе, яуға!.. Кəләште кейəүҙəй алмай яуға сыҡтым! – Үҙе ҡыҙарҙы..

– Кейəүлəрһең...

Ə Алпар донъяға асыулы. Өндəшмəй.

Бер аҙҙан Кинйə һораша.

– Миңə асыулымы, яуғамы?

– Мин – һепертке түгел!

– Һин – дан егет!

– Ул һеперə, аҙаҡ үҙе сүпкə сыға. Мине шулай итергə итте донъя.

– Теге Тайбулатмы?

Өндəшмəй. Шуға асыулы.

– Килгəнһең.

– Нишлəп. Килмəй ни. Һелəүһен дə килəм тигəйне, – уны Һелəүһен оҙатҡан икəн.

Алға барған һайын Кинйə төрлө яҡҡа ым таратты, яуға күтəрҙе. Уның ымдары буйынса ымталап йыйылдылар.

Ауылдар һирəк тə был тирəлə. Күкрəүек йылғаһы яҡын икəн. Шарлауыҡ тауышы ишетелə.

Алатау яҡыная бынан. Шуның бер тармағы итəгенəн сыға.

Тау үҙе күренə. Уның күккə олғашҡан түбəһенə томан һарылған. Ə күренə.

Мышылар үтə юл аша, ҡоралайҙар.

Ҡапыл ел иҫте. Ҡар һибелə. Ҡоралайҙар ҙа, тау түбəһе лə күренмəй. Көн боҙолдо. Юҡҡа ғына, сəүерҙə[1] көн ете тапҡыр, тип əйтмəйҙəр бит. Бигерəк тə тауҙар араһында.

Əле тын, иҫлəмəй ҙə ҡалаһың – ямғыр. Ҡар ҙа ҡатыш булып ҡуя.

Кеше яҙмышы ла шулай. Ана бит, Аҡҡалпаҡ, ире артынан ҡалмайым, тине. Ҡалды.

Көн тиҙ яҡшыра. Тағы балҡып ҡояш сығыр. Ана, ел тынды, ҡояш балҡыны. Тау битлəүҙəре һап-һары сəскə. Үгəй инə сəскəлəре. Тағы ҡоралай. Ҡоштар. Ҡыҙыл түштəр, милəш барҡылдаҡтары. Бер-береһенə тауыш бирə.

Ҡорҙар, һуйырҙар уйнап гөрөлдəй.

---

[1] *Сəүер – апрелгə тура килə, Ҡояш календары буйынса икенсе айҙың ғəрəпсə аталышы.*

Бөтәһе яңырҙы.

Ә Алпар? Кинйә уға ҡарай. Ул да тынысланды, ахыры, ағас баштарына ҡарай.

— Ҡоштар күҙәтәһеңме?

— Эйе... Тумыртҡа оялары.

Быныһы ла бала саҡтан ҡалған, йәнәһе, тимер үләнен таба, йоҙаҡтар аса, бер тотоу менән бығауҙарҙы һала.

Кинйә көлөмһөрәп ҡуйҙы. Кәрәкмәй, ул уғры түгел, иншалла, арестан түгел, аяҡ-ҡул буш, иректә. Быныһы ла — ҡандан юйылмаҫ булып һаҡланған ҡылыҡ.

***

Пугачев ҡарап-ҡарап килде.

Бына ул Әүжән. Текмә (йыуан ағастан эшләнгән ҡойма) булып тора. Былтыр көҙ үк унын яғына сыҡты. Эргәһендә — ошо завод кешеһе Павел Матвеев. Хәҙер унын сотнигы. Һөйләп, күрһәтеп килә.

Эйе, башта — Ҡарғалы яғы рудниктары, унан — Воскресен заводы, Вознесен. Октябрҙә унын полковнигы Афанасий Соколов ошонда йөрөнө...

Приписной крәҫтиән Павел Матвеевты ҡаршы алып, Анисим Тюрин[1] сыға.

— Ауылға яҡын, — тине Матвеев.

Эйе, өйөлгән утындар күренә. Ҡаҙығандар, ниҙер эшләйҙәр.

Урман аҡландарында быунауҙар күренә. Урманын ҡырҡып, төптәрен төпләп ҡаҙығандар, һөргәндәр. Баҫыу кәртәле. Быунауҙар шунһыҙ булмай.

Әле лә икмәк-тоҙ. Унан да бирерҙәр. Батша үҙе бит. Поп та бар... Ләкин әле ҡунаҡ та, батюшка ла бүтән.

Пугачев үҙен тота белә. Ни өсөн ул батша? Батша булғас, күҙҙәрең уйнап торһон, һынынды тура тот.

Завод кешеләре, крәҫтиәндәр урамға һибелде. Яҙ. Шатлыҡ. Ялбыр ыштан, оҙон киндер күлдәк. Сабата, ыштыр. Яланбаш, сәстәрен маңлайҙа таҫма менән бәйләгәндәр. Йә ҡатҡан һәләмә бүрек. Йыртыҡ, иҫке кейемлеләр. Һаҡал-мыйыҡ етеүле.

Арала приказчик һерәйә. Сюртук кейгән, арты йырыҡ парик. Улары аҙ.

Халыҡ менән осрашыу. Крәҫтиәндәрҙең былтыр Хлопуша менән осрашыуы булған, ул батша манифесын уҡығайны: “Исправьте вы мне, велению государевою, два мортила с бомбами и скорым поспешением ко мне представьте.”

Шунда уҡ халыҡ йыйылды. Һөйләшеү. Поп та, ғибәҙәт тә, тәхет тә табылды. Тағы манифест.

Манифесты батшаға һуҙалар. Ул алырға тейеш. Юғиһә, үҙ фарманынды үҙ ҡулың менән бирмәгәс, һин ниндәй анпиратор ул. Ышанмаҫтар, йәнәһе. Алды, уҡыған һымаҡ. Ләкин ул аҫтын өҫкә, баштүбән итеп, уҡый белмәүенә иғтибар итмәҫтәр. Эргәһендәге Иван Творогов йылмайҙы. Белмәй, йәнәһе. Пугачев уҡырға бирҙе.

Пугачев казаклыҡҡа. Кем Петр Федорович батша яҡлы — ул казак була, сәсен киҫәләр, ҡулына ниндәй ҙә булһа ҡорал ала. Эйе, ул һалдат түгел, казак берәй сама башлыҡ итеп һайланһа, атаман була.

Атаман — Анисим Тюрин, походный сотник — Павел Матвеев.

Кинйә элек күргәнгә ҡарағанда ауыл ярайһы уҡ ҙурайған. Яңы крәҫтиәндәр килтергәндәрҙер. Бындағы йәштәр ҙә үҫә тора. Яңы йорттар һалына.

Уралдағы заводтар бер типта. Ҙур, ябыҡ быуа. Һыу күп. Кәрәк саҡта ғына һыу үтә. Артығын ғына ағыҙалар. Мастерскойҙар, сиркәүһеҙ булмай. Күпселегендә,

---

[1] *Тюрин Анисим Андреевич — б. к. полковнигы.*

берəй изгегə арнап, шуның исеме бирелə. Контора. Казарма. Складтар. Йəшəүселəр биҫтəһе. Урам.

Йорт-өйгə аҙбар-ҡураһы төкəтеп һалынған, келəт теҙелгəн. Буш урыны — имəн бүрəнəле ҡойма. Ҙур ҡапҡа. Урыҫ ҡапҡаһы, тиҙəр. Эскə инеп биклəнһə, инермен тимə. Уға күрше йорттар, арттағы урамдар — бөтə урамы менəн бер тоташ крепость, үҙенə күрə бер ҡатау.

Етмəһə, ауыл, завод текмə ҡойма — имəн бүрəнəлəр эсендə.

Бер бында ғына түгел. Ҡаны-Никүлдə лə, Табын менəн Богоявленда ла, Воскресенда ла, шулай бөтə заводтар. Стəрлетамаҡ янында Либəшəү йорттары шулай.

Кеше ҡара йоғоноуҙан, ҡасҡындар тейеүҙəн һағаялыр. Яуҙар ҙа булғылап тора бит.

Шулай ҙа татыу. Эшселəр, мастеровойҙар сығып йөрөй. Урманға, тауға. Йылғаға ла.

Тирə-яҡта рудниктар, күмер үртəү мейестəре.

Үрге Əүжəн. Түбəнге Əүжəн. Ҡағыла — молотовой (4 молот).

Ҡотҡор йылғаһында — Ҡотҡор заводы (русса — Кухтур).

Урынлаштырыу. Штаб өсөн — контора, Пугачевҡа — эргəлəге приказчик өйө.

Икеһе бер типта, башҡаларҙан айырым. Түбəһе буранан сығарып эшлəнгəн, бағаналар ғына тора. Быларҙы элегерəкке завод хужаһы Шувалов һалдырған. Ундайҙар Ҡазанда ла, көньяҡта ла бар. Ундайҙы айван тиҙəр.

Бында терраса тиҙəр. Пугачев шунда.

Баш-күҙ алынды. Тирə-яҡтан кешелəр ағыла. Рудниктар. Юнай, Юлдаш, Ҡаһарман ауылынан Ҡағыға килгəн юлда, Ҡотҡор һыуы буйында суйын ҡойоу заводы бар. Былтыр уға, Пугачевҡа, унда туп ҡойғандар. Ҡотҡор заводы алыҫ түгел. Яҡын ғына, Иҙелбаш юлында, Ҡағы.

— Бай урын, тиҙəр.

— Эйе, аяҡ аҫтында ни саҡлы тимер, баҡыр. Ə улар шуны күрмəй, тапап йөрөгəндəр, ҡоралһыҙ йəшəйҙəр, — əҙерəк семетеп алырға булды.

Матвеев, Анисим көлөп ҡуйҙылар. Улар таныш.

— Улар ҡулындамы? Белерҙəр ине.

Кинйə:

— Уны белəбеҙ ҙə...

Шулай ул... Халыҡ, тимер тапҡан — тилмермəгəн, ти. Тапҡандар. Борон-борондан.

Был яҡтарҙа бөтə аяҡ аҫты хазина. Ҡайҙа барһаң — унда байлыҡ.

Шул хазиналар хаҡында риүəйəттəр күп. Кем менəн һөйлəшһəң, шул һиңə хазиналар хаҡында үҙенə күрə бер əкиəт һөйлəп ала.

Имештер, Изгелек аллаһы Аҡтора, кешелəр лəззəтлəнер тип, ундай хазинаны бик туплаған (таярлаған). Ə инде бер ваҡыт уның фатихаһы менəн Тауҙар эйəһе Урал батыр уны кешелəр ҡулдарына бирə башлағас, ер ҡуйынында тороусы Яуызлыҡ аллаһы Ҡаратораның асыуы ҡупҡан, Йəншишмə һыуын кешелəр эсһен тип, ҙур, тəрəн йылғалар итеп ағыҙҙы, хəҙер хазинаны тарата тип, зил-зилə ҡуптарып, ер ҡуйынын пыр туҙҙырып тараҡҡан, таштар, ҡомдар араһын бутаған да Ер аҫты эйəһе генə булып ҡалған. Ер аҫтында мəңгелек йоҡоға талған Шүлгəнгə шуларҙы һаҡларға ҡушҡан.

Бындай рийəүəтте башҡорто башҡортса, урыҫы урыҫса һөйлəй. Əммə барыбер бер төрлө.

Ə əҙəми зат барыбер эҙлəй, таба...

Тапҡан ерендə ҡағылар — тəрəн баҙҙар ҡаҙый, мəғдəн сығара.

Бына улар Әүжән (Әүйән) һыуы буйында, Ҡотҡор, Төкәндә, Тирләндә, Иҙелбашта, Атас тауында... Бөтә Урал...

Твердышевҡа шлагын, руда карьерын күрһәткәндәр. Ана, Магнит, тиҙәр, Атас тауы. Бына эргәлә, Ҡағы буйында, Никольский. Ҡағы руда ҡағый торған тәрән баҙҙы башҡорттар борондан күрһәтә. Ул ғынамы?..

Исмәғил Тасимдар, Туҡтамыш Ишбулатов, тип һөйләр ине Кинйә. Уфалей—Илашлы йылғалары араһында Өпәле башҡорттарында Курабатор Балсаров менән Кескенәй Ҡорманаевтар алтын тапҡандар, тип әйтер ине. Юҡ, ваҡыты ул түгел. Унан, аңламаҫтар. Ана бит, башҡорт еренең дүрт юлына Анна Иоанновна фарманы менән бер даруғаға бер тимерлек кенә икәнен дә иҫләмәйҙәр.

Нимә аңлатһын Кинйә? Шулай ҙа бына ошо Әүжән йылғаһы буйындағы хаҡында:

— Кем тапҡан? — тип һораны.

Белмәйҙәр ҙәһә!

Бына ошонон ҡушылдығы Бағарышта — тимер рудаһы ятҡылығы. Уны кем таба? Ошондағы Тамъян олоҫо Мәсәғүт ауылы кешеһе ул рудникта — Оло Шатаҡ, Юрматау итәктәрендә — Мәсәғүт Малаев.

Ауыҙҙарын асып тыңлайҙар.

— Бына бит...

Ошондағы Этекәй ауылы кешеһе Соҡо Ҡушымбәтовты әйтмәһенме! Ошо йылдарҙа ғына бит әле был. Ә элек...

***

Завод ҡайғыһы. Крәҫтиән депутацияһы. Ялыуҙар күп.

Йылдың-йылына көрәш. Йыйылып килгән шеш ярылған кеүек.

Был ике заводты ла граф Шувалов төҙөтә. Үргеһен — 1755 йылда, йәренгәһенә Түбәнгеһен һалғайны.

Суйын иреттеләр. Иҙелгә ташып, баркаларҙа Камаға табан ағыҙалар. Былары етмәһә, Ҡағыла тимер сүкеү бар. Дүрт сүкешле Кухтур заводы эшләй.

Крәҫтиәндәр килде, килгәндәр яфа сикте, ҡырыла торҙо. Ә завод 1760 йылда Евдоким Демидовҡа күсте.

Ҡасҡан йә ҡырылған крәҫтиәндәр урынына ул Кама буйы Мамадыш өйәҙенән яңы крәҫтиәндәр ҡыуып килтерҙе. Бында бигерәк эш йонсота. Йәшәү шарттары юҡ, яңынан-яңы һалымдар өҫтәлә. Күп тә үтмәне, ҡыуып килтергән крәҫтиәндәр бола күтәрҙе, уларға завод кешеләре, мастеровойҙар ҡушылды. Завод ҡорамалдары янды, приказчиктар туҡмалды.

Яу көсәйҙе, карат отрядтар килде. Ҡамсы аҫтында тағы руда ҡаҙынылар, урман ҡырҡтылар, күмер яндырҙылар. Ағиҙелдән баркалар аҡты.

Ә халыҡтың үҙ батшаһы пәйҙә булғас, эш тағы туҡталды.

Депутация ни әйтә? Халыҡ күтәрелгән, ирек алғандар. Йә ҡайтһындар, йә бында ҡасһындар.

Юҡ, берәүҙәре казакка яҙыла. Сәс киҫеү, ҡорал алыу.

Бер полк — 400 кеше, башлығы — атаман Анисим Тюрин, походный атаманы — сотник Матвеев.

Ә ҡалғандар ауылдарына ҡайтырға уҡтала. Ғаиләләре менән китерҙәр, малдарын ҡыуырҙар.

— Заводтарҙы яндырырға рөхсәт ит, — тиҙәр.

Заводты яратмайҙар. Хужалары асыу ҡабартҡан.

— Яндырмағыҙ. Завод — матушка Рустең ҡеүәте.

— Демидовҡа ҡала ул. Үҙебеҙ тапҡан тимерҙән беҙҙең аяҡ-ҡулға бығау сүкерҙәр.

– Юҡ, ул тимерҙән миңә туп, йәҙрә эшләгеҙ, – тине Пугачев.

Кис. Батшаға йоҡо кәрәк. Йылы өй. Йомшаҡ яҫтыҡ.

Бер йәш ҡатынға Пугачев күҙ ҡыҫты. Дөрөҫ, ниндәй батша яңғыҙ йоҡлап ятһын, ти.

3

Кинйә йөҙөнән. Күрән ҡорҙо, урҙа[1] ҡоролдо. Башҡорттарҙы айырым урынлаштырыу. Туплау кәрәк, сиреү хәл алһын, яу алымдарын өйрәнһен. Ҡарыулы[2] сиреү булыр.

Шуларҙы ҡарарға сығып киттеләр. Бер нисә иптәше менән.

– Күс ярағын байҡайыҡ!

Кинйә ҡарап ала. Әүжән һыуы Иҙелгә ҡоя. Унда ла, һулда ла – тауҙар, ҡаялар.

Иртә менән. Тау сусаҡтарын томан һарыған. Баш өҫтөндә бөркөт саңҡый.

Түбәндә, Ағиҙелгә ҡойған урында, киң туғай. Әүәлге Ҡарағай-Тамъян йәйләүҙәре.

Заводтар, урман. Дегет ҡайнатыу баҙҙары.

Ҡасандыр тирмәләр торғандыр, мал биҙрәгән ерҙәр булғандыр. Ә белгәндә был, бәлки, – ғүмер-ғүмергә сиреү тупланған урындыр.

Исеме юҡҡа ғына шул түгел, тиҙәр ҡайһы бер ҡарттар. Йәнәһе Әү – тауыш тигән һүҙ. Әллә ҡайҙан әллә ҡайҙарға тауыш-ым биреп йыйылыу урыны, туҡтап ат ашатып, көс алыу тирәһе, тиҙәр. Ошонда "Әү"ҙә йыйылып, барымтасылар Әбйәлилгә еткәндәр. Ә ул Таңатыр тиелгән элек, юлаусылар шунда еткәнсе таң атҡан, барымтаға ташланғандар, имеш. Был тауҙа бер заман ҙур яу ятҡан. Эйе, Кинйә үҫмер саҡта үҙе күрҙе.

1739 йылда генерал-майор Соймонов яу баҫтырыуға лагерь ҡороп ятты. Күпме ҡан аҡты, күпме кеше йәне ҡыйылды. Анау ҡаяларҙағы пуля эҙҙәре лә ут даръяһында ҡалған ерҙәр бит инде.

Кинйә:

– Бына хәҙер Екатерина Саниянан нарази булған халайыҡтар тупланды, – ти.

Ниҙәр юҡ бында. Ҡыуғын, һалдар. 1756 йылдан һуң бүрәнә һалдан яһап, суйын тейәлгән баркастар аға.

Ярға яҡын ғына килеп туҡтай Кинйә.

Арғы яҡтан – бер төркөм. Алда – берәүһе, артта – унлап. Ҡорал-яраҡлы.

Ҡумыр әҙәм.

Кем ошо йәштә...

– Кинйә ағай, таныйһыңмы?

Өндәшмәй батыр.

– Беҙ әрмегә киткән саҡта...

Кинйә сырамытты. Күп йылдар үтһә лә... Ә... Арҙаҡай. Күңелсәк яугиры.

– Ай, минең оло яу ҡорҙашым!

– Эйе, онотмағанһың, Кинйә абыҙ!

– Донъяла бармы?

– Бар.

– Әле лә ҡылысың ҡайрайһыңмы?

– Алмандар[3] һуғышынан ҡайтҡан саҡта ҡайраным инде.

– Йырлайһыңмы?

– Кәрәк саҡта.

Йырлатырға ине... Эйе, тик һуңыраҡ. Һорашты. Бында Бөрйән старшинаһы Йәнсәйет ебәргән.

---

[1] *Урҙа – ғәскәре менән батша торған урын.*
[2] *Ҡарыу – яуап (көс менән) (автор һүҙлегенән).*
[3] *Алман (ғәр.) – немец.*

— Ғәскәрең самалы, — тине Арҙаҡай.

Кинйә әйләнеп ҡарай.

— Ғәскәрме? Күп ул. Беҙҙең алайҙар бар.

Тегендә Йәнсәйет[1] старшинала бер алай — бөрйәндәр. Ул көҙҙән бирле Ҡыҙыл, Йылайыр ҡәлғәләре янында һуғышҡан. Ышаныслы.

Ҡотҡор. Үҙән буйында. Бынан 7 саҡрым. Ул заводты былар алған. Фарман көтә.

Унынһы бер... Әсирҙәре бар, имеш. Ҡыйралдыҡ, тип ҡотҡо тарата. Ә үҙе, батшаны тотоп илтәм, ти икән. Ҡайҙа ҡуйырға, тип указ алырға йөрөй.

1) Башлығы Кейек. Моҡот әҙәм (тугоумый). Туҙынмаҡ була. Яманһары улы Кейектең эҙенә төшөргән. Күҙләмәй осҡон ҡош ҡуныр урын тапмай бит.

Бағыйҙар сиреүен ҡыйратам, ти. Ҡара батшаның үҙен тотам, ти.

2) Ҡасҡын Һамаров былай табан килә, шул хәбәр иткән, былар тотҡан икән.

Арҙаҡай. Кейекте килтергәс, әле туҙына, әйтерһең, бер Ҡатил ҡаһарман.

Кинйә:

— Юлда ҡаршылашманымы?

Арҙаҡай:

— Һә, булмаймы?..

*Аждаһалай күҙе аҡайған,*
*Шүрәлеләй ҡул шайшайған,*
*Мәсекәйҙәй күҙе уттай,*
*Бисуралай быуыны шыртлай.*

Юлдаш Ҡотлин. Кинйәнең әсә яғы. Ул да һораша, указ һорай.

Кинйә ашыға:

— Әйҙә, эргәнән атла. Һөйлә.

— Көҙ көнө Ступишин йыйҙы, Йәмәлкәгә ҡаршы, мин шунда йырланым инде. Беҙ таралдыҡ. Әле йортауай ҡуҙғалмай, мин тағы йырланым. Теге асыулана, йырланым да көлләһөн әйҙәп алып киттем. Йортауай... арттан үҙе эйәрҙе.

Кинйә уйлай: Арҙаҡай эшеме, әллә халыҡтың күҙе асылдымы? Элек бит йортауай ҡайҙа ҡуша, шунда көтөү булып эйәрәләр ине. Әле һуң үҙе, ялҡау көтөүсе һымаҡ, артта. Ә Арҙаҡай? Хәҙер бигерәк тә батыр. Пруссия түгел. Кинйә унын нәҫелен белә. Бөтә нәҫеле ошо көндө көткән. Атаһы яуҙа үлгән, олатаһын аҫҡандар, гел көткән. Ә был етем-еһер үҫкән.

Бөтәһен йыйырға. Ошо урынға. Иртән хәбәр ебәрә. Иртәгә үк. Киске тамаҡҡа ашағас, сыҡты. Тирмә типһене. Томан, һалҡынса, ҡоштар...

Кинйә ниңәлер теге егетте ебәрергә уйлай, үҙ яғына.

— Кейәүләй алмай киттем, тигәйне.

Ете-ят кешеләр тупланып, гөрләшеп ултыралар. Бер урында ут ялпылдай. Киске томан. Бара шунда. Һаман тиктормаҫ ҡумыр кеше Арҙаҡай менән һөйләшеп ала. Тағы “Беҙ әрмегә киткән саҡтамы? Урал... Унын ташына ҡорал ҡайраймы? Юҡ, Урал йәншишмә һыуы бөркә”.

Теге егетте табып бирә Арҙаҡай. Шуны ебәрә сапҡын итеп.

— Бына... имен-аман.

Теге икеләнә:

— Бөгөн бар ҙа ул...

Арҙаҡай:

— Тьфу, тьфу... — Тегеңә ҡарай. — Үҙең төкөрмәнең.

— Сабын сығыр, тиҙәр. Ә бында — үлһәң...

[1] *Төрөкмән Йәнсәйетов.*

Кинйә тьфуламаһа ла, уны бөгөн, “бар саҡта” кейәүләп килһен тип, сапҡын итеп ебәрә.

Шул көндө Пугачев килде. Әүжәндә башҡорт күрәнен ҡарарға. Бына бит, күрән ҡорғандар. Уҡ аталар. Мылтыҡтан да. Әйҙә, өйрәнһендәр. Сирткескә[1] баҫырға, мәрәйлеккә[2] ҡарарға өйрәнһендәр, ти.

Пугачев ҡарай – мылтыҡтар аҙ. Саҡсаһында (патронташ) рожок бар. Әллә дары бар, әллә юҡ. Пугачев сирткескә нисек баҫырға, мәрәйгә[3] нисек төҙәргә өйрәтте.

Пугачев:

– Мылтыҡ... Туп оҫталығы етмәй.

Кинйә:

– Уны быуаттар буйы өйрәткәндәр. Ә беҙ яңы тотондоҡ. Беҙ ҙә өйрәнербеҙ.

Пугачев уйланып тора.

– Көс туплайбыҙ, өйрәтәбеҙ – бөтә тора.

Кинйә:

– Катеринаның көсө лә кәмей тора. Беҙ тағы табырбыҙ. Халыҡ беҙҙең яҡта.

Арттараҡ тауыш ярпыһы ишетелә. Ике – уртала урыҫтар, башҡорттар. Каноникол заводы ебәргән төркөм.

Ошонда бәхәсләшеп ултыралар. Башҡорт:

– Иҙелбашты алабыҙмы?

– Юҡтыр... Тирләнгә, Салауатҡа табан барабыҙ.

– Юҡ, Иҙелбашҡа.

– Кем шулай ти?

– Кинйә атаман.

– Ә... ул әйтһә инде.

Пугачев көлөп ҡуйҙы. Унын артабан барыр теләге булды.

– Кис мәжлескә ин. Хәбәр итәйек.

Кинйә:

– Йә, кем елдерә?

Ике башҡорт кемуҙарҙан:

– Мин!– тиҙәр

Төрткөләшеп алдылар.

Пугачев:

– Йә, ни булды? Ҡыйын тиһәләр, шыбаға тотһондар. – Бер һөңгө алып бирҙе. Юҡ, икеһе лә атылып тора.

– Молодцы!

Бергә киттеләр.

Григорий Туманов килгән. Үҙе килеп етте.

– Бына шәп!

– Белобородовҡа ла хәбәр яҙ, үҙ полкы менән килһен!

Туманов әҙер. Ҡайҙа, тип һорамай. Улай тип яҙмайҙар. Әмер алғас, белер. Батша юлын белеү генә түгел, тын алыуын да белергә тейештәр.

– Һин Салауатҡа ла яҙ.

Кинйә:

– Батша, ул шунда торһа яҡшы булыр.

– Эйе, унда Михельсон ажарлана.

Пугачев, Кинйә Ағиҙел яры буйына сығалар.

---

[1] *Сирткес – курок (автор һүҙлегенән).*
[2] *Мәрәйлек – прицел (автор һүҙлегенән).*
[3] *Мәрәй – мишень.*

Башҡорттар балыҡ тота. Кистән мурҙа үреп һалғандар икән.

— Эләккәнме?

— Бына бар ҙа. Йәйен генә.

Башҡорттар йәйенде яратып ашамай. Ах, үҙе өйҙә саҡ булһамы?

Әлбиттә... Унда ҡалын тиреһен һыҙырыр, киреп киптерер ҙә тәҙрәһенә ҡағыр ине. Ҡарындыҡтан яҡтыраҡ була ул йәйен тиреһе.

Ә тегеһенә елле суртан төшкән. Уны бөтөнләй алмайҙар. Ул әүәл, мосолман булғанға саҡлы — изге балыҡ, тора балыҡ (маңлайында тора — тәре һөйәге бар) һаналған.

Кинйә:

— Илтеп бир, ҡыҙҙырығыҙ, батшаны һыйларбыҙ,— тип ҡуша.

Әлибай менән Ҡасҡын килә. Кинйә шат. Ике дуҫы бар. Яманһары ише түгел былар.

Әлибай Ҡасҡын менән быға тиклем һөйләшкәйнеләр.

Әлибай:

— Кинйә киттеме?

Ҡасҡын:

— Китмәй тиме ни?

— Һин дә бараһыңмы?

— Бармай тиме ни?

Әлибай уйланып тора.

— Бергә барабыҙмы?

— Бармай тиме ни?

Әлибай яҡшатлы[1]. Үҙе Ҡасҡынға килгән. Әйҙә, беҙ ҙә, тигән, имеш. Ә Ҡасҡындан белешергә килгән. Нисек булмаһын, ярай.

Бында ла Ҡасҡын тиҫкәре һөйләшә.

— Кейекте...

— Бында ул. Һин ниңә тегендә ҡалманың?

Хәлде әйтә. “Һинең иләүең дә, Көнгәк терһәге лә тыныс”.

— Тамъяндың Ҡотош ауылында булдым, Түләктә — ҡараттар. Мәләүездә барбарын. Шунда бикләнеп ята. Мин, урап, Йомағужаға, Һәйеткә барҙым. Юрматы Ҡанбулаты ла тыныс.

— Унда — Һеләүһен.

— Атаһы ҡуҙғалмаҫмы? Ул да, аманат тип, Һеләүһенгә тотонор.

— Юҡ, белә ул... Ә Һеләүһен үҙе килдеме?

— Килде, ти...

Йыйын башланыр көндө теге егет (кейәү) килде.

— Рәхмәт, атаман... Онотмауың — бүләк...

— Бүләк заманы түгел.

— Тап бүләк тә күстәнәс заманы. Туй “күстәнәсе”... бер алай сиреү.

Кинйә һораша.

— Кенәз Щербатов[2] ставкаһын Ырымбурға күсергән икән.

Кинйә бер старшинаны алмаштыра.

Теге:

— Дөрөҫ түгел. Бында ырыуҙың бөтә кешеһе юҡ. Аҡһаҡалдар илдә.

— Һуғыш ваҡыты. Йыйын уҙғарып тороу кәрәге юҡ. Хат яҙып, аҡһаҡалдар мәслихәтен алырмын. Ә хәҙергә башҡа йортауайҙар ни тиер.

— Мәслихәт!

---

[1] *Яҡшатлы — яҡшы, һәйбәт кеше булып һаналған.*

[2] *Щербатов Федор Федорович — кенәз, генерал-поручик, хөкүмәт ғәскәрҙәренең командалаусыһы.*

Йыйын. Күп ерҙән килгәндәр. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә. Ни саҡлы сиреү, ни саҡлы йортауай. Юҡҡа ғына, ҡом йыйылып, таш булмаҫ, тимәйҙәр.

Тәүҙә таҙартырға халыҡты. Кемдәр килгән, кемдәр килмәгән.

Муллаҡай... Нимә тиҙәр?

Бүгәс ҡасҡы, тиҙәр инде.

— Хәҙер бер ҡәлғәне лә итәғәт иттерә алмаҫ, — тигән Муллаҡай.

— Табиғ булып хата ҡылдыҡ,— тигән.— Бағиҙар араһында низағ башланды, ти.

Кинйә:

— Күрҙегеҙме, ниндәй низағ. Көс көрсөктә күренә.

Бойороҡ-ярлыҡтар.

Бында береһе. Кейек. Килтереп баҫтыра.

— Һин дәғи![1] — ти Кейек[2] Пугачевҡа.

— Тешләшмә! —ти Кинйә. — Һин йортауай түгел. Бына йыйын, бына батша. Тағы ни кәрәк?

— Батшаң ялған!

— Тешләшмә! Был һүҙең өсөн батша аҫа!

Кейек һиҙә. Язаһы ҡаты булыр.

— Үҙегеҙ хөкөм итегеҙ. Күнәм.

Ҡоролтай тип уйлағандар ине. Унығы шулай. Кинйә, әмер биреп, әсир Кейекте баҫтырҙы. Кинйә тоҡанып китте.

— Бына Яманһары, яман күрең!

— Их, Кейек! Хилаф юлдаһың икән. Яманлыҡ менән ил гиҙерһең, әммә кире ҡайта алмаҫһың.

— Яза, яза!

Уға теймәнеләр.

— Юҡ, башҡорт ҡаны күп аҡты. Үҙ выжданы, үҙе ҡайтһын. Кешеләре бында ҡалыр.

Кинйә уҫал, әммә ғәфү итә лә белә: Яманһаровты ҡайтарып ебәрә. Бер кеше бирә, ҡалғаны — Арҙаҡайға.

Шунан йыйын ҡоролтай төҫө алды.

— Бадишам хәҙрәттәренә садыҡ булыуға ант итеүҙән башлайбыҙ.

— Мең йәнебеҙ менән ризабыҙ, — тиҙәр.

Шартты килтереп, ҡоролтайға оҡшай. Хатта уйын. Уйын... Ул туплау үҙенә күрә маневр ине. Туплап ебәрҙе.

— Ҡасып бармайбыҙ.

— Көҫәпҡол Стәрле юлын тотһон.

— Ҡасҡын — Бөгөлсән тирәһен.

— Юлдаш Ҡотлинға — Ашҡаҙар буйы.

Ә башҡалар бергә китергә.

Кинйә күптәрҙе килтертте.

Йәнсәйет старшина — Бөрйән.

— Һин Иҙелбашҡа юл яр.

4

Әллә ниндәй көн булды был.

Үҙе яҙ... Тик ниңәлер күңелһеҙ. Ҡояш һирәк-мирәк күренгән була ла ҡуйыраҡ болот араһына йәшеренә.

Үҙе байрам. Үҙе...

---

[1] *Дәғи — самозванец (автор һүҙлегенән).*

[2] *Кейекбай Яманһаров — Ноғай даруғаһы Һыуын-Ҡыпсаҡ олоҫо поход старшинаһы, Яманһары Яппаровтың улы.*

Бөтә Әүжән (Әүйән) Пасха аҙнаһын байрам итә. Биҙәнеп-яһанып сыҡҡандар. Ашап-эсеп, һыйланып сыҡҡандар. Гөрләйҙәр, йырлайҙар, урамда йыйылып бейейҙәр. Ә нисек булһын? Батша уларға килгән бит. Үҙ батшалары.

Тик батша Емельян Пугачевтың ғына күңеле ниңәлер болоҡһоу. Ул бында бөтә Пасха аҙнаһын байрам итергә булғайны.

Сиркәүҙә уға үҙ алдында ғибәҙәт ҡылып, оҙаҡ йылдар, оҙон ғүмер теләнеләр. Һый-хөрмәт. Йомортҡалар бешереп, төрлө төҫкә буянылар. Тағы ни кәрәк? Халыҡ уны яҡлай. Көс туплана. Таралған кешеләр йыйыла, башҡорттар төрлө яҡтан төркөм-төркөм ағылды.

Ул үҙенең атамандарын, байрам итегеҙ, тип таратты. Үҙе поп Агафон менән тороп ҡалды. Ишек төбөндә, тыш ҡапҡала һаҡсы-дежурҙар бар, әлбиттә. Күрше бүлмәлә лә ординарец итеп билдәләнгән казактар инеп-сығып йөрөй.

Ә ул ниҙер уйлана. Поптың һөйләнеүенә теләр-теләмәҫ ҡушыла.

Батюшка Агафон тәү көн ҡаршы алғандан бирле Пугачев янынан китмәй тиерлек. Йәнәһе, бында батша менән һөйләшерлек уның ише телгә оҫта кеше бармы? Әлбиттә, ул... Алдында бишкә бөгөлөп, тирәһендә бөтөрөлә.

Быйыл бүтән, яңынан тыуған кеүек. Былтыр көҙ көнө Соколов-Хлопуша килгәндә, ул Петр Өсөнсөнөң иҫән булыуы хаҡында приказчиктар һүҙен һөйләп, тәү башлап Агафон шиге ҡалды. “Отслужил молебен за чудесное спасение царя”. Приказчик-конторщиктың – Осипов[1] ҡулдарына сынйыр һалдылар. Ә поп, тыңлағыҙ әле, тип өгөтләгән булып, түрәләр яҙған указды уҡырға маташты, крәҫтиәндәр уны бәргеләп ташланы. Һабағын ныҡ уҡытҡандар, күрәһең. Быйыл ал да гөл.

Әле:

— Яҙ иртә килде, — ти.

Ә Пугач әйтә:

— Травник (май) килһә, яҡшы була ул, — миҙгелдәрҙе дәғи поптан насар белмәй. Агафон быны һиҙҙе.

— Бына червень (июнь) етә. Гүзәл ваҡыт. Бөтә болон сәскә, бөтә йән эйәһе, бөтә күбәләктәр...

— Ну и что, — Пугачев ғәмһеҙ.

— Һеҙҙең шул мөғжизә менән ҡотолған ай.

“Ә, бына ҡайҙа бөгә”, — Пугач йәнләнеп киткән кеүексе.

— Мине Христос ҡотҡарҙы. Элек тә, әле лә капитан Масловты ебәрҙе. Кәрәккәндә ярҙамынан ташламай, — быныһын ишеткәйне “батша”.

— Һиңә бөтә халыҡ, бөтә христиан эйәрә.

Пугачев асыулы ҡараш ташлай.

— Лығырҙама... Миңә епископтар, архимандриттар бәддоға ла уҡый. Диндән яҙған, тиҙәр. Сиркәүҙән ситләтәбеҙ, тиҙәр. Мин әле уларға...

Агафон ҡалтыранды. Былтырғы хәлде еткерһәләр?..

— Юҡ, диндән яҙған, тиергә.. Ул бит Екатерина Алексеевнаның манифестарында ғына... Ул ни шулай өгөт яҙыр, әлбиттә.

— Һәй, яуыз Катька әйтер, яҙыр... Миңә хат ебәрә. Вәғәҙә итә. Ҡайт, бергә торорбоҙ, тип. Ә ул саксонка янында алмашынып тора. Гришка ла, Потемкин да. Эйе, беләм: ышана буламы? Болотников ише итер.

Болотниковты поп та белә.

Ул Болотниковты, 160 йылдар элек, ошондай ҙур яуы еңелгәс, алдатып килтергәндәр, күҙҙәрен соҡоп, һыуға батырғандар.

Эйе. Поп үҙе белгәнен сурыта.

— Яко же Ирода, — тип башланы, — неповинных младенец избити устра нет.

---

[1] *Осипов – Копылов Максим Осипович – Әүжән-Петровск заводының приказчигы.*

(Евангилие, Инжил риүәйәтендә бар был мәғлүмәт).

Бер мәл йәврәйҙәр батшаһы Ирод, Христос тыуыуын белгәс, күрәҙәләр: “Ул һинең урынға батша булыр”, — тигәс, Вифлеемда, бөтә тирә-яҡта ир затынан балаларҙы ҡырҙыртҡан (2 йәштән кесе булғандарҙы. Үҙенә көндәш булмаһын өсөн).

Быны Пугачев саҡ-саҡ тыңлап бөттө. Ҡыуалап сығарыр ине, ярамай. Ул батша бит әле. Тыңлаһа — күңелһеҙ, бытылдап ҡамасаулай. Үҙе уйлай: “Чумаковты ҡуйһаң...”

Ә поп, бына бит оҡшай, тип ҡыҙышып китте.

— Яко же Саул Давида, — тип башланы Библиянан яңы хикмәт һөйләргә.

Пугачевтың уйы бүтәндә...

— Эйе, Давилин... — Ул үҙенең дежур-майоры хаҡында уйлай.

Ә поп тағы йәврәй батшаһы Саул менән үҫмер егет Дауыт хаҡында. Ул Голиаф батыры бер алыпты еңгән, шуға көнләшә һиңә ҡаршылар, тип әйтер ҙә, һин еңерһең, тиер ине. Пугачев — ниндәйҙер Давилин, имеш.

Ул тағы... Творогов. Тегендә Белобородов, Грязнов... Их, күптәр юғалды. Әллә минең арҡаламы? Тәүгеһе Яйыҡта, Денис Пьянов һәләк булды, минең арҡала...

Икеһе ике хаҡта ғәмләнә.

Поп аңланы быны. Һүҙҙе икенсе тарафҡа борҙо. Бында староверҙар бар. Шулар менән дуҫ торабыҙ, тине.

— Чашниктар үҙҙәре генә ситләшә.

Быны староверҙарҙан көлөп әйтте. Йәнәһе, һәр ҡайһыһы айырым һауыт тота. Үҙенә барһаң, бүтәнде бирә, ҡунаҡҡа үҙ көрөшкәһен алып килә.

Пугачев тағы: “Бында Кинйә бар, йәш батыр алыҫта...” — тине.

Ул нимәлер уйлай, ә поп лыҡылдай, тик һағайҙы. Чашник тип ысҡындырғаны... Был ысынлап пруссак булһа, яҡламаҫ. Ә Емелька булһа? Ай-ай... Юҡҡамы ни уның бер байрағында ҡыҙыл таҫма менән раскольниктарса һигеҙ тармаҡлы тәре тегелгән. Кем белә, раскольниктар ярата бит уны, бында улар аҙ түгел. Әгәр бер рухиәт, бер ҡандан булһалар.

Быныһы ла ҡыҙыҡтырманы Пугачевты.

“Бөтәһе — яңынан...”

Шул ваҡыт поп тағы “яко” тип башланы, ә ишекткән дежур, бер кеше керергә рөхсәт һорай, тине.

— Кем?

— Туманов Григорий.

Пугачев иҫләп алды. Воскресендан саҡырғайныҡ, килгән.

— Давай, индер!

Туманов йылт итеп ҡалды. Ҡыҫҡа сәкмәне асыҡ. Ҡыҙыл күлдәк, билен быуған. Итектәрен яңы дегетләгән. Еҫ бөркөлдө.

Туманов батша ҡаршыһына килеп баҫты, баш эйеп алды, бармаҡтарын күтәреп торманы. Әммә Пугачев рапортын тыңланы.

— Әмереңде алдым, государь. Саҡырғанһың, килеп тә еттем.

— Молодец!

Ҡул бирә. Яурынынан ҡаға.

Шул ваҡыт поп:

— Иисустың да дуҫы... — тимәксе ине, Пугачев:

— Етеп тор ор, — тип тыйҙы.

Туманов:

— Поптан яманыраҡ. Бына Грязнов килһә, ул ярата, – тип ҡыҫылды һүҙгә.

— Хәлдәр нисек? Һөйлә.

— Яҡшы. — Туманов попҡа ҡарай, күҙ һирпеп алды.

Пугачев попҡа:

— Ярай, батюшка. Алла эштәре хаҡында һөйләштек. Һин ҡайтып тор. Беҙ бында хәҙер донъя эштәрен...

Поп Пугачев алдында ҡулдарын йөрөттө, унан үҙ алдында. Ишеккә әйләнеп, эйелә-эйелә сығып китте.

Ул китеп өлгөрмәне, берәү ашығып:

— Государь! Үлтереш булды, — тип хәбәр һалмаһынмы.

Пугачев ырғып торҙо. Туманов та һағайҙы.

— Кем? Кемде?

— Бер рус, бер башҡорт.

— Ни булған?

— Үҙ-ара һуғышып киткәндәр.

Үҙ-ара... яҡшыға түгел.

— Тынысмы?

— Әлегә... һуғыш ҡубыуы бар. Йыйылалар. Унда саҡ-саҡ тотоп торалар ҙа.

Пугачев бүркен кейҙе. Ҡылысын таҡты.

— Әйҙәгеҙ!

Пугачев, Туманов. Хәбәр итеүсе. Ординарецтар ҙа, дежур-майор ҙа ҡалмай.

Ике Әүжән араһында ыҙғыш ҡупҡан икән. Был яҡтан рустар бара, теге яҡтан — башҡорттар, мишәрҙәр.

Пугачев аттан төштө. Үҙе генә халыҡ йырып уҙҙы. Уртала — бер башҡорт, бер рус... Үтеп, теге яҡҡа сыҡты. Шул ваҡыт килеп еткән Кинйә, үтеп, рустар яғына сыҡты. Улар бер-береһенә ҡарашып ҡына алды. Һөйләшеп тороу ваҡыты түгел. Икеһе ике яҡтан ҡарап торҙолар. Икеһе лә үле (ҡорбан). Бер-береһенә яҡын яталар. Бер яҡтан башҡорт ҡаны аға, икенсе яҡтан — рус ҡаны. Ике юллыҡ булып аҡҡан да бер юлға төшөп ҡушылған.

— Бына күрәһегеҙме, бер казак, — тип Пугачев үле башҡортҡа күрһәтте.

Кинйә унын һымаҡ итеп:

— Бына, бер яугир. Күрәһегеҙме, икеһенең ҡаны бергә ҡушылған. Бер йән кеүек ҡушылып үлгәндәр.

— Ә иҫән саҡта дошман булыу яраймы? — тип һораны Пугачев.

Баштарын эйҙеләр. Һөйләп бирҙеләр. Осрашып, үҙ-ара бәйләнешкәндәр. Береһе байрам итеп эскән килеш булған, икенсеһе айыҡ баштан ҡыҙып киткән.

Ярамай. Һис яраған эш түгел. Әммә булған. Булған — бөткән. Йәндәр ҡыйылған.

“Господи, помилуй...” — Һәр кем үҙенсә ғибәҙәт ҡылды.

Эште төҙәтеү кәрәк. Кемде ғәйеп итәһең? Икеһе лә ғәйепле, икеһе лә үткән.

— Һеҙ бөтәгеҙ ҙә минең балаларым. Тиң күрәм. Тыңлағыҙ. Икенсе бер ваҡытта...

Был ваҡыт поп... Ул ҡала буламы. Арттан уҡ байпандап килеп еткән.

— Будьте послушны... яко Исаак послушаше отца своего Авраама.

Ул үҙенекен тыҡыр инде. Ә бында... Унын һөйләгәнен, Библиялағы риүәйәттә әйтелгәнсә, Патриарх Авраам (Ибраһим пәйғәмбәр) үҙенең аллаһына үҙенең улы Исаакты ҡорбан итеп салырға була. Улы атаһына һис ҡаршылыҡһыҙ буйһоноп, бысаҡ аҫтына ятҡан.

Поп — поп инде, бигерәк тә Агафон исемлеһе. Бында уны беләләрме, кәрәге бармы?

Киреһенсә, йүләрлектән бер-береһен. Әйҙә, хәҙер унын эше. Әҙерләһен, ерләһен.

Шунан киткәс кенә Григорий Туманов менән Кинйә һөйләштеләр.

Пугачев уларҙы бергә алып китте.

Һөйләшәһе һүҙҙәр бар ине. Шунда Туманов күпте һөйләп бирҙе. Поп та юҡ, башҡалар ҙа ҡамасауламай.

Мартта. Әмер тарата. Бесән, һоло килтертә. Бешкән икмәктәр йөк-йөк. Үгеҙҙәр килтертә.

Туманов менән Грязнов бергә киткәйне. Силәбегә табан. Унан һирәк-һаяҡ сапҡындар килеп торҙо, хәл-әхүәл менән таныштылар. Һуңғараҡ Грязнов башҡа урындарҙа ла очаг ойоштороҙо. Ә Силәбелә Туманов ҡалды.

Еңеү. Ауыр булһа ла, еңеү. Күпме ғәскәр!.. Генерал Деколонг. Шуға ҡаршы торҙолар. Ваҡыты менән Силәбене лә алдылар. Ҡалдырып китергә лә тура килде.

Силәбе янында Туманов ҡалды. Ҡыйын, юҡһынды. Туманов Силәбе ҡәлғәһен нығытты, көс тупланы, ҡараулы торҙо. Туптар ремонтланды, лафеттар эшләтте.

**24/III.** Үҙ урынына кеше ҡалдырып, Миәс ҡәлғәләренә барып ҡайтҡыланы.

Пугачевҡа рапорт. Оло ғәскәрҙең – Ырымбур янында, икенсе ғәскәрҙең Чесноковкала ҡыйралғанын белә. Рапорт Воскресен заводына, унан ары батшаға ебәрҙеләр. Шул саҡта Пугачев та фарман бирҙе: бергә тупланырға...

Ә унда апрель башында Ҡыштым заводтарына секунд-майор Гагрин килде.

Тумановта — 3 мең рус, 2 мең башҡорт. 20 туп.

2-3 апрелдә Силәбелә. 4/IV Команда алып, дошманға ҡаршы поход.

**9/IV** — ҙур һуғыш. Көн буйы. Силәбе ҡалаһы янында. Тағы бой. Туманов Силәбене ҡалдыра, көнбайышҡа сигенде. Көсө аҙ. Ни эшләргә?

Бына шул саҡ Пугачевтан әмер алынды. Юлға сыҡҡанда, Әүжәндән сапҡын арттан саптырып етте.

Дөрөҫ эшләгән. Ҙур ғына отряды бар. Иш янына ҡуш.

— Грязнов та килә. Ул тура Белоретҡа. Унда әле карателдәр. Уны алып торор Грязнов. Ә беҙ Тирлән аша ашыҡтыҡ.

Пугачҡа оҡшаны полковник. Үҙе грамота эйәһе, имеш. Уңдан да, һулдан да — яҙа.

Бергә уйлаштылар. Исәт тирәһендә ҙур алыш ойоштороу зарур. Шунда ҡушылырға.

Михельсон ҡаршыға килә. Пугач ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарға китмәҫ. Үҙе теләп Себергә һөрөлмәҫ, юл тотһа ла. Унда – Деколонг ғәскәре. Губернатор Чичериндың көсө күп. Урал артынан Силәбегә табан. Унда уның көстәре: депутат Баҙарғол Юнаев, тағы бер депутат Туҡтамыш Ишбулатов, унда Иван Белобородов, Батырҡай Иткинин, унда, иң мөһиме, Салауат, Юлай...

Бына ҡайҙа юл тотор Емельян.

Бүрене арттан ҡыуалар. Ә ғәскәрҙең юлын быуыу хәйерле.

Златоуст, Эҫем, Ҡатау заводтарына, Силәбе тирәһенә барып, тапарға иҫәбе бар Пугачевтың.

— Белобородов яҡын килһен...

Салауатҡа Кинйә яҙа: шунда торһон.

(Батшаның мобилизацияһы, ярҙам һорауы).

Пасха аҙнаһы үтте. Эсәһен эстеләр. Буяулы йоморҡкалар ашалды, уйланаһы уйланды, байтаҡ көс тупланды.

Әүжәндән бер полк ҡушыла. Бөтә халыҡ оҙатты баш күтәреүселәрҙе.

Поп Агафон да иҫке-моҫҡо ғына хоругвиһын күтәреп сыҡты.

Алға алғасҡы ҡор китте. Уның башында Бөрйән старшинаһы Төрөкмән Йәнсәйетов бара.

5

Емельян Пугачев күптән инде дыуамал полковнигы Иван Грязнов менән осрашыуҙы көтә.

Грязнов килә. Силәбенән, батшаны күрәм тип, Иҙелбашҡа ашыға.

Ә батшаға юл ярып Бөрйән старшинаһы Йәнсәйет бара. Ҡыҙыл, Йылайыр ҡәлғәләре янында һуғышҡан.

— Мең йәнебеҙ менән риза булып ҡабул иткәнбеҙ. Йәндәребеҙ фиҙа! — ти.

Ике яҡтан ҡыҫып, Иҙелбашты алырҙар. Осрашыу оҙаҡламай булыр.

Белоретта ла боҫтормалар, ҡарауылдар ҡуйылды, шәйләктәр ебәрелде.

Тимерселәр сүкергә, уҡ әҙерләргә тотондо.

Һәр кем үҙ эшен белә, юлда күнегелгән хәл. Барып туҡтау менән, үҙенән бигерәк атты ҡарайҙар, үҙенә булмаһа ла, атты ашаталар. Шуның кеүек ҡоралъяраҡтар ҙа. Уғы ла, һөңгөһө лә кәрәк.

Йәнсәйет алдан бара. Шулай булырға тейеш. Башҡорттар әйткәнсә, ул — алғасҡы ҡор. Юл ярып бара. Ул-был була ҡалһа...

Пугачев та бик артта ҡалырға теләмәй. Ул батша. Артта һөйрәлеү килешмәй, хатта кешеләр араһында буталып барырға ярамай.

Ул ҡыҙыҡһына. Матур яҡтар. Ләкин бындағы күккә олғашҡан тауҙарҙың йәме, сылтырап аҡҡан һыуҙарҙың тәме түгел, ҡыҙыҡһындырмай әле. Уңайлы урын. Тауҙар, урмандар. Теләгән ергә туҡталып күрән ҡор. Ғәскәрең тыныс ҡына ял итер. Кәрәкһә, күҙгә салынмай ғына ябырылып була. Йә... Эш көрсөккә барып төкәлһә, артыҡ зыян-зәүрәтһеҙ, ҡыйралмай ғына шыйығып сығып китеп була.

Был яҡтарға саҡырып, үҙ иленә алып килеп дөрөҫ эшләгән Кинйә.

Унан ни башҡорттар ҙа, крәҫтиәндәр ҙә күп. Завод кешеләре шул. Уларға таянып була, туп ҡоялар, ҡорал бирәләр. Әҙер мөгәзәйҙәр, әҙер ҡаҙна бар. Байҙарҙыҡы ни, хөкүмәттеке ни...

Әле торғаны... Ә Белорецкий тигәне... Ул да байҙыҡылыр. Кемдеке, тип һорарға уҡталғайны. Юҡ, ярамай! Батша башы менән ундайҙы һорашырға тейеш түгел. Ниңә үҙе белмәй, тиерҙәр.

Ә ерҙәре бай икән. Быныһын һорашһаң да була. Әүжән кешеһе Матвеев та, Кинйә атаман да, старшиналар ҙа һөйләргә әҙерҙәр.

Бында — хазина, ҡайҙа баҫһаң да...

Был яҡтарҙа тимер иретеү заводтары һалыу хаҡында күптән эш башлағандар ине. Эҙләйһе юҡ. Бында башҡорттар бик әүәлдән, борон-борондан ябай мейес яһап, күрек менән өрҙөрөп, тимер иреткәндәр. Шулай булат ҡоростан ҡылысын яһағандар, һөңгө баштары, уҡ баштары сүкегәндәр.

Иван Твердышев килеп сыуала башлағас, уға башҡорт старшинаһы тимер рудаһы барлығын күрһәтте.

— Ҡайҙа?

Тәүҙә өндәшмәне. Хәйлә ҡорҙо. Унан күстәнәс, һый әҙерләтте.

— Яйыҡ буйында, Атас тауында...

— Унда Магнит крепосы бит.

— Эйе, эргәһендә.

Исеме үк әйтеп тора. Барып, шурф яһап, тикшерҙеләр. Рудаһы яҡшы, үҙе әкәмәт күп булыр самалы! Унан суйын иретеп алыу өсөн домна кәрәк. Яғырға утын юҡ. Ләкин рәте табылыр. Тимере яһалыр, ҡоросо ҡойолор. Иван Твердышев үҙенең ағалары, шулай уҡ еҙнәһе Мясников менән һөйләшеп, уйсама ҡорҙолар. Магнит яғы завод һалыу өсөн, ысынлап та, уңай түгел. Уны 100 саҡрым ятҡан Әүжәнгә ташып була. Шунда ирет тә, баркаларға тейәп, Ағиҙелдән ағыҙ... Тик Әүжәнгә Демидовтарҙың да иҫәбе бар ине. Бүтәнде ул яҡҡа ҡул һуҙҙырмаҫҡа. Тартҡылаш китте. Оҙаҡҡараҡ һуҙылды.

Әүжән тирәләре ике яҡҡа ла тәтемәне — граф Шувалов эләктереп алды. Ә Твердышев Ағиҙел башын эләктерҙе. Шувалов ярҙам итте. Ер — 300 һумға 300 мең дисәтинә бында! Ул тауҙары, ул урмандары, ул һыуҙары! Ә мөһиме — тимер рудаһы, хатта алтыны ла бар. Алтын таштар!

Ағиҙелгә тамъяндарҙың Байым тарханы биләмәләрендә Нура (һыу) ҡойған ерҙә, Морат (Мраткина) тауы итәгендә, завод һалынды. Башҡорттар уны Иҙелбаш тип, рустар Белорецк тип атаны.

Бында Атас тауынан руда ташыныла. Яҡындараҡ — Үҙән заводы. Алыҫ Егәҙе буйынан тимер рудаһы, Инйәрҙән, Лапышты яҡтарынан суйын иретеп ташыныла. Шешәнәк буйҙарынан — ағас күмере.

15 йылдан суйын бирә башланы. Домна мейесе. Дүрт сүкеш. Ҡалай йәйеү.

Белорет ҡороso "Аҡ кеш" тамғаһы (белый соболь) менән. Әллә ҡайҙарға, диңгеҙ арьяҡтарына саҡлы китә, донъя йәрминкәләренә ебәрелә.

Тирлән. Тимер заводы, ҡалай прокаты. Руда бар. Завод һалдылар. Быуа әҙер. Өрҙөргөс ҙур күректе эшләтергә машина — һыу көсө менән.

Тирләндә — ҙур быуа, ҡуласаны һыу әйләндерә.

Элек бында башҡорт ауылы Мөсәй булған.

1759 йылда төҙөлә башлай. Унан Белоретҡа күсерергә рөхсәт алалар. Ләкин тегеһенә теймәй, яңыһын эшләтәләр.

Пугачевҡа ошоно һөйләйҙәр.

"Минеке булырға тейеш", — тип уйлар ине, юҡ, ул саҡлы уҡ нәфсеһен һуҙмай.

Юҡ, хәҙер бөтәһе уныҡы булыр.

Былтыр октябрҙә шулай булды. Хлопуша Әүжәнгә килгәс, бында ла крәҫтиән Матвеевты ебәрҙе. Батша манифесы биреп ебәргән. Унда завод крәҫтиәндәре, тирә-яҡ башҡорттар йыйылғанда, манифесты үҙ ҡолаҡтары менән ишеткәс, Петр Федоровичҡа табиғ булалар.

Ҡаҙна (казенный) крәҫтиәндәре иреклe, сезонлы эшләй улар, күптәре үҙ яҡтарына китә. Ҡалыусылар бар. Завод ябыла. Байтағы ҡала.

Оҙаҡламай Үрге Яйыҡтан хөкүмәт ғәскәрҙәре килеп баҫа.

Крәҫтиәндәр ойоша, башҡорттар йыйыла. Ноябрь аҙағында башҡорттар бәреп керҙе. Унан аҙаҡ Әүжән кешеләре ашыҡты ярҙамға. Туптары ла бар ине.

Ғинуар башында Иҙелбашты алалар. Элемтә — Берда менән; Салауат, Белобородов, Грязнов, Туманов, Йәнсәйет менән. Әле кем унда?

Сапҡындары киткән, улар тағы елерҙәр. Ошонда көс тупларға... Коллегия яһап алыр, был яңы Берда булыр. Әммә улай оҙаҡ тормаҫ. Алырҙар.

Башҡорт ауылдары бар. Ҡайҙа ла кеше күп.

Ҡайҙандыр йыр ҡолаҡҡа салына:

*Салауат менгән кир аттың...*

Тауҙар, урмандар йырлай кеүек.

Пугачев:

— Нимә тип йырлайҙар?

— Салауат хаҡында.

– Таралған... М-да, йәш батыр! – Пугачев тоҡанып китте. — Ҡайҙа ул Салауат?

Кинйә ҡамсыһын һабына ҡуша тотоп, иҙәп күрһәтә. Ана-у ҡар ята...бейек тауҙар артында.

Ана...

*Алыҫтарҙан күгәреп, ай, күренгән*
*Ирәмәлкәй тауының аҡ башы...*

Шул тау. Ирәмәл. Ҡарлы башын томан һарыған. Шуның итәктәрендә шишмәләр ағып сыға икән. Шуларҙан Тығын, Әүнәр, Ҡарағай йылғалары баш ала. Ирәмәлгә терәлеп тора Әүәләк буйҙары. Шул тирәнән Ағиҙел башлана. Әле улар эргәһенән һулҡылдап ағып ятҡан йылға (30 саҡрым көнсығышта) Яйыҡ башлана.

Ағиҙел — бер яҡҡа, тегеһе — икенсе яҡҡа. Аға башлағанда Яйыҡ һуңлап торған. Һуңлағас асыулы, ярһыу, үҙәндәрен боҙоп бөтә. Ағиҙелде уҙырға кәрәк. Ағиҙел алҡынып ҡына аға. Ә теге яҡҡа аҡҡан һыуҙар Әй, Йүрүҙән... Салауат шул яҡта тыуған.

— Ә Ҡатау һыуы?

“Унынһын хәтерләгән”.

—Йүрүҙәнгә ҡоя. Ҡатау — ҡатай һүҙенән ул.

Яҡын кеүек. Ә бара башлаһаң, юҡ, алыҫ әле...

— Бында тауҙар...

— Эйе ләһә, Нурғош һырты. Ирәндек, Әүәләк. Көнбайышта — Бәкте, Егәлгә, Нәре, Ҡоморҙаҡ, Мошаҡ.

Һыуҙың башы – бәләкәй шишмә, ә йыйылған ере ҙур диңгеҙ, бында ваҡ-ваҡ төркөм булып килеп ҡушылалар. Шулай диңгеҙ булыр.

Пугачев уйланып бара. Тағы Хәрби коллегия. Тағы Твороговты күҙ алдына баҫтыра, Туманов... Ләкин, алғараҡ сығып, Грязнов баҫа.

Ниңәлер шул Грязнов... Брамат[1]. Йөрөгән. Булһын, Хлопуша, ана, каторжан да. Ниндәй ышаныслы булды. Ә бынының каторгала булмаған, төрмәлә ултырмаған. Уға унын Силәбегә яҙған бер өндәмәһен һөйләгәйне. Пугачевҡа оҡшаны. Тап үҙе уйлағанса. “Ерҙе кем эшләй... Алла ҡушҡан”. Тап үҙе уйлағанса... Шуғамы үҙе кеүек күрә, шуға күрәлер. Бик яҡын... Үҙе кеүек.

Пугачев уйланып бара. Коллегияға Грязновты ҡуйырғамы?.. Творогов, Туманов. Ләм-мим барыу килешмәй.

— Нимә бөрөштөң? — ти Чумаковҡа.

— Көндәре бында һалҡын.

— Булһын, — ти Пугачев. — Апрель марттан һыуығыраҡ була алмаҫ. Һин туңа тип кенә майҙан йылыраҡ булмаҫ. Был — яҙ средаһы.

— Айыуҙар күптән өңөнән сыҡҡан бит инде.

— Эйе. Беҙ ҙә айыу кеүек сыҡтыҡ.

Быларҙы белә Пугачев. Ҡарап бара. Айыуҙар күренмәй. Ә бурһыҡтар, ҡышҡы йоҡонан уянып, өңдән сыҡҡан. Терпеләр ҙә серек төпһәләре тирәһендә йөрөй.

Ҡайһы ваҡытта шулай була торған. Ел үҙенең юлын үҙгәртә лә, һалҡынайта.

Көндәр йылытыр. Ҡоштар килә. Көйөлдөктәр өйөр-өйөр. Һабан турғайы ғына, һауала ҡанат йәйеп, яңғыҙ әйләнергә ярата.

Пугачев һөйләнеп килә, һиҙҙермәй генә белешеп ала.

Юл Ағиҙел буйлап килә.

Бына Аҡкөсөк ауылы (хәҙерге Сермән). Ҡатай олоҫо старшинаһы Аҡкөсөк һалған. Һуңынан унын улы Сермән исеме менән атарҙар.

Аҡкөсөк — сәсән. Әсе телле. Уға үс итеп, Пугачевҡа бер башҡорт хәбәр килтерә:

— Старшина Аҡкөсөк[2] һиңә ҡаршы. Һаҡ бул, батша, ғәскәре ҡоралды.

Отряд ебәрә. Аҡкөсөктө бәйләгәндәр, кейеҙгә төрөп. Пугачев килеп етә. “Һөйлә”, — ти.

— Ана, ғәскәрем, һиңә. Был – минең дошмандарым. Ул үҙе Һеҙ бадишам хәҙрәттәренә садыҡ булырға ант итергә теләмәй ҡасты. Һыйым әҙер.

Ҡотҡара. Тегеләр ҡасҡан.

Аҡкөсөк Пугачевты хөрмәтләп ҡаршы ала. Ҡаҙан-ҡаҙан ит, ҡымыҙ, мискә-мискә бал әҙерләгән.

Аҡкөсөк ғәскәрен Наязы буйына йыя, уға илмештәр, ассылар, инйәрҙәр, баяҡтар өҫтәлгән.

...Белоретҡа етәрәк күренеш, ай-һай, матур, мөһабәт!

---

[1] *Брамат – бродяга (автор һүҙлегенән).*

[1] *Аҡкөсөк Таһиров — Нуғай даруғаһы Ҡатай олоҫо старшинаһы, б. к. отряд командиры.*

Бынан Әрүәк исемле сусаҡ (тау, һырт) күренеп тора. Унын иңенән болот китмәй. Шунда Ырыҫҡай (Рысыҡай) ауылы тора.

Мырҙағол тауы. Унан ун ике саҡрымда — Ҡырғыҙ хан тауы, тауҙан 3 саҡрым ғына — Белорецк (Белорет, Иҙелбаш).

Мәйәрҙәк, Түш-Ҡаратау, Салтыс тауҙары.

Олойылға, Һүренйәк йылғалары.

Ағиҙел Белоретты икегә бүлә: Үрге ауыл, Түбәнге ауыл. Завод үҙе түбәндәрәк.

**13/IV** Белоретҡа Пугачев килә.

Көҙ көнө ебәрелгән указды алғас, завод ябыла тиерлек.

Ике яҡтан — ике ғәскәр. Гүйә, Ағиҙел уртаға бүленгән.

Түбәнге ауылға Йәнсәйет инде, Үргеһенә — Грязнов. Бер үк ваҡытта. Аңлаштылар.

Пугачты ҡаршыланылар.

Ҙур шатлыҡ. Пугач бер яран тапты, Кинйә — күптәнге ышанысы, Туманов — тоғро дуҫы. Яйыҡ атамандарына күҙ ҡырыйы менән ҡарай хәҙер.

Грязнов Себер яғын тотто. Уға килеп, чин алдылар, күпмеһен атаман итте, рөхсәт һоранылар, көс, ярҙам алдылар, уға батша манифестарын, ҡаҙна тапшырҙылар. Элек Чикаға ебәрә ине. Грязнов түкмәй-сәсмәй, әрәм-шәрәм итмәй әле килтереп бирә батшаға. Себер атаманы. Яңы Ермак, ләкин Ермак булып яңы ер яуламаған, халыҡ менән ирек яулаған.

Ләкин яугирҙар Себерҙән Силәбегә сигенделәр. Карателдәрҙә көс күп. Силәбене ташланылар. Апрель ауыр көрәш менән үтте. Грязнов — бер яурын, Салауат — бер яурын. Арала таяуҙар: Баҙарғол, Белобородов. Ҙур фронт бар кеүек.

Грязнов бындағы хәлде белә. Карателдәр йөрөр юл уға таныш. Бөтә урынға пикеттар ҡуйырға ине.

— Пикинерҙар кәрәк, — ти ул.

Хәҙер ғәскәр ҙур: 5 мең. Полктарға бүлә. Һаҡтар кәрәк. Быларҙы ул Василий Акаевҡа (завод кешеһе) тапшырҙы. Ул Царицынға саҡлы барыр.

Сабарҙар саптырып, манифест таратып, сиреү йыйып була, полк-полк итеп ебәреп ҡалғаләр алып була. Ә былай ат өҫтөнән генә идара итеү мөмкин түгел.

Быны батша белә: Бердала ниндәй коллегияһы бар ине! Һәр кемгә эш бүленгән, вазифа бирелгән, писарҙар, секретарҙар, канцелярияһы ла гөрләп торҙо. Нисәмә телдә генә яҙманылар, ул яҙыуҙар ҡайҙа ғына китмәне, хәбәр өҙөлмәне, юлдар һаҡлаулы торҙо, рөхсәтһеҙ, билетһыҙ кеше йөрөмәне, яңы сиреүҙәр килә торҙо, аҙыҡ-түлек, фураж тейәлгән ылауҙар ағылды.

Дары, туптар килде. Үҙ йырҙаһында аҡҡан тулы һыулы йылға ише ағылдылар.

Ә хәҙер... Ямғыр һыуы ғына аҡҡан кеүек. Ҡасан була, ҡайҙа аға — шулай. Юҡ, былай булмай!

Быны Пугачев аңлай. Уйлай килде — әйтмәй генә әле.

Белоретта — кәңәшмә.

Керәләр ҙә, ҡайҙа урын бар, һис ни уйлап тормай, ҡалай етте — шунда ултыралар. Дәрәжә, тәртип һаҡлау юҡ. Ә элек? Тегендә, Бердала... һәр кемгә урын алдан бирелгән, дәрәжәгә ҡарап. Уң яғына, һул яғына. Тас хан ярандары ише ултырышырҙар ине.

Пугачев берәүгә:

— Һин кил... бына, бында ултыр, — тине, янынан урын күрһәтеп. Үндағыһы ситкә шылышырға мәжбүр булды.

Пугачев бында яңы Хәрби коллегия тәғәйенләй, урындар, дәрәжә бүлә... Ә мөһиме, кемгә ниндәй хоҡуҡ, ниндәй яуаплылыҡ. Бер сама төҫ алды шулай итеп әрме тәртибе.

Кәңәшмә кәрәк ине. Тәғәйен хәрби совет юҡ. Ул туҙылып бөткән. Пугачев ҡарап, бармаҡ менән төртөп-төртөп күрһәтте.

— Бына һин ин. Һин, һин...

Мине онотмаймы, тип ҡайһы берәүҙәр алғараҡ сығып, уның күҙенә салынырға тырышты, кәрәктәр саҡырылды, кәрәкмәгәндәр — юҡ. Бәхетлеләр өйгә инеп китте, бәхетһеҙҙәр...

Кинйә өйгә ингәндәренә иғтибар итте (кемдәр? — Грязнов, Туманов).

Грязновҡа табан ҡарағайны, Творогов аҡайып алды.

— Ниңә, казак бөткәнме?

Пугачев хәҙер үҙен ысын-ысынлап батша итеп тойорға күнеккәйне.

Кемдәрҙе? Үҙе таянырлыҡ, әммә яйыҡтыҡыларҙың һырттарын ҡабартмаҫҡа. Ярай.

Иван Александрович Творогов — баш полковник. Ул күптән указдарға ҡул ҡуя, батша иһә ҡаршы түгел.

Кинйә Арыҫланов. Унан һағаялар, көнләшәләр. (Әммә Пугачев ҡаршы түгел.)

Секретарь казак Шундеев[1]...

Алексей Иванович Дубровский[2]. Элекке купец, белемле. 30 йәш. Буйсан. Һары сәсле. Һаҡалы аҡһыл.

Повытчиктар. Элек Александр Седачев[3] ине. Уға Григорийҙы өҫтәне.

Герасим Степанов[4]. Был да блондин. Йәшерәк, буйға ҡайтыш. Был да секретарь.

Етмәй, эш күп. Ә бына Туманов ике яҡҡа әүеш-тәүеш итә. Һөйләй ҙә, яҙа ла. Уны ла өҫтәне.

Тағы — писарь Горбунов Алексей, отставкалағы казактар писары.

3 аҙна торҙо.

Бында Үрге Яйыҡтан Фрейман килә, тиҙәр. Заводты, өйҙәрҙе крәҫтиәндәр үҙҙәре үк яндыра.

— Магниткаға! — Исхаҡ Әхмәт юл яра.

Пугачев уға полковник чины бирә.

Уҡлы Ҡарағай крепосын ала.

— Атас тауына юл асыҡ! — ти Исхаҡ Әхмәт.

— Ҡайҙа, ҡайҙа?

— Магнит ҡәлғәһенә, — тип аңлатты Кинйә.

Ә ябырылырға тырышалар.

Үрге Яйыҡта — Ступишин.

Деколонг, Ырымбурҙан Рейнсдорп янай. Ҡурҡалар, тағы йыйыла тип. Өс яҡлап өндәмә. Казагын – башҡортҡа, башҡортон русҡа һөсләтергә маташа. Башҡорттарҙың йорттарын туҙҙырығыҙ. Ҡатындарын, балаларын ҡырығыҙ, тиҙәр. Үҙҙәре үк таралып, ҡайтырҙар, йәнәһе.

6

Емельян Пугачев үҙ ярандары юғалыуына әсенгән сағында йыш-йыш ҡына полковниктары Овчинников менән Перфильевты иҫкә ала ине. Яҙмыштары уға билдәһеҙ.

---

*[1] Шундеев Иван — Еткул ҡәлғәһе казактарының хорунжийы, б. к. Хәрби коллегия секретары.*

*[2] Дубровский Алексей Иванович (Трофимов Иван Степанович) — Мцен купецы, б. к. Хәрби коллегия секретары.*

*[3] Седачев Александр — Вознесен заводының конторщигы, б. к. Хәрби коллегия повытчигы.*

*[4] Степанов Герасим — завод крәҫтиәне, И. Н. Белобородов отрядында писарь, б. к. Хәрби коллегия повытчигы.*

...Татищев ҡәлғәһендә еңелгәс киткәндән бирле белмәй Пугачев, хәбәр юҡ.

Перфильевтар Яйыҡта тик ятмайҙар. Пугачев ни хәлдәлер? Ул иҫәнме-юҡмы... Иҫән булһа ла, эш итергә мөмкинлек булмауы бар.

Ә эш туҡталмаһын. Яйыҡ көрәш үҙәге бит әле. Войсковой атаман тип Никита Каргинға киләләр. Эргәһендә — войсковой старшиналар Афанасий Перфильев, Иван Фофанов. Писарь ҙа, секретарь ҙа бар.

Әйҙә, подполковник Симонов Яйыҡ кремленә бикләнеп ята бирһен. Уны казактар бар тип тә белмәй. Ә быларға киләләр. Ярҙам, кәңәш һорап, ялыу менән дә. Ана, хатта Волга буйынан, Ставрополь ҡалмыҡтарынан вәкилдәр бар. Уларҙың атаманы Федор Дербетовҡа хат яҙып, хәбәр иттеләр.

Был 7 апрелдә ине. Ә туғыҙында уға — әмер... 300 кеше менән Илек ҡәлғәһенә килһен. Беҙ ҙә бөгөн ошо сәғәттә үк шунда ике команда ебәрәбеҙ. Дошманды ҡыйратҡас, яңы штурм яһайбыҙ, тип.

Үҙҙәре, ысынлап та, Илеккә ҡарай. Ләкин унда Мансуров корпусы баҫҡан. Быковка йылғаһында — отряд, Овчинниковтыҡы.

Перфильев менән Каргин Яйыҡ ҡалаһын ҡамап тора.

Голицын ҡаланы алырға генерал П. Д. Мансуров корпусын ебәрә. 7/IV Илек ҡаласығын ала. Ә 15 апрелдә Яйыҡ ҡаласығына яп-яҡын.

Овчинников Илектән сигенеүселәр менән Яйыҡҡа табан 150 казак алып килде. Ә Яйыҡтан — ундағылар — генерал Мансуров ҡаршыһына 500 казакты, 100 ҡалмыҡты алып сыға. 5 туптары бар. Бөтә көскә Овчинников баш. Ул был урынды белә. Генварцев һәм Рубежный форпостары араһында, Быковка йылғаһы. Алда һаҡлыҡ отряды.

Шулар ҡаршыланы карателдәрҙе. Мансуров быларҙы еңеп, Быковка йылғаһын сыға. Унда – Овчинников үҙе. Туптарҙан ут аса. Йәҙрәләр күп түгел. Мансуров – йылға ашаһында. Алыш тиҙ үтә.

Бер төркөм (Овчинников, Перфильев) — 230 кеше — далаға юлланды. Икенсе төркөм — ҡалаға.

16/IV Мансуров ҡалаға инде.

Ауыр ине. Ҡаланан полковник Симонов сыҡты.

Ырымбур ҡамауы бөткәс, ҡәлғәнең бейек диуарҙары ышығында ятҡан Бородин үҙ янындағы Яйыҡ казактарын эйәртеп ҡайтып китте.

Карателдәрҙең көсө ҙур.

Ҡыҫалар. Мансуровҡа әмер: бурыс — бөтә даланы таҙартыу, Гурьевҡа саҡлы барыу.

Күп кенә казактар баш һалды. Никита Каргинды, Михаил Толкачевты тотоп бирҙеләр.

Овчинниковтар, еңелеп, сигенделәр. Унан Чаганайкаға еткәс, Сағын йылғаһына боролдолар.

Шунда йәшеренеп күҙәтеү. Таралып, төрлө ерҙә. Ҡалаға күҙ һалыу.

Ярлы казактар шыпыртын ғына килеп ҡушыла. Улар һөйләне.

Китергә. Тик Толкачевты, Каргинды алып китергә. Үҙҙәре юҡ. Кешеләр йөрөп килә. Ҡалала мәхшәр.

Атаман Никита Каргинды аҫҡандар, тип хәбәр килтерҙеләр.

Икенсеһе:

— Михаил Толкачевты аҫҡандар.

Аҫалар, киҫәләр. Язалау отрядтары ҡотора, кинәнә, үс ала.

Казактарҙы эҙәрләйҙәр. Тоталар. Ябалар. Әсир итеп алғандарҙы төркөм-төркөм оҙаталар. Бер-береһенә бәйләп. Күренә. Бығауҙар сың-сың килә. Ҡамсылап ҡыуалайҙар. Йығылып ҡалалар. Конвой һалдаттар уларҙы үлтереп үтә. Офицерҙар шулай ҡуша.

Ҡатындарҙы ла... Иң башта Устиньяны. Устинья Кузнецова йәш кенә. “Императрица” тигән юғары исем күтәреп ҡалды. Ҡайҙа унын ире-император

ебәргән 7 һандығы. Асмаҫҡа, тигән. Асманы, улар ҡалды. Үҙенә тигән биреһендәге лә... таралды. Ни бары күлдәк, тун эсенән күренә... Уны елтерәтеп Яйыҡтағы Йәшерен комиссияға алып киткәндәрен күргәндәр. (Уның начальнигы капитан-поручик Маврин ҡаршыһына илтерҙәр. Һорау алырҙар. Бахырың, яфа күрер. Күҙгә-башҡа күрһәтмәй генә, ҡайҙалыр оҙатылыр.)

Был ваҡытта шулай ине.

Ырымбурға ҡыуалар. Унан Һамарға, Ҡазан яҡтарына.

Сағын йылғаһын йөҙөп сығалар.

Далаға. Бында ҡалыр әмәл юҡ. Бөтә тирә-йүнде карателдәр баҫты.

Бер туҡталғанда һөйләшеп алдылар. Нишләйбеҙ?

— Тегеләр ҡотолор. Унда урман, оҙаҡламай тауҙар башлана.

Ә бит Пугачевты ла шулай Яйыҡ буйҙарына, далаға алып китмәкселәр ине. Быны белмәйҙәр, әлбиттә. Ахмаҡтар, тиерҙәр ине.

— Измена ҡылырға булғандар, — тиерҙәр ине.

Әле үҙҙәре шул яҡҡа ынтыла. Урман, тауға? Тик нисек барырға? Оло Арҡа менән Оло Һыртҡа. Унда бик үк йоғонмаҫтар. Унда һыуҙар тарала торған ерҙән йылғалар  ваҡ: ике яҡҡа — Һамар өйәҙенә, Яйыҡҡа табан бүленеп аға, арыраҡтары — Ағиҙел яғына. Кисәһе түгел. Хәүефһеҙерәк

Һамар йылғаһына китергә! Урау-урау юл, эҙ баҫырыу, эҙ юғалтыу кәрәк.

Бөтәһе — 200 казак. Һамар һыуын үтәләр. Оло Мәскәү юлы аша үтәләр. Оло Арҡанан барғанда бер сапҡын эҙләп тапты. Бына бит, уты һүнһә лә, киҫәүе ҡала.

Бергәрәк тупланырға. Хәбәрләшеп барырға булдылар. Улар һөйләй Ырымбур хәлдәрен, ишеткәндәрен...

Ырымбур янында төрмә тулды.

Ҡала тышындағы Меновой двор, ҡала уртаһындағы Гостиный двор әсирҙәр менән шығрым.

Урын етмәһә — ҡайҙа ла була тоторға. Аҙбар-ҡураларҙа, подвалдарҙа. Комиссия эшләй. Армайҙар әҙер.

Танау япраҡтарын өҙәләр, маңлайға, көйҙөрөп, ҡәһәрле тамға һалалар. Ҡамсы менән һуҡтыралар.

Оло Арҡанан барғанда завод крәҫтиәндәре ҡушылды. Өс йөҙләп бар. Шунан — ҡалмыҡтар. Ярты мендән ашып китте сиреү. Бөтәһенә Овчинников баш.

Күҙгә-башҡа күренмәҫ өсөн күберәк төндә барырға тура килә. Проводник алып китеп булмай. Һатырҙар. Көс булмаған, халыҡты үҙенә ҡаршы ҡуйырға ярамай. Йондоҙға ҡарап, ел ҡайҙан иҫә — самалайһың. Был таныш ерҙәр түгел. Юлһыҙ йөрөлгәнме ни быҡаса.

Ләкин казактар далаға өйрәнгән. Эйәр өҫтөнән юлды самалап була. Аттар ҙа һиҙә. Беләләр, тоялар. Арала йәшерәктәр бар. Улар шомлана, бер ни булһа, өлкәндәргә ҡарай.

Самалап, нисә көн үтерен, ҡайҙа ниндәй ауыл булыуын асыҡлайҙар. Икмәк һатып алырға, әҙер иттәре... булһа, хәҙер юҡ. Ҡайҙа ниндәй йылға осрар...

Уң яурынында ниндәй ауыл ҡала, һул яғында? Ҡайҙа ҡурҡыныс? Әлегә карателдәр менән осрашмаҫҡа ине. Эҙгә төшһәләр, төрлө яҡлап ябырылырҙар.

Хәҙер көс байтаҡ. Карателдәр ситтән эҙәрләй.

Юлда хәрәкәт һиҙелә башланы. Ырымбурҙан алпауыттар ҡайта, үҙ усадьбаларына. Шунда ҡасып ятҡандар. Урманда ятҡандары ла моронлай. Хәҙер батырайып алғандар. Үҙҙәренә ҡайталар ҙа тағы хужа булып алалар.

— Ҡайҙа минең крәҫтиәндәр? Ҡайҙа башҡорт ялсылар? Ҡайҙа ҡалмыҡтар?

Ҡайһыһының кеме булған, нимә юғалған, ниндәй малын алғандар. Яҙыу яҙып, губернаторға сабалар.

Сиркәүҙә калакул ҡағалар. Тантана итәләр. Тройка елдерә, һыбай осалар. Хәҙер уларға йоғоноусы юҡ.

Овчинников кешеләренең дә уларҙа ҡайғыһы юҡ.

Тиҙерәк Ағиҙел яғына, тауҙар араһына, сумырға. Батша шундалыр. Яҡынаялар. Еңелерәк. Бына бит күпме көс бар! Йыландың башын һуҡтылар, ә ҡойроғо ҡалды. Шул ҡойроҡ барыбер башына табан тартылырға тейеш.

Бына бер юл арҡылы үтергә... Ә-ә, Шарлыҡҡа бит. Тимәк, алда Һайылмыш һыуы булыр. Унан Ашҡаҙарға барыу кәрәкмәй. Уңға боролорға. Ә бер аҙҙан Һуҡайлыны сыҡтылар.

Һораша-һораша киләләр. Туҡтаған ерҙә һорайҙар:

— Батша ҡайҙа?

Әйтмәйҙәр. Һынайҙар. Былар батшаға ҡаршымы, уның яҡлымы? Ашағандары — ҡаҡлаған балыҡ. Астар. Тимәк, карателдәр түгел. Аҡсалары бар. Ҡай саҡ икмәк, кистәрен берәй башмаҡ салып, тунашып бирәләр.

Тәртиптәренән күренә. Оҙатҡанда:

— Ана шулай барығыҙ, — тиҙәр ҡарттар. Юл өйрәтәләр.

Иҙелде Бөгөлсәндә кисеү фарыз. Ҙур ҡор осрай. Атаманға алып барғас, Овчинников Ҡасҡынды танyны.

Бынан тура. Ураy булһа ла, юл яҡшы ла... Бынан тынысыраҡ.

— Иҙел буйлап барығыҙ, — тип ебәрҙе. — Бараһың, шаршы алдынан кисәһең. Унда егеттәр булыр.

Тауҙар араһында күңелләнеп киттеләр. Кисен туҡтағанда усаҡ яғыу. Күҙҙәр уйнай. Һөйләшәләр. Береһе гел алдай. Яуҙан һуң батыр күбәйә шул.

— Мин тегене, эй, түпәләйем, эй...

Овчинников, Перфильев икәү бара.

Һиҙәләр, теге гел алдай. Һорашалар.

— Һин ниңә бараһың?

— Һәй, тормош булдымы ни.

— Кемгә ҡаршы?

— Губернаторға.

— Ул һине туҡмамай. Бына байың.

Юлда берәү эйәрә.

— Мине лә алығыҙ.

Ә башҡорт та бар.

— Ә һин. Ниңә эйәрәһең?

— Ул ни, бөтә ғүмере буйы шуны көткән бит. Атаһын аҫҡандар, олатаһы яуҙа үлгән. Етем-еһер ҡалғас, ошо көнгә төшкән. Гел көткән.

7 майҙа барып еттеләр.

Ағиҙел буйлап Әүжәнгә килеп сыҡтылар, артабан — ғәскәр эҙенән. Яңыраҡ киткән. Магнит ҡәлғәһенә.

Аттар арыны.

Мауыҙҙы күле янында туҡтағайнылар. Алда, тинеләр, батша төркөмө.

Ҡуҙғалам тигәндә, Атас тауы яғынан атлылар шәйләнде. Һағайҙылар.

Батша күсе, имеш.

— Мунсаға киләм (шунан Банное озеро тиерҙәр. Хәҙер Яҡты күл).

Кисә генә Магнитты алғандар. Һуңланылар, ҡатнаша алманылар. Ҡатнашырҙар. Бой булыр әле, күп булыр. Әммә Пугачев шат.

Эйе, крепосты алғандар, үлеш булған. Ләкин Пугачев шат. Ғәскәре бер ни тиклем ойошоп алған. Атамандарында ла тәртип. Үҙе етәкселек иткән, үҙе канонир (төҙәүсе).

— Отскочи! — Фейерверкерҙар ут төртә.

Шул саҡ:

— Китегеҙ!

Туп сүгә, артҡараҡ картечь осоралар.

Тағы:

— Заряжай!

— Прикрой!

Тағы:

— Отскочи!

Штурм. Килештергән. Ябырылыу алдынан бер батюшка кадилоһын берсә арттка, берсә алға һелкеп, изге һыу бөркөгән, ғибәҙәт доғаһын уҡыған.

Барабан ҡағалар. Пугач үҙе алдан атлап инә ҡәлғәгә. Уң ҡулына картечь тейгән. Крепостағы һалдаттар, казактар унының яғына сыға.

Әйткәндәй, Магнит ҡәлғәһе электән үк баш күтәреүселәр тарафынан ватыла башлаған сәтләүек ине.

Бындағы Яйыҡтың үрге ағымындағы дистанцияла былтыр көҙҙән үк Ҡыҙыл, Магнит ҡәлғәләренә ябырылдылар. Юлдар тыныс булманы. Әле батшаның яҡынайыуын белгәс, яугирҙар бигерәк йәнләнде. 19 апрелдән бирле биш көн буйы ябырылдылар.

— Беҙ өлгөрә алманыҡ, — ти Овчинников, Перфильев. — Ашыҡтыҡ.

— Бой булыр. Алда әле... Мәскәүгә еткәнсе,– тине батша.

Уға ҡарап ҡуйҙылар. Һындары турайҙы.

Пугачев полковник Перфильевҡа Яйыҡ казактары полкын бирә. Овчинников – бөтә ғәскәр атаманы.

Пугачев шат. Көс килгән казактарға. Улар Магнит ярына барғас, ҡарайҙар: үҙебеҙҙең йылға. Яйыҡ. Уларҙа тик түбән ағымы бит. Түбән дистанция. Ә үрге ағым бында.

Талпынып килеүҙәр онотолған һымаҡ. Ошоноң ярына баҫыу ғынаһы ла кинәнес!

Уларға ла, башҡорттарға ла яҡын. Йылға үҙе лә, исеме лә.

Бер яҙмыш шул. Бергәләп һаҡлағандар. Кем генә был тирәгә ҡул һуҙмаған. Ҡалмыҡ тайшалары, нуғай мырҙалары. Әле Өфөлә йәшәүсе сабаталы кенәздәрҙең бабалары заманында ғәййәр Ораҡ та, ошонда, Яйыҡ башында йәйҙәнем, тип маҡтанған. Һуғышҡан, ҡан ҡойған, үҙенең дә йәнен ҡыйғандар. Ҡалмыҡ тайшалары нисәмә тапҡыр ынтылған! Отпор алғандар. Рәсәй батшалары Яйыҡ казактарына ла, башҡорттарға ла, Яйыҡ башынан тамағынаса биләгеҙ, тип ярлыҡ биргән. Ҡай саҡ ашҡа барышып, ҡай саҡ тартышып, бер һыу буйында йәшәгәндәр.

Ә бына бер юлға төштөләр... Бер үк байраҡ, Емельян байрағы.

7

Белобородовты был көндәрҙә генә көтмәйҙәр ине. Унын хаҡында хәбәр килеп етте, йүнленән түгел. Ошаҡмы ул, яман ҡылығы хаҡында еткерелгән дөрөҫ һүҙме? Үҙе хәбәр итер әле.

Шулай булғас, нимәһе кәрәк унын. Е. Пугачев әле Урта жуз ҡыр-ҡаҙаҡтарынан яуап көтә.

Әле Иҙелбашта саҡта уҡ унын Магнит крепосы аръяғында күренеп ҡалыуын еткергәйне башҡорттар.

Улар йөрөп ята. Күргәндәрҙер. Ҡаҙаҡтар ҙа, дала ҡамғағы кеүек, әле бында, әле әллә ҡайҙа.

Бер башҡорт килә, батшаны күрергә кәрәк, ти.

Шулай ҙа һөйләшеү кәрәк. Йүн сығарырға ине...

Уйлаштылар, хат яҙҙылар.

Унан ялыу бар ине былтыр. Аблай[1] хандың губернаторға һатырға тип туплап ҡуйған 300 баш атын, йөҙ баш үгеҙен, өс мең баш ҡуйҙы алдылар, тигән. Була ундай хәл. Ләкин баҫып алманылар, хан ебәргән ҡыуғауылдарҙы[2] туҡтатып, был

---

[1] *Аблай хан — ҡаҙаҡтарҙың Урта жуз (Урҙа) хакимы.*

[2] *ҡыуғауыл – малды ҡыуып барыусы (автор һүҙлегенән).*

мал өсөн аҡсалата ризаландырырға маташтылар. Хан губернаторға еткерергә әмер итте, тип аҡсаны алманылар, алмашҡа тауар бирегеҙ, тинеләр.

Тауар юҡ ине. Малды алып ҡалдылар. Уларҙы ҡыуып килтергән етмеш ҡыуғауыл да Пугачевта ҡалды.

Быныӊ артынса хан асыуланып, янап хат ебәрҙе. Йәнәһе, тағы мал ҡырғандар, йәйләүҙәрен баҫҡандар.

Быныһы булғанмы, юҡмы? Хәҙер тикшереп, аҡланып торор ваҡыт түгел. Элеккеләрен күҙгә түләрбеҙ, тип вәғәҙә итергә, күндерергә булдылар.

Әле мал бирһен, үҙенеӊ Петр Салисҡа табиғ булыуын белдереп, көс бирһен.

Шулай итеп, ике телдә хат яҙылды. Тик Кинйә лә, Пугачев та ҡул ҡуймаҫҡа тейеш. Руссаһына Хәрби коллегия башлығы Иван Творогов ҡул ҡуйҙы, төркисәһенә Григорий Туманов имза һалды.

— Ҡалғанын үҙеӊ һөйләрһеӊ, — тинеләр Ҡара Табын олоҫо старшинаһы Рәсүл Этимәҫовҡа[1].

Кинйә уныӊ ҡыр-ҡаҙаҡтар араһында араҙашлығы яҡшы булыуын белә. Хәйләгә оҫта, телгә үткер, тархан икәнен һәр йәйләүҙә беләләр.

Байтаҡ көндәр үтте. Ҡыр-ҡаҙаҡтарға яҡын булайыҡ тип, Яйыҡҡа килделәр, Магнит ҡәлғәһен алдылар. Хәҙер ике арала һис кем тормай. Шулай ҙа тархан да ҡайтмай, Аблайҙан да яуап юҡ. Ханы ла, солтандары ла бөлөнән алыҫҡа киткәндәр, ахрыһы.

Унда рустар, казактар ауылы, эргәлә лә ҡаҙаҡтар йәйләүе. Рустар ҡаҙаҡҡа ябырыла. Ә бында бер йәйләүҙән ялыу. Барып баҫҡандар, мал алып киткәндәр. Кешеләрен.

Кәӊәшмәлә — яҡларға. Пугачев:

— Рәнйетмәҫкә!

Башҡалар ҙа:

— Эйе... Беҙгә ҡаршы булмаһындар.

Бер рус, бер башҡорт ебәрәләр.

Барғандар. Яҡын. Унда тағы бер урыҫ, бер башҡорт ултыра. Икенсе ауылдан. Унда ла шундай хәл булған, имеш. Бына хикмәт, унан да эште яйлау өсөн крепостан бер кеше, әлбиттә, тылмас та кәрәк.

Ике яҡтан бер юлы ходок — йөрөшкәләр. Береһе — ҡәлғәнән. Икенсеһе — Петр батшанан.

Бер табында урын бирелде. Ҡара-ҡаршы күҙ ҡарап ултыралар. Һөйләйҙәр.

— Форпостан комендант әфәнде кисереш (ғәфү) һорай. Ундай хәл булмаҫ. Зыян түләнер.

Яугирҙарҙан шундай уҡ яуап:

— Батша ярлыҡау һорай. Дуҫлыҡ булыр. Түләнер.

Хужалар ҡәнәғәт. Уныһынан бигерәк бик ғәжәп: ҡаҙаҡ шаруаһына, жатаҡтарға был тәүҙә үк аӊлашылманы.

— Ай-бай, был урыҫтар. Бер-береһе менән ороша! — тинеләр.

Орошһондар, тип уйлаусылар күп ине. Әле бына, осрашып ҡоралға йәбешәһе урында, бер табында ултыра бирәләр.

— Ай-ай, апырмай... Урыҫты аӊламаҫһыӊ.

— Ай...

Икеһе — ике батша һалдаты. Дошмандар бит. Тегендә ҡара-ҡаршы һуғышырҙар ине. Бында — бер табында. Бер сеүәтәнән эсәләр. Һин дә мин...

Ә бер һалдат зарлана:

— Беҙ үҙ-ара орошабыҙ... Бөтә ҡаҙаҡҡа — бер оран. Алыш ораны.

– Шуны әйтеп, бергә оран һала алмайбыҙ. Хандар ҡуштымы, бер-беребеҙҙе ҡырабыҙ!

---

*[1] Рәсүл Этимәҫов — тархан, Исәт провинцияһы Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы, б. к. отряд командиры.*

Көйләп һөйләгәндәр, ике яҡ үҙ яғына киткән. Ярай, унда яғаға-яға килмәгәндәр. Быны ҡыҙыҡ итеп һөйләнеләр, ҡайтҡас.

Хандан һаман сапҡын юҡ.

8

Пугачев сапҡындарҙы көнсығыш яҡтан көттө. Ә хәбәр тиреҫтән, йәғни төньяҡтан, килде.

Был Белобородовты саҡырып, икенсе тапҡыр ебәргән батша курьеры ине.

Ул тыңламай. Баш тарта.

Бер ебәрҙеләр — юҡ. Быныһы ла шулай ти. Шулай уҡмы икән? Ярандары менән кәңәшләште, ышаныслы кеше, тиҙәр ине. Әсенде. Өмөт итте. Бөтә завод хужаларын ҡалтыратты. Тау управлениеһы начальнигы полковник Василий Бибиков[1] һағайҙы. Заводтар, ҡәлғәләр алды, Екатеринбургты алырға күп ҡалманы. Алмаһа ла, хөкүмәттең ни саҡлы ғәскәрен тартып торҙо.

Туманов ҡыш буйы күрше ине.

— Үҙен күрмәнем. Ышаныслы, тиҙәр. Хәл ауырҙыр.

Пугачев үҙе лә рапорт алып торҙо, хәбәрҙәр килде. Уңыш еңелеү менән дә бөтә. Ырымбур, Өфө янында булған ваҡиғанан һуң Урал заводтары начальнигы полковник Василий Бибиков бөтә сараһын күрҙе, ярҙамға яңынан-яңы полктар килтертте.

Гагрин ҡыҫты.

Кинйә:

— Үҙен күрәйек әле. Салауат та, Юлай ҙа, уға таяндым, тип яҙған.

Ә Творогов:

— Ул — хыянатсы. Беләбеҙ бит. Эш барһа — яҡшылар, тиҫкәре китһә, хыянат юлына баҫалар.

Чумаков та көлөп ҡуйҙы.

— Осратһаҡ... ҡулға алырға.

8 майҙа Магнитка ыңғайланылар. Ә Белобородов үҙе бирегә килә ине.

Тәүҙә ғәжәберәк булды. Ниндәй команда тип торалар. Өйрәтелгән һалдаттармы ни. Ете йөҙ. Тәртип менән атлайҙар.

Ғәскәр килә. Эргәһендә — йәйәүләп Белобородов. Таяҡлы. Байраҡ менән.

Пугачев таныны.

— Байраҡ менән ҡаршыларға, күтәрегеҙ.

Күтәрҙеләр. Белобородов килеп рапорт бирә. Шул ваҡыт алып керәләр.

Полковниктар Пугачҡа ҡарай. Батша һорай:

— Ниңә һуңланың?

— Юл яман.

Творогов:

— Ә беҙгә йәйме ни?

Һөйләп бирҙе еңелеүен.

— Ниңә Красноуфимда тупланманың?

— Унда Салауат...

— Салауат... Бына баш бирмәҫкә һәйбәт!

Хәбәр бар. Красноуфим, Көнгөр тирәләрендә көрәш ҡыҙыу ине. Салауат “Илсеғол Этҡолов, Юлай үҙҙәрен-үҙе ҡараһын” тигән , өҫтәгән.

— Тегендә — заводтар. Шунда ыңғайланым.

— Ниндәй?

— Кәҫле, Ҡыштым.

Пугач Кинйәгә:

— Унда кем бар тигәйнең? Депутат...

— Баҙарғол Юнаев... — ти Кинйә. — Былайыраҡ — Юламан Ҡушаев.

— Күрҙеңме үҙҙәрен? – Пугачев һорай Белобородовтан.

---

[1] *Бибиков Василий Федорович — полковник, Екатеринбург һәм Себер заводтарының управителе.*

— Юҡ.
— Ниңә үтеп киттең? Табып булмай инеме?
— Була ине.
Белобородов әле үкенә бынығына ла.
— Ниңә Салауатҡа ҡушылманың?
— Ул үҙе шунда.
— Бына бит. Бында ла...
Творогов Кинйәгә:
— Ә һин яҡлаған булаһың.
Пугачевҡа ҡарайҙар. Атамандар уның ҡоралдарын ала.
— Быҕау һалырға!
Пугач ҡаршы килмәһә лә:
— Ярай, минең янда барһын, — тине.
8 майҙа ҡуҙғалғайнылар. Аблайҙан яуап килмәне. Ышанмайҙар. Үрге Яйыҡҡа ҡарай туҡтанылар. Туҡтамаҫҡа ине. Барырға ла барырға, аттарҙы ашатырға кәрәк ине. Йәйәүлеләр ҙә бар. Екатеринбургын ала алмаҫтыр.
Бер арала Пугачев һораша. Ысынын белергә теләй:
— Ниңә Красноуфимға, Көнгөргә барманың?
Белобородов һөйләп бирергә булды хәҙер.
Ул туҡталды. Отрядты ял иттереп алырға булды, әйҙә, Салауат, Илсеғол Этҡолов, Этимәҫтәр һуғыша торһон. Үҙҙәре килеп сығырҙар. Юҡ, Салауаттың үҙ планы бар.
Барманы шул. Үҙенә-үҙе хужа булырға, башҡаларға баш булырға күнегеп алғайны инде ул.
Барһа, кешеләрен дә юғалтмаҫ ине. Хәҙер терһәген тешләһенме?
Ә шул арала, ул яйлаған саҡта, байтаҡ крәҫтиәндәр өйҙәренә таралды, үҙ өйҙәренән алыҫ китергә теләмәне.
Заводтарҙы үтеп, Уфалей аша Урал арҡаларын артылды. Февраль аҙағында ни бары 300 генә кеше менән Демидовтың Кәҫле заводына барып сыға.
Бында уға яңы крәҫтиәндәр, башҡорттар, татарҙар йыйыла: бер меңгә етә. Туптар ҙа, йәҙрәләр ҙә бар.
Ҡәлғәһе ныҡ. Боҙға ҡата. Ыршылар[1] ҡуйыла.
Бердаға рапорт оса. Екатеринбургты алыу өсөн ярҙам һорай.
Ә Гагрин килә, килә...
3 мартта Гробовский крепосына килеп, 12 мартта төндә Кәҫлегә килеп инде.
Ҡыуып сығарҙы, ҡыуып китте. Ике көндән Гагрин Ҡыштым заводын алды. Ләкин был ваҡытта Баҙарғол Юнаев Кәҫлене барып алғайны, Гагрин кире боролдо. Тағы Ҡыштымға — юлда уға Юламан Ҡушаев бәрелде.
Төрлө яҡлап ҡыҫтылар Гагринды. Ул Кәҫлегә бикләнеп алды.
Теге А. И. Бибиковтан ярҙам һораны. Шунһыҙ Силәбегә барып булмай.
Хәҙер Белобородов аңлай. Бергә тотонһаҡ, була икән. Ләкин ул сағында бүтәнсә, көсөм аҙ ҡалды тип, шул бары менән башҡорт олоҫтарына, Һатҡы заводына (Лугинин заводы) яңылыш үткән.
Хәҙер, Салауатҡа барып ҡушылыу кәрәк, ти.
— Тәүҙә үк бараһы булған...
Белобородов сапҡындар ебәрҙе. Апрель башында ғәскәрҙә 700 кеше ине. Бына шулар менән Көнгөргә барырға.
Унда полковник — Ҡошсо олоҫо старшинаһы Илсеғол Этҡолов бар.
Бөтә отрядтарҙы туплап, Көнгөрҙө алырға.
Бына шунда (Түбән Ҡыйғыла) Хәрби коллегиянан указ ала. 9 апрелдә. Ҙур ғәскәр йыйырға!
Рус казактары уның ҡушыуын тыңламаны — Һатҡыға йыйылманы. Май башында Белобородовта — мең кеше, төрлө милләттән.

[1] *Ыршылар — ҡаплап торған ҡоролма.*

Башҡаса йыя алмай ине ул.
Ә Грязнов, Туманов? Был яҡта икәнен беләбит. Улар хаҡында белешмәй.
Үрге Яйыҡ уң ҡулда ҡалды. Тауҙар яғына һыйынып үттеләр. Крепоста — Ступишин. Унда көс күп. Генерал-поручик Деколонг та.
Пугачев һорай: ҡайҙан йылға баш ала?
– Яйыҡ башымы? Юҡ, ул тегендә, ана, Ирәмәлдә.
Тау күренә. Уның суҡалары, һырттары, армыттары, шундағы уялар.
Ҡалҡан тауҙан Яйыҡ башлана. Уйташ арҡаһынан. Аҙнаш ауылы янында. Быны Яйыҡ казактары ла белмәйҙер әле. Шул һырттан Ағиҙел дә, Йүрүҙән дә, Инйәр ҙә, Әй ҙә, Уйыл да башлана.
Пугачев тәүҙә Яйыҡты ғына белә ине. Манифест яҙҙырған һайын, шуның үренән тамағынаса бөтә ерҙәрҙе һеҙгә бирәм, тигәйне. Был йылғаларын әйтәһе булған.
Пугачев Белобородовты янында тота. Бергә ашайҙар. Шул саҡ:
— Ниңә Юнаевты тапманың? Миңә депутат баш эйә. Белмәйһеңме? Подуров... һәләк булды. Давыдов... ни хәлдәлер... Тағы кем әле...
Белобородов:
— Береһе беҙҙең яҡта. Ишбулатов тегеләр яғына баш һалды.
— Һин дә... шуның артынанмы?
Белобородов:
— Ой, государь, рәнйетмә.
Пугачев башҡаса маҙаһына теймәне. Ашап ултырғанда инде. Эй, һәр кеше үҙенсә булыр. Ләкин башҡаға баш бирмәй, миңә лә буйһонмаһа...
Икенсе көндө тағы ҡылын тарта бының Ғали йәнәптәре.
— Һиңә Салауат янына барырға кәрәк ине.
Быныһына ла үкенә. Барманы шул. Хата булған.
Көс аҙ ине. Арттан ҡыҫып килгәндә бар ҙа ҡушыл да бит. Шулай ынтылды ла. Һатҡыла Юлай булыры самалы ине. Бергә торорбоҙ. Шунан бергә Пугачевҡа, тип юрағайны.
Бәлки, шундалыр Салауат ғәскәре менән. Ҡулында батша указы барҙыр. Шуны күрһәтә. Үҙенә ҡуша.
Бергә һөйләшә алырҙар ине.
Ә Салауат эргәлә. 6/IV — Михельсон килеүен ишетеп, Һатҡыға китә. “Салауат һуғыша торһон, Һатҡыла урын яҡшыраҡ”.
Ана шунда әмер ала. Бик йәһәт — Пугачевҡа, Магнитҡа ынтыла.
Ул шунда уҡ тотона әҙерләнергә, ләкин юлға сыҡмай. Юл өҙөгө. Һатҡыға, Златоусҡа. Икенсе ҡат әмер. Иван Шибаев[1] килтергәне.
Белобородовҡа — жалоба! Мародер! Асыулы.
Шибаев:
— Әмер алдыңмы?
— Алдым.
— Ниңә китмәнең?
— Һинең эшең юҡ. Ниңә урлаштың? Һине бығаулайым, — ти Белобородов.
— Тәүҙә бар.
Ул юлда. Косотур (әлеге Златоуст) заводында урлашҡан. Шунан — арест. Бәргеләп тә алғандар. Ул:
— Мин — батшанан, бына пакет,– тип ҡотола.
Белобородов ебәрә.
Шибаев китә. Алдан бара.
Златоуста бик күп кешеләр ҡушыла.
Сыбаркүл ҡәлғәһе аша Магнитҡа яҡынаялар.

---

[1] *Шибаев Иван – Илек казағы, б. к. полковниғы.*

***

Бына килде лә бит. Теге алдан килеп һөйләгән.

Пугачев: “Был үс алыуға оҡшай ҙа”, — ти.

Үрге Яйыҡ ҡәлғәһе артта ҡалды.

Коменданты (полковник) белә, ләкин боҫоп ҡалды.

Генерал-поручик Деколонг та унда.

Емельян Пугачев килгәнсе үк бындағы крепостарға, форпостарға башҡорт яугирҙары тынғы бирмәне. Төркөм-төркөм ябырылдылар. Үрге Яйыҡ дистанцияһы коменданты полковник Ступишин йөҙәп бөттө. Көн дә бер яман хәл, хөрт ваҡиға. Йә ябырылалар, йә юлда берәй команданы, обоздарҙы баҫалар. 21 апрелдә Ҡарағай крепосына ябырылғандар, өс-дүрт кенә көн үтте — уның эргәһенән генә меңдән артыҡ атты алып киттеләр. Һис әмәл, һис тыныслыҡ юҡ. Был хаҡта Ступишин әленән-әле генерал Деколонгҡа рапорт бирә, ярҙам һорай. Юҡ, ярҙамы аҙ.

Май айы башында Уй һыҙатында, Магнит, Үрге Яйыҡ, Ҡарағай крепостары янында йәшәгән башҡорттар, мишәрҙәр хәрәкәте көсәйҙе. Был хаҡта ул губернатор Рейнсдорптың үҙенә рапорт ебәрҙе. Ул үҙе лә тик ятманы. Ҡарағай ҡәлғәһенең коменданты полковник Фок[1] менән бергә башҡорт, мишәрҙәрҙе ҡыйратырға сыҡтылар. Ауылдарын яндырҙылар, малдарын әйҙәп киттеләр. Бында ҡаршылыҡ бармы-юҡмы, улар өсөн барыбер. “Йорттары ҡыйралғас, ҡайтырҙар!” — тип үсәй Ступишин. Ул ғына түгел, ҡулға төшөрә алған яугирҙарҙың үҙҙәренә тотоналар. Ҡайһы армай нимәгә оҫта. Береһе ҡолаҡтарын, танауҙарын киҫә, икенсеһе телен тартып ала, балта менән ҡул бармаҡтарын өҙә... Әйҙә, унан китһен, йәйләү һайын күрһәтһен. Ҡурҡырҙар. Баштары булһа...

Ул әйтер... Уның арҡа терәрлеге бар, көс күп. Был — Ырымбур менән Екатеринбург араһын бәйләүсе урын. Ҙур әһәмиәтен иҫкә алып, бында 1737 йылда Исәт провинцияһын Татищев ойошторғайны. Дүрт өлөштән — дистрикт (округ): Исәт, Окунь, Щадрин һәм Ҡуртамыш.

1743 йылдан үҙәге Силәбелә.

1736 йылда уҡ крепостар төҙөлдө: Силәбе, Миәс, Сыбаркүл, унан башҡалар.

Белобородов:

— Миңә ҡуш. Иҫбатлайым.

Бер крепосҡа тоҫҡала.

1) Тәүҙә указ тотторop (ҡорал ташларға, ҡапҡа асырға), кешеләрҙе алдан ебәрә әйтеп.

2) Үҙе атакаға ташлана. Алдан, йәйәүләп. Үҙе һуғышта күргәнсә, офицерҙар кеүек, ҡылысын күтәрә. Артҡа әйләнә-әйләнә әйҙәй. Аҡһаҡ аяғы ла ҡамасауламай кеүек.

Туптар. Белобородов — үҙе канонир.

Мылтыҡтан — залп. Ҡапҡа асалар. Туҡтата.

Еңел алынды. Пугачев, Белобородовҡа ышанып, бер полк бирә.

Бынан һуң... Степная, Петропавловск форпостары алына. Алға... Пугачевтың уйы — заводтан заводҡа. Унда яҡлаусылары, ҡарауылы күп. Силәбе, Екатеринбург. Унан — Мәскәүгә. Алға!

Крепостар яна, күперҙәр ватыла, быуалар йырыла.

Троицк (алыу).

19/V — Пугачевтың ғәскәрендә 10—12 мең кеше. Ә крепоста — 700 кеше. Ләкин крепоста ҡаршылыҡ ҙур. Алалар. Лагерь яһайҙар.

## 9

Ир-ат өйҙә тормай. Бынынһын Айым белә. Кинйәһе лә өйҙән өҙөлмәне. Ҡайта ла китә торғайны. Әле бына күпме яу артылды.

Ырымбурға киткәндә лә борсолманы.

---

[1] *Иван Максимович фон Фок — полковник, Ҡарағай ҡәлғәһенең коменданты.*

Әле бына килененән һорай. Буранбикә:

— Әй, ҡәйнәм. Ул батша янында йөрөгән яранына борсолоп буламы?

— Батшаның дошмандары күп була шул. Һеләүһен дә ҡайтмай.

— Киткән иркәк ҡайтмай йөрөрмө?

Атаһы юҡта, эйе, ул атаман. Шулай йортауай ғына түгел, унынына Көҫәпәй ҙә булдыра. Бөтә ил-йортҡа атаман. Ҡайһы берәүҙәр уны гөбөрнатор тип тә ысҡындыра әле.

Ә Кинйә — алыҫта, бында ҡалғандар тырым-тырағай ташланмаған бит, Һеләүһенгә киләләр. Теге граф... Зарубин юҡҡа ғына башкирский владитель тип көлмәй ине. Уға киләләр шул. Ул был яҡта атаһы урынына эшләй, хәл итә.

Улы ҡайтҡылап йөрөй. Ҡайтты бит. Ул да тынысландыра. Әле кис, ҡараңғы төшкәс, ҡайтты. Ә үҙҙәре ниҙер һөйләйҙәр, әйтмәйҙәр, борсолмаһын, тиҙәр, әлбиттә.

Әсәһе ҡыялатып һорай.

— Улым, Һеләүһен, тим. Йондоҙҙар нисек ти?

— Маймыл йылында (ошо 1774 йыл) имен-аман була ул.

— Улар үҙ урынында. Ана, ҡара әле. Ай ҙа... йомортҡа ҡабығын тишкән өйрәк бәпкәһе кеүек, болот шәкәрәһен йыртып сығып килә.

Буранбикә көлөп ҡуйҙы.

Ә ҡәйнәһе:

— Һай, ырыҫың арҡҡыры. Шаяртаһың, — тигән була. — Мин хәүефле төштәр күрәм.

— Борсолма... хәбәр килә бит. Унда ҡәлғә артынан ҡәлғә алалар.

Хәбәр килә. Әүжәндә булдылар. Иҙелбашта.

Айым борсола шул. Шунда аҙыҡ илттеләр. Айым да яңы ыҫланған ҡорот, май, тағы ит, кейем дә әҙерләне.

Яраланһа тип, кәкүк[1] айының юл япрағын йыйып киптерҙе... Яраһына ябыр.

Үҙе бында ла төнәтмәһен сепрәккә еүешләп шешкә-маҙарға яба, тамаҡ быумаһына ла килешә, ашҡаҙанына ла.

Әле лә ҡайнатыуҙан өҙөлмәй. Ылаштар буш тормай, ҡорот ыҫлана, яңынан-яңы турһыҡ тегәләр.

Унынһы ғына түгел шул.

Әсәһе:

— Яманһары ҡылана бит, ярамағанды.

— Аяҡтарын ҡыҫҡарттылар, ҡулдарына һуҡтыҡ бит.

— Ул тағы ҡуҙғалыр. Унда бит Көнгәк тауы артында бер дәү әфисәр бар, ти.

Һеләүһен әсәһенә ҡарап ҡуйҙы.

— Кем, полковник Шепелевты әйтәһеңме?

— Шулдыр. Исемен ҡайҙан беләйем... Ана тегендә Томаш түрә йөрөй, ти. Килеп баҫмағайы, тим.

Һай, әсәһе!

— Бына бит исемен беләһең.

— Бәй, унынһы ни электән бында, Ырымбурҙа, тоҙ түрәһе лә булды. Каруандар үткәндә аҡсаны йыйҙылар. Ҙур түрә бит, һәр саҡ баш.

Коллежский советник Иван Ларионович Тимашевты әйтә әсәһе. Элек Ырымбурҙа тоҙ конторанһы начальнигы булды, сик буйының таможня конторанһында баш ине. Хәҙер ғәскәр менән йөрөй.

Элекке дәрәжәһен ҡулдан ысҡындырмаҫ өсөн, көсөнән килһә, бөтә башҡорт ерҙәрен ҡармап алыр, арҡыры-буй айҡап сығыр ине. Батша эҙенән Ташлыға килде, Йылайырға ынтылды, Покровка заводына. Ләкин крәҫтиәндәре, башҡорттар менән бергә, ебәрмәнеләр. Хәҙер Ирәндек тауҙарына китте. Унда ла — башҡорттар, ҡалмыҡтар.

Бар ундайҙар. Тик әсәһе ҡайҙан белә уларҙы?

[1] *Кәкүк – май айы (автор һүҙлегенән).*

— Әсәй, һинең үҙ “штабың” бармы? Быларҙы ҡайҙан беләһең?
— Штаб. Уныһы нимә? Ә бына ҡолаҡтарым, күҙҙәрем бар. Үҙе аласыҡтан сыҡмай, тигәс тә...
Бында Буранбикә лә:
— Ҡәйнәм... ул атаман ҡатыны түгелме? — тип һүҙгә ҡыҫыла.
Эйе... Был заманда ул да белергә мәжбүр. Яу башлыҡтарын да, генералдарын да.
Ҡәйнәһе әйтте шул саҡ уйсан ғына:
— Миңә белергә кәрәк. Икегеҙ өсөн. Бөтәбеҙ... Мин әсә бит...
Яу Урал армыттарын артылһа ла, күптәрҙең ил-көнө бында бит. Баш командующий генерал-поручик Ф. Ф. Щербатов та Бөгөлмәлә тик ятмай. Уң яҡҡа – Голицын ғәскәрҙәрен, һул яҡҡа Михельсонды ебәрҙе. Төрлө яҡтан.
Айым һиҙенгән: полковник П. А. Шепелев[1] Бөгөлсәнгә килеп туҡталды, унда Санкт-Петербург карабинерҙар полкы. Стәрлелә подполковник И. К. Рылеевтың атлылар отряды.
Бөтә оло юл — Ырымбурҙан Өфөгә саҡлы – ҡараулы. Отрядтар йөрөп ята.

***

Быларын белә Һеләүһен.
Ләкин карателдәр әллә ни ҡурҡытмай. Уларға ҡаршы көс бар. Ошо тирәлә генә туҙыҡаһы Ҡотлогилде. Ҡаранай Моратов. Ҡасҡын Һамаров. Улар менән бәйләнеш тота. Тик бында бик үк баш бирә һалмайҙар.
Һеләүһен уларға барып ҡайта. Әсәһе лә белә. Тик бына улының сере... Борсолтмайым, йәндәрен ҡужғытмайым, тиҙер. Бөтәһен дә аса һалмай.
— Улым, ниңә ҡасышлы уйнайһың?
— Ниңә?
— Ҡасҡын менән дә, Айыт менән дә серҙәрегеҙ бар.
Һеләүһен:
— Бар инде ул, әсәй.
Әсәһе бер ҡағыҙ бирә: өндәмә (воззвание).
“Беҙки Ҡасҡын Һамаров полковниктан.
Һеҙки хөрмәтле башҡорт, татар, мишәр старшиналарына иҫән-һаулыҡ булһын.
Сенат беҙҙең ил ағаларын үлтереп-ҡырып бөтөрөргә бойорған. Ә һөйөклө ҡатындарыбыҙҙы, ғәзиз балаларыбыҙҙы деүәрәндәргә һатып бирергә.
Йәмәғәт! Һәммәгеҙ шул ҡәһәрле дошманға ҡаршы күтәрелегеҙ. Ышбу хатты алыу менән ҡорал-яраҡтарығыҙҙы тағы алың, яраулы аттарығыҙға атланың, яуыздарға юл ҡуймаң. Алыш беҙҙең яҡта, еңеү беҙҙә булһын.
Яҙылды: 21көн, кәкүк айы”.
Һеләүһен уҡыны. Таныш. Өндәмәләрҙе, бындай бойороҡ-ярлыҡтарҙы батша исеменән Ҡасҡын да яҙа, ул да тарата. Бына бит, әсәһе ҡулына ла килеп юлыҡҡан.
— Үҙең күсереп алғанһың бит, әсәй.
— Күсерҙем. Ундай күсермәне Буранбикә лә яһай, ебәрәбеҙ.
— Һай, рәхмәт!
Тағы әҙерләнә.
Егеттәре Төмтөк, Әбеш.
Айыт күренеп ҡалды. Бындалыр.
— Улым, ҡайҙа китәһең?
— Эйе...
— Һинең шулай: кисә ҡайттым, бөгөн киттем булыр.
— Юҡ, әсәй, бөгөн киттем, таңда ҡайттым. Йорт-ер бағауыллы торһон. Бына һеҙ бында тыныс йоҡлаһын, тибеҙ.
— Эйе, заманы шундай. Юғиһә, йомшаҡ түшәктә йоҡлар инең. Мәхәллә

[1] *Шепелев Петр Амплиевич — полковник, Санкт-Петербург карабинерҙар полкының командиры.*

ҡарттары алдында михрапта аяттар уҡып ҡына ултыраһың бар ҙа.

Китәләр.

Иҙел башында. Ҡотош, Түләк ауылдары тирәһендә Ҡасҡын булырға тейеш.

Муйыл һыуығы. Уның сәскә атҡан ваҡыты. Һалҡын көндәр әйләнеп килә.

Шунда Ҡасҡын. Һөйләшәләр.

Ҡасҡын:

— Күренәме, юҡмы? — Ул бер төрлө генә һорамаç, һорауһыҙ ғына әйтмәç. — Заводта юҡ.

Әсәһе һиҙенгән сер ине был. Пугачев ҡоро киткәс тә, эргәләге Воскресен заводы приказчигы Петр Беспалов юғалып-юғалып тора. Уны заводта күҙәтәләр. Ҡасҡын менән Һеләүһен дә ҡолаҡтарын ҡарпайтты.

— Ә был яҡҡа киткән, тиҙәр. Ырымбурғамы, юҡмы?

— Тиктәçкә түгел.

Ул инде Пугачев китеү менән үк хәбәр итергә... 50 йәҙрә ҡалғанын күрҙе. Кемгә? Богоявленға. Бер байҙың заводтары бит. Унда лаһа подполковник Михельсон. Тирә-яҡта, яҡында бүтән юҡ.

— Һатылалар, — Ҡасҡын һүгенә. — Минең артта — Муса Имәнғолов.

— Унда Ҡотлогилде туҙыҡам бар әле. Эйе, старшиналар ҡурҡа. Хөкүмәт яғына сыға. Халыҡ эйәрмәһә лә, донос яһайҙар.

— Үҙ кешеләрен туплаҙар.

Хәҙер бына тағы хәбәре бар: Михельсон киткән. Стәрлелә Рылеев бар. Бөгөлсәндә — Шепелев.

Хәбәр генә түгел. Планы бар. Ғәскәр һорай. Заводты баçып алырға, бындағыларҙы ҡыйратырға.

Петр Беспалов 4 майҙа Ырымбурға — губернаторға киткәйне. Кеше ебәрмәне. Үҙе китте.

Быны Ҡасҡын да, Һеләүһен дә бик яҡшы һиҙенә. Былай тынис ҡалдырмаçтар. Көстө бергә туплап, үҙҙәрен туҡтатырға ла... Төрлө яҡҡа тарталар шул.

Халыҡ миктәгән, ә уның тағы күңелен һүрәләр. Күптәр, башҡа юл юҡ, тип иçәпләй.

— Элек яу еңелһә, баш һалғандар. Беҙ ҙә ярлыҡаш эçтәйек, ти. Йәнәһе, һуғышта ла солох ҡылышалар. Эйелгән башты ҡылыс сапмай. Сапмаç!

Уларса, ғәйебеңде таны. Ниндәй ғәйеп? Фетнәлә ҡатнашҡанһың. Таныҡтар, шаһиттар табыр, ана шул Мерәçовтар, Ҡыҙрастар — иң баштан. Ә уларҙан һуң армайҙар муйыныңдан да, ҡабырғаңдан да аçырға әҙер.

Ҡыҙрас Муллаҡаев май башында яҙа Дим буйында. Яуыз Пугачевты көтәләр, тип яҙа. Ҡара ҡоҙғон ҡан теләй, яу саҡыра, тип Һеләүһен хаҡында ла ишеттергән. Ҡурҡыныс, белә ул ярлы-ялпы, халыҡ саруаһы уға ни әйтерен.

Ә күршеһе, мишәр старшинаһы Ибраһим Мерәçов хөкүмәт яғына сыҡты.

Быныһын Һеләүһен менән Ҡасҡын белә. Ә бына рапорт яҙыуын (Өфө өйәҙ воеводаһына) белмәйҙәр.

Ҡасҡын:

— Ә Әлибай тик ята. Уны бит Стәрленән Иҙелбаш юлын ҡарарға тип ҡайтарҙылар, Стәрле тирәһен ҡарамай. Унда Ҡаранай һаҡлай.

Һеләүһен:

— Эй, барып әйтергә ине. Күҙ һал, Әлибай старшина, боçоп ятаһың тип. Әллә һин дә баш һалырға уйлайһыңмы? Улар һинә вәғәҙә итерҙәр.

— Ҡаранайға таянып була.

***

Артта тынис булһын, тинеләр, караттар йоғонмаһын. Юҡ, былай йөрөмәйҙәр.

— Эйе, уң яҡ ҡабырғала беҙ.

Ҡасҡын:

— Мин бында Шипләүгә... Көс аҙ.

— Туплап алып килермен. Тегенән Ҡаранай килер.

Ул Һеләүһендең хәлдәрен белә. Кешеләр йыйырға! Ул туплап йөрөй, өгөт тарата. Ә Ҡасҡын мөрәжәғәт, хат яҙа.

Һеләүһен юлды аша сыҡты. Һуҡайлы буйында. Шепелев та, Мәләүез дә күрмәне. Эт өрөр — бүре йөрөр.

Ашҡаҙар буйы. Батыр ауылы. Ул ҡарттың улдары Мәүкәй, Бикбирҙе, кешеләр йыйып, ҡушылды.

Унан үрҙә — Ҡазбулат. Ҡәрҙәштәр. Юлдаш — старшина. Көс бирәләр.

Һеләүһен бер әбей өйөнә инә. Тас әкиәттәгесә: түр башында бер ҡортҡа, ашап ултыра бутҡа.

Егет сәләм бирергә тейеш. Юғиһә, ул, ике ҡабырмын, бер йотормон, тиер.

— Әссәләмәғәләйкем.

— Әҙәпле егет икәнһең.

Ҡортҡаның исеме бар. Ә был борон ҙур һүҙ ырыу Ҡорто тигән кеүек, ҡатындар хакимиәтендә — ырыу башлығы. Яҡшы булһаң, ул бөтә йомошто үтәй.

Үтәй ул байтаҡтан. Кешеләрен ебәрҙе. Иртән егеттәре йыйылды.

— Хәбәрең китте тегендә...

— Эйе, үҙем ҡалдым бында.

— Минең алда.

Ҡаранайҙы күреп һөйләште. Ул Шепелевҡа килеп, ҡужғытырға тейеш. Ә унан...

***

Ҡасҡын әҙерләнеп торған. Түләк ауылында осраштылар.

Шепелевҡа һөжүм.

Ҡасҡын:

— Барып баҫабыҙмы, юҡмы?

— Баҫабыҙ.

18/V. Ҡаранай. Һуңынан бында команда килә. Ҙур. Былай алышып булмаҫ. Төндә аттарын ҡыуалап алып китәләр. Һаҡсылары үлә. Ҡыуып етә алмайҙар.

Ашҡаҙар буйына төшәләр.

Артынан — 300 гусар.

20/V. Ҡаранай отряды ҙур — 600 башҡорт. Дим буйында Кәркәле ауылында 40 гусар үлә, күптәр яралана. Гусарҙар ҡаса. Ашҡаҙар буйына, Мырҙалар ауылына. Гусарҙар мәсеткә кереп бикләнә. Ҡаранай ҡамай. Шунда уға 300 ҡалмыҡ ҡушыла.

Гусарҙар бик ҡыйынлыҡ менән отпор ойоштора. Уларҙың 4 туптары бар. Улар Бөгөлсәнгә ынтыла. Уларға юл бирмәйҙәр. Стәрлегә лә, Бөгөлсәнгә лә, Бөгөлмәгә лә китәләр.

Иҙел терһәге — Көнгәккә табан. “Беспаловты күрҙек, килә”, — тиҙәр разведчиктар.

Шепелевтың көсө аҙайҙы. Петр Беспалов полковник Г. И. Хорват менән Ырымбурҙан килә. Воскресенға барырға ниәтләйҙәр.

Ә бынан Һеләүһен килеп етте.

Бой. Ҡасҡын Беспаловты күрә. Туп-тура. Теге ҡасҡан була. Ҡыуып етеп үлтерә.

Һеләүһенгә:

— Нимә әйтәйем быға, әйтмәйемме?

— Әйт. Ялғансы булды, ялған менән донъя гиҙҙе, кире ҡайта алманы.

— Бына шулай тип иҫән сағында әйтергә ине.

Һеләүһен ҡайта.

— Әсәй, Көнгәк буйҙарың тыныс, — ти.

Атаһына әле генә әйтә алмай. Ундағы хәлдәр ауыр икән.

Бынаһын әсәһенә әйтмәне, хәүефле уйҙары, әйтмәһә лә, йөҙөндә сағылды.

*(Дауамы бар.)*

# ҺУҢҒЫ БАШҠОРТ ХАНЫ *йәки* АҠАЙ – ҠАРАҺАҠАЛ ЯУЫНА ЯҢЫ ҠАРАШ*

Ихтилалдың өсөнсө һәм аҙаҡҡы дәүере һуңғы башҡорт ханының исеменә, уның "ҡара эштәре"нә бәйле. "Ихтилал баҫтырылды, башҡорттар башҡа баш күтәрә алмай", – тип империя властары башҡорттарҙың теүәл иҫәбен алырға була. Улар бының менән яһаҡ түләүҙе бөтөрөп, һәр башҡортҡа айырым һалым һалыу, крепостной крәҫтиәнгә әйләндереү, улар ҡулындағы ерҙәрҙе бөтөнләй тартып алыу маҡсатын ҡуя. Башҡорттар уны тиҙ һәм яҡшы аңлай. Иҫән ҡалған хәрби етәкселәрҙән Миңлеяр Ҡарабаев, Сәйетбай Алкалин, Ырыҫымбай Игембәтов, Бәҙеғол Ҡотлоғужин, йөҙ башы Исламғол Юлдашев, Дыуан-Табын улыҫы старшинаһы Солтан Арыҫланбәков һ.б., халыҡ иҫәбен алыуға юл ҡуймаҫҡа ҡарар итеп, бөтә урында, айырыуса Себер һәм Нуғай даруғаларында, иҫәпселәргә ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтә. Һөҙөмтәлә 1739 йылдың майында иҫәп алыуҙы туҡтаталар. Ләкин был хәл Соймонов менән Урусовтың асыуын ҡабарта; ихтилалдың яңынан тоҡаныуына бер сәбәп була.

Башҡорттарҙың иҫәбен алыу менән бер үк ваҡытта, яҙалау командалары даруғанан даруғаға, улыҫтан улыҫҡа йөрөп, ихтилалда ҡатнашҡан башҡорттарҙан штраф аттары йыйырға тотона. Соймоновтың әмере буйынса был ғәмәл башҡорттарға ҡарата яңы ҡаты яҙаға әйләнә. Нуғай һәм Себер даруғаларында Алексей Тевкелевтың ике туған ҡустыһы Роман Уразлин, поручик Петр Черкасский (Тубыл воеводаһы Михаил Черкасскийҙың ейәне – **Ә.Й.**), капитандар Кублицкий һәм Стрижевскийҙың хәрби төркөмдәре айырыуса аяуһыҙлыҡ күрһәтә. Аты булмаған кешене туҡмап, малын, аҙыҡ-түлеген тартып алалар. Ҡаршылыҡ күрһәткәндәрҙе үлтереп, өйҙәрен яндыралар, ҡайһыларын ҡулға алып, Минзәләгә оҙаталар. Яҙалаусылар алыштарҙа һәләк булған, яҙалап үлтерелгән башҡорттарҙың ғаиләләрен эҙләй, ҡорал табырға тырышып, бөтә өйҙәрҙе тентеп сыға. 1739 йылдың ғинуар – сентябрендә улар башҡорттарҙан 772 йылҡы тартып ала, 176 кешене Соймоновҡа оҙата. 1739 йылда башланған яңы террор ихтилалдың яңынан тоҡаныуының икенсе сәбәбе була.

Соймонов, Башҡортостанда хәлде ҡатмарлаштырыу өсөн, Роман Уразлинға 1737-1738 йылдарҙа ихтилалда ҡатнашҡан 28 етәксене ҡулға алып, Минзәләгә ебәрергә бойора. Шулар араһында Миңлеяр Ҡарабаев, уның бер туған ҡустылары Яманғужа (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа – Яманғол) менән Байбаҡ Ҡарабаевтар, оло улы Мәүлет Миңлеяров, Сәйетбай Алкалин, Ырыҫымбай Игембәтов, Әйле улыҫы батырҙары ағалы-ҡустылы Сураш менән Ҡыҙрас Килдәшевтар, Дыуан-Табын улыҫы старшинаһы Солтан Арыҫланбәков, Төлкөсура Аллағолов һ.б. була. Был бойороҡ – ихтилалдың яңынан башланыуына өсөнсө сәбәп. Өҫтәүенә, илебеҙҙә яңы ҡәлғәләр, башҡа нығытмалар, заводтар төҙөү дауам итә. Башҡорттарҙың түҙемлеге бөтә, улар яңынан ҡорал алырға мәжбүр ителә.

1739 йылдың яҙында уҡ башҡорттар үрҙә атап үтелгән етәкселәр эргәһенә

* *Аҙағы. Башы 9-сы һанда.*

туплана башлай. Августа Төлкөсура Аллағолов етәкселегендәге күп һанлы төркөм Роман Уразлин, капитан Стрижевский отрядтарына һөжүм итә, әммә уңышҡа өлгәшә алмай. Бик күп ихтилалсы, шул иҫәптән Төлкөсура батыр, уның көрәштәштәре: Ҡатай улыҫы старшинаһы Уйылдан Сирбаев, Көҙәй улыҫы батыры Теләкбирҙе Солтанғолов, Төрөкмән улыҫы старшинаһы Сабир Ҡараҡшаев һ.б.карателдәргә тотҡонға эләгеп, Минзәләгә оҙатыла. Батырҙарҙы язалап үлтерәләр.

Батшабикә Анна Ионновнаның бойороғо буйынса август баштарында Соймонов менән Тевкелев башҡорттарға ҡаршы яңы, киң күләмле язалау операцияһы әҙерләргә тотона. Бының өсөн шарттар ҙа яйлы: дүрт йыл барған Урыҫ-төрөк һуғышы тамам, тимәк, яза полктарын Башҡортостанға күпме кәрәк шул саҡлы оҙатырға мөмкин. Был ваҡиғанан аҙ ғына алда, 17 июндә, властар Ырымбур комиссияһының башлығын алмаштырып, Татищев урынына Нуғай мырҙалары тоҡомо, башҡорттарҙың иң яуыз дошманы һәм йәлләде, кенәз Василий Урусовты ҡуя.

17 августа Урыҫ-төрөк һуғышынан ҡайтҡан 5878 һалдат һәм офицерҙан торған дүрт атлы полк менән Урусов Әстерхандан Һамарға килә. Документтарҙан күренеүенсә, сентябрь-октябрҙә ул төҙөлөп ятҡан ҡәлғәләр, редуттар, башҡа нығытмалар менән таныша, уларҙы төҙөлөш материалдары менән тәьмин итеүҙе яйға һала. Һамарға әйләнеп килеп, Урусов үҙ ғәскәрен башҡорттарға ҡаршы 1740 йылдың яҙы, йәйе һәм көҙө булып үтәсәк язалау походына әҙерләргә керешә. Соймоновтан кәңәш һорап, йыш хат яҙа. Киләһе язалау операциялары буйынса ентекле фекер алышыу өсөн, 1740 йылдың ҡышында Соймонов үҙе лә Һамарға килә. Минзәләгә ҡайтыу менән, ул үҙенә буйһонған язалау полктарын юлға әҙерләй, "иректе" отрядтарға ла тейешле күрһәтмәләр бирә.

Ғөмүмән, башҡорттарға ҡаршы язалау операцияһына батша ялсылары ентекле әҙерләнә. Был факттар иғтибарға лайыҡ, юғиһә "История Башкортостана с древнейших времен до наших дней" тип аталған ғилми хеҙмәттең беренсе томында ла, башҡа дәреслектәрҙә был турала бер ни ҙә әйтелмәгән.

Яуыздарҙың пландары тиҙ арала башҡорттарға билдәле була, һәм улар ҙа үлемесле алышҡа әҙерлек башлай. 1739 йылдың июнендә башҡортса кейенеп (бәлки, башҡортса һөйләшеп тә) алған татар шымсылары Атнағол Тәтекәев менән Ибрай Иманғолов Һарт, Көҙәй, Дыуан улыҫтарында ауылдан-ауылға йөрөп, башҡорттар менән аралаша, хәл-әхүәлдәре менән ҡыҙыҡһына. Һарт улыҫындағы Әлекәй ауылында улар "тоғро" башҡорт старшинаһы Әлекәй Ҡаракөсөковта ҡунаҡ булғанда башҡорттарҙың алышҡа әҙерләнеүен, Рәсәй батшалығынан айырылып сығырға йыйыныуын ишетә. Документтан күренеүенсә, был турала улар татар йөҙ башы Мостай Мырҙашевҡа еткерә: "И подлинно де он Аликей ведает,– тип яҙыла бер документта,– что во всех волостей башкирцы письмянно меж собою дали знать, чтоб им в подданстве и под властию ея и.в. (императорского величества) не быть. А думают де они съезжаются за Уралом в Куваканской волости у башкирца у Ялызиянгула (йәғни Бәҙеғол Ҡотлоғужинда – **Ә.Й.**)". Писарь Вертлугов: "Да они де татара Аднагул и Ибрай сами видели, что башкирцы собираютца подлинно на войну и друг у друга берут добрых лошадей и запас и наскоре из деревни в деревню переезжают",– тип өҫтәп ҡуйған. Татар шымсылары, Әлекәй Ҡаракөсөков һәм Көҙәш Рахманғоловтың ошағы тиҙ арала Тевкелев менән Соймоновҡа, артабан Сенатҡа, батшабикәгә мәғлүм булып, халҡыбыҙға ҡарата ҡаты язалау операцияларын үткәреү өсөн төп һылтауға әүерелә.

Соймоновтың бойороғо буйынса Минзәләлә Төлкөсура һ.б. батырҙарҙың язалап үлтерелеүен ишеткәс тә, иҫән ҡалған ихтилал етәкселәре Миңлеяр Ҡарабаев, Мәүлет Миңлеяров һәм хәрби етәкселәр: Ҡаратаулы улыҫы йөҙ башы Исламғол Юлдашев, уның ҡустыһы (бәлки, ағаһы), старшина Йәғәфәр Юлдашев, Тырнаҡлы улыҫы батырҙары Йәрмөхәмәт менән йөҙбашы Көҙрәт Хажиевтар, Сәйетҡол батыр һ.б. 70 йәшлек Бәҙеғол Ҡотлоғужин етәкселегендә язалаусылар менән аҙаҡҡы алышҡа ныҡлап әҙерләнергә тотона.

Әммә ихтилалға әҙерлек етешмәй, сөнки 1737-1738 йылдарҙағы ихтилалда Ҡазан менән Нуғай даруғаларында язалаусылар һәр икенсе башҡортто юҡ итә. Бик күп һәләтле ғәскәри етәкселәр һәләк була. Өҫтәүенә, бик күп ауылдар яндырылып, иҫәпһеҙ мал-тыуар юғалтҡан ауылдарҙа аслыҡ башланып, өс йыл өҙлөкһөҙ барған ихтилалда халҡыбыҙ ныҡ йонсой. Башҡорттарҙы яңы алышҡа күтәреү өсөн уларға яңы көслө етәксе, яңы көрәш байрағы кәрәк була. Уны ихтилал етәкселәре үҙен Солтан-Гәрәй тип таныштырған, ә ябай халыҡҡа Ҡараһаҡал исеме менән билдәле булған кешелә күрә. Ихтилал етәкселәре Ҡараһаҡал ярҙамында ике быуат һаҡлап килгән төп маҡсатын: йәғни Рәсәй батшалығынан сығып, үҙ дәүләтен ҡороу хыялын тормошҡа ашырырға өмөтләнә. Ләкин артабан Ҡараһаҡалдың үҙенә бөтөнләй икенсе маҡсат ҡуйыуы, башҡорттарҙың хәле, төп маҡсаты уны бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмауы асыҡлана. Был фекер, бәлки, күптәр өсөн көтөлмәгән яңылыҡтыр, сөнки бөтә ғилми хеҙмәттәрҙә лә Ҡараһаҡал тураһында бөтөнләй икенсе төрлө әйтелә. Был мәсьәләгә әйләнеп ҡайтырбыҙ әле.

Ҡараһаҡалдың Башҡортостанға ҡасан һәм ҡайҙан килеүе тураһында тарихи яҙмаларҙа, хеҙмәттәрҙә, тарихи сығанаҡтарҙа төрлө фекерҙәр бар. Бер сығанаҡта, ул Кубанда нуғайҙар араһында йәшәгән һәм Башҡортостанға шунан килгән, тип яҙылған. Икенсе сығанаҡта, ул Ҡаҙағстандан килгән, имеш. Өсөнсөһөндә, ситтә йөрөгән башҡорт һәм уны Башҡортостанға ихтилал башланыр алдынан Ҡалмыҡ ханлығынан Аҡай Күсем һәм Килмәк абыҙ саҡырып килтергән, тигән фекерҙәр сағыла. Ул – Юрматы улыҫы башҡорто, тигән фекер ҙә бар.

Тарихсыларҙың күбеһе, әҙәбиәтселәр, яҙыусылар Ҡараһаҡалдың Юрматы башҡорто икәненә ышанған. Ҡул аҫтындағы тарихи хеҙмәттәрҙе, документтарҙы өйрәнеп, мин хәҡиҡәткә яҡыныраҡ икенсе фекергә килдем: Ҡараһаҡалдың һүҙенә ҡарағанда, ул Себер даруғаһының башҡорт-ҡаҙаҡ сигендәге Теләү улыҫына 1739 йылдың яҙында Ҡаҙағстандан килеп, бер башҡорт ауылында Зөйәмбәт өйөндә йәшәгән. Икенсе сығанаҡ буйынса, ул Башҡортостанға 1738 йылда уҡ килеп, Нуғай даруғаһында йәшәй. Аҙаҡ, эш эҙләгән кеше булып, Ҡара-Табын, унан Барын-Табын улыҫына барып сыҡҡан. 1739 йылдың ғинуарында йә февралендә Барын-Табын улыҫының Ялансыҡ ауылында Раҡай Йәнәкәевта эш табып, өс ай самаһы шунда йәшәй. Үҙен, Нуғай даруғаһы Юрматы улыҫы башҡорто, тип таныштыра. Исем-шәрифем Миңлеғол Юлаев, атайымдың исеме Ниязғол, ләкин мин Ҡараһаҡал булып йөрөйөм. Һәләүек йылғаһы буйындағы бер ауылда өйөм, ғаиләм бар. Әсәйемдең исеме – Емеш, ҡатынымдыҡы – Ҡышбикә, Рәхимбикә исемле ҡыҙым, Ситембәт менән Бикбулат исемле туғандарым бар, тип һөйләй. Иғтибар итәйек, Ҡараһаҡал ауылының исемен атамаған, ә “Һәләүек буйындағы бер ауылда өйөм бар” тип кенә әйткән.

Һуңынан, Раҡай Йәнекәевтың белдереүенсә, Ҡараһаҡал Ҡара-Табын улыҫындағы бер башҡорт ауылында Баҡтыбай Иштуғановта йәшәгән, Барын-Табын улыҫына кире килеп, төрлө ауылдарҙа эшләгән. Йыш ҡына ул Урал аръяғындағы башҡорт ауылдарында була, ундағы халыҡ менән аралаша. Ҡайҙа барһа ла, ул: “Һеҙ Урыҫ батшалығының ҡолона әйләнгәнһегеҙ, мин һеҙҙе шул ҡоллоҡтан ҡотҡарам”,– тип һөйләп йөрөй. 1739 йылдың йәй урталарында Ҡараһаҡал Әйле улыҫы башҡорто Күскилде һәм Барын-Табын улыҫынан Нуранбәк Ишембәтов менән, әсир алынған башҡорттарҙы ҡайтарыу өсөн, ҡаҙаҡтарға бара. Улар һораған йоломдо (выкуп) түләп, азат ителгәндәрҙе ҡайтарып ебәрә, ә үҙе ниңәлер ҡаҙаҡтар янында тороп ҡала.

1739 йылдың көҙөндә Ҡараһаҡал Башҡортостанға килеп, Ҡатай улыҫының Күҙәш ауылында Әбделмән Күсәшевта (бәлки, Күсәмешев) йәшәй һәм, улыҫтарға йөрөп, старшиналар, батырҙар һәм йөҙбаштары менән аралаша. Силәбе өлкәһенең Арғаяш районына ҡараған Күҙәш ауылы бөгөн дә бар. Ошо арала Ҡараһаҡал Бәҙеғол Ҡотлоғужин, Миңлеяр Ҡарабаев, Мәүлет Миңлеяров, Сәйетбай Алкалин, Ырыҫымбай Игембәтов, йөҙбашы Исламғол, уның ҡустыһы старшина

Йәғәфәр Юлдашевтар, Әйле улыҫы батырҙары Сураш менән Ҡыҙрас Килдәшевтар, Һарт улыҫы старшинаһы Әлекәй Ҡаракөсөков һ.б. менән ныҡлап таныша. 1739 йылдың көҙөндә Ҡараһаҡал күпмелер ваҡыт Бәҙеғол Ҡотлоғужиндың өйөндә йәшәй. Күҙәй улыҫы батыры Нурыш Кинйәкәевтан язалаусылар һорау алған саҡта ул: “Аланзыянғолдың өйөндә кешеләргә йөҙөн күрһәтмәй бер серле кеше йәшерен йәшәп ята”,– тип әйтә.

Ҡараһаҡал Раҡай Йәнекәйевҡа үҙен Юрматы улыҫы башҡорто тип таныштырһа, старшина Әлекәй Ҡаракөсөковҡа иһә бөтөнләй икенсене һөйләй: “Мин Кубанда нуғайҙар араһында йәшәйем, нуғай затынанмын, исемем Солтан-Гәрәй. Ватаныбыҙ элек ошо ерҙәрҙә булған. Шуға күрә еребеҙҙе кире ҡайтарырға тырышып йөрөйөм. Башҡорттарҙың ауыр хәлдә ҡалыуын ишетеп, Ҡубандан 8 меңлек ғәскәр һәм миңә ҡушылған 2 мең ҡалмыҡ, 500 ҡырғыҙ-ҡайсаҡ (ҡаҙаҡ – **Ә.Й.**) менән юлға сыҡтым. Әле ҡар бик ҡалын булыу арҡаһында, ғәскәрем Чим (Имба) йылғаһы башында, Мәүәзи тип аталған күл янында ҡышлай. Башҡорттарға мин хәл белергә килдем. Башта Теләү улыҫында Зөйәмбәт исемле башҡортта йәшәнем. Бөтә кәрәк-яраҡтарым Табын улыҫында Ҡорманай тигән кешелә һаҡлана. Һуңынан мин Сыбаркүл, Тинес, Үрге Яйыҡ һәм Уҡлы-Ҡарағай ҡәлғәләрендә булдым, ләкин был турала бер кемгә әйтмәнем, үҙемде лә танытманым. Башҡорттар ризалашһа, ғәскәрем Ҡорбан байрамына, йәғни 26 февралдә, бында килеп етәсәк. Беҙ башҡорттар менән бергә урыҫ ауылдарын һәм ҡәлғәләрен ҡыйратып, илебеҙҙе урыҫтарҙан азат итеп, элеккесә бергә йәшәр инек”. Рәсәй хөкүмәте яҡлы булған старшина Ҡараһаҡалға ышанғанмы-юҡмы – билдәһеҙ, ләкин ул яңы ихтилалға ҡаршы төшә һәм Ҡараһаҡалдан ишеткәнде шунда уҡ Соймоновҡа еткерә.

Бәҙеғол старшинаға Ҡараһаҡал ялған вәсикәләр (документтар) күрһәтә. Имеш, ул – Жунгар ханы Галдан Цэрэндың бер туған ҡустыһы, тимәк, ханзада, солтан. Ысын исеме Шуна (документтарҙа Суна – **Ә.Й.**). Атаһы үлгәс, ханлыҡ уға күсергә тейеш булып, ағаһы Галдан Цэрэн төрлө хәйлә менән власты үҙ ҡулына эләктерә. Шунаның һеңлеләрен үлтерә һәм Шунаны ла юҡ итергә ҡуша. Ләкин Шуна быны белеп ҡала һәм ҡарағалпаҡтар араһына ҡасып, һуңынан Ҡалмыҡ ханлығына барып һыйына. “Ысын исемең Шуна булғас, ниңә һин Солтан-Гәрәй аталып йөрөйһөң?” тигән һорауға Ҡараһаҡал: “Мин әүәл мәжүси инем, хаҡлыҡты табып, ислам диненә күстем һәм исемемде Солтан-Гәрәйгә үҙгәрттем. Аллаһының ярҙамы менән Жунгар ерендә ханлыҡты уҫал ҡәрендәшем ҡулынан алып, жунгарҙар араһында ислам динен нәшер итәсәкмен”,– ти.

Ҡаҙаҡтар араһында ла Ҡараһаҡал үҙен, мин Жунгар ханлығының солтаны, тип һөйләп йөрөгән. Ағайым Галдан Цэрэндан ҡасып Ҡалмыҡ ханлығында йәшәнем, шунда ҡалмыҡса өйрәндем, тигән. Мин мосолман кешеһе, исемем Солтан-Гәрәй, тип ҡаҙаҡ солтандарына һәм бейҙәренә төрлө ялған шәһәҙәтнамәләр (танытмалар, нәҫел ептәре – **Ә. Й.**) күрһәтеп, уларҙың ышанысын яулай. 1739 йылдың йәй, көҙ һәм ҡышын Ҡараһаҡал Себер даруғаһындағы хәлде белеү, ихтилал етәкселәре менән аралашыу, башҡорт-ҡаҙаҡ сиктәре менән ентекле танышыу өсөн файҙалана. Ул киләсәктә Башҡортостандан ҡаҙаҡ далаһына сығып китеү өсөн иң уңайлы урындарҙы эҙләй. Уҡымышлылығы, тотанаҡлығы, тышҡы ҡиәфәте менән Ҡараһаҡал башҡорт старшиналары һәм йөҙбаштарының күбеһендә яҡшы тәьҫир ҡалдыра. Нәҡ ошо ваҡытта ихтилал етәкселәре уны хан итеп иғлан итеү уйына килгән дә инде.

Ҡараһаҡалдың ҡасан, ҡайҙа, кемдәр тарафынан хан тип иғлан ителеүе тураһында төрлө фекер бар. Күренекле ғалимыбыҙ Ғайса Хөсәйенов үҙенең “Ҡараһаҡал хан” тигән хеҙмәтендә, йыйын 1740 йылдың февраль урталарында үткән, “Бәләкәй ҡоролтайға торошлоҡ итерлек йыйында ун бишләп ир-ат ҡатнашҡан”, тип яҙа. БДУ профессоры Дияс Йәнтүрин “Тырнаҡлы ырыуы” тигән мәҡәләһендә, йыйылыш хәҙерге Ҡыйғы районының Иҫке Мөхәммәт

ауылында үткән, тип яҙа һәм йыйылышта, йәғни Бәләкәй ҡоролтайҙа ҡатнашыусылар араһынан ни бары биш кешене атап үтә. Шулар араһында Сәйетҡол батырҙы "Ҡыуаҡан улыҫы старшинаһы" тип атай. Ғәмәлдә был вазифаны ул ваҡытта Аҙнабай Ҡарағужин башҡара. "История Башкортостана с древнейших времен до наших дней" тип аталған ғилми хеҙмәттең I томында, "Башҡортостан тарихы" дәреслегендә лә "Ҡараһаҡал 1740 йылдың башында хан итеп иғлан ителгән" тип яҙылған. Башҡа тарихи хеҙмәттәрҙә, мәҫәлән, "Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия"ла яу етәкселәре Ҡараһаҡалды хан итеп иғлан иткән, тип кенә әйтелә.

Төрлө документтар менән ентекле танышҡандан һуң мин, Ҡараһаҡал хан итеп 1740 йылдың ғинуар баштарында йә урталарында һайланған, тигән фекергә килдем, сөнки ғинуар аҙағынан башлап ул Себер даруғаһы улыҫтары буйлап хан сифатында йөрөгән, көс туплаған һәм март урталарында уҡ етеҙ хәрәкәт башлаған. Миңлеяр Ҡарабаев, уның оло улы Мәүлет, Сураш менән Ҡыҙрас батырҙар, шәхси сәркәтибе Йәрмөхәмәт Бикназаров, шәхси һаҡсыһы Яҡуп Ҡыҙылбаев, Ҡараһаҡалдан яҫауыл дәрәжәһе алған Аҙнағол Байтимеров һ.б. һәр ваҡыт хан янында булған.

Иҫке Мөхәммәт ауылындағы ҡоролтайҙың ихтилал етәкселәренең береһе Йәрмөхәмәт Хажиевтың өйөндә үтеүе тураһында беҙгә Раҡай Йәнекәев аша билдәле. Ул һорау алған саҡта "ихтилалды башлап ебәреүсе баш бурҙар Аланзыянғол, улы Миңлеяр менән, Йәрмөхәмәт һәм башҡа бурҙар Тырнаҡлы улыҫында Йәрмөхәмәт бурҙың өйөндә йыйылды" тип әйткән. Документтарҙан күренеүенсә, Себер һәм Нуғай даруғалары башҡорттарын йыйған Бәләкәй ҡоролтайҙа 15 ир-егет түгел, ә 40-тан ашыу кеше ҡатнашҡан. Ҡоролтайҙа Соймоновтың күрһәтмәһендә исемләнгән 28 ихтилал етәксеһе лә булған, сөнки Минзәләгә барып эләккән бер башҡорт та әйләнеп ҡайтмаған. 28 ихтилал етәксеһе Соймоновҡа тапшырылһа, уларҙы ла Байрас Йәнырыҫов, Иҫәнғол Мәмбәтов, Һәүбән Һөйәрғолов, Көҫәп Солтанғолов, Төлкөсура Аллағолов һ.б. яҙмышы көткән. Шуның өсөн улар яу яланында ятып ҡалыуҙы артыҡ күргән.

Мин ҡоролтайҙа ҡатнашҡан кешеләрҙең исемлеген төҙөп ҡараным. Бына ул:

1. Бәҙеғол Ҡотлоғужин – Әйле улыҫы старшинаһы.
2. Аҡҡужа Ҡулымбәтов – Ҡара-Табын улыҫы старшинаһы.
3. Йәммәт Баҡыев – Теләү улыҫы старшинаһы.
4. Әмин Сәйетбаев – старшина Сәйетбай Алкалиндың улы.
5. Ырыҫымбәт Алкалин – Сәйетбай Алкалиндың ҡустыһы.
6. Миңлеяр Ҡарабаев – Дыуан улыҫы старшинаһы.
7. Мәүлет Миңлеяров – Миңлеяр старшинаның улы.
8. Яманғужа Ҡарабаев – Миңлеяр старшинаның ҡустыһы.
9. Байбәк Ҡарабаев – Миңлеяр старшинаның ҡустыһы.
10. Юлдаш Һөйәрембәтов – Ҡыр-Күҙәй улыҫы старшинаһы.
11. Сураш Килдәшев – Әйле улыҫы батыры.
12. Ҡыҙрас Килдәшев – Әйле улыҫы батыры.
13. Аҙнабай Ҡарағужин – Ҡыуаҡан улыҫы старшинаһы.
14. Морат Аҙнабаев – Аҙнабай старшинаның улы, йөҙбашы.
15. Мөлөк Ҡарағужин – Аҙнабай старшинаның ҡустыһы.
16. Исмәғил Ҡарағужин – Аҙнабай старшинаның ҡустыһы.
17. Айытҡол Ямантаев – Ҡыуаҡан улыҫы батыры.
18. Яманғол Ямантаев – Айытҡолдоң ағаһы, 70 йәштә.
19. Абдулла Яманғолов – Яманғолдоң улы, батыр.
20. Яманғол Хажиев – Тырнаҡлы улыҫы старшинаһы.
21. Йәрмөхәмәт Хажиев – Яманғолдың ағаһы.
22. Ҡөҙрәт Хажиев – Яманғолдың бер туған ҡустыһы.
23. Мөхәммәт Хажиев – Яманғолдың бер туған ҡустыһы.

24. Ғөзәйер Хажиев – Яманғолдың бер туған ҡустыһы.
25. Сәйетҡол – Тырнаҡлы улыҫы батыры.
26. Мусаҡай Сәйетов – Тырнаҡлы улыҫы йөҙбашы.
27. Йәғәфәр Юлдашев – Ҡаратаулы улыҫы старшинаһы.
28. Исламғол Юлдашев – Ҡаратаулы улыҫы йөҙбашы.
29. Мөхәммәт Юлдашев – Йәғәфәр менән Исламғолдың ҡустыһы.
30. Күсем Кусселеков – Ҡара-Табын улыҫы батыры.
31. Солтан Арыҫланбәков – Дыуан-Табын улыҫы старшинаһы.
32. Һөйәрғол Сускин (Чучкин) – Дыуан-Күҙәй улыҫы старшинаһы.
33. Күсәмеш Биктужин – Ялан-Ҡатай улыҫы старшинаһы.
34. Ырыҫҡол Ҡортҡасов – Мыраҙалар улыҫы батыры.
35. Уразымбәт Сираев – Һарт улыҫы старшинаһы.
36. Сөләймәнов Уразов – Һарт улыҫы башҡорто, бәлки, батыры.
37. Абдулла Әйлембәтов – Ҡыуаҡан улыҫы батыры.
38. Ейәнсура Йәнтимеров – Әйле улыҫы батыры.
39. Теләүкәй Олантимеров – Ҡатай улыҫы башҡорто.
40. Абдулла Ҡасҡынов – Ҡатай улыҫы батыры.

Иҫән булһалар, ҡоролтайҙа старшиналарҙан Барын-Табын улыҫынан Уразай Абыҙанов, Ҡара-Табын улыҫынан Мәсәғүт Кәбәсов ҡатнашыуы ла ихтимал. Ихтилал етәкселәре ҡоролтайҙы изге ниәт менән үткәреп, хан һайлаһа ла, ихтилалдың өсөнсө осоронда, бигерәк тә 1740 йылдың май – сентябрендә халҡыбыҙҙың бихисап юғалтыу, иҫ киткес фажиғә кисереүендә уларҙың да ғәйебе бар. Икенсе яҡтан, был ваҡиға башҡорттарҙа Рус дәүләтенән айырылыу ниәтенең көслө булыуын да күрһәтә.

Хан һайлау шыма ғына үтмәгән. Документтарҙан күренеүенсә, ҡоролтайға ҡәҙәре үк старшиналар, батырҙар, йөҙбаштары хәлде яҡшы аңлап, халҡыбыҙҙы алда ниндәй михнәттәр көтөүен белеп, көрәште туҡтатырға, Ҡараһаҡалды властарға тотоп бирергә тәҡдим иткән. Мәҫәлән, Тырнаҡлы улыҫы йөҙбашы Муса Сәйетов, Ҡыуаҡан улыҫы йөҙбашы Татлыбайға мөрәжәғәт итеп: "Ниңә һин әллә ҡайҙан, әллә Кубандан, әллә ҡаҙаҡтарҙан, әллә ҡарағалпаҡтарҙан, әллә башҡа ерҙән килгән килмешәк тураһында Уразлинға хәбәр итмәйһең, тотоп алмайһың? Һин ни өсөн йөҙбашы булып тораһың? Ул (Ҡараһаҡал) беҙҙең Тырнаҡлы улыҫына килеп, башҡа улыҫтарға барып, халыҡты ҡоторта. Йыһанғол менән бер һүҙҙә булып, төрлө ялған һүҙҙәр менән халыҡты яңы яуға өндәп йөрөй, ә һин быны күрмәмешкә һалышаһың, бер нәмә лә эшләмәйһең. Һин әллә уның менән бергә беҙҙең йорттобоҙҙо туҙҙырырға йөрөйһөңмө? Унан беҙгә яҡшылыҡ көтөргә түгел. Ул бур, ул дошмандар ярҙамында ауылдарыбыҙҙы яндырырға, беҙҙе ҡырырға йөрөй. Һин шуны белмәйһеңме? Ул – ҡараҡ, ат ҡарағы. Уны тиҙ арала Уразлинға тотоп бирергә кәрәк. Мин быны былай ғына ҡалдырмайым",– ти. Ҡараһаҡалға ҡаршы Дыуан-Күҙәй улыҫы старшинаһы Һөйәрғол Сускин менән Һарт улыҫы старшинаһы Уразымбәт Сираевтың ҡаршы сығыуы ихтимал.

Ҡоролтай йыйылғас, Ҡараһаҡалды тотоп алырға күрше Үәскәй ауылына үҙҙәренең ғәскәри төркөмдәре менән Шайтан-Күҙәй улыҫы старшинаһы Шығанай Бурһыҡов һәм Ҡошсо улыҫы старшинаһы Көҙәш Рахманғолов килгән. Ләкин, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында, улар маҡсаттарына ирешә алмай ҡайтып китә. Йөҙбашы Татлыбай үҙ вазифаһын еренә еткереп башҡарһа, Шығанай старшина менән Көҙәш мулла тәүәккәллек күрһәтеп, Ҡараһаҡалды һәм ҡоролтайҙа ҡатнашҡан башҡа кешеләрҙе тотоп алһа, бәлки, ихтилал туҡтар, халҡыбыҙға ҡот осҡос фажиғә килтерер Ҡараһаҡал яуы булмаҫ та ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был кешегә бер кем дә ҡағылмаған, һәм, быны да үҙ "сер"е барҙыр, тип уйлайым. Моғайын, Соймонов вазифалы кешеләргә Ҡараһаҡалға теймәҫкә ҡушҡан.

Яҙалаусыларға өс йыл ҡаршы тороп тамам ҡаҡшаған халыҡты яңынан яуға күтәреү өсөн Ҡараһаҡал һәм уның яҡлылар кеше ышанмаҫлыҡ хәбәр тарата:

имеш, Ҡараһаҡалдың ғәскәре ун мендән һикһән ике меңгә етә. Ошо көс менән уның бер туған ҡустыһы Исәндәр етәкселек итә һәм тиҙ арала Башҡортостанға килеп етергә тейеш. Яуҙы башлап ебәрһәк, тип һөйләгән улар, беҙгә ҡаҙаҡтар, хатта жунгарҙар ярҙам итергә әҙер. Быларҙың барыһы ла буш һүҙ булған. Шуға ҡарамаҫтан, был ялған хәбәрҙәр Уразлиндың шымсылары Мөхәмәтғәли Тәрәкәев, Таһир, Байбәк Туҡбаров, Тимер Әхмәков, Сәфәр Бикмәев, Яков Әхмәтов һ.б. аша тиҙ арала Соймоновҡа, артабан Петербургҡа етеп, билдәле, язалау операцияларына әҙерлекте тиҙләткән.

Шымсылар араһында Ҡараһаҡалды күреүселәр ҙә булған. Яков Әхмәтов, мәҫәлән, Уразлинға тапшырған хәбәрендә Ҡараһаҡал тураһында: “Ул ҡара йөҙлө, һаҡалы ҡара. Уның өҫтөндә аҡ буҫтауҙан тегелгән бишмәт, ә башында ҡыҙыл төлкө тиреһенән тегелгән ҡамсат бүрек”,– тигән. Мөхәмәтғәли Тәрәкәев: “Ул (Ҡараһаҡал) ҡара йөҙлө, туҫтаҡ битле. Аҡ буҫтауҙан тегелгән бишмәт, һарыҡ тиреһенән тегелгән тун кейгән, башында төлкө тиреһенән тегелгән бүрек, аяғында ат тиреһенән тегелгән йылы ҡата”,– тип яҙған.

Дәрәжәһен күтәреү өсөн Ҡараһаҡал үҙенә тоғро, яуға ташланырға әҙер торған башҡорттарҙы төрлөсә үрләткән, уларға “йөҙбашы”, “яҫауыл”, “кенәз” дәрәжәләре биргән. Мәҫәлән, Ҡараһаҡалдың иң яҡын дуҫы Антон Максимов (башҡортлашҡан сыуаш), Яҡуп Касишев, Айытулла Муллагилдин, Һибәт Мокшин, Аҙнағол Байтимеров һ.б. яҫауыл дәрәжәһе алған. Ихтилалға ҡәтғи ҡаршы башҡорттарҙы Ҡараһаҡал үлтерергә бойорған. Мәҫәлән, Ҡаратаулы улыҫы йөҙбашы Дәүләтбайҙы ул бөтә кеше алдында ҡылыс менән сабып үлтергән. Ҡараһаҡал һәм уның яҡлылар алып барған өгөт-нәсихәт үҙ емештәрен бирмәй ҡалмаған. Яңы ихтилалда ҡатнашырға теләгән башҡорттар артҡандан-арта барып, май башында мең ярымға еткән һәм Ҡараһаҡалға февралдә (икенсе документта – март) үк һуғыш хәрәкәттәрен башларға мөмкинлек биргән. Ихтилалсылар башта Себер даруғаһы улыҫтарында төҙөлә башлаған ҡәлғәләргә, заводтарға, күскенселәр ауылдарына һөжүм иткән. Һуңынан яуға Нуғай даруғаһының көньяҡ-көнсығыш улыҫтарында йәшәгән башҡорттар күтәрелгән. Документтарҙан күренеүенсә, баштараҡ Себер даруғаһының Дыуан, Тырнаҡлы, Ҡаратаулы һәм Ҡыуаҡан улыҫтары яуға һүлпән, теләр-теләмәҫ кенә ҡушылған булған.

Ихтилал яңынан башланып киткәс, бер төркөм башҡорт старшинаһы, шул иҫәптән “тоғро” башҡорттар Булат Илекәев, Миңлеяр Араҡаев (ҡайһы бер документтарҙа – Арҡаев), Әлекәй Ҡаракөсөков, Зәйсән Ҡарабашев, Шығанай Бурһыҡов, Шәрип (ҡайһы бер документтарҙа – Мөхәмәтшәрип) Мрәков, Арыҡ Иҫәнбаев, Йәнгилде Һөйәнғолов, Көҙәш Рахманғолов һ.б., 1735 йылдағыса, ихтилалсыларға тынысланырға, таралырға тәҡдим иткән. Ләкин улар фекеренә ҡолаҡ һалыусылар аҙ булған.

Язалау командалары килеп етер алдынан “тоғро” башҡорт старшиналары Уразлин төркөмө менән берлектә ихтилалсыларға ҡаршы сығып ҡараған, ләкин уңышҡа ирешә алмаған, сөнки баш күтәреүселәр һаны арта барған. Март урталарында Роман Уразлин төркөмө Себер даруғаһынан ҡасып китергә мәжбүр була. Ихтилалсылар Ҡараһаҡалға, тәүҙә Өфөнө яулап алайыҡ, тип үтенһә лә, ул, әле Өфөгә барырлыҡ көс юҡ, тип Йүрүҙән, Әй, башҡорт-ҡаҙаҡ сиктәрендә генә хәрәкәт итеүҙе хуп күрә.

Тарихи әҙәбиәттә “тоғро” башҡорт тархандары, старшиналары, йөҙбаштары, дин әһелдәре – “башҡорт халҡының дошмандары”, “һатлыҡ йәндәр”, “һатлыҡ старшиналар”, “батша яҡлы старшиналар” тип йөрөтөлә. Ләкин уларҙың барыһы ла бындай баһаға лайыҡ түгел. Ихтилалдың башынан аҙағынаса Рәсәй империяһына тоғро хеҙмәт иткән тархан һәм старшиналарҙан, мәҫәлән, Ҡыҙрас Муллаҡаев, Мираҫ Юлымбәтов, Таймаҫ Шәимов, Зәйсән Ҡарабашев, Шығанай Бурһыҡов, Көҙәш Рахманғолов һ.б., ихтилалсылдарға ҡорал менән ҡаршы сығып булһа ла, ҡан ҡойошто тиҙерәк туҡтатырға, халҡыбыҙҙың артабан да

ҡырылыуына юл ҡуймаҫҡа тырышҡан. Документтарҙан күренеүенсә, ҡайһы бер старшиналар, ихтилалды ҙурға ебәрмәү, баш күтәреүселәрҙе тарҡатыу, халыҡты ихтилалдан һүрелтеү, ауылдарҙы, кешеләрҙе һаҡлап ҡалыу, язалаусыларҙың баштарын бутау өсөн, үҙҙәрен юрамал "Рәсәй батшалығына тоғро булдым һәм тоғромон" тип белдергән. Был етәкселәр ысынлап та үҙ ауылдарын ҡурсалап, һаҡлап ҡалған. Бына ни өсөн бөтә "тоғро" башҡорт тархандарына, старшиналарына, йөҙбаштары һәм башҡаларына нигеҙһеҙ ғәйеп ташлау ғәҙел түгел. Был яңы фекер тарихи әҙәбиәттә, дәреслектәрҙә мотлаҡ сағылырға тейеш.

Р. Уразлин Минзәләнән Өфөгә килгән Соймонов менән Тевкелевҡа барып, даруғалағы хәл, ихтилалдың көсәйә барыуы тураһында ысынбарлыҡты ҡуйыртып һөйләп бирә һәм Себер даруғаһына, Нуғай даруғаһының көньяҡ-көнсығышына ашығыс рәүештә ғәскәр ебәреүҙе һорай. Табын, Елдәк, Сыбаркүл, Үрге Яйыҡ, Силәбе һ.б. ҡәлғәләрҙәге ғәскәри төркөмдәр ихтилалсыларға ҡаршы сығырға әҙер булып, урыҫ крәҫтиәндәрен, властарға тоғро татар һәм мишәрҙәрҙән яңы "ирекле" отрядтар ойоштороу тамамланһа ла, Соймонов язалаусыларын башҡорттарға ҡаршы ебәрергә ашыҡмаған. Ул баш күтәреүселәрҙең икегә — ихтилалсы һәм ихтилалға ҡаршыларға бүленеп, үҙ-ара һуғыша башлауын, ихтилалға улыҫтарҙың мөмкин ҡәҙәр күберәк ҡушылыуын, баш күтәреүселәрҙең ҙурыраҡ, хәрби гарнизон тотҡан ҡәлғә һәм заводтарға һөжүм итеүен көтә.

Ихтилал көсәйә башлағас, март аҙаҡтарында Соймонов баш күтәреүселәргә ҡаршы алты полк ебәргән. Силәбе һәм Сыбаркүл ҡәлғәләренән полковник Арсенев һәм подполковник Павлуцкий, Красноуфимск ҡәлғәһенән секунд-майор Путятин, Табын һәм Елдәк ҡәлғәләренән майор Пекарский менән капитандар Кублицкий һәм Полозов, ә Ырымбурҙан подполковник Бахметов полктары ихтилалсыларға ҡаршы сыҡҡан. Урында иһә уларҙы "ирекле" отрядтар көтөп торған. Шулай итеп, ихтилалсылар бөтә яҡлап ҡамап алына. Соймоновтың ҡарамағында 6 меңдән ашыу ғәскәр булған.

Баш күтәреүселәрҙең батша ғәскәре менән тәүге ҡаты бәрелеше Йүрүҙән һәм Әй буйҙарында булып, 27—31 мартта яуға әҙерләнеп өлгөрмәгән, насар ҡоралланған ихтилалсылар уңышһыҙлыҡҡа осрай: 80 кешеһен юғалта, 100-ҙән ашыуы әсир алына. Язалаусылар Йүрүҙән буйындағы 10 башҡорт ауылын яндыра. 1 апрелдә Бәҙеғол старшина менән Ейәнсура Йәнтимеров етәкселегендәге ихтилалсылар капитан Полозов һәм Зәйсән Ҡарабашев, Көҙәш Рахманғолов төркөмдәре менән һуғышта ла еңелә. 120 кешеһе һәләк була, 103-ө, шул иҫәптән Бәҙеғол старшина менән Ейәнсура Йәнтимеров, тотҡонға эләгә. Полковник Арсеньев ихтилалсыларҙың башҡа төркөмдәрен ҡыйрата.

800 кешеһенең яртыһын юғалтҡан Ҡараһаҡал ҡалған яугирҙары менән Нуғай даруғаһына, Ағиҙел йылғаһы баштарына сигенергә мәжбүр була. Һуңынан ул Ҡоҙғон-Ҡатай улыҫына етеп, Күсәш ауылындамы, әллә Тамъян улыҫының Сыбаркүл буйындамы лагерь ҡора. Бында уларға Нуғай даруғаһының Ҡоҙғон-Ҡатай, Күбәләк, Теләү, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ һәм Бөрйән улыҫтары башҡорттары ла килеп ҡушыла. Хан ғәскәре тағы мең ярымға тиклем арта. Сыбаркүл тирәһендәме, Оло Ҡыҙыл йылғаһы буйындамы улар үҙҙәрен эҙәрләп килгән Булат Илекәев менән Көҙәш Рахманғолов отрядтарын пыр туҙҙыра.

Ҡараһаҡалдың ишәйә барған отрядтары апрель урталарында Себер даруғаһына әйләнеп килә. Май баштарында улар властарға тоғро булған Байым Ҡыҙрасов менән Исмәғил тархан Миңлеяровтың өйҙәрен үртәй, Р. Уразлин төркөмөн ҡыйратып, үҙен үлтерә. Ихтилалға Ҡыуаҡан, Әйле һ.б. улыҫтарҙа йәшәгән башҡорттар ҡушылып, улар Эҫем, Йүрүҙән буйҙарындағы яуҙа ҡатнашмаған башҡорт, мишәр ауылдарын туҙҙыра. Май урталарына баш күтәреүселәр 3 мең кешегә етә.

Соймоновтың 13 июндә Сенатҡа ебәргән рапортынан күренеүенсә, язалау операцияларында 7059 офицер, һалдат, драгун һәм казак ҡатнашҡан. Шул иҫәптән

регуляр ғәскәри төркөмдәрҙә 2364, "ирекле" отрядтарҙа 4695 "тоғро" башҡорт, урыҫ крәҫтиәне, татар, мишәр һәм мари иҫәпләнгән. Бынан тыш 11312 офицер, һалдат һәм казак төрлө ҡалаларҙы, ҡәлғәләрҙе һаҡлаған. Кәрәк саҡта улар ихтилалсыларға ҡаршы сығырға әҙер торған.

Язалаусылар ихтилалсыларҙы бөтә яҡлап ҡамап алып, бер-бер артлы ҡыйрата башлаған. Бик күп кеше юғалтып, баш күтәреүселәр Нуғай даруғаһына сигенә һәм Сыбаркүл ярҙарында лагерь ҡора. 1740 йылдың 25 майында улар подполковник Павлуцкий, майор Языков төркөмдәренә ҡаршы аяуһыҙ һуғыша, ләкин уңышҡа өлгәшә алмай, сөнки ихтилалсыларға ҡаршы артиллерия ҡулланыла. "Миңә секунд-майор Языков килеп ҡушылһа ла,– тип яҙған Павлуцкий үҙенең рапортында,– беҙ бурҙарға пушка һәм мортираларҙан атыуҙы туҡтатманыҡ, уларҙы ҡырҙыҡ ҡына. Улар беҙгә артыҡ зыян килтерә алманы. 400-ҙән ашыу бурҙы үлтерҙек, туғыҙын тотоп алдыҡ. Шуларҙың бишеһен һалдаттар һәм казактар штыҡ менән сәнскеләп үлтерҙе. Ҡалғандары ҡасып ҡотолдо".

Тарихи әҙәбиәттә һәм ғилми хеҙмәттәрҙә, мәҫәлән, "История Башкортостана с древнейших времен до наших дней" тигән хеҙмәттә, ихтилалсыларҙың язалаусылар менән һуңғы бәрелеше төрлөсә һүрәтләнеп, тарих менән ҡыҙыҡһынған уҡыусыларҙы аптыраушта ҡалдыра. "Кем хаҡлы икән һуң?" тигән урынлы һорау тыуа, сөнки тәҡдим ителгән варианттарҙың береһе лә ысынбарлыҡҡа тап килмәй.

Тарихи документтарға таянып, мин үҙ вариантымды тәҡдим итәм. 1740 йылдың 25 майында ҡаты бәрелештә еңелгәс, Ҡараһаҡал ҡалған кешеләре менән Йайыҡтан 400 саҡрым көнсығыштағы Тубыл йылғаһына юл тотҡан һәм кәмендә 4-5 көндән һуң уны кисеп, ҡаҙаҡ еренә аяҡ баҫҡан. 29 майҙа Павлуцкий менән Языков төркөмдәре Йайыҡты кисеп, капитан Кублицкийға ҡушыла. Өс төркөмдән иң шәп атлы 1500 кешене һайлап алып, Ҡараһаҡалды эҙәрләр өсөн улар ҡаҙаҡ далаһына киткән. Юл ыңғайында улар өс башҡорт ауылын туҙҙырып, Ҡараһаҡалға ҡушылырға барған 46 башҡортто үлтерә, 33 кешене, шул иҫәптән Ҡараһаҡал йәшәп киткән өй хужаһы Абдулла Күсәшевты һәм яҫауыл Аҙнабайҙы, ҡулға ала. 16 кешене язалап үлтерәләр. 1—3 июндә, көслө ямғырға ҡарамай, язалаусылар, Ҡараһаҡал кешеләрен эҙәрлекләүҙе дауам итеп, Тубыл йылғаһына килеп етә, ләкин эҙенә төшә алмай. Шул уҡ көндө яҡшы атлы 100 кешелек төркөм менән Кублицкий баш күтәреүселәргә ҡушылырға барған Мырҙалар улыҫы батыры Ырыҫҡол Ҡорткасов төркөмөнә осрап, уны бөтөнләй ҡыйрата.

4 июндә майор Беклемишев ҡарамағында 911 кешене Тубыл ярында ҡалдырып, 794 яҡшы атлы төркөм менән Павлуцкий, Языков һәм Кублицкий Ҡараһаҡалды ҡыуа сығып, Тубыл йылғаһынан 60 саҡрым киткәс, баш күтәреүселәрҙе ҡыуып етә. Алышта бик күп ихтилалсы үлтерелә, Ҡыуаҡан улыҫы батыры Сәйет Киләев менән Ҡара-Табын улыҫынан Ерәмбәт Шанаевты тотоп алалар. Ҡараһаҡал тәүҙә уҡ ихтилалсыларға сигенергә бойороҡ бирә һәм беренселәрҙән булып үҙе ҡасып ҡотола. Ихтилалсылар артынан ҡыуа төшкән Кублицкий төркөмө, 50 саҡрымлап ер үтеү менән, Ҡараһаҡалды ҡыуып етә. Бәрелештә 300 башҡорт, шул иҫәптән күп ихтилал етәкселәре: Миңлеяр Ҡарабаев, йөҙ башы Исламғол Юлдашев, Йәрмөхәмәт һәм Ғөзәйер Хажиевтар, Миңлеяр Мәширов, Айыткол Ямантаев һ.б. һәләк була. Ҡара-Табын улыҫы старшинаһы Йәғәфәр Юлдашев иҫән ҡалып, Ҡараһаҡал, Мәүлет Миңлеяров һ.б. менән ҡасып ҡотола. 5 июндә Кублицкий төркөмө 89 ихтилалсыға тап булып, уларҙы тар-мар итә, ҡатындарҙы бала-сағаны ҡулға ала. Язалаусылар ҡулына ихтилалсыларҙың шулай уҡ 300-ҙән ашыу йылҡыһы, 2300 һыйыры ла эләгә.

Ихтилал баҫтырыла. Павлуцкий, Языков һәм Кублицкий төркөмдәре Тубыл буйында ҡалған ғәскәри төркөм менән Үрге Йайыҡ ҡәлғәһенә китә. Артабан Кублицкий Оло Ҡыҙыл йылғаһы буйында лагерь ҡороп, Ҡарағай тауы урмандарында ҡасып ҡотолорға тырышҡан башҡорттарға ҡаршы алышҡа әҙерләнә.

Июнь урталарында етәксеһеҙ ҡалған ихтилалсылар, яуҙа ҡатнашмаған Теләү, Тамъян, Ҡыуаҡан, Ҡара-Табын, Ҡыр-Күҙәй, Бүләкәй Күҙәй, Тырнаҡлы һ.б. улыҫтар башҡорттары ҡотолғоһоҙ хәлдә ҡалып, Үрге Йайыҡ ҡәлғәһендә язалаусыларға баш һала башлаған. Шул уҡ ваҡытта яза командалары Урал тауҙарына, ҡара урмандарға, мәмерйәләргә ҡасҡан башҡорттарҙы эҙәрләүгә тотона. Был операцияларҙа Һамар, Һаҡмар, Ырымбур (Орск ҡәлғәһе), Йылшан, Быҙаулыҡ һәм Көньяҡ Башҡортостандағы башҡа ҡәлғәләрҙәге ғәскәри төркөмдәр ҙә ҡатнаша. Язалау кампанияһына батша указы буйынса кенәз Василий Урусов етәкселек итә. “Было ему, генерал-лейтенанту указано,– тип яҙған Петр Рычков,– итти прямо на воров башкирцев и так однажды усмирить их, чтоб впредь к замешаниям (баш күтәреүгә – **Ә. Й.**) никакой искры от них не осталось, а наперед во всю Башкирь разослать указы под запрещением смерти, чтоб верные от противников не медля отделились и сами бы тех воров переловить старались”. Операциялар дүрт ай дауам итеп, язалаусылар Себер һәм Нуғай даруғаларының бөтә улыҫтарын да йөрөп сыға.

4378 офицер, һалдат һәм казактан торған ғәскәр менән Урусов 1740 йылдың 13 майында Һамарҙан Табын ҡәлғәһенә ҡарай юлға сыҡҡан. Ҡасып йөрөгән ихтилалсыларҙы тотоу өсөн Урусов полковник Арсеньевҡа ярҙамға Йайыҡ буйындағы ҡәлғәләрҙән капитан Тарабаев етәкселегендәге 1500 казакты ебәрә. Подполковник Иван Пальчиков етәкселегендәге драгун полкы менән 400 казак Һамарҙан башлап Йайыҡ йылғаһы буйын тентеп сығырға тейеш була. Бер үк ваҡытта Урусов менән Соймонов Себер һәм Нуғай даруғалары улыҫтары башҡорттарына баш һалып килергә тәҡдим итеп, янау указдары тарата. “А ежели кто сего не учинит,– тип әйтелгән указдарҙа,– то со женами и детьми без всякового помилования погублены будут и укрыться нигде не возмогут”.

Нуғай даруғаһының бөтә улыҫтарын ут һәм ҡылыстан үткәреп, 107 ауылды яндырып, бик күп башҡортто үлтергәс, Урусов 1740 йылдың 7 июлендә хәҙерге Баймаҡ районының Түбә ауылы янындағы Талҡаҫ күле буйына килә. Бында ул лагерь ҡора һәм тирә-яҡҡа язалау командалары ебәреп, ҡулға алынған башҡорттарҙы язалап үлтерә. “И во все стороны он (Урусов) партии рассылал,– тип яҙа П. Рычков,– и чинил над пойманными ворами башкирцами дознания и казни, а воровских жен и детей и скота немалое число бывшим в походе служилым людям в добычу раздавал”.

Үҙ ауылдарын Һөйәнтүш яҙмышына ҡалдырмаҫҡа, нисек тә ҡан ҡойоштo туҡтатырға тырышып, бер ниндәй ҙә ғәйебе булмаған башҡорттар ҙа баш һалып килә башлаған. 1740 йылдың июнь-июлендә Үрге Йайыҡ ҡәлғәһенә генә 5400 башҡорт килеп баш һалған. 79 кешене аманатҡа ҡалдырып, ҡалғандарын, Урусов бойороғо буйынса, подполковник Пальчиков етәкселегендәге көслө конвой Ырымбурға алып китә. Бер айҙан ашыу кисергән юл ғазаптарынан, аслыҡтан бик күп тотҡондар юлда үлә. Ҡайһы берәүҙәрен казактар ҡылыс менән сапҡылай. 1740 йылдың май – сентябрендә, ихтилалсыларҙың Нуғай даруғаһына сигенеүенән файҙаланып, Соймонов етәкселегендәге язалаусылар Мейәс, Йүрүҙән, Әй буйҙарындағы башҡорт ауылдарын үртәй, кешеләрен үлтереп, мал-тыуарын тартып ала.

Урусов етәкселегендәге төркөм иһә Нуғай даруғаһының көньяҡ-көнбайыш өлөшөндә Оло һәм Кесе Эйек, Һүрәм буйҙарындағы ихтилалда ҡатнашмаған башҡорт ауылдарын яндыра, халҡын ҡыра. Нуғай даруғаһының көньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ өлөшөндә – Йайыҡ, Кесе һәм Оло Ҡыҙыл, Таналыҡ, Быҙаулыҡ, Йәнгел, Һаҡмар, Бараҡал, Йылайыр, Ҡаҫмарт йылғалары тирәләй урынлашҡан башҡорт ауылдарын да улар урап үтмәй. Урусовтың язалаусылары Ағиҙелдең үрге ағымынан Инйәр тамағына ҡәҙәр, Кесе һәм Оло Инйәр буйҙарын тентеп сыға. Документтарҙан күренеүенсә, был йылғалар һәм Эҫем йылғаһы буйында яндырылмаған башҡорт ауылы ҡалмаған. Ағиҙелдең үрге ағымындағы Үҙән, Ҡағы,

Ҡотҡор һәм Әүжән йылғалары буйында бер төҙөк ауыл да ҡалмаған. Әүжән буйында хәҙер бер башҡорт ауылы – Исмаҡай ғына бар.

Урусов, Соймонов һәм Тевкелевтың әмере буйынса бөтә урындарҙа ихтилалсылар ғына түгел, уларҙың ата-әсәләре, ҡатындары, бала-сағаһы ла аҫыла, штык менән сәнскеләп, ҡылыс менән сапҡылап үлтерелә. Подполковник Буткевич, мәҫәлән, начальнигы полковник Арсеньевҡа 24 июлдә Ҡатау улыҫынан түбәндәгеләрҙе яҙып ебәргән: “20, 21, 22 июля дня в разных местах пойманных воров 11, женок 6, ребят малых 22, ис того числа воров повешено 8, побито мужска и женска полу 10, оставлено для показания, воровских жилищ 3, взято скота воровских – лошадей 150, коров и телят 170, а всего в поимке мужска и женска полу 53 человека. И для поиску де воров башкирцев от него Буткевича всегда командируются разъезды и партии, а 23-го он пойдет со командою вверх по реке Инзерю жечь деревни, толочить хлеб”.

Башҡа документтарға ла күҙ һалайыҡ: “Сентября 3 числа объявил посланной для осмотру и описи и сочинения плана разным местам, где сысканы разные каменья и протчие признаки руд, геодези прапорщик Шишков с командою: позжено де им подле речки Арши воровских деревень 2, изб 11, клетей 7, подле реки Белой деревень 2, изб 12, клетей 6, убита воровская девка 1.

3-го сентября управляющей дежурные дела капитан Семенихин репортовал: посланной де от дежурства вверх Белой реки по сю сторону потолочил посеянного ворами башкирцами хлеба ярицы 15, ячменю 72, овса 3 полосы; // да в розъезде Уфинского полку драгуном сожены 3 избы.

4-го числа оной же капитан Семенихин репортом объявил: посланными де от дежурства по левую сторону за Белою рекою позжено изб 24, клетей 2, анбаров 4, потолочено хлеба ячменю 6 полос, по сю сторону Белой реки сожжена деревня 1, в ней изб 4, клетей и сараев 6, вытолочено хлеба ячменю полоса 1; Шешминского полку порутчиком Федором Скирмантовым позжено 3 деревни, в них изб 7, сараев и лачюг 18.

3-го сентября капитан Микулин 7-го числа при доношении прислал взятых под караул командою старшины Бердагула тархана Кипчацкой волости башкирцов 13 человек и при них 19 лошадей. Да в том же доношении объявлено: взято в урочище Узень речки и Савиняк речки ж башкирец 1, мальчик 1, девочек 6; в урочище на реке Чакмагуш башкирец 1, женок 2, девок 2, лошадей 2; да в урочище Карагай горе и реки Белой башкирец 1, женок 7, малых 12, девок 4, ребят малых же 4, побито башкирцов 8, малых ребяти и девок 5, взято лощадей 55; в урочище Малом Сюрене малой 1, девок 3, побито башкирцев 5, женок 5; в урочище на реке Мендяк женка 1; в урочище Башмай речке женка 1, убит башкирец 1. О вышеписанных взятых в плен объявлено, что они от него Микулина посланы к генерал-лейтенанту князю Урусову.

От 6-го сентября подполковник Буткевич 9 числа доношением объявил: командою де своею разделясь на 4 части следовал к Табынску и следуючи воровских сакм нигде не нашли, точию жгли деревни и толочили хлеб.

10-го числа сентября порутчик Скирмантов репортовал, что он едучи трактом вниз Белой реки по обе стороны до реки Аузеню пожег деревень 8, в них изб 41, клетей 6, сараев и лачюг 55, потолочил хлеба ржи 5, ячменю 8 загонов.

От 9-го сентября капитан Кублицкой 10 числа доношением объявил: возвратясь де он с командою следовал по Уральским горам между Каракайских гор и Белой реки разными // командами, а укрывающихся воров башкирцов нигде не нашли, только в том следовани в разных урочищах командою ево сожжено воровских башкирских деревень 64, в них 867 дворов, потоптано разного хлеба 103 загона”.

Яҙалаусылар бер ғәйепһеҙ ҡатын-ҡыҙҙы, бала-сағаны ҡылыстар менән сапҡылап, штыктар менән сәнскеләп, аҫып үлтергән. Был турала, үкенескә ҡаршы, бер

ғилми хеҙмәттә лә, дәреслектәрҙә лә бер ни әйтелмәгән. Башҡорттарҙы ҡырыу һәм талауҙа айырыуса аяуһыҙлыҡ күрһәткән бер төркөм язалаусының исемдәрен атап үтәйек: подполковник Пальчиков, майорҙар: Языков, Беклемишев, Зилинский, Аристов, Шурыгин, Кудрявцев; капитандар: Ушаков, Хомутов, Попов, Мамаев, Суворов, Сытин, Рогозин, Тарабеев, Микулин, Возницын, Белый, Белов, Алекин, Маложенин, Ярцев, Степановский, Краснобаев, Семенихин; поручиктар: Жуков, Жданов, Скирмантов, Аристов, Веселый, Сарычев, Тетюшин, Ростовцев, Назимов, Загоскин, Горяйнов; прапорщиктар: Шкапский, Бордовский, Асатов, Сухарев, Шишков, Амачин, Жуков, Любецкий, Дурасов; йөҙбашы Калашников, атамандар: Кочемасов, Красильников, Чиглинцев һ.б. Ләкин бер тарихсы тарафынан да, бер тарихи әҙәбиәттә лә, бер тарихи хеҙмәттә лә был исемдәр бер ҡасан да аталғаны юҡ. Нәҡ капитан Возницын, капитан Алекин һәм прапорщик Бордовский етәкселек иткән язалаусылар Кесе Инйәр, ә майор Зилинский командаһы Оло Инйәр буйындағы бөтә башҡорт ауылдарын үртәгән.

Язалау кампанияһының иң ҡыҙған сағында Тевкелев, Урусов һәм Соймонов, халҡыбыҙҙың аңына мәңге онотмаҫлыҡ ҡурҡыу һалырға уйлап, 1740 йылдың 25 августында Ырымбур ҡәлғәһенән (хәҙер Орск ҡалаһы) алыҫ булмаған тау башында яҡын ауылдарҙан килтерелгән халыҡ алдында (подполковник Пальчиков командаһы) Үрге Яйыҡ ҡәлғәһенән ҡыуып алып килгән башҡорттарға бығаса күрелмәгән яза ойоштора. Быны П. Рычков ошолай һүрәтләй: “В разстоянии от Оренбурга 6 верстах, на одной горе за Яиком ученена экзекуция, а именно: по прочтении указа о винах их, главные злодеи и сообщники Карасакала – Кантул (Антон – **Ә.Й.**) Максимов, Юнус Исмагилев, Джангул (Ханнанғол – **Ә. Й.**) Исакаев, Карабаш Утеянов (Уғлыйәнов – **Ә.Й.**) Якуп Косишев посажены на столбах каменных, нарочно для этого сделанных, на кольях, оным же подобные 11 человек, в том числе семь есаулов помянутого Карасакала, повешены за ребра; 85 человек повешены; 21 человеку отсечены головы и взоткнуты на колья, в том числе и у самого главнейшего возмутителя башкирцкаго Аланзиангула (Бәҙеғол Ҡарағужин – **Ә. Й.**), который часто упомянутого Карасакала вымыслил, голова отсечена у мертвого, ибо он, будучи под караулом и вывезен в Оренбург, сам себя умертвил тем, что не пил и не ел более десяти дней”.

Яза алдынан подполковник Пальчиков, Урусов бойороғо буйынса, Себер даруғаһының бер төркөм “тоғро” тархандарын һәм старшиналарын: Иҫәнбаевты, Байым Ҡыҙрасовты, Шығанай Бурһыҡовты, Көҙәш Рахманғоловты, Бәкәтән улыҫы старшинаһы Яугилде Сәмиғулов һ.б. Ырымбурға саҡыртып ала. Ҡалған әсирҙәрҙе көслө ҡарауыл аҫтында Һаҡмар ҡәлғәһенә алып китәләр. Һаҡмарға барғас, Пальчиков әсирҙәр өҫтөнән тағы ҡаты тәфтиш үткәреп, 471 башҡортто ғәйебен “таба”, уларҙың 170-ен 17 сентябрҙә ҡәлғәнән алыҫ булмаған бер тау башында язалап үлтертә. “А прочим оставшимся злодеям,– тип яҙа Рычков,– экзекуция была 17 сентября в Сакмарске: 120 человекам отчечены головы, 50 человек повешено, 301 человек оштрафованы отрезанием носов и ушей”. Зәғифләнгәндәрҙе ҡарауыл аҫтынан сығарып, халҡыбыҙҙың ҡотон алыу маҡсатында, төрлө яҡҡа китергә ҡушалар. Язалап үлтерелгән ихтилалсыларҙың ҡатындарын һәм бала-сағаһын Ырымбурҙа, Һаҡмарҙа, башҡа урындарҙа йә язалаусыларға, йә язалау операцияһында ҡатнашҡан татар һәм мишәрҙәргә өләшеп бирәләр йә һатып ебәрәләр. Рычковтың белдереүенсә, 1735 – 1740 йылдарҙа ихтилалсыларҙың 9182 ҡатыны һәм бала-сағаһы шулай өләшеп йә һатып ебәрелә. Башҡорттарҙы халыҡ алдында күпләп язалау, ҡатындарын һәм балаларын өләшеп биреү, мал урынына һатып ебәреү тураһындағы бойороҡтарҙы Соймонов бирә. “Во исполнение высочайщих ея и.в. указов,– тип яҙған ул Урусовҡа,– надлежит всех главных воров и защинщиков бунта башкирцев казнить без всякой пощады; протчих же, кои по следствию не суть в важных винах явились, а в службу годны, тех определить в службу в отзейские полки, а которые свыше 30-ти лет, тех в

Рогервик в работу. Жон же их и возрастных детей и девок отдавать в замужство за казанских и за протчих татар и иноверцев, с платежем в казну за каждую бабу или девку годной под драгуна лошади или деньгами по 18 рублей, чего ради таковых баб и девок никому кроме тех татар и иноверцев не отдавать, протчих же детей и малолетних раздавать охочем людям для поселения в отдаленных российских городах, а оставшую после тех воров пожить (мөлкәт – **Ә. Й.**) и всякий там скот отписать и распродав деньги употребит в казну ея и.в.”.

Урусов тап ошо күрһәтмә буйынса эш итә лә инде. Унын 1740 йылдың 24 сентябрендә Сенатҡа ебәргән отчетынан күренеүенсә, июнь – сентябрҙә, йәғни өс ай ярым эсендә төрлө бәрелештәрҙә 1702, Урусов штабында 432 башҡорт язалап үлтерелә, 1862 башҡортто ҡатындары һәм балалары менән тотоп алғандар. Уларҙың 135-е әрмегә оҙатыла, 495-е яза көтөп, тикшереү аҫтында була, 301 башҡорт сыбыртҡы менән һуҡтырылып, һуңынан танау-ҡолаҡтары ҡырҡыла. 107 башҡорт ауылын яндыралар. Урусов үҙ отчетында: “Мин атаған мәғлүмәт тулы түгел, сөнки язалауҙа ҡатнашҡан казактарҙан һәм “ирекле” төркөмдәрҙән кәрәкле мәғлүмәттәр алып булманы”,– тип яҙа. Тимәк, тулы булмаған мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, Урусов 4626 башҡорттоң башына еткән. Ошо ваҡыт эсендә унын кешеләре башҡорттарҙың 3086 йылҡыһын, 2903 һыйырын һәм быҙауын, 2110 һарыҡ-кәзәһен, 39 дөйәһен тартып алған. Мал-тыуарҙың бер өлөшө төҙөлөп ятҡан ҡәлғәләргә, мөлкәтһеҙ казактарға эш хаҡы иҫәбенә бирелгән, бер өлөшө карателдәргә эләккән, ҡалғаны баҙарҙарҙа һатылған йәки астан үлгән.

Соймоновтың яуызлыҡтары ла Урусовтыҡынан ҡалышмай. 1737 йылдың апреленән 1740 йылдың 10 июнендә ҡәҙәр ул 7897 башҡортто ҡырҙырған. 186-сы документта бына ниҙәр күрһәтелә: “1740 г. июня 13.– Рапорт начальника Комиссии Башкирских Дел Л.Я. Соймонова в Правительствующий Сенат о результатах деятельности карательных отрядов, действовавших в Башкирии за время с 23 апреля 1737 г. по 10 июня 1740 г.

По силе имянных ея и.в. указов по удостоинству вин казнено разными казньми 404, партиями и на боях побито мужеска и женска полу 3665; послано в ссылку годных в службу в Остзею 541, во флот 30, в работу в Рогервик 231, итого 802; роздано для поселения во отдаленных российских городах охочим людям и шедших собою от голоду к разным чинам (которые восприяли христианской закон) женска полу и малолетных робят 974; по разным прошениям иноверцов Казанского и протчих уездов в замужество из башкирских женок и девок взяты в Казанской и в протчие уезды и при них малолетных робят мужеска и женска полу 607, с них за свадьбы лошадей взято 556. Всего казненных, и побитых, и в сылку посланных, им розданных и пойманных из Башкирии выбыло 7897.//

В 737-м, 738-м и 1740 годах с пришедших с повинною штрафных лошадей взято 4103, с иноверцов и башкирцов за свадьбы 556, итого 6235; да купленных в Башкирии и в прочих местах 592, из Уфинского уезду с собранных з душ 43, всего лошедей 6870. //

З башкирцов деньгами взято вместо штрафа за лошедей 9071 руб.3 коп., за продажных негодных к службе лошедей и за продажные ж башкирские пожитки 342 руб. 76 1/2 коп., поголовных из дел пошлин и шерагатных 115 руб. 33 коп., итого 9529 руб. 12 1/2 коп.

З башкирцов же взято Осинской дороги з Ганинской волости на имеющейся в тех места Казанского гарнизона салдацкой баталион правианта: в 737-м году муки 5784 пуда, покупная цена в том году была по 30 коп. Пуд, 1735 руб. 20 коп.; круп 397 пуд 26 фун. по 40 коп. пуд. 159 руб. 6 коп.; 738-м году муки 117 четвертей 2 четверика, цена по рубль по 5 коп., 123 руб. 11 j коп.; круп 58 пуд. 25 фун., по 30 коп. пуд, 17 руб. 58 3/4 коп; итого правианта на 2034 руб. 96 коп.//

У башкирцов же скота побрано: коров и телят 376, овец 16, из оных хозяевам возвращено 60, роздано на пищу нерегулярным людем и иноверцам, кои при поиску были, 826 коров, 16 овец, на лицо 30 коров при командах.

Позжено: деревень 343, дворов 3223, кошей 88, хлеба розного зжатого загонов 400, копен 658, незжатого загонов 52, телег с хлебом 59, /всего/ 1169, сена стогов 47436 в которых по примеру было не меньше, как по 60 копен, 284580, да копнами 20948, /всего/ 305528; в Сибирской стороны позжено сена стогов 134.//

Из вышепоказанных взятых з башкирцов штрафных, пошлинных и протчих денег за неимением при мне на содержание концелярии, на покупку лошаде, на прогоны, и на дачю канцелярским служителям жалованье и на протчие росходы определенной суммы употребляемы и ныне употребляется в росход, а сколько оных на какие имянно росходы издержано и затем останется, о том в Правительствующий Сенат репортом донесть не укосню.

Леонтей Соймонов.

Июня 13-го дня 1740 году.

ЛОЦИА. Секретная Экспедиция Правительствующего Сената. Дело 1737 – 1741 гг № 108, лл. 585 – 587. В рукописи документ имеет вид разграфленной в 3 столца таблицы: графа, содержащая сведения о распределении конфискованных лошадей по полкам и о продаже и употреблении их на продовольствие колодникам, опущена".

Халҡыбыҙҙың юғалтыуҙары бының менән бөтмәгән. 1740 йылдың июнь – сентябрендә язалаусылар Себер һәм Нуғай даруғаларында 725 башҡорт ауылын, меңәрләгән кәбән бесәнен, урылған ашлығын яндыра, 5298 атын, 5735 һыйырын, меңәрләгән баш ваҡ малын тартып ала. Ҡыуып алып китә алмаған малдарҙы, ғәҙәттәгесә, штыктар һәм ҡылыстар менән сәнскеләп һәм сапҡылап үлтерәләр. Ҡараһаҡал яуы, күреүебеҙсә, быҒаса күрелмәгән ҡатылыҡ менән баҫтырылған. 1739 – 1740 йылдарҙа һәм унан һуң баш күтәреүселәрҙе ҡырыу операцияларында, Минзәлә язалау комиссияһында 16634 башҡорт үлтерелгән, 4 меңе Балтик диңгеҙе буйына һәм Себергә һөргөнгә ебәрелгән. 9200 ҡатын-ҡыҙ һәм бала-саға Рәсәй империяһының эске губерналарына мәңгегә ҡоллоҡҡа оҙатылған, татарҙарға, мишәрҙәргә, башҡаларға өләшеп бирелгән. Өфө тарихсыһы Руф Игнатьевтың белдереүенсә, Себергә һөрөлгән башҡорттар шул хәтле күп булған – уларҙы төрлө чиновниктар, сауҙагәрҙәр, хатта ябай урыҫ крәҫтиәндәре юҡ ҡына хаҡҡа һатып алған.

Минең уйымса, Ҡараһаҡал Тевкелев, Соймонов һәм Урусов менән таныш булып, улар саҡырыуы буйынса Башҡортостанға килгән һәм ҡара эштәрен улар менән бергә, уларҙың бойороғо буйынса башҡарған. Шулай булмаһа, ни өсөн Ҡараһаҡал башҡа даруғаларға түгел, ә 1739-1740 йылдарҙағы ихтилалдың төп майҙаны булған Себер даруғаһына килеп, улыҫтан улыҫҡа йөрөгән? Тимәк, уны йөрөткәндәр. Ҡараһаҡал кемдән һәм нисек ихтилалдың төп етәкселәрен, уларҙың ҡайҙа йәшәгәнен белә, барып таныша алған? Тимәк, уны Бәҙеғол һәм Миңлеяр Ҡарабаев, Сәйетбай Алкалин һәм Ырыҫымбай Игембәтов, Әлекәй Ҡаракөсөков һ.б. менән кемдер таныштырған. Себер даруғаһында урынлашҡан ҡәлғәләрҙең исемдәрен Ҡараһаҡал ҡайҙан, кемдән белгән? Нисек ул тиҙ арала шул ҡәлғәләргә юл табып, йөрөп сығырға өлгөргән? 1739 йылдың йәйендә ҡаҙаҡтар әсир алған башҡорттарҙы ҡотҡарыу өсөн аҡсаны Ҡараһаҡал кемдән алған? Ни өсөн ул 1739 йылдың йәйендә әсирлектән ҡотҡарған башҡорттар менән Себер даруғаһына бергә килмәй, ҡаҙаҡтар янында ҡалып, көҙгә ҡәҙәр унда булды икән? Бәлки, ул ҡаҙаҡтар араһында булмай, Һамарға Урусов янына юл тотҡандыр һәм уның менән буласаҡ язалау операциялары тураһында фекер алышҡандыр?

1739 йылдың икенсе яртыһында Себер даруғаһы башҡорттарын яуға өндәп йөрөгән Ҡараһаҡалды ни өсөн Уразлин командаһы йәки Ҡыуаҡан улыҫы йөҙбашы Татлыбай тотоп алмаған? Ни сәбәпле уны Бәләкәй ҡоролтай хан итеп һайлағанда Шығанай Бурһыҡов менән Көҙәш Рахмағоловтар эләктермәне икән? Уларҙың Ҡараһаҡалды ғына түгел, ҡоролтайҙа ҡатнашҡандарҙың бөтәһен дә

ҡулға алырлыҡ көсө булған бит. Яуап бер: уларҙың барыһы ла Соймоновтан “Ҡараһаҡалға теймәҫкә!” тигән бойороҡ алған. Уразлиндың, йөҙбашы Татлыбайҙың, Шығанай старшина менән Көҙәш мулланың эшлекһеҙлеген, һүлпәнлеген башҡа бер ни менән дә аңлатып булмай. Соймоновтың “Ҡараһаҡалды тиҙ арала тотоп алырға!” тигән бойороғо күҙ буяу өсөн генә булғандыр.

Ни өсөн Урусов менән Соймонов башҡорттарға ҡаршы яңы язалау операцияларына әҙерләнә башлаған саҡта, хан итеп һайланған Ҡараһаҡал Себер даруғаһының улыҫтары буйлап йөрөп көс туплап, нәҡ 1740 йылдың мартында уҡ етеҙ хәрби хәрәкәт башлаған? Ни маҡсатта, ғәскәре өс меңдән ашыу булған саҡта ла, Ҡараһаҡал Өфөнө икенсе мәртәбә яулап алыуҙан баш тартып, ваҡытын башҡорт-ҡаҙаҡ сиктәре тирәһендә йөрөп үткәргән?

Ҡарамағында һигеҙ кешеһе булмаһа ла, ни маҡсат менән Ҡараһаҡал, 80 меңлек ғәскәрем бар, тип башҡорттарҙы алдап йөрөгән? Яуап бер: Урусов менән Соймоновтың бойороғо буйынса башҡорттарҙы мөмкин ҡәҙәр күберәк яңы яуға күтәреп ҡырҙырыу маҡсаты менән. Ни өсөн үҙенең ысын исемен йәшереп, Ҡараһаҡал төрлө ерҙә өс ялған исем менән һәм бер ҡушамат (Ҡараһаҡал) аҫтында йөрөгән? Хан затынанмын, тип башҡорттарҙы алдап, хан булып һайланырға теләп шулай эшләгәне көн кеүек асыҡ. Ихтилалдың бөтә етәкселәре лә йә яуҙа һәләк булып, йә язалап үлтерелгән саҡта, Ҡараһаҡал ни мөғжизә менән һәр ваҡыт ҡасып ҡотолоп ҡалған? Һорауҙар күп, ә яуап бер: Ҡараһаҡал Тевкелев, Урусов һәм Соймонов менән бәйле, уларҙың йәшерен шымсыһы, ҡотҡосо булған.

Ҡараһаҡалдың Соймонов һәм Урусов менән бәйле булыуын Әхмәтзәки Вәлиди ҙә һиҙемләгән: “Рустар уның (Ҡараһаҡалдың) Ҡаҙағстанға сигенеүен белә тороп, 1740 йылдың яҙында “язалау өлгөһө” күрһәтә башлай. Кенәз Урусов был күтәрелеште баҫтырыу өсөн Ырымбурҙа һәм Минзәләлә ике хәрби хөкөм урыны булдыра. Унда “боласы” тип һәр тарафтан тотоп килтерелгән меңәрләгән башҡорттан яуап алғанда уларҙы быға тиклем күрелмәгән ғазаптарға дусар итәләр, утҡа яғып, ҡаҙыҡҡа ултыртып, ҡабырға һөйәктәрен һындырып, киҫеп, аҫып язалайҙар. Был аяуһыҙлыҡ Ҡараһаҡал күтәрелеше баҫтырылып бөтмәҫ элек үк башлана”.

***

Үҙ ҡулындағы ерҙәрҙе һаҡлап ҡалырға, Ырымбур ҡалаһын төҙөтмәҫкә ныҡлы ҡарар итеп, колониаль иҙеүгә түҙә алмай, ихтилалдың һуңғы этабында Рәсәйҙән сығып үҙ дәүләтен төҙөргә тырышыу, үҙаллылыҡҡа ынтылыу халҡыбыҙға бик ҡиммәткә төшкән, быға тиклем күрелмәгән юғалтыуҙарға алып килгән. Рәсәйҙән сығып үҙаллы башҡорт дәүләтен төҙөү тураһында асыҡтан-асыҡ иғлан итеү власть даирәләрен бик ныҡ ярһытҡан. Бына ул бәндәләр: Сенат рәйесе граф А.И. Ушаков, канцлер Г.И. Головкин, уның урынбаҫары граф А.И. Остерман, Сенаттың генерал-прокуроры граф П.И. Ягужинский, Йәшерен канцелярия етәксеһе граф С.А. Салтыков, батшабикә Анна Иоанновнаның йәшерен кәңәшселәре кенәз А.М. Черкасский менән граф А.П. Бестужев-Рюмин. Был исемдәр документтарҙа осрай, ләкин бер ғилми хеҙмәттә лә, бер тарихи әҙәбиәттә лә, бер дәреслектә лә күренмәй. Башҡорттарҙың үҙаллылыҡҡа ынтылыу теләген мәңгегә юҡ итеү, уларҙы ҡаты ауыҙлыҡлау өсөн атап үткән бәндәләр батшабикә исеменән указдар сығарып, урындағы карателдәргә халҡыбыҙҙы аяуһыҙ ҡырырға, шул иҫәптән аслыҡтан үлтереп бөтөрөргә ҡушҡан.

1735—1740 йылдарҙағы ихтилалда халҡыбыҙҙың юғалтыуҙары тураһында төрлө сығанаҡтарҙа, тарихи әҙәбиәттә, дәреслектәрҙә төрлө мәғлүмәттәр осратырға була. П. Рычков “Топография Оренбургской губернии” тигән хеҙмәтендә, язалаусыларҙы нисектер аҡларға тырышып, ихтилал барышында һәм унан һуң 696 башҡорт ауылы яндырылған, 28491 башҡорт үлтерелгән, тип яҙған. Был һанға “ирекле” отрядтар, “еңел партиялар” тарафынан үлтерелгән, әсиргә алып, төрлө яҡҡа өләшелгән башҡорттар инмәй. Ә улар батша ғәскәренән аҙ үлтермәгән, бик күп ауылдарҙы яндырғандар. Ҡанһыҙ йәлләд В.Татищев Сенатҡа ебәргән отчетында,

ихтилал барышында һәм унан һуң 60 меңдән ашыу башҡорт төрлө бәрелештәрҙә һәм язалап үлтерелгән, һөргөнгә ебәрелгән һәм язалаусыларға өләшеп бирелгән, тип яҙған. Быға ул, әлбиттә, аслыҡтан үлгән, астан үлтермәҫкә тырышып, бушҡа ғына төрлө кешеләргә һатылған балаларҙы, ҡаҙаҡ далаларына ҡасып киткән башҡорттарҙы индермәгән. 1724 һәм 1744 йылдарҙа властар тарафынан башҡорттарҙың иҫәбен асыҡларға тырышып ҡараған материалдарға таянып, В. Кабузан тигән ғалим, 1735–1740 йылдарҙағы ихтилалда башҡорттар 65,8 мең кешегә кәмегән, тип яҙып ҡалдырған. Күренекле ғалимыбыҙ Әкрәм Бейешкә эйәреп, уның “Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше” тип аталған хеҙмәтендә әйтелгәнсә, “биш йылда (йәғни 1735–1740 йылдарҙа – **Ә.Й.**) 90 меңдән ашыу башҡорт үлтерелгән” тип һис икеләнмәй әйтергә мөмкин. Тимәк, шул йылдарҙа ғына башҡорттоң кәм тигәндә өстән бер өлөшө һәләк булған һәм тамам бөлгөнлөккә, хәйерселеккә төшкән. Халыҡ унан һуңғы осорға меңәрләп-меңәрләп үлергә дусар ителгән, тип яҙып ҡалдырған. БДУ профессоры Нәзир Ҡолбахтин мәғлүмәттәренә таянып, мин дә халҡыбыҙҙың ихтилалда юғалтыуҙарын асыҡларға тырышып ҡараным һәм Әкрәм Бейештең хаҡлы булыуына ышандым. Минең иҫәп буйынса, биш йылда халҡыбыҙ кәмендә 97 – 147 мең кешеһен юғалтҡан.

Фәнгә билдәле мәғлүмәттәргә һәм II рәүиз материалдарына таянып, профессор Н.Ҡолбахтин, XVII быуатта үткән ихтилалдар, Салауат батыр яуын баҫтырған саҡта 255–275 мең самаһы башҡорт ҡырылған, 200 меңдән саҡ ҡына күберәк башҡорт иҫән ҡалған, тигән фекергә килгән. Тимәк, башҡорт ихтилалдарын баҫтырыу геноцид рәүешен алған, халҡыбыҙҙың генофондын ҡырыуға йүнәлтелгән. Был юғалтыуҙар булмаһа, XVIII быуат аҙағында халҡыбыҙҙың һаны 460—520 мең кешегә етер ине, тип яҙған. Шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың ихтилал барышында һәм унан һуңғы юғалтыуҙары тураһында “История Башкортостана с древнейших времен до наших дней” тигән ғилми хеҙмәттең беренсе томында бөтөнләй икенсе һандар килтерелгән. Ә 1735–1740 йылдарҙағы ихтилал тураһында барған бүлектә: “Ихтилал барышында ике яҡтан да хәтһеҙ ҡорбандар булған,– тип яҙа тарихсы И. Аҡманов. – Бигерәк тә ихтилалсы башҡорттар ҙур зыян күргән. Тулы булмаған мәғлүмәттәр буйынса, улар 40 меңдән ашыу кешеһен юғалтҡан”.

Аҡманов халҡыбыҙҙың ҡан эскес йәлләдтәренә ҡарата йылы мөнәсәбәт күрһәткән кеүек. “Кирилов Иван Кирилович – сложная, противоречивая историческая фигура,– тип яҙа ул.– Выходец из народных низов стал разносторонне образованным человеком, ученым-самоучкой, автором серьезного статистико-экономического и географического труда “Цветущее состояние Всероссийского государства”. Им также составлены “Атлас Всероссийской империи” и “Генеральная карта Российской империи”. Постепенно продвигаясь по государственной службе (в 1712 г. – подъячий в канцелярии, в 1727 г. – обер секретарь Сената, в 1734 г.– статский советник), он стал дворянином и землевладельцем, весь свой талант и знания отдал служению интересам императорской России”. Кирилов ошо уҡ хеҙмәттә 1712 йылда “подъячий в канцелярии” тип яҙыла, ә ниндәй кәнсәлә писарь булып йөрөгәне әйтелмәй. Ә эш былай булған: 18 йәшендә Мәскәүҙә навигация мәктәбен тамамлағандан һуң ул “йәшерен эҙәрләү приказы”на эшкә килә, һуңынан “йәшерен канцелярия”ға күсеп, кешеләрҙе язалап яуап алғанды ҡағыҙға төшөрөп ултыра. Аҙаҡ, 23 йәшендә, йәғни 1712 йылда Сенатҡа писарь булып эшкә урынлаша һәм тап шунда Петр I күҙенә салына. 16 йылдан һуң, йәғни 1728 йылда Сенаттың өлкән сәркәтибе булып китә.

Ҡан эскес йәлләд Тевкелев тураһында Аҡманов бына нимәләр яҙған: “Тевкелев Алексей Иванович (до крещения – Кутлумухамет) выходец из ногайских мурз, личный переводчик Петра I во время Прутского и Персидского

походов. В 30-х гг. XVIII в. он сыграл важную роль в присоеденении Малого жуза казахов к России, а после организации Оренбургской экспедиции – в реализации ее мероприятий в Башкортостане. Его деятельность была высоко оценена царским правительством: он быстро продвигался по службе (полковник в 1734 г., бригадир в 1750 г., генерал-майор в 1755 г.), стал крупным дворянином – земли и душевладельцем”. Бына шундай тырыш дәүләт эшмәкәре. Әйтерһең дә, бер башҡортто ла һарайҙарға бикләп терелəй яндырмаған, меңәрләгән башҡортто ҡырҙырмаған.

В. Н. Татищев тураһында Аҡманов түбәндәгеләрҙе яҙа: “Участник Полтавской битвы и Прутского похода в 1720–1722 гг. В 1734 –1737 гг. управлял казенными заводами Урала, основал в 1721–1723 гг. Екатеринбургский горный завод, ставший затем одноименным городом. Пользуясь доверием Петра I, он выполнял ряд его дипломатических поручений в Пруссии, Речи Посполитой, Швеции. В.Н.Татищев был разносторонне образованным человеком, внес большой вклад в развитие исторической науки страны. Появление его пятитомного исследования “История Российская с самых древних времен” ознаменовало превращение исторических знаний в России в науку”. Татищевтың 1739 йылдың 22 февралендә батшабикә Анна Иоанновнаға тапшырған рапортын, күрәһең, Аҡманов уҡымаған. “Башҡортостан тарихы” тип аталған дәреслектә Аҡманов, бер сығанаҡҡа ла һылтанмай, алда әйтеп үткән фекерен ҡабатлаған. “Хәрәкәт барышында,– тип яҙа ул,– башҡорттар 40 меңдән ашыу кешеһен юғалтҡан, ифрат ҙур матди зыян күргән”.

1735–1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалын баҫтырыуҙа айырыуса тырышлыҡ күрһәткән йыртҡыстарҙың артабанғы тормош юлы нисек булған? Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының, етем ҡалған һәм ҡоллоҡҡа һатылған бала-сағаның ҡарғышы һәм күҙ йәше иң элек Кирилов менән Урусовҡа төшкән. Тәүгеһе 1737 йылдың апрелендә Һамарҙа үлә, йәки уны берәй башҡорт үлтергән. Икенсеһе лә 1741 йылдың 22 июлендә Һамарҙа донъя ҡуя. Башҡорт комиссияһының икенсе начальнигы, бригада генералы Михаил Хрущев үҙ үлемен Урыҫ-төрөк һуғышында тапһа, ришүәтсе һәм ҡаҙна буры Татищев та оҙаҡ йәшәй алмай. Уның ярҙамсыһы, 1737-1738 йылдарҙағы ихтилалды баҫтырыуҙы ойоштороусы һәм тотҡон башҡорттарҙы язалаусы полковник Андрей Хрущевтың башы батшабикә – Анна Иоанновнаға ҡаршы ойошторолған заговорҙа ҡатнашҡаны өсөн – 1740 йылдың 24 июнендә өҙә сабыла. Башҡорттарҙы төрлө юл менән икеләтә кәметергә тәҡдим иткән дәүләт сәркәтибе Артемий Волынскийҙың иһә тәүҙә телен ҡырҡып ташлайҙар, һуңынан уң ҡулын өҙә сабып, бер аҙҙан башын киҫәләр.

1735 йылдың йәйендә баш күтәргән башҡорттарға ҡаршы язалау командалары ебәреп, тотҡонға эләккән башҡорттарҙы язалап үлтергән элекке Ҡазан губернаторы Платон Мусин-Пушкинды, шул уҡ заговорҙа ҡатнашҡаны өсөн, 1740 йылдың 27 июнендә телен ҡырҡып, мәңгелеккә һөргөнгә ебәрәләр, ул шунда тиҙ арала үлә. Соймоновтың бер туған ағаһы Федор Соймоновты ла, заговорҙа ҡатнашҡаны өсөн, сыбыртҡы менән туҡмап, мәңгелеккә Охотск острогына һөрәләр. Ул боҙ ҡайната торған заводта эшләй. Петербург полицияһы начальнигы, кенәз Яков Шаховский ҙа сыбыртҡы менән туҡмала.

Башҡорттарҙы аяуһыҙ ҡырған йыртҡыс Тевкелев бригада генералы, ә Батырша яуын баҫтырыуҙа актив ҡатнашҡаны өсөн 1755 йылда генерал-майор булып китә. 1766 йылға ҡәҙәр йәшәгән Леонтий Соймонов генерал-лейтенант дәрәжәһе ала. Подполковниктар Иван Пальчиков менән Яков Павлуцкийға 1740 йылда уҡ полковник дәрәжәһе бирелә. Майор Языков та ваҡытынан алда подполковникка үрләй, капитан Кублицкий майор булып китә. Урусов Ырымбур комиссияһының бухгалтеры һәм техник сәркәтибе Рычковты ла онотмай. 1740 йылдың йәйендә үк ул “коллежский асессор” дәрәжәһе ала. Хәрби яҡтан ул майор дәрәжәһенә торошлоҡ иткән. Һуңынан Рычков Ырымбур губернаторының урынбаҫары,

Ырымбур губернаһындағы тоҙ ҡайнатыу заводтарының баш етәксеһе, Петербург Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы булып киткән.

***

Ҡанһыҙ йәлләдтәр халҡыбыҙҙың үҙ илендә үҙ азатлығы өсөн көрәшкән иң затлы, иң аҫыл, иң белемле, ҡуш йөрәкле кешеләрен: тархан, старшина, батыр, сәсәндәрен, дин әһелдәрен төбө-тамыры менән йолҡоп алып, киҫеп, яндырып, ҡәлғә төрмәләрендә язалап үлтереп, халҡыбыҙ генофондына юйылмаҫ зыян килтергән. Уның шауҡымы бөгөнгө көндә лә ныҡ һиҙелә, арабыҙҙа йылдан-йыл милләт-ара ғаиләләр һаны арта, Максим Шәрәфетдиновтар, Валерий Хәкимовтар, Игорь Гәрәевтар, Марина Шакировалар, Тәнзилә Астаховалар, Рәйсә Кузьминалар һәм башҡалар күбәйгәндән-күбәйә. Үҙебеҙҙе һаҡлап алып ҡалырға теләһәк, беҙгә уйланырға ваҡыт күптән етте. Ни өсөн япон, ҡытай, вьетнамдарҙың, ғөмүмән, Көньяҡ-Көнсығыш Азия халыҡтарының генофонды ныҡ, ҡандары таҙа һәм улар киң аҙымдар менән алға бара? Ни өсөн Афғанстан халҡы меңәр йыл буйы, ел-дауылға бирешмәй, һаман үҙ-үҙен һаҡлап алып ҡалыу өсөн көрәшә? Ни өсөн Төньяҡ Кавказ халыҡтары тиҙ үрсей һәм уларҙың генофондтары ныҡ? Яуап ябай: уларҙың ҡаны таҙа. Халҡыбыҙҙың XVIII быуатта күргән ғазаптары күптән артта ҡалды, ә беҙ һаман мандый алмайбыҙ, ишәймәйбеҙ, алға китә алмайбыҙ...

**Әхмәт-Гәрәй ЙӘНҒӘЛИН,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**

*1. История Башкортостана с древнейших времен до наших дней, т. 1. Уфа, 2004.*
*2. “Башҡорт халыҡ ижады”, т.7, Өфө, “Китап”, 2004;*
*3. Н.Мажитов, А.Султанова. “История Башкортостана с древнейших времен до XVI века. Уфа, “Китап”, 1994.*
*4. Әкрәм Бейеш. Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше. Өфө. “Китап”, 1993.*
*5. “Ватандаш” журналы, 1996, № 1, 3; 1999, № 1, 2000, № 5.*
*6. И.Г. Акманов. “За правдивое освещение истории народов”. Уфа, 1995.*
*7. Әхмәтзәки Вәлиди-Туған. “Башҡорттарҙың тарихы”. Өфө, “Китап”, 1994.*
*8.”Әйләләр”. Өфө. 2007.*
*9. “Башҡортостан тарихы”, Өфө, 2007, 71-се бит.*
*10. “Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия”. Өфө, 1997.*
*11. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев. “Йәдкәр”. Өфө, “Китап”.*
*12. “Материалы по истории России. Сборник указов и других документов”. т.1. Оренбург. 1900.*
*13. Н.А. Баскаков. “Русские фамилии тюркского происхождения. М, 1979.*
*14. П.И. Рычков. “История Оренбургская”. Оренбург. 1896.*
*15. С. М. Соловьев. “История России с древнейших времен...” Книга 10, М, 1963.*
*16. “Очерки по истории Башкирской АССР”. т. 1, ч. 1, Уфа, 1956.*
*17. “Материалы по истории Башкирской АССР”, т. 1, М, 1936.*
*19. В.Н. Устюгов. “Башкирское восстание 1737-1739 гг. М, 1950.*
*20. В.Н.Витевский. “И.И. Неплюев и Оренбургский край в прежнем его составе”. Казань, 1889.*
*21. Ғайса Хөсәйенов. “Ил азаматтары”. Өфө, “Китап”, 1998.*
*23. Р. Игнатьев. Карасакал—лжехан Башкирии.— “Труды научного общества при Наркомпросе БАССР”, вып. 2. Стерлитамак, 1922.*
*24. П.И. Рычков. Топография Оренбургской губернии. Уфа, “Китап”, 1999.*

# ӘҘӘБИӘТКӘ ҺӘЙКӘЛ

Күп быуатлы, күп милләтле донъя әҙәбиәтендә сағылдарҙа йәйрәп үҫкән мөһабәт имән һымаҡ арҙаҡлы башҡорт яҙыусыһы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ижады тәрән тамырлы. Ул тәүге шиғырҙарында уҡ изгеләрҙән-изге әсәгә, тыуған төйәгенә, иленә, гүзәл зат ҡатын-ҡыҙға, дуҫтарына мөхәббәтен белдерҙе. Һәр бер шиғыры күптән таныш һүҙҙәр, билдәле шиғри алымдар менән яҙылған кеүек тойолһа ла, улар фәлсәфәүи тәрәнлектәре менән айырылып тора.

1939 йылда яҙылған бер шиғырында:

*Йәшкә ҡушып үпте күҙҙәремде:*
*— Бәхетле бул, беҙҙе онотма...*

*Яулыҡ осон сәйнәп ҡалды әсәй,*
*Ҡарт ҡайынға һалып беләген.*
*Мин — таш бәғер —*
*Ул саҡ аңламаным*
*Улын һөйгән әсә йөрәген...*
*Ғәмһеҙ атлап киттем...*

— тип белдерә.

Шағир әсәгә булған мөхәббәтен ижадта һәр саҡ раҫлап, иҫбатлап торҙо. Батырлыҡ, Тыуған ил яҙмышы, халҡы тураһында уйланыуҙары ижадының тәүге осорондағы “Таныш булмаған ҡунаҡ” поэмаһынан алып “Үлмәҫбай”ға тиклем, “Европа — Азия” шиғырҙар шәлкемендә һәм хәҙерге талант бейеклектәрен билдәләрҙәй һоҡланғыс әҫәрҙәрендә ҡабатланғыһыҙ рәүештә дөйөмләштерелде.

Мөхәббәт... Ҡатын-ҡыҙҙың гүзәллеге, алсаҡ йөҙө, ҡаш һирпеп ҡарауҙары, серле күңеленең байлыҡтары, нескә хис-тойғолары тураһында ер йөҙөндә кешелек донъяһы барлыҡҡа килгәндән бирле ниндәй генә шиғри юлдар яҙылмаған!

Мостай Кәрим үҙенең мөхәббәт лирикаһында бер үк ваҡытта көнсығыш һәм көнбайыш шиғриәтенә, башҡорт халыҡ ижадына таяна, уны юғары оҫталыҡ менән үҫтерә. Ҡатын-ҡыҙға ул тоғро тормош иптәше, ижадҡа көс биреүсе, намыҫлы йәшәүгә өндәүсе, ырыуҙы дауам иттереүсе илаһи йән эйәһе итеп табына. Ә мөхәббәт ул һис ҡартаймай. Йәшәй, йәшәртә, илһам бирә; күкрәй ҙә ул, күкрәтә лә!

*Һин яҙаһың:”Йылдар, юлдар буйлап*
*Алыҫлашҡан һайын аралар,*
*Һинең хаттар һүҙгә һәм наҙлауға*
*Һаман һараная баралар.*
*Мин уйҙарҙың әле лә йә дауыллы,*
*Йә тын диңгеҙендә йөҙәмен,*
*Айырылышыу, ахры, һыуыталыр,*

*Таш итәлер ирҙәр йөрәген...*
*Һин әйләнеп ҡара Уралдағы*
*Артта ҡалған яҙғы көндәргә,*
*Иҫеңдәме, хайран ҡала инең*
*Таш өҫтөндә үҫкән гөлдәргә?*
*Эҫе нурҙар гөлдөң һабаҡтарын*
*Шундай сәнескеле иттеләр,*
*Ә сәскәләр, ҡояштан күҙ алмай,*
*Йәйҙәр буйы хуш еҫ һиптеләр.*
*Әгәр уттар үткән минең йөрәк*
*Мөмкин икән ташҡа әйләнеү,*
*Һиңә булған мөхәббәтем минең —*
*Ташта үҫкән гөлдәр бәйләме.*



*Мостай Кәрим Азия һәм Африка илдәре менән теләктәшлек конференцияһында. Ташкент.*

Мостай Кәрим — таштарҙа ла гөлдәр үҫтерер шағир. Ул — мөхәббәтле һүҙ оҫтаһы, ул — ысын мөхәббәт йырсыһы. Ил йырсыһы. Халыҡ йырсыһы. Был йыр, был мөхәббәт — мәрхәмәтле, тәрән тамырлы, уйсан, моңло һәм оҙон ғүмерле. Башҡорт теле, Башҡорт иле үтер быуаттарҙы Мостай Кәрим ижады ла бер һулыш, бер ынтылыш, бер йән булып үтә.

Башҡортостандың халыҡ шағиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Ленин һәм Дәүләт премиялары, Андерсен исемендәге халыҡ-ара диплом лауреаты Мостай Кәрим (Мостафа Сафа улы Кәримов) 1919 йылдың 20 октябрендә Шишмә районының Келәш ауылында тыуған.

Келәш ауылының барлыҡҡа килеүе тураһында ҡыҙыҡлы ғына бер нисә һүҙ. 1745 йылда Теләш исемле берәү 3 һум 50 тингә меңле ырыуы Күсем аталмышлы ауыл кешеләренән ер һатып алған. Ә 1750 йылда инде ул 40 йылға арендаға килешеү төҙөй. Ауыл тәүҙә әлеге ултырған еренән дүрт-биш саҡрым йыраҡлыҡта — Дим йылғаһы буйында, Мурҙай күле янында урынлаша. Унан һуң Аҡманай күле ҡырына күсә. Бер нисә йылдан — әлеге урынға. Ауыл тәүҙә Теләш исеме менән йөрөй. Урыҫ писарҙары яңылышлығы арҡаһында Келәшкә әйләнә.

Теләш ҡарттың шәжәрәһе лә билдәле: Теләш—Ниғаш—Зәйет—Бикташ—Ҡудаш—Шәрәфетдин (1880 йылда вафат булған).

Келәш ауылы халҡы үҙҙәренең билдәле шәхестәре менән ғорурлана ала. Дин әһеле, мәғрифәтсе Зыя Камали, данлыҡлы йырсы Фәриҙә Ҡудашева, Башҡортостандың халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаш һәм башҡалар.

Мостай Кәрим Өфө педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетында уҡый, Бөйөк Ватан һуғышының башынан аҙағынаса яу юлдарын үтә. Байтаҡ йылдар ул Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһына етәкселек итә. Утыҙ йылға



*Шишмә районы Келәш ауылындағы Мостай Кәрим аллеяһы.*

яҡын Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһы сәркәтибе вазифаһын башҡара. Бик күп йәмәғәт эштәре алып бара. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн – ике тапҡыр I дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары һәм миҙалдары менән, ә әҙәби хеҙмәттәре өсөн ике тапҡыр Ленин ордены, ике тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, Халыҡтар дуҫлығы, “Почет Билдәһе” ордендары менән бүләкләнә. Мостай Кәрим – шиғриәт һөйөүселәрҙең иң яратҡан шағирҙарының береһе, берәгәйлеһе.

Бөгөнгө көндә атаҡлы башҡорт яҙыусыһы Мостай Кәримгә тыуған төйәге Шишмә районы Келәш ауылында “Ҙур ҡош” тип аталған мемориаль музей-усадьба төҙөү эштәренә әҙерлек алып барыла. Музей-усадьбаның директоры Раушана Хәниф ҡыҙы Байғужина әйтеүенсә, буласаҡ мемориаль комплекстың концепцияһы эшләнгән, эскиз-проекты эксперт комиссияһы тарафынан ҡабул ителгән, төҙөләсәк урыны билдәләнеп, 15 гектар ер бүленгән.

Эскиз-проекттан күренеүенсә, музей-усадьба осоп барған ҙур ҡошто хәтерләтә. Унын дөйөм майҙаны 2033 квадрат метр, ә экспозициялар 876 квадрат метрҙа эшләнәсәк һәм улар тематика буйынса бүленеп, өс залда урын аласаҡ. Бында шулай уҡ конференц-зал, китапхана, әҙәби салон, ашхана, ғилми-эҙләнеү үҙәге, фондтарҙы һаҡлау һәм башҡа ярҙамсы бүлмәләр билдәләнгән.

Музей алды майҙансыҡтарында яҙыусы әҫәрҙәренең геройҙары скульптуралары, тематик нигеҙҙә ултыртылған ағастар, әҙәби байрам үткәреү һәм ял итеү өсөн урындар ҡаралған.

Оло ҡошто хәтерләткән күргәҙмәләр залының тәүге өлөшөндә Мостай Кәримдең Бөйөк Ватан һуғышына арналған шиғырҙары, поэмалары, повестары буйынса экспозициялар ҡороу ҡаралған. Икенсе зал тулыһынса драматургияны сағылдырасаҡ, ә өсөнсө залда – балалар әҙәбиәте: “Беҙҙең өйҙөң йәме”, “Өс

таған”, “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” әҫәрҙәре төп тематиканы тәшкил итәсәк. Һәр бер залдың театр пәрҙәләре менән бүленеүе күҙ уңында тотола.

Тәжрибәле белгес Раушана Хәниф ҡыҙы етәкселегендәге музей-усадьба ойоштороу коллективы әлеге ваҡытта ең һыҙғанып эшкә тотонған. Мостай Кәримдең шәжәрәһе эшләнгән. Театрҙар менән бәйләнешкә инеп, уларҙан фотографиялар, сәхнә костюмдары, аудио-,видеояҙмалар тупланған. Буласаҡ музейҙың ғилми хеҙмәткәрҙәре тарафынан китапханаларҙа, архивтарҙа тикшереү эштәре йәйелдерелгән. Юғары уҡыу йорттары, ғилми-тикшеренеү институттары, элекке СССР-ҙа йәшәгән дуҫтары ғаиләләре менән бәйләнеш булдырылған. Уларҙан ғилми эштәр, иҫтәлектәр, хаттар, фотографиялар килә башлаған.

— Мостай Кәримдең 20 йылдан ашыу йөрөгән иң ҡәҙерле ҡомартҡыларҙың береһе — “Волга” еңел машинаһын ремонтлап күргәҙмә залына ҡуясаҡбыҙ,— ти Р. Х. Байғужина.

Шағир, драматург, прозаик һәм публицист Мостай Кәрим ысын-ысындан халыҡ улы булды, әҙәбиәтебеҙҙең киләсәге тураһында хәстәрлек күрҙе. Рәми Ғарипов, Абдулхаҡ Игебаев, Рафаэль Сафин, Марат Кәримовтарҙың тәүге шиғри йыйынтыҡтары тураһында әҙәбиәттә үҙе бер һабаҡ кимәленә күтәрелгән мәҡәлә яҙып сыҡты. Һәр саҡ әҙәбиәткә килгән яңы исем менән танышып барҙы, әҫәрҙәренә үҙ мөнәсәбәтен белдерҙе, кәңәштәрен бирҙе, ҡанатландырҙы.

Күргәҙмәләрҙең бер өлөшөндә ҡәләмдәштәре тураһында ла экспозиция буласаҡ. Александр Твардовский, Константин Симонов, Михаил Дудин, Рәсүл Ғамзатов, Сыңғыҙ Айытматов, Хәсән Туфан, Ҡайсын Кулиев, Микола Бажан, Давид Кугультинов кеүек донъя әҙәбиәте йондоҙҙары менән ул дуҫ йәшәне. Хәсән Туфанға арналған бер шиғырында, оло ҡәләмдәшенә мөнәсәбәтен белдереп, былай тип яҙҙы:

*Һандуғасҡа ниңә буй-һын,*
*Нимәгә уға биҙәк?*
*Таңда бер һайрап ебәрһә,*
*Биш ҡат өҙөлә үҙәк.*

Иң яҡыны Дағстандың халыҡ шағиры Рәсүл Ғамзатов булғандыр. Дуҫына ошондай шиғри юлдар менән өндәшә әҙип:

*Ер йөҙөндә һап-һары көҙ.*
*“Был — һарғайған йөҙ”,— тимә!*
*“Көҙөм етте”,— тип зарланма,*
*Әүлиәгә көҙ нимә?!*
*Донъяның серҙәрен һаҡла,*
*Сисмә һин барыһын да.*
*Йәшәһен меңәр төрлө төҫ*
*Бер япраҡ һарыһында.*

Ошо донъя әҙәбиәте данын билдәләгән оло шәхестәрҙең ижади эшмәкәрлеген һөйләүсе материалдар ҙа музейҙы йәмләндерәсәк. Яҙыусының эш бүлмәһен булдырыу, ырыу шәжәрәһе, Келәш ауылы тарихына ҡағылышлы ҡомартҡылар менән тулыландырыу ҙа күҙ уңында тотола.

Бөйөк әҙип, халыҡ шағиры Мостай Кәримдең Келәш ауылындағы мемориаль музей-усадьбаһы башҡорт әҙәбиәтенә оло бер һәйкәл булып, Рәсәй халыҡтары дуҫлығын сағылдырып торасаҡ, тигән ышаныста ҡалайыҡ.

**Фәнис ЯНЫШЕВ.**

## ХАЛЫҠ РӘССАМЫ



Быйыл Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Татарстандың халыҡ рәссамы Рәшит Фәтих улы Имашевҡа 70 йәш (1939) тулған булыр ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был бик тә талантлы, тормошҡа, кешеләргә ғашиҡ, аңлы ғүмеренең һәр бер көнөн, хатта төндәрен дә нескә, үтә ауыр хеҙмәткә арнаған оло йәнле шәхес фанилыҡта ни бары 68 йыл йәшәп китте. Ошо аҙ ғына (йыһан үлсәмендә күҙ асып йомған ара) ғүмер эсендә лә оло талант эйәһе кешелек донъяһына бихисап күркәм ижади хеҙмәт емештәрен ҡалдырырға өлгөрҙө. “Имаш” ҡултамғалы картиналар Татарстан, Башҡортостан, Рәсәй күргәҙмә залдарында, донъя күләмендәге галереяларҙа үҙенең тейешле урынын алған.

Рәшит Имашев — һынлы сәнғәт, портрет, монументаль әҫәрҙәр, китап-журналдарҙы биҙәү оҫтаһы — сәнғәткә төрлө белем, бай тормош тәжрибәһе туплап аяҡ баҫты. Миәкә районы Исламғол ауылында тыуып үҫкән Рәшиттең бала сағы һуғыш һәм унан һуңғы ауыр йылдарға тура килә. Күп кенә тиҫтерҙәре кеүек үк, ул да атайһыҙ үҫә. Атаһы Фәтих Ғөбәйҙулла улы Имашев Бөйөк Ватан һуғышында һәләк була. Әсәһе Сәғиҙә Заһиҙулла ҡыҙы Ғилманова Исламғол ауылында тыуып үҫеп, Аҙнай ауылы егете Фәтихҡа кейәүгә сыға, һөнәре буйынса — уҡытыусы. Был 1938 йылда була. Сәғиҙә ире Фәтих менән бик аҙ йәшәп ҡала. 1939 йылда Фәтих Ғөбәйҙулла улы Фин һуғышына алына. Ире фронтҡа киткәс, Сәғиҙә Исламғолға әсәһе Йәмилә янына ҡайта. Шунлыҡтан Рәшит Исламғол ауылында тыуа. Күп кенә сығанаҡтарҙа “Рәшит Аҙнайҙа тыуа” тип яҙалар. Был дөрөҫлөккә тап килмәй. Үҙ ҡулы менән яҙылған биографик белешмәһендә лә, анкетала ла Рәшит Фәтих улы үҙенең Исламғолда тыуғанлығын белдерә. Йәш балалы булыуына ҡарамаҫтан, Сәғиҙәне Исламғолдан 60–70 саҡрым алыҫлыҡтағы ауылға уҡытыусы итеп тәғәйенләгәс, әле имсәк тә ташлап өлгөрмәгән Рәшит өләсәһе Йәмилә Әхмәтйән ҡыҙы (сығышы менән Миәкә районы Тамъян-Таймаҫ ауылынан) тәрбиәһендә ҡала.

Исламғол – Башҡортостандың Ырымбур менән сиктәш урман-дала зонаһына ҡараған көньяҡ-көнбайыш өлөшөндә урынлашҡан. Һөҙәк тауҙары, күл-йылғалары, башлыса имән, ҡайын, йүкәнән торған уйым-уйым урмандары унын тәбиғәтен матур ҙа, үҙенсәлекле лә итә. Тап ошо тәңгәлдә Өршәк йылғаһы Димгә килеп ҡушыла. Һыуҙарында балыҡ ҡармаҡлап, туғайҙарында емеш-еләк йыйып ирkенлектә үҫкән буласаҡ рәссамдың да холоҡ-фиғылында тыуған яҡ тәбиғәтенең гүзәллеге, киңлеге сағылыш тапмай ҡалмағандыр. Ваҡыт-ваҡыт (атаһыҙ, әсәһеҙ

үҫеүҙән килгәндер) һағышлы уйланыуҙарға бирелеүен иҫәпкә алмағанда, Рәшит күңелсәк, йомарт, отҡор булып үҫә. Күберәк тәбиғәт ҡосағында булырға ярата. Йәштәштәре, ауылдаштары менән ихлас аралаша. Рәшит менән бергә уйнап үҫкән яҡындары: әсәһе менән бер туған апаһы Факия, тиҫтерҙәре Фаил, Рауил Шәймәрҙәновтар уның уйсан-күҙәтеүсән, шул уҡ ваҡытта үҙ һүҙле, ныҡышмал, тәүәккәл булыуын да хәтерләйҙәр. Мәктәптә яҡшы уҡый. Ауылда ете синыф тамамлағас, Өфөләге 1-се интернат-мәктәпкә уҡырға инә. “Рәшит үҙ алдына маҡсат ҡуйып йәшәне һәм ниәтенә ирешә килде. Алдына алғанын, теләһә ниндәй ауырлыҡтар аша үтһә лә, эшләй ине”,— тип иҫкә ала уны Рауил Шәймәрҙәнов. Шуға бәйле ул үҙҙәре менән булған бер эпизодты бәйән итте.

“Рәшит бер йыл уҡығас, Өфөнөң интернат-мәктәбенә уҡырға мин дә барҙым. (Был Красин урамына урынлашҡан 9-сы һанлы интернат ине. Аҙаҡ ул Октябрь проспектына күсерелеп, 1-се һанлы интернат-мәктәпкә әйләнде.) Хәҙер Исламғолдан икәү булдыҡ. Шулай ҙа ауыл яман һағындыра. Байрам көндәрендә (ҡайһы саҡ ял көндәрендә лә) ауылға һыпыртырға ғына торабыҙ. Ара хәтәр йыраҡ бит инде. Стансала төшкәс, йәнә 70-ләп саҡрым йәйәүләргә кәрәк.

Бер мәл шулай Яңы йыл алдынан ҡайтырға булдыҡ. Был саҡта көн бик ҡыҫҡа, ҡар, буран, ҡараңғы. “Нисек ҡайтып етербеҙ икән?”— тип шигемде Рәшиткә әйттем. “Ҡайтырбыҙ”,— ти Рәшит. Беләм, алдына алдымы, эшләмәй ҡалмай ул. Киттек вокзалға төшөп. Ул саҡта хәҙергеләй электричкалар шыжлап йөрөп тормай. Пассажир поездарына индермәйҙәр, эшселәрҙе йөрөтә торған биш-алты вагонлы поезд тәүлеккә бер йөрөй. Унда һәр саҡ халыҡ күп. Вагондарға этешә-төртөшә көскә инәһең. Был юлы ла шул уҡ хәл. Аксен стансаһына көс-хәл менән килеп еттек. Уғаса ҡараңғылана ла башланы. Юлдарҙа тау-тау ҡар өйөмдәре ята. Хоҙайҙан булып, кәрәсин мискәһе һалған бер трактор килеп сыҡты. Ултырыр урыны юҡ. Артындағы арҡылы ағасҡа йәбешә-һөйрәлә, Ғәйнә ауылына тиклем килдек. Мәнәүезтамаҡтан Тамъян-Таймаҫҡа юлландыҡ. Бер атлыға осрағайныҡ, ултыртманы. Ундай мәлдә өҙгөс тә булып китәһең, артынан барып, шым ғына санаһының ҡанатына ултырҙыҡ. Бер аҙ барғас, күреп ҡалып, беҙҙе тибеп төшөрөп ҡалдырҙы. Өҫтә — интернат пальтоһы, аяҡта — быйма, таҙартылмаған юлдан атлауы ауыр, етмәһә — ҡаршы ел. “Хәйерсегә ел ҡаршы”,— тип Рәшит һаман шаярып һөйләшә. Тамъян-Таймаҫҡа килеп еткәнсе манма тир булдыҡ. Атларлыҡ хәл ҡалмағайны.

Рәшиттең өләсәһе — Тамъян-Таймаҫ ҡыҙы, туған-тыумасалары күп, минең дә бер туған апайым ошонда тормошта. Тамаҡ ялғап, бер ни тиклем ял иткәс, йәнә юлға дәртләндек.

Ҡараңғы, буранлап та тора. Туғандар юлға сығармаҫҡа көсләшеп ҡараны, әммә Рәшит үҙ



*Рәшит, ҡатыны Тәнзилә, өләсәһе Йәмилә, ҡыҙы Наилә, әбейе.*

һүҙендә нык тора. “Ҡайтабыҙ”,– ти ҙә ҡуя. Аяҡтарҙы көскә һөйрәп атлайбыҙ, йәнә 10–12 саҡрым атлайһы бар. Буран көсәйә төштө. Юлды юғалтып, байтаҡ буталып йөрөй торғас, Шатмантамаҡҡа килеп сыҡтыҡ. Унан инде Исламғолға алыҫ түгел. Төн уртаһында ғына ауылға ҡайтып еттек. Шул тиклем арыҡкан, күҙ-ҙәр үҙенән-үҙе йомола. Беҙҙең өй ауылдың бирге осондараҡ, Рәшиттеке арғы оста, тағы байтаҡ атларға кәрәк. Әйҙә, Рәшит, беҙгә инәйек тә йоҡлайыҡ, тим! Юҡ, тыңламаны, ары китте. Беҙҙән бер нисә йорт үткәс, тамам хәле бөткән Рәшит Фазлый бабайҙарҙың ҡапҡа төбөнә һалынған ташҡа ултырып йоҡлап киткән. Бәхетенә, бер ағай күреп ҡалып, уны күтәреп тигәндәй өйөнә илтеп ҡуйған. Туңып ҡуйыу ихтималы ла бар ине бит. Бына шулай ныҡыш та, үтә тәүәккәл дә ине ул”.

Өфө интернат-мәктәбен уңышлы тамамлағас, Рәшит Ҡазан һынлы сәнғәт училищеһына уҡырға инә. Тырышып уҡыу менән бер рәттән, ҡала ситенә сығып эскиздар эшләй, китап-журналдарға тематик һүрәттәр төшөрә. Йәш рәссам өсөн тынғыһыҙ эҙләнеү, өйрәнеү йылдары була был. Татарстан сәнғәт оҫталары менән аралашыу, уларҙан дәрестәр алыу Рәшитте ҡанатландырып ебәрә, яңы ижади ынтылыштарға әйҙәй. Һуңғы курстарҙа уның рәсемдәре төрлө баҫмаларҙа сыға башлай. Егеттең һәләтен күреп, уны Ҡазанда ҡалып эшләргә өндәйҙәр. Һайлап алған һөнәренең серҙәренә тәрәнерәк үтеп инеү, кешеләрҙе һоҡландырырлыҡ картиналар тыуҙырыу теләге менән янған үҫмер Ҡазанда алған белеме менән генә сикләнеп ҡалмаҫҡа, артабан камиллашырға ынтыла. Шул теләге уны Мәскәүгә, В. Суриков исемендәге Һынлы сәнғәт институтына, алып килә. Мәскәүҙә уҡыған ваҡытын аҙаҡ: “Иң бәхетле йылдарым”,– тип йыш иҫенә төшөрәсәк Рәшит.

Иркенләп, ҡолас ташлап йөҙөр өсөн һыуҙың ҙуры һәм тәрәне кәрәк. Юғары талаплы, профессиональ сәнғәт белгестәренән белем алыу Рәшиткә кескәй йылғанан киң дарьяға сыҡкандай тәьҫир итә. Ижади һулышының күпкә иркенәйгәнен тоя ул. Институтты уңышлы тамамлағас, тыуған Башҡортостанына ҡанатланып ҡайта. Сәнғәт донъяһына мөкиббән бирелә. Бының өсөн белеме лә, теләге лә бар. Тик юғары белемле, өмөтлө рәссамды Өфө бигүк шатланып ҡаршыламай. Йәштәр уҡырға күпләп ынтылған заман. Мәскәүҙән дә, башҡа тарафтарҙан да йәш белгестәр күпләп ҡайта, ә йәшәр өсөн фатир юҡ. Был “юҡ” һүҙенә кемдәр генә килеп төртөлмәгән дә, ниндәй генә аҫыл заттарыбыҙ тәртәләрен икенсе тарафтарға бормаған икән! Йәштән тормош ауырлығын байтаҡ татыған Рәшит тиҙ генә бирешергә теләмәй, үҙенең тәүәккәл, ныҡыш холҡон эшкә егә һәм, ниһайәт, фатирлы була. Эшләү өсөн айырым оҫтаханаһы ла табыла. Әйҙә, көндө төнгә ялғап эшлә, ижад ит. Һәм Рәшит эшләй. Ижад ҡомары, оҫта ҡулдар әллә ниндәй мөғжизәләр тыуҙырырға һәләтле.

Ләкин... И, донъя? Бар, һин уны аңлап ҡара. Инде тормоштары яйланды, рәтле генә йәшәп киттеләр тиһәң, уйламаған ерҙән көтөлмәгән ҡаршылыҡтары килеп сыға. Рәшит Имашевтың ижади уңыштары кемгәлер “ҡамасаулай” башлай. Ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймай, тигән халыҡ мәҡәлен нисек иҫкә төшөрмәйһең инде бындай осраҡта. Күптән түгел туйлап алған хәләл ефете менән кәңәшләшә лә китә Рәшит сығып (әлдә әле баш һуҡкан яҡҡа түгел) Ҡазанға. Хәләле Тәнзилә ханым – Ҡазан ҡыҙы. Ҡайҙа барып баш төртөрбөҙ, тигән хәсрәт юҡ-юғын. Ҡазан да ят ҡала түгел. Бергә уҡыған иптәштәре, таныштары бар. Рәшиттең Ҡазанға килеүенә иң ныҡ һөйөнгән халыҡ, моғайын да, яҙыусылар, шағирҙар булғандыр. Иң әүәл рәссамды улар уратып ала. Эш, әлбиттә, әҙиптәрҙең китаптарын нәфис

яҡтан биҙәүҙә генә түгел. Рәшит баҫалҡылығы, йор һүҙле, асыҡ йөҙлө булыуы, уй-хыялдары, эске кисерештәре менән дә әҙиптәргә яҡын тора. Айырыуса халыҡ шағиры Хәсән Туфан менән Рәшит Имашев араһында туғандарса йылы мөнәсәбәт урынлаша. Бөйөк гуманист әҙип Рәшиттә талантлы рәссам менән бергә оло йөрәкле, киң күңелле, тормошто тәрәнтен аңлаған маҡсатлы шәхесте күрә. Рәшит тә тормоштоң әсеһен-сөсөһөн етерлек татыған оло әҙиптең кисерештәрен, уй-хистәрен үҙ итә. Шуға күрә лә Рәшит Имашев эшләгән Хәсән Туфан портреты эргәһенән тыныс ҡына китеп булмай. Рәссам шағирҙың бар булмышын аңлай, тоя. Шулай булмаһа, заман, йәмғиәт, йәшәйеш хаҡында тәрән философик уйҙарға бирелгән йөҙҙә һарыларға һабыштырыр һағыш ятыуын да бер юлы сағылдыра алмаҫ ине. Эске кисерештәр, һағыштар Рәшиткә лә үтә таныш. Ҡәһәрле һуғыш атаһыҙ үҫкән балалар йөрәген тетрәтеп кенә ҡалманы, төҙәлмәҫ яралар ҙа һалып китте. Һуғышта Рәшит атаһын, ике олатаһын, әсәһенең бер туған энеһе Мөхтәрулла ағаһын һәм башҡа бик күп яҡындарын юғалта. Ауылда көндө төнгә ялғап, арымай-талмай эшләгән өләсәһе, әсәһе һәм башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙы күреп үҫә. Үҙе лә тиҫтерҙәре менән бергә биш-алты йәштән ат менеп күбә тарттыра, утауҙа, ырҙын табығында эшләй. Шуға ла Рәшит ижадында һуғыш темаһы айырым урын алып тора. Үҙҙәрен аямай тылда эшләгән ҡатын-ҡыҙ образдары әсе дөрөҫлөгө менән тетрәндерә.

Ҡазанға килеп эшләй башлаған йылдарҙа Рәшит үҙенең нәҫел-тамыры хаҡында күберәк уйлана, Өршәк, Дим буйҙарын, унда ҡалған өләсәһен, әсәһен, туғандарын һағына. Ауылға ҡайтҡан арала өләсәһенән, туғандарынан нәҫел-нәсәптәрен төпсөп һораша. Әсәһе яғынан да, атаһы яғынан да уның нәҫеле ҡалын.

Атаһы яҡлап олатаһының атаһы Зәки Имашев – Аҙнай ауылы ил-күл-мең ырыуы башҡорто. Эшһөйәр, бала күңелле, йомарт кеше була. Ҡатынын бер бай урлап алып киткәс, бер үҙе биш бала ҡарап үҫтерә. Оло улы Ғөбәйҙулла ҡул араһына кергәс, тормоштары бер ни тиклем еңеләйә. Ғөбәйҙулла Аҙнай ҡыҙы Ғәйниәгә өйләнә. Тәүге улдары Булат Имашев тыуа.

Булат Имашев – Башҡорт академтеатрына нигеҙ һалыусыларҙың береһе; 1937-1938 йылдарҙа Башҡорт драма театрында баш режиссер, 1939–1943 йылдарҙа Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының генераль директоры һәм баш режиссеры; Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры. Булатҡа ун йәш тигәндә, әсәһе Ғәйниә ҡапыл вафат булып ҡуя. Атаһы Ғөбәйҙулла икенсе тапҡыр өйләнә. Икенсе ҡатынынан Рәшиттең буласаҡ атаһы Фәтих тыуа. Ғөбәйҙулланан һуң Гөлъямал – Зәкиҙең яратҡан ҡыҙы үҫеп етә. Рәшит Гөлъямал әбеһенең дә тамырҙарын юллай. Кеше тамыры ағас тамырынан да ишлерәк икән. Гөлъямал әбеһенең ҡыҙы – Миңнехаят, уның ҡыҙы – Гөлшәмсә. Гөлшәмсә – оҙаҡ йылдар Миәкә районы хакимиәте башлығы булып эшләгән Хәбир Хәләф улы, “Ҡаран” совхозы директоры Хәйҙәр Хәләф улы Мусиндарҙың әсәләре. Гөлъямалдан һуң тыуған Шәрәфулла, Кәрәмулла, Шәмсиямал Имашевтарҙан таралған башҡа балалар ҙа – оло ихтирам ҡаҙанған, хеҙмәт һөйәр кешеләр. Әсәһе яғынан олатаһының атаһы Ғилман да – шул ил-күл-мең ырыуына ҡараған Исламғол кешеһе.

Ғилмандың улы Заһиҙулла (ҡыҙы Сәғиҙә – Рәшиттең әсәһе), Вәлиулла, Ғәйшәбикә (Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, балетмейстр Илдус Хәбировтың әсәһе), Мәрйәмбикә, Хәлиулла. Рәшиттең олатаһы Заһиҙулла менән өләсәһе Йәмиләнең дә биш бала: Сәғиҙә, Мөхтәрулла, Фәғилә (ире – Социалистик Хеҙмәт Геройы Әһлиулла Суфиянов), Сәүиә, Факия. Күренекле архитектор Фәнил

Имашев – Рәшиттең бер туған энеһе – Өфөлә йәшәне. Ҡайтҡан һайын энеһенә инмәй китмәй ине Рәшит.

Ил буйлап (хатта сит илдәргә лә) таралған Имашевтар, Ғилмановтар нәҫеле талантлы, эшһөйәр, игелекле балалар тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Ҡайҙа, кем булып эшләүҙәренә ҡарамаҫтан, улар ата-бабалары рухына тап төшөрмәне. Рәшит үҙ нәҫел-ырыуы менән хаҡлы ғорурланып йәшәне. Туғандары менән аралашып торҙо.

Рәшит Имашев Татарстан һынлы сәнғәт донъяһына яңы эстетик ҡараш формалашҡан 70-се йылдарҙа килеп, уны үҙенең үлемһеҙ әҫәрҙәре менән байытты. КамАЗ, Байкал-Амур магистрале төҙөүселәре, Әлмәт, Түбән нефтселәре тормошон сағылдырған сағыу картиналары бик күп күргәҙмә залдарында тамашасылар һөйөүен яуланы, юғары баһа алды. Ил буйлап та, сит мәмләкәттәрҙә лә бихисап сәфәрҙәрҙә булды рәссам. Юл хәтирәләре булып "Имаш" имзалы һоҡланғыс полотнолар донъя күрҙе.

Рәшит Имашев һынлы сәнғәттә портрет оҫтаһы булараҡ башҡаларҙан айырылып тора. Шәхестең эске һәм тышҡы халәтен бер юлы күрһәтә алыу маһирлығы һәр кемгә бирелмәгән. Рәссам үҙе белгән, аралашҡан, хөрмәт иткән тиҫтәләрсә шәхестәрҙең портретын эшләне. Улар араһында Ғабдулла Туҡай, Ғәлимйән Ибраһимов, Хәсән Туфан, Муса Йәлил, Эрнест Хемингуэй, Ҡайсын Кулиев, Сәлих Сәйҙәшев, Нәжиб Йыһанов кеүек билдәле яҙыусылар, композиторҙар, Луис Корвалан, Фидель Кастро, Индира Ганди кеүек ғүмерҙәрен милли азатлыҡ көрәшенә, тыныслыҡ өсөн көрәшкә арнаған сәйәсмәндәр бар. В. И. Ленин тормошон сағылдырған картиналары иғтибарҙы йәлеп итә. Һуңғы йылдарҙа Рәшит Имашев ике республика үҫешенә, унда йәшәгән халыҡтар тормошон яҡшыртыуға ғәйәт күп көс һалған ике президенттың – Мортаза Рәхимов менән Минтимер Шәймиевтың портреттарын яҙҙы. Рәшит Имашев татар мәҙәниәте уңыштарын әүҙем пропагандалаусы ла ине. Ул яңы быуын ижади йәштәр коллективын булдырыуға ла ҙур өлөш индерҙе. Ун йыл дауамында Рәшит Фәтих улы Татарстан Республикаһы Рәссамдар союзы йәш художниктар берләшмәһен етәкләне. Сәнғәт училищеһында балалар уҡытты.

Рәшит Имашев йыл һайын тиерлек тыуған яҡтарына ҡайтып торҙо. 2006 йылда Ҡырғыҙ-Миәкә район мәҙәниәт йортонда Аҡмулланың 175 йыллыҡ юбилейы үткәрелде, Рәшит Имашев үҙенең Аҡмуллаға бағышланған "Бала саҡ", "Егет", "Һуңғы намаҙ" тигән рәсемдәрен яҡташтарына бүләк итте. Ошо әҫәрҙәре өсөн уға Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге премия бирелде.

Рәшит Имашев һынлы сәнғәттә, графикала, монументаль сәнғәттә бөтәһе мендән ашыу хеҙмәт ҡалдырҙы. Уның әҫәрҙәре 30-ҙан күберәк мәртәбәле күргәҙмәләрҙә күрһәтелде, сит ил картиналар галереяһында урын алды. Рәссам үҙе йәшәгән Татарстандың, тыуған төбәге Башҡортостандың сағыу ижади эшлеклеһе, талантлы улы булды.

**Түләк ҒИРФАНОВ.**
**Миәкә районы, Ҡаран-Ҡунҡаҫ ауылы.**

# *Әҙәби-мәҙәни мөхит*

***

Халыҡ-ара Аксаков байрамы сиктәрендә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында костюмлаштырылған бал үтте. Сарала Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов, БР Дәүләт Йыйылышы—Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев, Мәскәүҙән һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан килгән ҡунаҡтар, Болгария, Германия һәм Белоруссия делегациялары ағзалары ҡатнашты. Мортаза Рәхимов тантанала ҡатнашыусыларҙы байрам менән ҡотланы:

— Быйыл беҙ билдәле яҡташыбыҙ, бөйөк рус яҙыусыһы һәм йәмәғәт эшмәкәре Сергей Тимофеевич Аксаков көндәрен ун икенсе тапҡыр киң һәм илһамлы үткәрәбеҙ, — тине ул. — Рух һәм патриотизм менән һуғарылған сара ысын мәғәнәһендә халыҡ байрамына әүерелде.

Өфө районының Зубово ауылында ҙур фольклор байрамы уҙҙы, Ҡырмыҫҡалы районының Иҫке Ҡыйышҡы ауылында Аксаков исемендәге музей асылды.

***

Республика ҡалаларында һәм райондарында Башҡортостан Яҙыусылар союзы ойошторолоуға 75 йыл тулыуға арналған ҙур саралар уҙа. Шул сараларҙың иң мөһиме — райондарҙа һәм ҡалаларҙа башҡорт әҙәбиәте көндәре үткәреү.

21 — 23 сентябрҙә Әбйәлил районында ла Әҙәбиәт көндәре уҙҙы. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты Рауил Бикбаев, идара рәйесе урынбаҫары, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ҡәҙим Аралбай, филология фәндәре докторы, тарих фәндәре кандидаты Зиннур Нурғәлин, филология фәндәре докторы, яҙыусы Тимерғәле Килмөхәмәтов, яҙыусы Айһылыу Йәғәфәрова, шағирҙар Әхмәҙин Әфтәх, Ғ. Сәләм исемендәге премия лауреаты Әсхәл Әхмәт-Хужа, Шәйехзада Бабич исемендәге премия лауреаты Гөлназ Ҡотоева, ике төркөмгә бүленеп, районда осрашыуҙар үткәрҙе.

Салауат Юлаев бюсына сәскәләр һалғас, ҡунаҡтарҙы район хакимиәте башлығы Рим Һатыбал улы Сынғыҙов ҡабул итте. Райондағы дауахана асыу, мәктәптәрҙе ремонтлау, төҙөкләндереү кеүек ынғай күренештәрҙе билдәләү менән бер рәттән, ул ҡоролоҡ тигән афәттең зыянын әсенеп һөйләне. Аҫҡарҙың 1-се мәктәбендә, Таһир Күсимов исемен йөрөткән гимназияла, Йәнгел, Ишҡол, Хәлил, Тал Ҡусҡары, Үтәгән, Буранғол ауылдарында әҙиптәр әҙәбиәт һөйөүселәр менән күҙгә-күҙ ҡарап һөйләште.

Ҡунаҡтар һуңғы көндә район үҙәк китапханаһына инеп, Әбйәлилдән сыҡҡан күренекле шәхестәрҙең портреттар галереяһын ҡараны, автографлы китаптарын бүләк итте. Һуңынан район мәҙәниәт йортонда йомғаҡлау кисәһе булды.

***

Кушнаренко районында ла әҙәбиәт вәкилдәрен ҡушҡуллап ҡаршы алдылар. Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ришат Дихин етәкселегендә килгән делегация составында Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Хәсән Назар, Ирек Кинйәбулатов, шағирҙар Лилиә Сәғиҙуллина, Әсхәр Кәшфуллин һәм Әхмәт ауылында йәшәүсе әҙибә Нәжибә Әминева бар ине.

Әҙиптәрҙе тәүҙә район хакимиәте башлығы А.М. Йосопов ҡабул итте һәм район тормошо менән таныштырҙы, район предприятиеларының һәм аграр секторҙың киләсәккә пландары хаҡында һөйләне. Яҙыусылар был әңгәмәнән һуң район китапханаһына йүнәлде. Кисәне баш китапханасы Илүсә Асмандиярова бик йәнле алып барҙы. Китапханасылар һәм китап һөйөүселәр яҙыусылар менән яҡындан танышып, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған күп һорауға яуап алды.

Унан һуң ҡунаҡтар, ике төркөмгә бүленеп, мәктәптәргә, ауыл клубтарына юл тотто. Ике көн эсендә шағирҙар бик күп урында ихлас осрашыуҙар уҙғарҙы. Әҙәбиәт көндәре район мәҙәниәт йортонда һәүәҫкәр сәхнә оҫталары ҡатнашлығында шиғриәт байрамы булып тамамланды.

***

Данлыҡлы 112-се Башҡорт атлы дивизияһы ойошторола башлағанынан алып Башҡортостан яҙыусыларының иғтибар үҙәгендә булған һәм шулай ҡала килә. Дивизияла Али Карнай, Ҡадир Даян, Шакир Насиров, Әхтәм Ихсан хеҙмәт итеүе лә күп нәмә тураһында һөйләй. Ҡадир Даяндың «ШаймоВатов генерал» шиғырына композитор Заһир Исмәғилев яҙған йырҙы кемдәр генә ғорурланып тыңламай ҙа, йырламай ҙа, Әхтәм Ихсандың «Саҡма тояҡ аттарҙа» китабын кем генә белмәй икән!?

Быйыл дивизияның легендар командиры генерал Миңлеғәли Шайморатовтың тыуыуына 110 йыл тулыуҙы республика йәмәғәтселеге киң билдәләне. Баш ҡаланың Дим районында кавалерия ветерандары яңынан осрашты, ә З. Вәлиди исемендәге Милли китапхана бай йөкмәткеле күргәҙмә ойошторҙо.

Ҡырмыҫҡалы районының Шайморатов ауылында был юбилейҙы айырыуса ҙур әҙерлек менән ҡаршыланылар. Байрамда Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев, Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте башлығы Ирек Сафин сығыш яһаны. Бында Өфөнән дә күп йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, дивизия ветерандары, сәнғәт оҫталары килгәйне.

***

Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Назар Дағстанға барып ҡайтты. Күренекле шағир унда Дағстан Яҙыусылар союзының 75 йыллығына арналған тантаналарҙа һәм яу ҡорбандары иҫтәлегенә, XX быуаттың бөйөк шағиры Рәсүл Ғамзатов хөрмәтенә йыл да үткәрелә торған «Аҡ торналар» байрамында ҡатнашты. Шағир ҡәберенә сәскәләр һалғас, Махачкалалағы митингынан, Рәсүл Ғамзатовтың өйөндә булғандан һуң, Рәсәйҙең төрлө тарафтарынан саҡырылған ҡунаҡтар, Дағстан әҙиптәре, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, өс төркөмгә бүленеп, Гунибҡа, Боронғо Дербентҡа, шағирҙың Хунзах районындағы Цада ауылына юл тотто. Үркәс тауҙар, ҡалын урмандар араһына һыйынған тарихи урындарҙа, аҡ торналарҙы күктәргә күтәргән һәйкәлдәр янында эркелеп йыйылған халыҡ алдында тантаналы ла, моңһоу ҙа әҙәби осрашыуҙар уҙғарылды, төрлө телдәрҙә шиғырҙар уҡылды. Хәсән Назар Башҡортостандан, яҙыусыларыбыҙҙан туғандарса сәләмдәр тапшырҙы, үҙ тәржемәһендә Рәсүл Ғамзатовтың мәшһүр «Торналар» тигән шиғырын уҡып алҡыштар яуланы.

***

Саҡмағош районы үҙәгендә танылған шағир Марис Нәзировтың 60 йәшлек юбилейына арналған кисә уҙғарылды. Юбилярҙы иң башта район хакимиәте башлығы Р.С.Йосопов ҡотланы. Артабан Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбай, халыҡ шағиры Марат Кәримов, Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессорҙары Рәиф Әмиров менән Әлфис Ғаязов, “Ҡыҙыл таң” гәзитенең баш мөхәррире Фаил Фәтхетдинов, "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррир урынбаҫары Факил Мырҙаҡаев, “Ватандаш” журналының баш мөхәррире Фәрит Әхмәҙиев, “Панорама Башкортостана” журналының баш мөхәррире Марат Муллаҡаев, “Ағиҙел” журналының баш мөхәррир урынбаҫары Рәмил Йәнбәк, “Шоңҡар” журналының баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев, “Толпар” журналының баш мөхәррире Рәмил Миңләхмәтов, башҡа ҡәләмдәштәре, коллегалары, яҡындары сығыш яһаны.

**Ҡотлайбыҙ!**

Башҡортостан Яҙыусылар союзына яңы ағзалар ҡабул ителде. Бына улар: Өфөнән Зөһрә Бураҡаева – прозаик, драматург һәм тәржемәсе, Фәниә Ғәбиҙуллина – шағирә, публицист, Лариса Керчина – шағирә; Сулпан Миңлебаева – шағирә (Стәрлетамаҡ) һәм Рәүеф Шаһиев – әҙәбиәт белгесе, тәнҡитсе (Учалы).